РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫНЫҢ ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
ӨФӨ ФӘН ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР УНИВЕРСИТЕТЫ
БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ, ШӘРҠИӘТ ҺӘМ ЖУРНАЛИСТИКА ФАКУЛЬТЕТЫ

# *ҮҘ-АРА БӘЙЛӘНЕШТЕҢ ИНТЕРАКТИВ ФОРМАЛАРЫ АША ПОЛИЛИНГВАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕЛАРЫ ТӘРБИӘЛӘНЕҮСЕЛӘРЕ ҺӘМ УҠЫУСЫЛАРЫНЫҢ ФУНКЦИОНАЛЬ ГРАМОТАЛЫЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ*

*Уҡытыусы һәм остаз йылына арналған*
*VIII халыҡ-ара фәнни-методик конференция*
*сиктәрендә методик семинар*

***Методик эшкәртмәләр йыйынтығы***



*2023 йылдың 22 феврале*

**Редакцион коллегия**

**Абдуллина Г.Р.,** филология фәндәре докторы, профессор,
(яуаплы мөхәррир);
**Саньярова Р.Р.,** филология фәндәре кандидаты, доцент
(яуаплы мөхәррир урынбаҫары);
**Әлимбаева Г.Ғ.,** филология фәндәре кандидаты
(яуаплы сәркәтип);
**Биканова Г.Ф.,** шәрҡиәт кабинеты мөдире

***ҮҘ-АРА БӘЙЛӘНЕШТЕҢ ИНТЕРАКТИВ ФОРМАЛАРЫ АША ПОЛИЛИНГВАЛЬ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕЛАРЫ ТӘРБИӘЛӘНЕҮСЕЛӘРЕ ҺӘМ УҠЫУСЫЛАРЫНЫҢ ФУНКЦИОНАЛЬ ГРАМОТАЛЫЛЫҒЫН ФОРМАЛАШТЫРЫУ*:** Методик эшкәртмәләр йыйынтығы. – Өфө: Самрау, 2023. – 162 бит.

Йыйынтыҡта республиканың балалар баҡсалары тәрбиәселәренең методик эшкәртмәләре урын алған.

Методик эшкәртмәләр йыйынтығы балалар баҡсалары тәрбиәселәре, шулай уҡ балалар баҡсаларында практика үтеүсе юғары уҡыу йорттары һәм урта һөнәри белем биреү ойошмалары студенттарына тәғәйенләнә.

***Арыҫланова Р.Х.,*** *тәрбиәсе,*
***Исхакова З.С.,*** *музыка етәксеһе,*
*18-се балалар баҡсаһы, Учалы ҡалаһы*

**«НИНДӘЙ ГҮЗӘЛ БАШҠОРТ ТЕЛЕ!»**
**БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨНӘ АРНАЛҒАН**
**ШИҒЫР ҺӨЙЛӘҮСЕЛӘР БӘЙГЕҺЕ СЦЕНАРИЙЫ**
**МӘКТӘПКӘСӘ ӘҘЕРЛЕК ТӨРКӨМӨ**

**Маҡсат:** тасуири һөйләү, матур итеп сығыш яһау оҫталығын үҫтереү, туған телгә һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, күренекле башҡорт шағирҙарының ижадын пропагандалау. Телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йыһазландырыу:** интерактив таҡта, башҡорт шағирҙарының портреттары (презентация), һандар яҙылған түңәрәктәр, ҡурай макеты.

**Барышы:**

Балалар залға түңәрәк буйлап үтәләр ултырғыстарға ултыралар

**Беренсе алып барыусы**:

Һаумыһығыҙ!
Һаумы әле!
Шундай йылы һүҙ икән
Һәр көнелде иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән.

**Икенсе алып барыусы** :

Тел асҡысы, иман биргән
Һөйөклө туған телем!
Үҙ телемдә һеҙгә сәләм
Әссәләмәғәләйкүм!

**Беренсе алып барыусы**: Хәйерле көн, ҡәҙерле балалар өлкәндәр һәм ҡунаҡтар Башҡортостан Башлығы Указына ярашлы, 14 декабрь республикала Башҡорт теле көнө билдәләнә. Беҙ бөгөн һеҙҙең менән Башҡорт теле көнөнә арналаған сараға йыйылдыҡ. Был көн осраҡлы ғына һайланмаған. Тап ошо көндә күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла тыуған .

**Икенсе алып барыусы**

Добрый день! Уважаемые гости, и дорогие наши дети!

Сегодня у нас большой праздник!. 14 декабря – день рождения известного просветителя, башкирского поэта Мифтахетдина Акмуллы объявлен Днем башкирского языка. Праздник учрежден Указом Главы Республики Башкортостан. В связи с этим по всей Республике Башкортостан состоятся различные мероприятия, посвященные башкирскому языку, литературе и культуре.

**Беренсе алып барыусы:**

Башҡорт теле аҙналығын йомғаҡлап, Башҡорт теле көнөнә арналған шиғыр һөйләүселәр бәйгеһен асыҡ итеп иғлан итәбеҙ.

**Ведущий:**

Ребята, сейчас мы с вами послушаем гимн Росии и гимн нашей Республики.

*Рәсәй Федерацияһының, Башҡортостандың дәүләт гимндарын тыңлау.*



***Самира:*** *Ҡунаҡҡа тип килгәнһегеҙ*
*Әйҙә рәхим итегеҙ*
*Һеҙгә һыйҙар әҙерләнек*
*Бер аҙ ғына көтөгөҙ*
*Матур матур шиғырҙар*
*Булыр бөгөн һыйыбыҙ*
*Һеҙгә байрам бүләк итеү*
*Беҙҙең бөтә уйыбыҙ.*

**Беренсе алып барыусы:** Хәҙер ихлас тәбрикләп бәйгеселәребеҙҙе ҡаршы алайыҡ. Рәхим итегеҙ, балалар!

**Икенсе алып барыусы:** Мы приглашаем участников конкурса. Перед вами, ребята, цветок курая. Каждый берет себе один кружочек с номером, и по этим номерам мы каждому прикрепляем бейджики (дети садятся на места).

Бәйгеселәргә уңыштар теләйбеҙ! Ә хәҙер жюри ағзалары менән танышайыҡ *(танышыу).* Ни один конкурс не обходится без жюри. Поэтому разрешите и мне представить наше жюри.

**Алып барыусы**: Шулай итеп, бәйгебеҙҙе башлайбыҙ!

Ведущий: Мы начинем конкурс.

*Балалар сиратлап шиғыр һөйләйҙәр.*

**Беренсе алып барыусы:** Бына һуңғы бәйгесебеҙ ҙә сығышын тамамланы. Афарин, ҡыҙҙар һәм малайҙар! Туған телебеҙҙә бына ниндәй матур шиғырҙар күп икән. Телебеҙҙе, тыуған илебеҙҙе данлап шағирҙар шиғри әҫәрҙәр ижад иткән. Беҙ һеҙҙең менән уларҙың исемдәрен ишетеп беләбеҙ.

Йәгеҙ әле, таҡтала беҙ кемдәрҙе күрәбеҙ ҡарап үтәйек?

*(Интерактив таҡтала билдәле шағирҙарҙың портреттары күрһәтелә).* Был – Мифтахетдин Аҡмулла. 14 декабрь – башҡорт теле көнөнөң тарихы нәҡ Аҡмулла исеме менән бәйле.

Назар Нәжми, Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбай, Абдулхаҡ Игебаев, ә был – яҡташыбыҙ Мәүлит Ямалетдинов. Улар ижадынан беҙ көс, дәрт, илһам алабыҙ.



Ә хәҙер, балалар, беҙ һеҙҙең менән түңәрәккә тороп уйнап алайыҡ.

Шыу шыу шыуҙырмаҡ
Әгәр булһаң һин зирәк
Ҡайҙа йөрөй был тубым
Табырға тырыш тиҙерәк.

Афарин, балалар! Жюри ағзалары бер аҙ кәңәшләшкәнсе, әйҙәгеҙ йырлап та алайык

Йыр **"Башҡорт телендә һөйләшәм**" (Р.Шәкүр һүҙ., М.Сәлимов көйө)

1. Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә.
Минең йәшәү тамырҙарым
Башҡорт ерендә.
2. Киң Уралым, йырлап аға
Һинең һыуҙарың.
Алыҫ-алыҫ яңғырайҙар
Һинең моңдарың.

Алып барыусы: Афарин балалар.

**Икенсе алып барыусы:** Слово предоставляем членам жюри

*Бүләкләү (барлыҡ ҡатнашыусыларға ла грамоталар тапшырыла)***.**



**Беренсе алып барыусы:** Туған телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе хөрмәтләйек, дуҫтар! Бәйгелә ҡатнашыусыларға, уларҙы әҙерләүсе тәрбиәселәргә һәм ата-әсәләргә, көйәрмәндәргә һәм жюри ағзаларына ҙур рәхмәт!

-Ошоноң менән “Ниндәй гүзәл башҡорт теле!” шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе тамам, иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

**Икенсе алып барыусы:** На этом наш праздник подошел к концу, мы желаем вам здоровья, счастья и мирного неба над головой. Спасибо всем!

Давайте все дружно попрощаемся на нашем государственном башкирском языке: **Һау булығыҙ!!!!**

**Бәйгеселәр һөйләгән шиғырҙар**



Туған тел
Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,
Йыямын да – йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.
Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел-
Көслө лә ул, бай ҙа, ағымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.
Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!
Әсәм теле миңә – сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!
(Р. Ғарипов)

**ҮҘ ТЕЛЕМДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ**



Үҙ телемдә һөйләшәм –
Миңә ҡоштар көнләшә.
Үҙ телемдә һөйләшәм –
Мин ҡояшҡа тиңләшәм.
Үҙ телемдә һөйләшәм –
Бар булмышым нур ғына.
Үҙ телемдә һөйләшәм –
Күңелкәйем йыр ғына.
Һәр һүҙ миңә сәскә төҫлө,
Һәр һүҙ – йәйғор киҫәге.
Шатлығымдың юҡ сиге,
Юҡ шатлығым иҫәбе.
Үҙ телемдә һөйләшәм,
Үҙ илемдә көн күрәм,

Күңелемә шатлыҡтан,
Кинәнестән нур һүрәм!
(Д.Талхина)

БАШҠОРТ ТЕЛЕ
Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!
(З. Биишева)



ЕРЕМ, ИЛЕМ, ТЕЛЕМ
Башҡорт телендә һөйләшәм,
Башҡорт телендә.
Минең йәшәү тамырҙарым
Башҡорт ерендә.
Киң Уралым, йырлап аға
Һинең һыуҙарың.
Алыҫ-алыҫ яңғырайҙар
Һинең моңдарың.
Туған телем, һин халҡымдың,
Былбыл тауышы.
Быуаттарҙан быуаттарға
Ҡанат ҡағышы.
(Р.Шәкүр)



ТУҒАН ТЕЛЕМ
Әсәй!" тигәндә лә һин кәрәк,
"Атай!" тигәндә лә һин кәрәк.
Берҙән-берем, айым, ҡояшым,
Тип әйтһәм дә, телем, һин кәрәк.
Салауат та ғорур башҡортон
Туған теле менән данлаған.
Киң Уралын – данлы төйәген
Һаҡлар өсөн ерен данлаған.
Эй, туған тел, нәфис телем һин,
Наҙлы моңоң мине һуғарған.
Күңелдәрем һүнмәҫ-һүрелмәҫ
Әсә телкәйенән нур алған.
(К.Кинйәбулатова)



БАШҠОРТ ТЕЛЕ
Йәшен булып ялтлар тел.
Дары булып шартлар тел.
Ҡоштар булып һайрар тел.
Бүре тешен ҡайрар тел.
Ҡояш булып балҡыр тел.

Туған тел!
Сабыр иткән дә һин беҙҙе,
Сағыу иткән дә һин беҙҙе,
Аңлы иткән дә һин беҙҙе,
Данлы иткән дә һин беҙҙе,
Ерле иткән дә һин беҙҙе,

Ҡая булып ҡалҡыр тел.
Йөрәктәргә үтер тел.
Ваҡыттарҙы тетер тел.
Аҡтамырҙай йәйелеп,
Йөрәктәргә үрелер,
Башҡорт тигән йәндәрҙә
Ҡабат-ҡабат терелер!
(Д. Талхина)

Көслө иткән дә һин беҙҙе,
Кеше иткән дә һин беҙҙе –
Туған тел. (Рамаҙан Шәғәлиев)
Күпме аҫыл һүҙебеҙ бар
Һөйөклө туған телдә.
Тыуған ерһеҙ, туған телһеҙ
Йәшәй алмай бер кем дә. (Р.Бикбай)

***Баймырҙина Ә.Ф.,***
*юғары категориялы өҫтәмә белем биреү педагогы (башҡорт теле уҡытыусыһы):*
*3-сө һанлы "Шатлыҡ" балалар баҡсаһы, Аҡъяр ауылы, Хәйбулла районы*

## МӘКТӘПКӘ ӘҘЕРЛЕК ТӨРКӨМӨНДӘ "БОРОНҒОНАН КИЛӘСӘККӘ – МИНЕҢ БАШҠОРТОСТАНЫМ" ТЕМАҺЫНА ОЙОШТОРОЛҒАН БЕЛЕМ БИРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

**Тема: Боронғонан киләсәккә – минең Башҡортостаным.**
**Йүнәлеш:** телмәр үҫтереү, танып белеү үҫеше.
**Бурыстар:**
**Белем биреүсе:**
– күргәҙмәлелек, өҫтәмә материал менән эш итеү күнекмәләрен булдырыу һәм боронғо башҡорт халҡының көнкүреш әйберҙәре,башҡорт биҙәктәре, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәреаша халҡыбыҙҙың тарихы, боронғо кәсеп-шөғөлдәре тураһында балаларҙың белемдәрен камиллаштырыу;башҡорт халыҡ һөнәрҙәре тураһында белемдәрен нығытыуҙы дауам итеү; археолог һөнәре тураһында мәғлүмәт биреү.
**Үҫтереүсе:**
– балаларҙың башҡорт телендә камил һөйләшеүҙәрен, фекерҙәрен еткерә белеүҙәрен, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеүҙәрен, коммуникатив һәм бәйләнешле телмәрҙәрен, ҡоролмаларҙы ҡороу аша логик фекерләү, ижади конструктив һәләттәрен, техник уйҙы һәм Power point программаһында эшләй белеүҙәрен үҫтереү.
**Тәрбиәләүсе:**
– башҡорт халҡының рухи һәм матди мираҫын, халыҡ кәсептәре тарихын өйрәнеүгә, һөнәрҙәргә ихтирам, башҡорт халҡына хас әхлаҡи сифаттар, Тыуған илгә, туған телгә һөйөү хисе, Башҡортостандың тәбиғәт ҡомартҡылары менән ғорурланыу, уларға һаҡсыл ҡараш, балаларҙың, үҙ-ара һөйләшеп, коллективта эшләй белеүҙәрен һәм эҙләнеү эшмәкәрлегенә ҡыҙыҡһыныуҙарын тәрбиәләү.
**Йыһазландырыу:** Хәйбулла районының, Башҡортостан Республикаһының һәм боронғо Башҡортостандың карталары, пазл "Башҡортостандың картаһы", телевизор, ҡомло һауыттар, бумала, лупа, "Донъя халыҡтары эпостары геройҙары", "Урал аръяғының йәшел ҡуласаһы" күргәҙмәләре, "Ат", "Ҡолон", "Һыйыр", "Быҙау", "Һарыҡ", "Умарта" ҡоролмалары, тирмә һәм "Башҡорт тирмәһе" музей күргәҙмәһе, интерактив таҡта, "Мин башҡортса һөйләшәм" смайлигы.
**Эшмәкәрлек барышы:**
I. Ойоштороу.
**Уҡытыусы:** Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле балалар!
**Балалар:** Һаумыһығыҙ!
**Уҡытыусы:** Әйҙәгеҙ, бөгөнгө көндө сәләмләйек.
***Бөгөнгө көндө бергәләп сәләмләү.***
Һаумы, Ҡояш!

Һаумы, көн!

Яҡты булһын Еребеҙ!

Шатлыҡтан, бәхеттән

Нурлы булһын йөҙөбөҙ! *(Ә.Ф.Баймырҙина).*

**Уҡытыусы:** Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә ҡояш йылмайыуын бүләк итәйек. *(Балалар бер-береһенә ҡарап йылмаялар).*

**II. Теманы асыҡлау.**

**Уҡытыусы:** Ҡыҙҙар һәм малайҙар, әйтегеҙ әле, ә беҙ һеҙҙең менән ниндәй бер ерҙә йәшәйбеҙ? Районыбыҙ, Республикабыҙ нисек атала?

**Балалар:** Хәйбулла районында йәшәйбеҙ. Ә Республикабыҙ – Башҡортостан.

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ, яҡшы. Бына был нимә ул?

**Балалар:** Башҡортостан Республикаһының картаһы.

**Уҡытыусы:** Эйе. Әйҙәгеҙ, был пазлдың өлөштәрен йыйып бөтөрәйек.

***Балалар схемаға ярашлы пазлдарҙан карта төҙөй.***

**Уҡытыусы:** Нимә килеп сыҡты? Беҙ йәшәгән район ҡайҙа?

**Балалар:** яуаптар.

**Уҡытыусы:** Бында тағы районыбыҙ картаһын ҡайҙа күрәһегеҙ?

**Балалар:** балалар “Минең бәләкәй тыуған илем” лэпбугын күрһәтәләр.

***Шөғөлдөң темаһын билдәләү.***



**Уҡытыусы:** Дөрөҫ. Балалар, ә бына бында ҡарағыҙ әле, был нимә ул? Нисек уйлайһығыҙ?

**Балалар:** Карта.

**Уҡытыусы:** Эйе,был да карта. Ул ниндәй карта икән?

**Балалар:** Боронғо карта.

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ. Ҡыҙҙар һәм малайҙар! Был беҙҙең боронғо Башҡортостаныбыҙҙың картаһы. Гүзәл Башҡортостаныбыҙҙың тарихы миллиард йыл элек башланған. Бөгөн мин һеҙҙе үткән дәүерҙәргә сәйәхәт ҡылырға саҡырам, ә һеҙ тарих төптәренә сәйәхәт ҡылырға ризаһығыҙмы?

**Балалар:** Эйе. Үткәндәрҙе белгебеҙ, боронғо дәүергә барғыбыҙ килә.

**Уҡытыусы:** Ә боронғо дәүергә сәйәхәт ҡылыр өсөн, беҙгә ваҡыт машинаһы кәрәк була. Ваҡыт машинабыҙ булһын өсөн **тылсымлы** башҡорт һүҙҙәрен әйтергә кәрәк.

**Балалар:** һаумыһығыҙ, һау булығыҙ, хәйерле көн, хәйерле кис, ҙур рәхмәт, рәхим итегеҙ, зинһар өсөн, ғәфү итегеҙ, рөхсәт итегеҙ, ярҙам итегеҙ әле, әгәр мөмкин булһа...

***“Юл күрһәтеүсе – навигатор” ваҡыт машинаһының тауышы ишетелә.***

**Уҡытыусы:** Афарин, балалар! Бына беҙҙең*“Юл күрһәтеүсе – навигатор”* ваҡыт машинабыҙ ҙа булды.

***(Ваҡыт машинаһын балаларға күрһәтеү).***

***Артынса Ҡурай, ҡумыҙ моңо ишетелә.***

Ишетәһегеҙме, был нимәнең моңо ул? Эйе, балалар, һеҙ тылсымлы башҡорт һүҙҙәрҙен дөрөҫ әйткәс, серлеҡурай менән ҡумыҙҙың да моңло көйҙәре таралды.

***Ҡурай, ҡумыҙ алып балаларға күрһәтеү.***

Бына быуаттар төпкөлөнә сәйәхәт ҡылғанда, юлыбыҙ уңһын өсөн, серле ҡурай менән ҡумыҙыбыҙҙың тылсымлы моңо беҙгә юлдаш булыр, ауырлыҡтар осраһа, уларҙы еңергә ярҙам итер.

Тик вакыт машинабыҙ сәйәхәткә ҡуҙғалһын өсөн, беҙҙең башҡортса матур итеп һөйләшә белеүебеҙ мөһим. Әйҙәгеҙ, быны өсөн телдәребеҙҙе шымартып алайыҡ. Минең арттан дөрөҫ итеп бергәләп ҡабатлайыҡ әле:

**Ға-ға-ға, машина бара боронғоға,**

**Са-са-са, һөйләрбеҙ уға башҡортса.**

Ә хәҙер, балалар, иғтибар менән тыңлағыҙ әле. Мин әйткән һүҙҙәрҙең барыһында ла ниндәй бер үк өн ишетәһегеҙ?

**Әсәй, ғаилә, шәжәрә.**

**Балалар:** Ә өнө.

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ, уйлайһығыҙ, афарин! Ә хәҙер “Әсәй” һүҙенең схемаһын төҙөргә кәрәк беҙгә.

Кем төҙөп күрһәтергә теләй?

***Бер бала уйын панелы янына сығып, “Әсәй” һүҙенең схемаһын төҙөй.***



**Уҡытыусы:** Афарин, бик дөрөҫ үтәнегеҙ, балалар был эштәрҙе. Тимәк, беҙ һеҙҙең менән сәйәхәткә әҙербеҙ.

**Төп өлөш.**

**Уҡытыусы:** Ә хәҙер *“Юл күрһәтеүсе – навигатор”* вакыт машинаһы менән боронғо дәүергә юлланабыҙ, балалар. Бергәләп сәйәхәтебеҙҙе башлайбыҙ. Вакыт машинаһы һәр саҡ эшләһен һәм артабан да беҙҙең сәйәхәтебеҙҙе дауам иттерһен өсөн, беҙ юлда матур итеп башҡортса һөйләшеп, ҙур һынауҙарға әҙер булырға тейешбеҙ. Килештекме? Әҙербеҙме? Сәйәхәтебеҙҙе башлайбыҙмы?



**Балалар:** Эйе. Беҙ сәйәхәткә юлланырға әҙербеҙ.

**Уҡытыусы:** Ҡайһы быуатҡа йүнәлергә теләйһегеҙ? Әйҙә, беҙгә, Илнур, ярҙам ит әле, вакыт машинаһының төймәһенә баҫып, быуатты һайлауҙа.

***Бала вакыт машинаһының сәғәт стрелкаһын үҙе теләгән быуатҡа күсерә.***

***“Юл күрһәтеүсе – навигатор” вакыт машинаһының тауышы ишетелә.***



**1-се туҡталыш “Урал батыр”.**

**Уҡытыусы:** Туҡталышыбыҙ “Урал батыр” тип атала.

Вакыт машинаһы беҙҙе“Урал батыр” йәнһүрәтен ҡарарға саҡыра.

***Телевизорҙан күрһәтелгән “Урал батыр” эпосы йәнһүрәтен балалар ултырғыстарға ултырып ҡарай. Ә ике бала шул саҡта “Урал батыр” эпосынан өҙөктө яттан һөйләй.***

**Айхан:**

Борон-борон борондан,
Кеше-маҙар килмәгән,
Килеп аяҡ баҫмаған,
Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән.
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан

Булған, ти, бер урын.

**Мәҙинә:**

Унда булған, ти, борон,
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ.
Ҡайҙа барһа, уларға
Ул урында юл асыҡ.

**Уҡытыусы:**

“Урал батыр” йәнһүрәтенән һәм эпостан күренеүенсә, Ерҙә йәшәйеш шулай башланып киткән икән, балалар. Һәм был “Урал батыр” туҡталышында беҙҙең белемдәребеҙҙе барлау өсөн, беҙгә ваҡыт машинаһының **викторина** һорауҙарына ла яуап бирергә кәрәк буласаҡ.

**Уҡытыусы:** Был “Донъя халыҡтары эпостары геройҙары” күргәҙмәһенән башҡорт халыҡ эпосы геройҙарының исемдәрен атарға һәм уларҙы табып күрһәтергә кәрәк.



**Балалар:**Урал батыр, Аҡбуҙат *(күрһәтәләр).*

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ. Ә ниндәй башҡорт халыҡ әкиәттәрен беләһегеҙ?

**Балалар** әкиәттәрҙең исемдәрен әйтәләр.

**Уҡытыусы:** Яҡшы. Әкиәттәрҙе бик яратаһығыҙ икән, балалар.

Мин мәҡәлдәрҙең башын әйтәм, ә һеҙ дауам итеп тамамлап ҡуйығыҙ:

**Үҙ илем**–*(алтын бишек).*

**Әсәм теле**–*(сәсән теле).*

**Теле барҙың**– *(иле бар).*

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ яуаптарығыҙ өсөн, афарин, балалар. Тимәк, беҙ һеҙҙең менән боронғо дәүергә сәйәхәтебеҙҙе артабан дауам итәбеҙ.

**Уҡытыусы:** Ҡайһы быуатҡа йүнәлергә теләйһегеҙ? Әйҙә, беҙгә, был юлы, Алмаз, һин ярҙам ит әле, ваҡыт машинаһының төймәһенә баҫып, быуатты һайлауҙа.

***Бала ваҡыт машинаһының***

***сәғәт стрелкаһын үҙе теләгән быуатҡа күсерә.***

***“Юл күрһәтеүсе – навигатор”***

***ваҡыт машинаһының тауышы ишетелә.***

**2-се туҡталыш “Башҡорт халыҡ шөғөлдәре”.**

***(Йылҡысылыҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ, королмалар төҙөү)***

**Уҡытыусы:** Ҡыҙҙар һәм малайҙар! Был туҡталышта беҙҙе нимәләр көтә икән? Ҡарағыҙ әле, был нимә ул?

**Балалар:** Тирмә.

**Уҡытыусы:** Был тирмәлә кемдәр йәшәгән икән боронғо осорҙа?

**Балалар:** Үҫәргән башҡорттары йәшәгән. Сөнки был тирмәгә Үҫәргән ырыуы башҡорттарының тамғаһы ҡуйылған.

**Уҡытыусы:** Дөрөҫ фаразланығыҙ, балалар. Яҡшы.

Ә бында ҡарағыҙ әле, был нимә ул?

**Балалар:** Схемалар. Технологик карталар.

**Уҡытыусы:** Ни өсөн бында улар ҡуйылды икән, һеҙ нисек уйлайһығыҙ?Кем әйтер, ваҡыт машинаһы беҙгә ниндәй эш-һынау әҙерләне икән?

**Балалар:**Схемаларға ҡарап, ҡоролмаларҙы йыйып бөтөрөргә кәрәк бында.

**Уҡытыусы:** Тимәк, улай булғас, әйҙәгеҙ, төркөмдәргә бүленеп, технологик карталарға ҡарап, ҡоролмаларҙы ҡороп ҡуйайыҡ, балалар. Кем ҡайһы ҡоролманы ҡорорға теләй, рәхим итегеҙ!

***Балалар төркөмдәргә бүленеп, умарта, ат, ҡолон, һыйыр, быҙау, һарыҡ ҡоролмаларын йыя.***

**Укытыусы:** Шәп булдығыҙ, балалар. Ваҡыт машинаһының шартын үтәнегеҙ. Ә нимәләрҙе һеҙ ҡорҙоғоҙ ул?

**Балалар:** умарта, ат, һыйыр, һарыҡ.

**Укытыусы:** Беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың бик боронғо дәүерҙәрҙә үк нимәләре булған?

**Балалар:** Борон замандарҙа уҡ башҡорттарҙың умартаһы, аты, һыйыры, һарыҡтары булған. Улар тирмәләр ҡороп йәшәгән.

**Укытыусы:** Дөрөҫ, балалар.Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик борондан йылҡысылыҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ менән шөғөлләнгән.

Әйҙәгеҙ, ошо шөғөл атамаларын өлөштәргә дөрөҫ итеп бергәләп бүлеп ҡарайыҡ әле:

**Балалар:** Мал-сы-лыҡ, йыл-ҡы-сы-лыҡ, у-мар-та-сы-лыҡ.

***Балалар сәпәкәйләп, һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп әйтәләр.***

**Укытыусы:** Бик дөрөҫ бүлдегеҙ, мин һеҙҙең өсөн шатмын, балалар.

Ә ни өсөн башҡорттар мал-тыуар, бал ҡортон аҫрағандар, тип уйлайһығыҙ?

**Балалар:** Яуап бирәләр. Ат, һыйыр малынан файҙалы аҙыҡтар, һарыҡтан йөн алғандар. Ат менән яуға сапҡандар, һунарға йөрөгәндәр һ.б...

**Укытыусы:** Ә һарыҡ йөнө нимәгә кәрәк булған, тип уйлайһығыҙ?

**Балалар:** еп иләгәндәр, йылы ойоҡбаштар бәйләгәндәр, матур балаҫтар һуҡҡандар.

**Укытыусы:** Дөрөҫ, афарин, балалар. Беҙҙәүҙебеҙҙең оҫтаханабыҙҙа балаҫтар һуғып ҡарарбыҙ әле.

**Укытыусы:** Дөрөҫ. Афариндар! Балалар, борон башҡорт ир-егеттәре генә түгел, хатта ҡатын-ҡыҙҙар ҙа аттарҙа һыбай оҫта сапҡан.

Әйҙәгеҙ, хәҙер беҙ ҙә һеҙҙең менән улар кеүек аттарҙа һыбай оҫта сабып, ял итеп алайыҡ әле.

**Ял минуты “Атта сабыу”.**

Топ-топ-топ итә,<br>
Тауға менһә, һоп итә.<br>
Минең атым елдерә,<br>
Бар ергә лә өлгөрә (А.Барто, А.Йәғәфәрова тәржемәһе).

**Укытыусы:** Шәп булдығыҙ. Арыуыбыҙҙы баҫып, ял итеп алдыҡ.

Был туҡталыштала һынатманығыҙ, шәп булдығыҙ, балалар! Ә беҙгә кире баҡсабыҙға ҡайтыу өсөн, тылсымлы шиғыр юлдарын бергәләп ҡабатларға кәрәк. Әйҙәгеҙ, етәкләшеп, түңәрәк яһап торайыҡ.

***Бөтәһе бергә етәкләшеп түңәрәккә тороп баҫкан килеш шиғырҙы ҡабатлайҙар:***

Башҡортомдоң тарихын<br>
Өйрәнермен, һаҡлармын!<br>
Ата-бабам аманатын<br>
Туған телдә аҡлармын! (Ә.Ф.Баймырҙина).

***“Юл күрһәтеүсе – навигатор” ваҡыт машинаһының тауышы ишетелә.***

**Укытыусы:** Бына беҙ баҡсабыҙҙа. Балалар, һеҙгә сәйәхәтебеҙ оҡшанымы? Ә һеҙ ғаиләләрегеҙ менән тәбиғәткә сәйәхәт иткәнегеҙ бармы? Кем ҡайҙа барғаны бар?

**Балалар:** Яуаптар.

**Укытыусы:** Бик яҡшы, афариндар! Ә хәҙер, балалар, бына бында ҡарағыҙ әле, нимәләр күрәһегеҙ?

**Балалар:** Тауҙар, йылғалар, ҡаялар, мәмерйәләр.

**Укытыусы:** Эйе, балалар, боронғо диңгеҙҙәр урынына тауҙар барлыҡҡа килгән. Ә ниндәй тауҙар барлыҡҡа килгән ул беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа?

**Балалар:** Уралтау, Ирәмәл, Ирәндек, Янғантау, Ямантау, Торатау, Йөрәктау, Ҡуштау һ.б.

**Укытыусы:** Бик дөрөҫ әйттегеҙ, яҡшы.Ә бында беҙҙең көньяҡ Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәт ҡомарткылары урын алған. Һеҙ был ерҙәрҙе күргәнегеҙ бармы? Бәлки, ғаиләгеҙ менән ул урындарға ла сәйәхәт иткәнһегеҙҙер?

**Балалар:** яуаптар.

**Укытыусы:** Афарин, балалар. Был матур мөғжизәләрҙе, миллиондарса йылдар дауамында, беҙҙең гүзәл Башҡортостаныбыҙ территорияһында, диңгеҙҙәр юҡка сыҡҡандан һуң, тәбиғәт үҙе барлыҡҡа килтергән. Беҙгә уларҙы белергә, ҡәҙерләп һаҡларға һәм киләсәк быуындарға тапшырырға кәрәк, шулаймы? Тәбиғәтте беҙ нисек һаҡлай алабыҙ һуң?

**Балалар:** Ағастарҙы һындырмаҫҡа, ҡырҡмаҫҡа, яҡмаҫка, ҡоштарҙы хәстәрләргә, һыу буйҙарын бысратмаҫҡа тейешбеҙ.

**Укытыусы:** Бик дөрөҫ әйтәһегеҙ. Рәхмәт, изге ниәттәрегеҙ өсөн.Тимәк, миллиондарса йылдар дауамында, ҡасандыр диңгеҙҙәр булған урында барлыҡҡа килгән тәбиғәтебеҙ ышаныслы ҡулдарҙа икән.

Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, түңәрәккә баҫайыҡ та, күҙҙәребеҙҙе бер аҙға йомоп, күҙ алдына килтерәйек әле, беҙ диңгеҙ ярында торабыҙ, тип. Ҡомлоҡ...

**Диңгеҙ тауышы ишетелә.**

Күҙҙәребеҙҙе астыҡ...Нимә күҙ алдығыҙға килде?

**Балалар:** Диңгеҙ.

***Сюрприз моменты. Уйын “Археологтар”. Кубиктар өҫтөнә ҡомло һауыттар ҡуйылған. Балалар тирәләп ултырышалар.***

**Укытыусы:** Ә хәҙер, ҡыҙҙар һәм малайҙар, беҙ археологтар булабыҙ. Әйҙәгеҙ, бында үтеп ултырышайыҡ.Беҙгә бында ошо ҡомдоң аҫтында нимә күмелеп ҡалған икән, шуны ҡомдо һаҡлыҡ менән генә һепереп табырға, белергә кәрәк буласаҡ.

*Балалар ҡомдо бумала менән һепереп,уның аҫтынан боронғо* ***беләҙектәрҙе, көйәнтәле сулпыларҙы, балдаҡтарҙы, тәңкәләрҙе*** *табып сығаралар. Һәм уларҙың атамаларын әйтәләр.*

**Укытыусы:** Кем беҙҙең бик таҙа эшләй? Кем беренсе тапты? Афарин!

Был нимә ул? Һин нимәне таптың? Һ.б.

**Балалар:** алҡа, беләҙек, сулпы, тәңкә...башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре.

**Укытыусы:** Балалар, әйҙәгеҙ, хәҙер лупа ярҙамында был ҡаҙылмаларҙы ҡарайыҡ әле. Нимәләре күренә?

**Балалар:** Биҙәктәре бар.

**Укытыусы:** Эйе, балалар, һәр ҡаҙылманың биҙәге бар. Кем биҙәгән тип уйлайһығыҙ уларҙы? Һеҙ бындай биҙәктәрҙе ҡайҙа күргәнегеҙ бар?

**Балалар:** Уй-фекерҙәрен әйтәләр. Башҡорт биҙәктәре төшөрөлгән.

Беҙҙең түшелдерек һәм түбәтәйҙәрҙә лә шундай биҙәктәр бар.

**Укытыусы:** Ни өсөн был әйберҙәр ҡом аҫтында ҡалған, тип уйлайһығыҙ? Ҡайһы осорҙағы биҙәүестәр ул, балалар?

**Балалар:** Боронғо башҡорттарҙың биҙәүестәре.

**Укытыусы:** Дөрөҫ әйтәһегеҙ. Беҙҙең бик боронғо дәүерҙәрҙә йәшәгән ата-бабаларыбыҙ ҙа төрлө биҙәү эштәре менән шөғөлләнгән икән.Бына һеҙ бөгөн ысын археологтар булдығыҙ, афарин. Тимәк, археолог булған һөнәр кешеләре нимә эшләй икән?

**Балалар:** Ерҙәрҙе ҡаҙып, боронғо әйберҙәрҙе эҙләй, уларҙы өйрәнә.

**Укытыусы:** Дөрөҫ,казылмаларҙы өйрәнеүселәр. Археолог һөнәре һеҙгә оҡшанымы? Кем археолог булырға теләй? (яуаптар).

Бик яҡшы, тимәк, киләсәктә һеҙҙән бик кәрәкле һөнәр эйәләре үҫәсәк икән.

Ҡыҙҙар, малайҙар! Әйҙәгеҙ, был ҡомартҡыларыбыҙҙы баҡсабыҙҙағы “Башҡорт тирмәһе” музейына тапшырайыҡ. Баҡсабыҙҙағы башҡа төркөм балалары ла улар менән танышыр.

***Ҡаҙылмаларҙы тирмә-музейға һалып ҡуялар.***

**Укытыусы:** Шулай итеп, балалар, беҙ һеҙҙең менән боронғоно күрҙек, ә хәҙер мин һеҙҙе “Башҡортостаныбыҙҙың киләсәге”н төҙөү өсөнуйынға саҡырам.

***“Башҡортостандың киләсәге” интерактив уйын.***

*Балалар интерактив такта янында, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен теүәл үтәп, “Башкортостаныбыҙҙың киләсәге” интерактив уйынын уйнайҙар.*

*Уҡытыусы ҡоролманың этаптарын, ҡоролошта нимәләр ҡулланылғанын(формаһын, төҫөн) һәм экранда һүрәттәрҙең күренә барыуына ярашлы һорауҙар аша балаларҙы әңгәмәгә йәлеп итә.*

**Уҡытыусы:** Афарин, балалар! Бик матур буласаҡ икән беҙҙең Башҡортостаныбыҙ! Уның киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа.

**Рефлексия.**

**Һорауҙар:**

-Балалар, бөгөнгө шөғөлөбөҙ һеҙгә оҡшанымы?

-Һеҙ бөгөнгө шөғөлөбөҙ тураһында кемдәргә һөйләргә теләр инегеҙ?

-Нимә тип һөйләр инегеҙ?

-Нимәне эшләү еңел бирелде?

-Ә кемгә нимә ауыр булды бөгөн?

-Һеҙҙе бөгөнгө яңылыҡтар ҡыуандырҙымы?

-Тағы нимә тураһында белгегеҙ килә ине?

**Балалар:** Һорауҙарға ҡарата үҙ фекерҙәрен әйтәләр.

**Уҡытыусы:** Афарин, балалар! Бөгөнгө шөғөлөбөҙ барышында башҡортса бик матур һөйләшеп, әүҙем ҡатнашҡанығыҙ өсөн, мин һеҙгә “Мин башҡортса һөйләшәм” смайлигын бүләк итәм.Рәхмәт һеҙгә!

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**


1.Аҙнабаева Ф.Ғ., Әлбәкова Г.Ш., Буранбаева Ә.Р., Мортаева К.Ф. Башҡортостан–тыуған илем. Өфө, 2016.

2.Аҙнабаева Ф.Ғ., Йылҡыбаева Г.Р. Гөлбостан. Балалар баҡсаларында телмәр үҫтереү буйынса методик ҡулланма. Өфө, 2010.

3.Нафиҡова З.Ғ., Ғәлиева Ғ.Ғ. Башҡорт балалар баҡсалары өсөн комплекслы уҡытыу-тәрбиә биреү программаһы. Өфө, Китап, 2009.



***Байымова Г.А.,***

*педагог-психолог, Баланы үҫтереү үҙәге –*

*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*


## «АЙЫУҠАЙ»ҘА ҠУНАҠТА.
## ӨЛКӘНДӘР ТӨРКӨМӨНДӘ ИНТЕГРАЦИЯЛАНҒАН ДӘРЕС

**Тема:** «Айыуҡай»ҙа ҡунаҡта.

**Маҡсат:**

- Яңы технологиялар ҡулланып, балаларҙың бәйләнешле телмәрен камиллаштырыу, артикуляцион күнегеүҙәр аша телмәр аппаратын күнектереү;
- Инновацион алымдар аша балаларҙы бер-береһенә ылыҡтырыу;
- Балаларҙың иғтибарын, фекерләү ҡеүәһен, ишетеү һәләтен үҫтереү, дуҫлыҡ, бер-береһенә ярҙам итеү, берҙәмлек тойғоһон тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** проектор, кәрәҙ, кәрзиндәр макеты, бал ҡорто һүрәте, обруч, ултырғыстар, аш содаһы, лимон кислотаһы, шар.

**Ҡулланылған алымдар:** әңгәмә, һорау-яуап, тәрбиәсенең һөйләүе, интерактив уйын, музыкаль-ритмик уйын, синквейн, эксперимент.

*Балалар психолог бүлмәһенә инеп түңәрәккә торалар.*

-Һаумыһығыҙ,ҡыҙҙар,малайҙар! Һеҙҙе күреүемә бик шатмын. Бөгөн беҙҙе бик мауыҡтырғыс уйындар көтә. Әйҙәгеҙ башта бер– беребеҙҙе сәләмләп алайыҡ.

**Уйын эшмәкәрлеге**

*Музыкаль-ритмик уйын”Етеҙ ҡулдар”*

*Маҡсат: Балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген арттырыу, ритмик тойомлауын үҫтереү.*

*Түңәрәк өçтәлдә түңәрәктең, ҡул суғының, тура дүртмөйөштөң, түңәрәктең шаблондары ята. Балалар ритмлы музыка аçтында ниндәй фигура ятыуына ҡарап ҡулдарын ҡуялар (усын, йоҙроғон йә ҡул һыртын), түңәрәк буйлап йөрөйҙәр.*

*Музыка ишетелә ( бал ҡортоноң безелдәүе)*

-Ҡыҙҙар, малайҙар, ниндәй тауыш ишетелде ул?

-Балалар, был бал ҡорто Быз-быз. Ул бөгөн беренсе тапҡыр беҙҙең балалар баҡсаһына килгән. Ҡарағыҙ әле, уның кәйефе ниндәй?(*Насар, уға күңелһеҙ*) Кәрәҙҙәре лә буш икән. Беҙ уға нисек ярҙам итә алабыҙ? (*Күңелен күтәрәйек, кәрәҙҙәрен тултырайыҡ*). Иң беренсе беҙ Быз-бызды беҙҙең баҡсаның тәртибе менән таныштырайыҡ. Әгәр мин уҡыған ҡағиҙә дөрөç булһа, сәпәкәй итерһегеҙ, ә мин яңылыш әйтһәм, аяҡ менән тыпырлатырһығыҙ.

-Төш мәлендә йокларға,
Яңы көстәр тупларға *(Эйе, балалар сәпәкәйләй)*
-Эсең йә башың ауыртһа,
Илап тик ултырырға *(Юк, балалар аяк менән тыпырлата)*
-Ашар алдынан башта
Ҡулды, битте йыуырға *(Эйе, балалар сәпәкәйләй)*
-Бутҡа, ашты ашама,
Апайҙан кәнфит һора (*Юҡ, балалар аяҡ менән тыпырлата)*
-Уйынсыҡты тартып ал,
Үҙеңә күп йыйып һал *(Юҡ, балалар аяҡ менән тыпырлата)*

Хәҙер Быз-быз беҙҙең ҡағиҙәләрҙе белде, уға уйын оҡшаны, кәрәҙҙең береһенә кәрзин менән балды ҡуяйыҡ.

**Танып белеү һәм эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге.**

-Балалар, артабан беҙ Быз-бызды үҙебеҙҙең ашхана менән таныштырайыҡ.

Бында беҙҙең апайҙар тәмле аштар бешерә. Ә һеҙ беләһегеҙме, ябай ғына аҙыҡ-түлектәрҙән ҡыҙыҡлы фокус эшләп була.

*Шешәгә лимон кислотаһын һалып өçтөнә һыу ҡоябыҙ. Шар эсенә аш содаһын һалып, шешәнең башына кейҙерәбеҙ. Шарҙы күтәреп, соданы шешә эсенә төшөрһәк,сода менән лимон кислотаһы ҡушылғас, шар өрөлә.*

*Балалар кәрәҙҙең тағы береһенә кәрзин менән балды беркетә.*

**Телмәр үçтереү эшмәкәрлеге**

-Беҙҙең балалар баҡсаһында «Кәрәҙ» төркөмө бар. Быз-бызға унда оҡшар тип уйлайым. *(Балалар логопед төркөмөнә баралар. Логопед ҡаршы ала)*

-Һаумыһығыҙ, балалар. Әйҙәгеҙ Быз-бызга башҡа бал ҡорттары менән дуçлашырға ярҙам итәйек.

*Тын юлына күнекмә «Бал ҡорттарын осорайыҡ»*

*Ҡағыҙҙан эшләнеп епкә эленгән бал ҡорттарын, танау аша үпкәләргә һауа алып, ауыҙ аша сығарып өрөп хәрәкәткә килтерергә. Биш тапҡыр ҡабатларға.*




-Мин һеҙгә шиғыр юлдарын уҡыйым, ә һеҙ бал ҡорттарына өрөп хәрәкәткә килтерегеҙ.

Бик эшсән бер бал ҡорто
Сәскәләрҙән һут йыя,
Кәрәҙҙәрен мөлдөрәмә
Балға тултырып ҡуя.

– Балалар беҙ балалар баҡсаһында уйнап ҡына ҡалмайбыҙ, матур итеп һөйләшергә лә өйрәнәбеҙ, шулаймы. Әйҙәгеҙ Быз-бызға телгә күнекмәләр эшләп күрһәтәйек әле.

Ритмлы музыкаға артикуляция кунегеүе “Бал ҡорто”

*Маҡсат: өндәрҙе дөрөҫ әйтеү өсөн артикуляция аппараты органдарының айырым бер торошоноң тулы хәрәкәтен тәъмин итеү.*

Мин шаян бер бал ҡорто,
Умарта минең йортом, *(тәҙрә кунегеүе)*
Иртән тороп теш таҙартҡас *(теш таҙартыу күнегеүе)*
Мин уйнарға ашығам.
Туп тибеп уйнап алам (*туп, сәтләүек күнегеүе)*
Әүһәләктә лә эйәм, *(әүһәләк күнегеүе)*
Сәғәт телдәрен һанайым, *(сәғәт күнегеүе)*
Уйнап һис арымайым
Бына шулай уйнап алғас
Бал ашарға ултырам, *(варенье күнегеүе)*
Һеҙҙе лә мин, сынаяҡ алып,
Сәй эсергә саҡырам *(сынаяк күнегеүе)*
Ҡамыр баҫам, болғатам, *(ҡамыр баҫыу күнегеүе)*
Ҡоймаҡ ҡоям, шыжлатам, *(коймак күнегеүе)*
Атта сабып уйнап алғас *(колонкай күнегеүе)*
Йоҡларға мин ашығам.



-Балалар, беҙ Быз-бызға яңы дуҫтар таптыҡ, уларҙың һеҙгә баллы күстәнәсе бар. *(Баллы кәрзинде балалар кәрәҙгә ҡуялар)*

*Дәрес музыка залында дауам итә.*

– Әйҙәгеҙ Быз-бызға музыка залын күрһәтәйек.

*Бал корто ( логопед) интерактив таҡтала синквейн тәкдим итә.*



**Синквейн "Бал ҡорто"**

***Маҡсат:*** *яңы технологиялар ҡулланып, балаларҙың бәйләнешле телмәрен камиллаштырыу*

– Был нимә?
– Ниндәй?
– Ни эшләй?
– Фраза (нимә әйтә алағыҙ)?
– Ассоциация?

**Уйын эшмәкәрлеге**

-Ҡыҙҙар, малайҙар, Быз-быз арып китте, унын менән бергә уйнап, ял итеп алайыҡ.

*1 уйын*

*Балалар түңәрәккә ҡуйылған ултырғыстарға ҡулға-ҡул тотоношоп ултыра. Музыка башланыу менән, ҡулдарҙы ысҡындырмай ғына күрше ултырғыска күсеп ултыралар.*

*2 уйын*

*Балалар ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәктә торалар. Ҡулға кейҙерелгән обручты ҡулдарҙы ысҡындырмай ғына эргәлә торған күршегә тапшырырға кәрәк. Уйындар күңелле музыка менән оҙатылып бара.*

– Быз-быз интерактив уйын уйнарға ярата икән. Мин һеҙгә яңы уйындар алып килдем.

**Интерактив уйын «Айырмаһын тап»**

***Маҡсат:*** *бирелгән һүрәттәрҙең айырмаларын табып, атауҙы нығытыу. Балаларҙың иғтибарлылығын, уйлау етеҙлеген, һүҙ байлығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.*

**Уйын тәртибе:**

*Балаларға ике һүрәт бирелә. Улар һүрәттәрҙең айырмаһын табып, шул һүрәткә баҫа. Яуап дөрөҫ булһа, һүрәттәге предмет юғала.*

*Баланың йәш үҙенсәлектәренә ҡарап, уйын ҡатмарлаша бара. Был уйын өс-алты йәштән тәҡдим ителә. Уйын бер бала йәки төркөмсә менән үткәрелә.*

– Быз-быз минең ҡолағыма рәхмәт әйтте, ә ни өсөн тип уйлайһығыҙ? *(Балаларҙың яуаптары)*

-Ә ниндәй эш иң оҡшағаны булды?

-Бөгөн бөтәгеҙ ҙә бик матур ҡатнаштығыҙ, афариндар!

-Бал ҡорто Быз-бызга беҙҙең баҡсабыҙ оҡшаны, ул үҙенә яңы дуҫтар тапты. Уның кәйефе лә күтәрелеп китте. Ә һеҙҙең кәйефтәрегеҙ нисек? Был шарҙарҙа һеҙҙең кәйефегеҙгә тура килгән һүрәтте эшләгеҙ. Был һеҙгә Быз-быздың бүләге булыр. *(Һары шарҙарҙа маркер менән эмоцияларын төшөрәләр).*

Быз-быз менән бергә үткән бөгөнгө көндө ата-әсәләр менән өйҙә һүрәтләп алып килегеҙ.

-Дәрес өсөн рәхмәт!

**_Басырова З.С.,_**
*тәрбиәсе, 15-се һанлы «Сәләмәт бала»*
*балалар баҡсаһы, Учалы ҡалаһы*

## КОНСПЕКТ ОРГАНИЗОВАННОЙ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЙ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ «ЗИМУЮЩИЕ ПТИЦЫ»

**Цели:** формирование экологической культуры у детей и закрепление знаний о зимующих птицах родного края на основе игровых приемов с использованием дидактических пособий.

**Задачи**:

**образовательные:**

• уточнить и расширить знание детей о зимующих птицах родного края;

• формировать умения и навыки наблюдения за птицами.

**развивающие:**

•развивать логическое мышление;

• совершенствовать диалогическую речь;

• закрепить названия птиц на башкирском языке.

**воспитательные:**

• воспитывать доброжелательное отношение к птицам;

• вызывать стремление беречь их, помогать зимующим птицам.

**Оборудование:** картинки зимующих птиц; запись пения птиц; кормушка; картинки с изображением корма для птиц, коробочки двух цветов, плакат в форме кормушки с изображением птиц, снежный комочек, кубик Блума, магнитная доска, раскраски о зиме.

**Словарная работа:** слова на башкирском языке – тағараҡ, ҡыҙылтүш, һарытүш, һайыҫҡан, тумырҡа, шыршы турғайы, турғай, ҡыш; слова на русском языке – кубик Блума, кормушка, синица, снегирь, воробей, дятел, клест-еловик, сорока.

**Ход ООД.**

**Организационная часть.**

**Воспитатель:** Здравствуйте, ребята. Меня зовут Зульфия Сафуатовна. Я очень рада встрече с вами. Давайте поприветствуем наших гостей.

-Здравствуйте, уважаемые гости! Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар! А теперь поприветствуем друг друга. Встанем в круг.

Собрались все дети в круг.
Я – твой друг и ты – мой друг!
Дружно за руки возьмемся
И друг другу улыбнемся.
Молодцы!

Садитесь, пожалуйста, на стульчики.

**Воспитатель:** Ребята, скажите, пожалуйста, какое сейчас время года? (Зима). На башкирском языке как будет называться это время года? На башкирском языке зима называется **ҡыш**. Давайте повторим. А теперь назовите, пожалуйста, зимние месяцы. (декабрь, январь, февраль). Молодцы!

А сейчас предлагаю поиграть в игру «Снежок». Встанем в кружок и будем передавать снежный ком друг другу и называть признаки зимы.

**Воспитатель:** начинаем игру: Зимой солнце светит, но не греет. Игра продолжается. Дети называют признаки зимы. Молодцы! Вы назвали очень много признаков зимы.

**Воспитатель:** Предлагаю отгадать загадку и узнать, о чем мы будем сегодня говорить. Послушайте внимательно, пожалуйста.

В теплые края – они не улетают,
С людьми они рядышком все обитают,
Зимуют в тех гнездах, что сами совьют,
Где люди помогут – кормушки прибьют.
В корме нуждаются они ежедневно,
Кто же они, догадались наверно? **(зимующие птицы)** Правильно. Садитесь на свои стульчики.

**Основная часть.**

**Воспитатель:** – Итак, мы поговорим о зимующих птицах нашего края. Зима – очень трудное время года для птиц, особенно, если она морозная и снежная. Ребята, а как мы можем помочь птицам зимой? (Сделать кормушку и подкармливать птиц)

**Воспитатель:** Из чего можно смастерить кормушки? (ответы детей). Как вы думаете, из какого материала сделана эта кормушка? (Воспитатель показывает кормушки из фанеры).

Правильно, эта кормушка сделана из тонкой фанеры. Такие кормушки изготавливают в нашем городе и учалинские мастера. Посмотрите, как красиво и ажурно вырезаны детали. Есть крыша, отверстия со всех сторон, чтобы удобно было доставать корм. На башкирском языке кормушка называется **тағараҡ.** Повторяют вместе. Послушайте стихотворение про кормушку на башкирском языке.

Ем һалырға ҡоштарға
Эшләп ҡуйҙым тағараҡ.
Ҡышын ҡыйын уларға
Аҙыҡ булғас аҙыраҡ.
Я кормушку смастерил–
Просто загляденье.
Набирайте, птахи, сил,
Ешьте, угощение!

Ребята, а вы хотите покормить птиц?

Чем же их можно кормить? (перечисляют). Чтобы не ошибиться в выборе корма, мы для начала пересортируем корма.

**Дидактическая игра: «Чем можно кормить, чем нельзя?».** Задание будет для девочек и мальчиков.

Девочки выбирают корма, которыми можно кормить птиц и кладут их в зеленую коробочку, а мальчики выбирают корма, которыми нельзя кормить птиц и кладут в красную коробочку. Молодцы. Вредные корма мы убираем.

**Дидактическая игра «Подбери корм».** На доске плакат в форме кормушки с изображением зимующих птиц. Рядом на столе картинки с изображением разных кормов для птиц.

**Воспитатель:** На кормушку прилетели птицы, а кормушка пустая. Надо накормить наших пернатых друзей. Я буду загадывать загадку про птиц, а кто первым отгадает ее, тот подберет для этой птицы корм.

Итак, слушаем внимательно.

Морозов не боится
Живет среди людей
Зимующая птичка
Бесстрашный **(воробей)** На башкирском языке эта птица называется **турғай**

Любопытна и быстра,
Есть на грудке синева.
В чужом домике гнездится,
А зовут ее? **(синица)** На башкирском языке эта птица называется **һарытүш**

Каждый год я к вам лечу,
Зимовать у вас хочу.
И еще красней зимой
Ярко-красный галстук мой. **(Снегирь)** На башкирском языке эта птица называется **ҡыҙылтүш**

Все деревья я лечу
По деревьям я стучу.
Их спасаю от врагов
Вредных, маленьких жуков. **(Дятел)** На башкирском языке эта птица называется **тумыртҡа**

Непоседа пестрая,
Птица длиннохвостая,
Птица говорливая,
Самая болтливая **(Сорока)** На башкирском языке эта птица называется **һайыҫҡан**

Не страшны ему метели,
Гнезда вьет зимой на ели,
Крик его отрывист, прост,
Кривоносый красный **(Клест)** На башкирском языке эта птица называется **шыршы турғайы**

Молодцы, всех птиц накормили. А сколько всего птиц на кормушке? Дети считают на русском и башкирском языках. Один, два, три, четыре, пять, шесть. Птиц всего 6. **Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты. Бөтәһе алты ҡош.** Молодцы!

**Физминутка**

Вот на ветках, посмотри,
В красных майках снегири.
Распушили перышки,
Греются на солнышке
Головой вертят,
Улететь хотят.

*4 хлопка руками по бокам, взмахи руками, частые потряхивания руками, опущенными вниз, 2 поворота головы на каждую строку, взмахи руками.*



**Воспитатель:** У меня, ребята, есть необычный кубик. Он называется кубик Блума. И он поможет вам рассказать о зимующих птицах. Ответить на вопросы, объяснить, поделиться своими знаниями, придумать новое, предложить свою помощь. Для начала мы встанем в круг. Нужно подбросить кубик, поймать и ответить на тот вопрос, который вам попадется.

Садятся на стульчики.

Следующая игра **«Угадай, кто поет?»**

Звучат записи с голосами зимующих птиц: **Сорока, воробей, снегирь, сова, дятел.**

После отгадывания, появляются картинки этих птиц на доске.

**Дыхательный тренажер «Зимующие птицы»**

**Заключительная часть.**

Воспитатель. Ребята, что вам понравилось сегодня делать больше всего? (Ответы детей). Что нового и интересного вы сегодня узнали? (Ответы детей) Как мы можем заботиться о птицах? (Ответы детей).

***Буранбаева Ә.Р.,***
*тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## КҮС АЙЫРЫУ БАЙРАМЫ.
## ӨЛКӘН ТӨРКӨМ БАЛАЛАРЫ ӨСӨН

**Маҡсат:** Балаларға күс айырыу йолаһы тураһында төшөнсә биреү; балаларҙың һөйләү телмәрен, хәтерен, ҡыҙыҡһыныусанлығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү; халыҡ уйындары, йомаҡ, бейеү һәм йыр аша башҡорт халыҡ ижадына, мәҙәниәтенә һөйөү уятыу; бал ҡорттарына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше**: умарта, умартасы, күс.

**Йыһазландырыу**: тирмә макеты, көнкүреш әйберҙәре: силәктәр, тырыз;милли кейемдәр, умарта, солоҡ, бал һауыттарында өс төрлө бал, күрек, яулыҡ.

**Байрам барышы:**

Силәктәр тотҡан балалар аҡланға йүгерешеп килеп сығалар.

Тәрбиәсе:

-Балалар,әйҙәгеҙ өләсәй менән олатайға ҡунаҡҡа барып ҡайтайыҡ,бер юлы еләк тә йыйырбыҙ. Ризаһығыҙмы?

Балалар:

-Риза, риза, барайыҡ!

Тәрбиәсе:

-Балалар, ҡайһылай матур еләкле аҡланға килеп сыҡҡанбыҙ, әйҙәгеҙ ошонда еләк йыяйыҡ.

**Уйын “Айыу,бүре юҡ икән,бында еләк күп икән”.**

**Ҡағиҙәһе:** бер бала иҙәндә айыу булып, битен ҡаплап йомарланып ята. Ҡалғандары еләк йыйырға килә һәм айыуҙы уратып йырлай: «Еләк йыям,ҡаҡ ҡоям. Өләсәйгә бүләккә. Айыу, бүре юҡ икән, бында еләк күп икән…». «Айыу» йоҡлаған булып шым ғына ята һәм ҡапыл тороп, уларҙы баҫтыра башлай. Балалар ҡасалар.



**Уйын бөткәс,тәрбиәсе:**

-Балалар,беҙ өләсәйгә килеп еттек.

**Тирмә эсенән өләсәй килеп сыға.**

-Һаумыһығыҙ,балаҡайҙарым!Һеҙ ҡайҙан аҙашып килеп сыҡтығыҙ?

**Бала:**

-Беҙ “Айыуҡай” балалар баҡсаһынан килдек.

**Өләсәй:**

- Әйҙәгеҙ рәхим итегеҙ, ултырығыҙ! (Балалар ултырышалар).

**Йыр (Туңғатаров Райман).**

**Бала:**

-Өләсәй,беҙ һеҙгә eләк алып килдек.

**Өләсәй:**

-Рәхмәт,үҫкәндәрем!

Һеҙ йомаҡ сисә беләһегеҙме?

Тынлағыҙ әле: Нисек итеп биҙмәйҙәр

Көнө буйы безләйҙәр.

Безләшеп улар беҙгә

Сәскәнән бал эҙләйҙәр?(**Бал ҡорто**).

(Ш.Биҡҡол)



**Тәрбиәсе:**

-Ә бал ҡорттары беҙгә нимә бирә? **(Бал).**

-Бал ҡорттары балды нимәнән йыялар? (**Сәскәнән).**

-Бал ҡорттары ҡайҙа йәшәйҙәр? **(Умартала).**

**Йыр “Бал ҡорттары”.**

-Балалар,ә умартаны кем ҡарай ул? **(Умартасы).**



**Бал ҡорттары кейемендәге ҡыҙҙар бейеп килеп инә.**

**Бейеү бөткәс,умартасы һөйләй:**

-Һаумыһығыҙ,балалар!

-Бөгөн бал ҡорттары гөжләйҙәр ҙә гөжләйҙәр ине, күс айырғандар икән. Ярай әле алыҫҡа китеп өлгөрмәгәндәр, күршенен ағасына ғына ҡунғандар. Бына алып ҡайттым.

**Күрше малайы илап килеп инә:**

-Саҡты, саҡты, бал ҡорто саҡты, ҡулым ауыртты.

**Бал ҡорто булып кейенгән ҡыҙ шиғыр һөйләй:**

Мин бал ҡорто,бал ҡорто,

Мин бал ҡорто Нәҙекәйбил.

Асыуландырһағыҙ мине

Семтеп алам, шуны бел! (Гөлнур Раева).

**Олатай:**

-Бына бал ҡорто күрше малайҙы саҡҡан, уны риза итер өсөн беҙ уға бер һауыт бал бирәбеҙ, ә әсәһенә күсте кире ҡайтарғаны өсөн беҙҙән бер яулыҡ! (Малай рәхмәт әйтеп сығып китә).

**Олатай:**

-Хәҙер мин һеҙгә күс айырыу тураһында һөйләп үтәйем әле.

**Слайд буйынса һөйләү.**

**Олатай ( һөйләп бөткәс):**

-Әйҙәгеҙ, минең бал ҡорттарым, һеҙҙе яңы умартаға урынлаштырайым әле.

(Олатай күрек менән “бал ҡорттарын” ҡыуып сығып китә)

**Өләсәй:**

-Балалар, һеҙ уйнарға яратаһығыҙмы**?**

-Әйҙәгеҙ “Күмер йөҙөк” уйынын уйнап алайыҡ. Мин һеҙгә уйындың ҡағиҙәһен аңлатам. Иң беренсе йөҙөк табыусы һәм һалыусы билдәләнә. Йөҙөк табыусы ситтә ҡарамай ултыра, ә һалыусы йөҙөктө уйнаусыларҙың береһенең усына йәшерә. Әгәр табыусы йөҙөктөң кемдә икәнлеген дөрөҫ әйтһә, кемдән йөҙөк табылған, ул шуның урынына ултыра, ә әйтә алмаһа, уның берәй әйбере алына һәм айырып һалып ҡуйыла. Уйын шулай дауам итә. Аҙаҡ,

йыйып алынған әйберҙәрҙең хужаларына сиратлап төрлө наказдар бирелә. Аңланығыҙмы? Әйҙәгеҙ уйынды башлайыҡ.

Йөҙөк табыусы Камила була, ә мин һалып сығам.

**“Күмер йөҙөк”уйыны уйнау.**

**Наказдар:** Камила башҡарыуында “Сәскә”бейеүе.

Наҙгөл башҡарыуында йыр.

**Өләсәй:**

– Балалар, беҙҙең Башҡортостаныбыҙ мөғжизәләргә бик бай. Ә шулар араһында ете иң ҙур мөғжизә билдәле булды.Башҡорт балы ла ошо мөғжизәләрҙең береһенә инә, ул донъяла иң шифалы, иң файҙалы бал иҫәпләнә.

– Балдың бик күп төрө була. Бына әле минен өҫтәлемдә өс төрлө бал: йүкә, сәскә, ҡарабойҙай балы бар. Ҡарабойҙай балы ҡыҙғылтыраҡ төҫтә була, сәскә балы– һары, ә йүкә балы бөтә балдан да үҙенең хуш еҫе , аҡһыл төҫтә булыуы менән айырылып тора. Йүкә балы шулай уҡ иң ҡиммәтле бал булып та иҫәпләнә. Иғтибар менән ҡарағыҙ әле: улар төҫтәре менән ныҡ айырыла, шулаймы?

(Өләсәй һауыттағы балды күрһәтә).

**Тәрбиәсе**:

-Ә беҙҙен балалар бал тураһында шиғырҙар беләләр.

**Балалар шиғыр һөйләйҙәр.**

**1-се бала:**

Тәмленән дә тәмлеһе<br>
Иң татлыһы бал икән.<br>
Өҫтәлебеҙҙә өҙөлмәй<br>
Бал ғына торһа икән (Гөлнур Раева).

**2-се бала:**

Ниндәй тәмле бал,бал.<br>
Әсәй сәйгә һал,һал.<br>
Ауырымам ҡыш,ҡыш<br>
Бал ашаһам йыш-йыш. (Гүзәл Ситдиҡова).

**3-сө бала:**

Тамағым,башым ауырта<br>
Ни эшләргә белмәйем.<br>
Әсәй баллап сәй эсерҙе<br>
Шунан киттем шәбәйеп (Гөлнур Раева).

**Өләсәй:**

-Һай, афарин, унғандарым! Һеҙҙең шиғырҙарығыҙ балдың файҙаһын да асып бирҙе. Бик зирәк балалар йөрөй икән “Айыуҡай” балалар баҡсаһында.

**Тәрбиәсе:**

-Балалар, беҙ ниндәй байрамда ҡатнаштыҡ әле**?**

**Балалар:**

-Күс айырыу байрамында ҡатнаштыҡ.

**Тәрбиәсе:**

-Бөгөн беҙ һеҙгә уртансылар төркөмө менән “Күс айырыу” иртәлеген күрһәттек.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

***Буранбаева Ә. Р.,***
*тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

# ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ТӨРКӨМӨНДӘ ТӘНҠИТЛЕ ФЕКЕРЛӘҮҘЕ ҮҪТЕРЕҮ ТЕХНОЛОГИЯҺЫН ҠУЛЛАНЫП "ИКМӘК ИЛЕНӘ СӘЙӘХӘТ" ТЕМАҺЫНА ТАНЫП-БЕЛЕМ БИРЕҮ БУЙЫНСА ЭШМӘКӘРЛЕК КОНСПЕКТЫ.

**Маҡсат:** балаларға икмәктең беҙҙең өҫтәлгә килгәнсе ниндәй юлдар үтеүе тураһында төшөнсә биреү.

**Бурыстар:**

– **өйрәтеүсе:** икмәк беҙҙең көндәлек аҙыҡ булыуы тураһында төшөнсә биреү; кеше тормошонда икмәктең әһәмиәте тураһында булған белемдәрен тәрәнәйтеү; икмәктең күп кешеләрҙең ҙур хеҙмәте булып тороуын балаларға еткереү.

– **үҫтереүсе:** практик тәжрибәләр аша үҙ аллы һығымта яһай белеүҙе үҫтереү; образлы фекерләүҙе, иғтибарҙы, зирәклекте үҫтереү өсөн шарттар булдырыу; телмәр үҫтереүҙе,үҙ фекерҙәрен әйтә белеүҙе формалаштырыуға булышлыҡ итеү.

– **тәрбиәүи:** өлкәндәр хеҙмәтенә ихтирам тойғоһо уятыу, икмәккә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** башаҡтар, тәрилкәлә бойҙай, 1-5 кә тиклемге һандар, комбайн, йөк машинаһы, икмәкхана, тирмән, иген һүрәттәре, ҡул тирмәне, ағастан эшләнгән комбайн, пластмасса, геометрик фигуралар, тоҙло ҡамыр, балаларға альяпҡыстар.

**Дәрес барышы:**

**I. Ойоштороу.**

**Сәләмләү**

Балалар төркөмгә инеп түңәрәккә баҫалар.

Шиғыр һөйләү (психологик комфорт булдырыу)

*-Һаумы,ҡояш!*

*-Һаумы,дуҫым!*

*-Һаумыһығыҙ,дуҫтарым!*

-Бер-беребеҙгә ҡарап йылмайҙыҡ та урындарға ултырабыҙ.

**II.Яңы тема.**

**Йомаҡ әйтеү.**

*Аҡ ҡамырҙан әүәләйҙәр,*
*Бешерәләр мейестә.*
*Донъяла иң тәмлеһе ул*
*Унһыҙ тормош юҡ һис тә.*
*(Икмәк)*

- Афарин,ҡыҙҙар,малайҙар!

- Тимәк, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ икән? (яуаптар)

- Дөрөҫ, бөгөн беҙ иң ҡәҙерле, иң изге аҙыҡтарҙың береһе булған икмәк тураһында һөйләшәсәкбеҙ.Элек-электән икмәкте иң ҡәҙерле ризыҡ тип һанағандар.Ҡунаҡтарҙы ла күпереп бешкән икмәк, тоҙ менән ҡаршы алғандар.

Икмәк тураһында күп йырҙар, шиғырҙар бар, уға арнап байрамдар үткәрелә.

- Ҡыҙҙар, малайҙар, икмәк беҙҙең өҫтәлгә килеп ултырғансы бик оҙон юл үтә. Яҙҙан алып көҙгә тиклем ауыл эшсәндәренә бик тырышып эшләргә тура килә.

- Балалар, һеҙҙең икмәктең нисек килеп сығыуын белгегеҙ киләме? (эйе)

- Улай булһа беҙ бөгөн икмәк иленә сәйәхәткә барабыҙ.

Беҙ бөгөн күп һөйләйәсәкбеҙ,шуның өсөн телтөҙәткесте ҡабатлап алайыҡ әле.

*Ға-ға-ға – әйҙә киттек урманға,*
*Ҙа-ҙа-ҙа – иген үҫә баҫыуҙа.*

*Мәк-мәк-мәк – әсәй бешергән икмәк,*

*Ма-ма-ма – икмәктән оло булма.*

- Иң беренсе беҙгә карта-схема кәрәк буласаҡ.

*(1 һанын һәм бойҙай һүрәтен ҡуйыу).*

***-Беҙҙең беренсе туҡталыш "Бойҙай"***

- Балалар, бына минең ҡулымда башаҡтар (күрһәтеү). Башаҡтар эсендә бәләкәй генә бойҙай орлоҡтары йәшәй (тәрилкә менән бойҙай орлоҡтарын күрһәтеү).Беҙҙең башаҡ та ошондай бәләкәй генә орлоҡ булған. Яҙ көнө тракторҙар ерҙе һөрөп, орлоҡтарҙы ергә сәсәләр.(һүрәт күрһәтеү)

- Балалар, һеҙ орлоҡ сәсеп ҡарағығыҙ киләме? Миңә яҡын килегеҙ әле.

***Ҡом планшеты менән эш.***

-Ҡом - ул беҙҙең ялан. Ошо яланда бураҙналар эшләйбеҙ (бармаҡтар менән һыҙып сығабыҙ).Тәрилкәнән орлоҡтар алығыҙ ҙа бураҙналарға һалып сығабыҙ.

- Орлоҡтар яҡшы үҫһен өсөн нимә кәрәк икән? (*ямғыр,дымлы ер*)

- Дөрөҫ, афариндар! Күк төҫтө яндырам.Ә тағы ла нимә кәрәк? (*ҡояш).*

– Һары төҫтө яндырам. Ямғыр яуа, ҡояш йылыта, орлоҡтарҙан башаҡтар үҫеп сыға.

**Психогимнастика**

- Балалар, беҙ яланда тип күҙ алдына килтерегеҙ. Мин һеҙҙе бәләкәй генә бойҙай орлоҡтарына әйләндерҙем һәм ергә ултырттым (***балалар сүкәйеп ултыралар)***. *Йылы ҡояш йылыта ерҙе, ямғыр яуа, ә орлоҡтар яйлап үҫә башланылар* ***(балалар яйлап торалар).*** *Үҫтеләр, үҫтеләр, башаҡтарға әйләнделәр* ***(балалар ҡулдарын күтәрәләр).*** *Башаҡтар ҡояшҡа үреләләр* ***(аяҡ осона баҫып үреләбеҙ өҫкә).*** *Ҡояш нык итеп ҡыҙҙыра башлағайны башаҡтар һулый башланылар* ***(башты аҫҡа эйәләр, ҡулды, яурынды, кәүҙәне төшөрәләр, сүкәйеп ултыралар).*** *Ямғыр яуып үтте, башаҡтар терелә башланылар,ҡояшҡа ҡарай үрелделәр* ***(балалар торалар,ҡулдарын күтәреп аяҡ осона баҫып үреләләр).*** *Яланда матур башаҡтар үҫеп сыҡтылар. Бер-береһенә ҡарап йылмайыштылар.*

- Тимәк, орлоҡтарға үҫер өсөн нимәләр кәрәк? (ямғыр,ҡояш).

***Беҙҙең икенсе туҡталыш – "Комбайн".***

*(2 һанын һәм комбайн һүрәтен ҡуям)*

*- Башаҡтар өлгөргәс, комбайндар игенде ура башлай (комбайнды күрһәтеү)*

*Комбайндар игенде урып башаҡ эсендәге бойҙай бөртөгөн бункерҙарға йыялар, һаламды рулондарға урап ҡалдыралар.Был малдарға яҡшы ризыҡ була.*

***Өсөнсө туҡталыш– "Йөк машинаһы"***

- Йөк машинаһы нимә эшләй икән? (*яуаптар*)

- Комбайн игенде урып йөк машинаһына тейәп (*һүрәт күрһәтеү,машина менән таныштырыу*) элеваторға бойҙайҙы оҙаталар.Бойҙай шунда һаҡлана. Элеваторҙа уны таҙарталар,киптерәләр.

***Геометрик фигуралар менән йөк машинаһын төҙөү***.

- Бик матур машиналар килеп сыҡты,афариндар!

***Киләһе туҡталыш-"Тирмән"***

*(Элекке ҡул тирмәнен күрһәтеп нисек он тарттырғандарын һөйләү; хәҙерге ел тирмәне менән таныштырыу).*

**Дидактик уйын "Һөнәр кешеләрен әйт"** (һүҙҙәргә ялғауҙар ҡушып, һөнәр кешеләрен әйтергә)

*Иген – иген**се***

*Трактор – трактор**сы***

*Комбайн – комбайн**сы***

*Тирмән – тирмән**се***

***5-се туҡталыш-"Икмәкхана"***

***(Икмәк-тоҙ тотоп икмәк бешереүсе ҡаршы ала)***

- Һаумыһығыҙ,балалар!Мине танyйһығыҙмы? Мин-икмәк бешереүсе**.** Бына мин яңы ғына икмәк бешереп алдым. Яңы мейестән сыҡҡан икмәк ниндәй була?(эҫе,йомшаҡ)

- Ә һеҙ ниндәй он аҙыҡтарын беләһегеҙ?(яуаптар)
- Икмәк бешереп ҡарағығыҙ киләме? (эйе)
- Улайһа, мин һеҙҙе икмәк бешерергә өйрәтәм.

Иң беренсе алъяпҡыстарҙы кейеп алайыҡ (*балалар ултырғыста элеүле торған алъяпкыстарҙы кейәләр).*

***Артикуляцион күнегеүҙәр эшләү(камыр баҫыу, ҡоймаҡ, сәй эсеү)***



- Ҡамыр әҙер, эшкә тотонайыҡ.

*Тоҙло ҡамырҙан балалар үҙҙәре теләгән икмәк аҙығын әүәләйҙәр.*

– Кемдәр ниндәй икмәк бешерҙе? Һөйләп үтегеҙ әле (*эштәрҙе баһалау*).

– Афарин, балалар!

**Йомғаҡлау.**

- Бөгөн нимә белдек?
- Икмәктең нисек барлыҡҡа килеүен иҫкә төшөрөп үтәйек әле.

(***Таҡталағы һүрәт-схемаға ҡарап һөйләү)***

- Балалар, икмәкте ҡәҙерләргә, валсығын ергә төшөрмәҫкә, ваҡламаҫка, икмәк менән уйнамаҫҡа, ҡулдарҙы йыуып ҡына икмәкте тоторға кәрәк.
- Өйгә ҡайтҡас, ата-әсәйҙәрегеҙ менән икмәк ризығын әүәләрһегеҙ.
- Һеҙ миңә бик оҡшанығыҙ, афариндар!

Беҙҙең эшмәкәрлек тамам, һау булығыҙ!

***Гусманова Ф.М.,***
*воспитатель, МАДОУ детский сад №34*
*комбинированного вида, г. Нефтекамск*

## СЦЕНАРИЙ ПРАЗДНИКА «ШЕЖЕРЕ БАЙРАМЫ! ДЕНЬ СЕМЬИ!»

**Цель:** Воспитание чувства уважения к членам своей семьи, воспитание любви, заботы к старшему поколению.

**Ведущий:** Хәйерле кис, ҡәҙерле балалар, хөрматле ҡунаҡтар.

Добрый вечер, дорогие дети, уважаемые гости.

Мы рады приветствовать вас на семейном празднике Шежере – байрамы. В переводе с башкирского – Шежере – байрамы означает– «праздник родословной». Сегодня мы поговорим о взаимоотношениях, которые присутствуют в каждой семье.

**Ведущий:** Семья? А что это такое – семья?

**1. Ребенок:**

Наши корни семья, как исток у реки
Это крепость твоя, говорят старики.

**2. Ребенок**:

И отец говорил, повторяла мне мать,
Чтоб я род сохранил, стал его продолжать.

**3 Ребенок**:

Без семьи не прожить, человеком не стать,
Нужно жить и любить и детей воспитать.

**4 Ребенок**:

Посадить деревцо, так же выстроить дом,

Помнить слово отцов – сила Родины в нём.

**5 ребенок**:

Нет без прошлого сегодня, без него и завтра нет

Веселись, расти и пой, родословная с тобой.

**Песня »Родина моя»**

**Ведущий:** Только тот, кто любит свой город, свою республику, свою Родину по-настоящему может любить своего отца, маму, бабушку, дедушку и всех.

Добро пожаловать на праздник – конкурс Шежере. Представляю жюри. (выбираем из присутствующих педагогов)

**Ведущий:** Сегодня у нас в гостях семьи, самые активные, самые дружные, самые уважаемые, которые представляют разные культуры.

**1. Семья … представляют русскую семью.**

**2. Семья … представляют башкирскую семью.**

**3. Семья … представляют марийскую семью.**

**4. Семья … представляют татарскую семью.**

**Ведущий**. Каждая семья расскажет о том, как они живут дружно, покажут свои таланты, свои любимые блюда.

Праздник начнем со стихотворения.

**Стихотворение «Берегите маму»**.

**Ребенок**:

Семья словечко странное, хотя не иностранное

Как слово получилось не ясно нам совсем

Ну *»Я»* – мы понимаем, а почему их **семь**

Не надо думать и гадать, а надо просто сосчитать.

Два дедушки, две бабушки, плюс папа, мама, я.

Сложили? Получается семь человек. Семь »Я»!

А если есть братишка? Выходит восемь »Я».

Нет, если есть братишка – выходитВо – семья!

**Ведущий:** Семьи готовы выступить? Сейчас семьи расскажут про свое шежере, о своих семейных традициях.

1. Слово предоставляется семье …
2. О своей семье расскажут семья …
3. Слово семье …
4. Познакомят со своей семьей …

**Ведущий:** Вот какие замечательные семьи! Пока жюри советуются и семьи готовятся к следующему выступлению, мы с детьми споем башкирскую песню.

**Песня «Мин үҙемде яратам»**

**Шуточный танец**

**Ведущий:** Каждая семья по своему талантлива. Говорят, талантливых людей не бывает. Сейчас наши замечательные семьи покажут свои таланты.

1. **Семья – …**
2. **Семья – …**
3. **Семья – …**
4. **Семья – …**

**Ведущий:** Вот какие таланты у наших семей. Жюри работает.

**Ведущий**: В разные времена, и русские, и башкиры, и татары и марийцы и другие народы славились своим гостеприимством. И наши семьи приготовили на сегодняшний праздник свои любимые блюда.

**Презентация Блюд**

1. **Семья – …**
2. **Семья – …**
3. **Семья – …**

**4. Семья – …**

**Ведущий:** Спасибо всем семьям за самый вкусный номер. Пока жюри подводит итог послушайте песню:

**Песня «Хлопайте в ладоши»**

**Слово жюри**

(поздравления участникам праздника)

**Ведущий:**

Вам у нас понравилось? Посмотрите друг другу в глаза, подумайте, что хорошего вы бы хотели сказать, но не словами, а глазами.

**Ведущий:** Дорогие дети, подойдите, пожалуйста к своим мамам, обнимите их и сядьте рядом с ними.

Поздравляем всех красивых, добрых, чудесных мам, бабушек, ваши семьи с праздником.

Предлагаем вашему вниманию песню.

**Слайд с поздравлением мам.**

**Ребенок**: Семья – это дом,
Где тепло и уют,
Где любят тебя,
И, конечно, ждут.

**Ребенок:** Семья это те,
Без кого мы не можем,
Они нам всех ближе,
Родней и дороже.

На этом наш праздник подошел к концу. Спасибо всем за внимание!

***Ғəлимова Л.З.,***
*тəрбиəсе, Асҡын ауылы балалар баҡсаһы, Асҡын районы*

## ӘКИӘТТӘР БУЙЫНСА СӘЙӘХӘТ

**Тема: Әкиәттәр буйынса сәйәхәт**

**Маҡсат**. Балаларҙың әкиәттәр тураһында белемдәрен камиллаштырыу. Уй-фекерләү һәләтен үҫтереү. Башҡорт халыҡ әкиәттәренә мөхәббәт тәрбиәләү.

**Тәрбиәүи бурыстар**: балаларға бер-береһе менән килешеп эшләй белергә, башланған эште аҙағына тиклем еткереүҙе тәрбиәләү.

**Үҫтереүсе бурыстар**. Логик фекерләү һәләтен үҫтереү. Балаларҙы һорауҙарға тулы яуап бирергә өйрәтеү.

**Белем биреүсе бурыстар.**

**Методик алымдар.** Уйын, күргәҙмә материал.

**Йыһазландырыу.** Проектор, интерактив таҡта, дидактик уйындар.

**Дәрес барышы.**

Ойоштороу моменты

- Хәйерле иртә, малайҙар һәм ҡыҙҙар. Кәйефтәрегеҙ нисек? Мин һеҙҙе күреүемә шатмын.

Хәйерле көн теләп, ҡояш ҡалҡа
Уяналар ауыл, ҡалалар
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем
Хәйерле көн һеҙгә балалар
Ҡарағыҙ әле мин һеҙгә нимә алып килдем?

- Б.Китап
- Эйе, дөрөҫ. Бөгөн беҙ һеҙҙең менән ошо китап менән эшләйәсәкбеҙ. Асайыҡ, ҡарайыҡ,һөйләшәйек. Ҡарағыҙ әле балалар нимә булған ул?

- Китаптың биттәре юҡ.
- Ниндәйҙер ҡағыҙ ғына, бына тағы нимәлер бар. Нимә ул малайҙар һәм ҡыҙҙар?
- Б.Схема, Карта, флешка.
- Т.Нимә эшләтергә кәрәк уны?
- Б.Компьютерға ҡуйырға кәрәк.
- Т.Ҡуйып ҡарайыҡ нимә икән унда.

Ҡуябыҙ , видео Шүрәле һөйләй.



- Һеҙҙең китаптың биттәрен мин урланым. Мин ҡушҡан шарттарҙы теүәл үтәһәгеҙ, китаптың биттәрен табырһығыҙ.
- Т.Бына һиңә кәрәк булһа. бөгөн дәрестә әкиәт уҡый алмайбыҙ инде.
- Т. Кем булды һуң был ?
- Б.Шүрәле
- Т.Ә ниндәй герой ул?
- Т йәки Б .Ул һәр ваҡыт алдаҡсы һәм урлаҡсы герой.
-



- Т. Эйе балалар дөрөҫ.
- Әйҙәгеҙ бергәләп ҡарайыҡ әле ниндәй шарттары бар икән Шүрәленең.
- Б. Беренсе телевизор төшөрөлгән.
- 1) Иғттибарҙы экранға йүнәлтәйек
- Был һүрәттәр ниндәй әкиәттән икәнен әйтергә кәрәк.

**( әкиәтте презентациялау)**



- Был ниндәй әкиәттән балалар?
- Ҡыҙыл кәләпүш
- Шалҡан
- Йомро икмәк
- Сыбар тауыҡ

– Т. Шүрәленең беренсе шартын үтәнек. Картаға ҡарайыҡ

**2)** – Т. Икенсе шартҡа күсәйек

– Б.пазлдар

-бында беҙгә Шүрәле пазлдар теҙергә ҡушҡан.

-



– **(пазл йыйғанда музыка уйнай)**

- Ниндәй әкиәттән был һүрәттәр балалар.
- Б.Ҡыҙыл кәләпүш әкиәтенән.
- төп герой кем был әкиәттә?
- Ҡыҙыл кәләпүш
- Т. Дөрөҫ . Был эште лә үтәнек.
-

**3)** – Өсөнсө шартҡа күсәбеҙ.Нимә һүрәтләнгән?

-Шалҡан.

– Нимәне аңлата ул?

-Шалҡан һүрәте һүрәтләнгән ергә барырға кәрәк.

– Т.бында шалҡан әкиәтен һөйләргә кәрәк.әйҙәгеҙ бер-бер артлы һөйләп барабыҙ һәм йәбештереп барабыҙ.

**4)** Т.Нимә был малайҙар һәм ҡыҙҙар.?

– Б. Нота һәм йомро икмәк һүрәтләнгән.

-Ә ни өсөн нота һәм йомро икмәк?

– Сөнки йомро икмәк йырларға ярата.

– Бына нисек хәйләкәр эштәр ҡушҡан беҙгә Шүрәле. Тимәк, йырлап күрһәтергә кәрәк. Йырлап ял итеп алайыҡ.

– Т.Афариндар. Артабан ҡарайыҡ. Урман һүрәте тора. Бик ҡыҙыҡ ҡайҙа алып бара икәәән.

**5) Артабан беҙҙең картала урман төшөрөлгән.**



- **Шүрәле килеп сыға**
- **Шүрәле.** Әһә, килеп етегеҙме ни?
- Шүрәле беҙ бөтә эштәрҙе лә үтәнек. Бирәһеңме китаптың биттәрен?
- **Шүрәле.** Юююют, мин һеҙгә былай ғына бирмәйем, мин уны һандыҡҡа бикләп ҡуйҙым, һеҙгә тағы ла бер эш ҡушам әле.
- **Шүрәле.** Миңә бер әкиәт күрһәтегеҙ. Шунан асҡысты табырһығыҙ һәм һандыҡты аса алырһығыҙ.
- Т. Балалар, ниндәй әкиәт күрһәтәбеҙ?
- Б. Сыбар тауыҡ. Сыбар тауыҡ әкиәтен.
- Т. Әйҙәгеҙ һуң.
- **Карина**. Мин әбей булам.
- **Вильдан**.Мин тауыҡ булам.
- **Динис**.Мин сысҡан булам
- **Сулейман**.Мин бабай булам.
- Т. Ярар балалар әйҙгеҙ үтәйек Шүрәленең теләген.Ҡалғандар ултырышайыҡ.
- Сыбар тауыҡ.
- **Тауыҡ.** Ҡыт-ҡыт-ҡыт. Әбей, бабай, йомортҡа һалдым. Килегеҙ бында.
- **Әбей**. Ниңә улай ҡысҡыраһың?
- **Тауыҡ.** Ҡыт-ҡыт-ҡыт
- **Бабай.** Әйҙә бойҙай һалайым, һыу эсерәйем.
- **Тауыҡ**. Әбей, бабай, йомортҡама нимә булған?
- **Әбей.** Ут ҡапҡанмы әллә?
- **Бабай**. Алтын йомортҡа һалған бит.

*( Әбей, Бабай баштарын тоталар)*

- **Әбей.** Нимә ашарбыҙ икән бөгөн?
- **Бабай.** Хәҙер ярабыҙ уны

*(Яралар, яралар яра алмайҙар йомортҡаны).*

Сысҡан килеп сыға ла йомортҡаны ҡойроғо менән төшөрөп вата. Әбей менән бабай илай.

- **Тауыҡ.** Илама бабай, илама әбей, алтын түгел, ябай йомортҡа һалырмын. *Бабай тауыҡтың башынан һыйпай. Йомортҡа эсенән асҡыс килеп сыға.*
- Т. Йомортҡа ысынлап та алтын булып сыҡты. Бына, балалар, асҡыс та килеп сыҡты.

- **Шүрәле**. Әй, молодецтар ҙа инде үҙегеҙ!
- **Т**.Балалар, асығыҙ әле һандыҡты
- Бир инде, Шүрәле, һандыҡты. Таптыҡ асҡысты.
- Ш.Эйййй , афариндарар ҙа инде үҙегеҙ, асығыҙ һандыҡты.

**Балалар асалар һандыҡты**.

**Шүрәле**. Рәхмәт балалар. Бин ҡыуындырҙығыҙ мине.Ҡайтам инде кире урманға.

- Т. Рәхмәт, Шүрәле.
- Һау бул! *Бөтәһе бергә.*
- Т.Ә беҙ, балалар, китаптың биттәрен кире ҡуяйыҡ һәм балалар баҡсаһына ҡайтайыҡ.

**Рефлексия**

- Т. Малайҙар һәм ҡыҙҙар, һеҙгә бөгөнгө дәрес оҡшанымы? Әгәр оҡшаһа, йәшел смайликты, ауыр булһа, ҡуйы һары, әгәр бөтөнләй оҡшамаһа, ҡыҙыл смайликты күрһәтегеҙ.
- Ә нимә оҡшаны?
- Нимәләр эшләнек?
- Ҡайҙа булдыҡ?
- Кемде күрҙек?

Малайҙар һәм ҡыҙҙар, бөгөнгө дәресебеҙҙә бик әүҙем ҡатнаштығыҙ, рәхмәт! Дәрес тамам.

***З.Р.Ибраҡова,*** *өлкән тәрбиәсе,*
***Л.А. Яппарова*** *тәрбиәсе,*
*“62-се балалар баҡсаһы” муниципаль автономиялы*
*мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы,*
*Стәрлетамаҡ ҡалаһы*

## БӘРӘҢГЕ КИПТЕРЕҮ

(*тылдағы хеҙмәткәрҙәргә арнала*)

**Алып барыусы**: Һуғыш! Ниндәй ҡот осҡос һүҙ! Оҙон һуғыш йылдары, аслыҡ йылдары. Фронтты ҡорал, яғыулыҡ, кейем, аҙыҡ-түлек, техника һәм башҡа кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп тороусы тыл булмаһа, рухтарын, күңелдәрен күтәреп, еңеүгә дәртләндергән мөхәббәт тулы, хис-тойғоло хаттар яҙылмаһа, халҡыбыҙ был ҡот осҡос һуғышты еңеп сығыр инеме? Күпме ауыл, ҡалалар яндырылды?Ә күпме ҡатындар — ирһеҙ, балалар — атайһыҙ, ҡыҙҙар — һөйгән йәрһеҙ, әсәләр — улһыҙ ҡалды.

Һеҙ, инәйҙәр ул саҡтарҙа
Йәп-йәш кенә ҡыҙҙар инегеҙ,
Көс етмәҫлек көстәрҙе лә
Күтәрҙе бит сибек иңегеҙ.
Их, әсәләр, һуғыш йылдарында
Теңкәгеҙгә тейҙе ауырлыҡ,
Заман ауырлығын күтәрергә,
Яу ҡайғыһын баштан үткәрергә,
Ҡайҙан тылсымлы көс таптығыҙ ҙа,
Ҡайҙан алдығыҙ сабырлыҡ.

Еңеүгә үҙ өлөштәрен индергән тыл эшсәндәре: ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, балалар! Ир-егеттәр һуғыш яландарында, ә улар, тыл эшсәндәре ауыл, ҡалаларҙа еңеү яуланылар. Улар күргән ауырлыҡтар, хәсрәт-ҡайғыларҙы һөйләп, аңлатып ҡына бирерлек кенә түгел. Тылда һыйыр егеп ер һөрөүсе, балаларын астан үлтермәҫ өсөн, баҫыуҙа серек бәрәнге, башаҡ эҙләүсе әсәйҙәр, өләсәйҙәр, ололар менән бер рәттән һабан һөргән, иген үҫтергән, урман ҡырҡып бүрәнә ағыҙған малайҙар, ҡыҙҙар, хәҙер инде олоғайып барған инәйҙәр, бабайҙар алдында баш эйәбеҙ ***(әкрен генә “Донбасс” көйө ишетелә).*** Һалдат һуғыш яланында һеҙҙе онотманы, киреһенсә, өҙөлөп хаттар көттө, һәм хат килеп төшөү менән, ҡыуанып, шунда уҡ

яуап яҙырға ултырҙы. Һеҙҙең һөйөүөгеҙ көс арттырҙы һалдат йәнендә. Бөгөн ошо ваҡыттарҙы иҫкә төшөрөп, һеҙгә, балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һәм ошо баҡсала тәрбиәләнеүсе балалар менән оло байрам әҙерләнек, рәхим итеп ҡарағыҙ!

*Башҡорт өйөнөң йыһазы: һуғыш ваҡыты " Еңеү өсөн", " Бөтәһе лә фронт өсөн" плакаттары, һике, сәңгелдәк, еҙ батмустар, тоҡтар, посылка өсөн тоҡтар һ.б. Ҡәйнә, килен, ейән-ейәнсәрҙәр өй йыйыштырып, бәрәңге киптерергә әҙерлек бара. Радионан Левитан тауышы яңғырай, советинформ һуғыш яңылыҡтарын тапшыра.*

**Өләсәй:**Килендәрем, бына бит улар бөтәһе лә эште башлап та ебәрҙе. Эйе бында йыуабыҙ, киптерәбеҙ, әрсейбеҙ, турайбыҙ, ҡайнар һыуға һалып алабыҙ, тағы ла киптерәбеҙ, теҙәбеҙ әлүмин таҡтаға, унан һуң мейескә киптерергә, ә киптереүселәр инде, ҡарап тороғоҙ, көйөп китмәһен. ***(Балаларға өндәшә).*** Балаҡайҙарым, һеҙ инде бәрәңге ҡабыҡтарын йыйып бер урынға һалығыҙ, яраймы. Иртәгә сәсеп тә ебәрербеҙ, алла бирһә. Айһылыу килен, күҙҙәрен ҡарап, сәсергә әҙерләп ҡуй, яраймы.

***Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар килеп керәләр.***

**Өләсәй:**Эй, түҙмәгәндәр бит әле, оло баштарын кесе итеп килеп тә еткәндәр.

**Беренсе инәй:** Нисек түҙеп ултырайыҡ инде, бөтөн халыҡ ярҙам иткәндә, еңеүҙе тиҙләтер өсөн беҙҙең дә өлөш керһен, йәштәрҙе өйрәтеп булһа ла ултырырбыҙ тинек.

**Икенсе инәй:** Шулай инде, балаларҙы ҡарап, тәрбиәүи өгөт-нәсихәт бирәйек, эшкә өйрәтәйек тибеҙ.



***Байрамғол ҡарт утын алып килә, таҡмаҡтар йырлай-йырлай.***

Һөргәндә лә ҡатын-ҡыҙ,
Сәскәндә лә ҡатын-ҡыҙ.
Урғанда ла һеҙ,
Йыйғанда ла һеҙ.
Сам корова, сама бык,
Сама баба, сам мужик.
Эх, сибәрҙәрем, әссәлә-мәғәләйкүм!

**Айһылыу килен:** Эй, ошо Байрамғол ағайҙы, шаяртыр инде хәҙер.

**Зөһрә килен:** Әлдә һеҙ бар әле, ағай, беҙҙе дәртләндереп, ярҙам итеп тороусы, рәхмәт инде.

**Байрамғол ҡарт** (эреләнеп китеп): Беҙҙең тыл батырҙары! Килендәр, ҡыҙҙар, балалар! Бына дәүләткә, фронтҡа ярҙамға йөкләмәне үтәйек тә, рәхәтләнеп ял итербеҙ, Алла бирһә! Тәәәк, Фатима, матур ғына эш бара, тиҙләтәйек, беҙгә өлгөрөргә кәрәк

*Байрамғол ҡарт мейес яға, эше көйләнеп китә. Ҡатын-ҡыҙҙар йыр көйләйҙәр.*

**Фәймә килен:** Ә һуғыш яланында беҙҙең ирҙәр йәндәрен аямай тыуған ил, беҙҙең киләсәк өсөн алыша. Беҙ ҡайтырбыҙ тип китһәләр ҙә, күпме яҡындарыбыҙ яу ҡырында ятып ҡалды (***күҙенән сыҡҡан йәштәрҙе һөртә-һөртә***)**.** Бына миңә лә үлем хаты килгәйне бит әле, ә бөгөн хаты килеп төштө. Яраланған, ҡулһыҙ ҡалған, ҡайтам тигән. Мин бәхетле ҡыҙҙар, ирем ҡайта!

**Айһылыу килен:**Миңә лә Зәйнулламдан хат килеп тора, бына яңы ғына ҡылған батырлыҡтары өсөн Зәйнуллам Ҡыҙыл йондоҙ ордены менән, Смоленск, Рига, Шауляй ҡалаларын, бик күп ауылдарҙы азат итеүҙә ҡатнашҡаны өсөн Ватан һуғышы ордены менән наградланған, Аллаға шөкөр иҫән-һау, батырҙарса һуғышып йөрөй.

**Зөһрә килен:** Эй, бына бит ниндәй шатлыҡ, бейеп алайыҡ әле, миңә лә хат килде, уҡырбыҙ бергәләп.

***Таҡмаҡтар***

1.Сабатам, сабатам,
Сабатамды яратам.
Сабатамдың башы туҙһа,
Байрамғол ҡарттан яматам.
2. Ирем китте войнаға,
Ирем китте войнаға.
Ирем китеп, вафат булһа,
 Алырһыңмы, ҡайнаға?
3. Одеял ябынаһыңмы?
Юрған ябынаһыңмы?
Төндәрендә төштә күреп,
 Мине һағынаһыңмы?




***4.(Ир кеше булып)***

Одеялдар юҡ бында,
 Юрғандар ҙа юҡ бында.
 Шатыр-ботор пуля оса,
Һинең ҡайғың юҡ бында.

**Фәймә килен:** Эй, бынау Байрамғол ағай, бигерәк шаянһың инде!

**Өләсәй:**Зөһрә килен, хат килде тигән тинең, уҡып ишеттер әле.

**Зөһрә килен:**Һаумыһығыҙ, ҡәҙерлеләрем! Сәләм алыҫтағы йондоҙом, Зөһрәм! Йәш йөрәгемдән парланып сыҡҡан ҡайнар һағышлы сәләмдәремде оҙатып,һеҙҙең һау-сәләмәт йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам. Сәләм шулай уҡ күрше-күләнгә, беҙҙе иҫкә алыусыларға, Фатима инәйҙәргә, Байрамғол ағайҙарға күптән-күп, суҡтан-суҡ сәләм! Үҙемә килгәндә иҫән-һау мин әлегә. Балалар ни хәлдә? Бәләкәсебеҙ Ғәли үҫеп киткәндер инде. Һеҙҙе ныҡ һағындым. Һағыныуҙы баҫыр өсөн , һуғыш тынып торған арала үҙебеҙҙең тыуған яҡтың моңдарын йырлап, бейеп күңел асып алабыҙ. Һеҙҙе һағынып Ниязбай.

**Өләсәй:** Эй, рәхмәт яуғырҙары, күмәкләгән, яу ҡайтарған тиҙәр. Бына күпме бәрәңге киптерҙек, ауылдаштарым! Үтәнек, ахыры, йөкләмәне? Хәҙер тоҡтарға тултырып ҡуйһаҡ та була.

**Минзәлә килен:**Ҡарағыҙ әле, ниндәй матур итеп кипкәнсе!

**Гөлъямал, үҫмер ҡыҙ:**Мин посылкаға тип матур итеп ҡулъяулыҡтар сиктем, хат та яҙҙым, кемгә эләгә, яуабын яҙыр әле башҡорт ҡыҙына, фотомды ла һалдым, бәлки күҙе төшөр ***(оялып).***

**Беренсе инәй:** Мин башалтай бәйләнем, аяҡтары өшөмәһен тип, бейәләй ҙә ебәрәм, тиҙерәк ошо ҡәһәрле һуғыш бөтһөн ине.

**Икенсе инәй:**Мин айырым посылкала үләндәр һалам, әйҙә Башҡортостан үләндәре менән сәй эсһендәр, дауаланһындар.

**Минзәлә килен:**Мин тәмәке янсыҡтары тектем, ә эсенә тәмәке лә һалдым, хат эсенә фотомды ла ебәрәм, бәлки миңә лә хат яҙып алған кеше булыр.

*Ат кешнәгән тауыш ишетелә*

**Байрамғол ҡарт:**Уполномоченный килгән дә баһа! Тиҙерәк йыяйыҡ посылкаларҙы.

**Уполномоченный:** Тәәәәәк, Хоҙайбирҙина Фатима!! 200 литр һөт, 200 тиҫтә йомортҡа, 40 кг. ит, 2 һарыҡ тиреһе, 8 кг.май биргәнһегеҙ икән, яҙып ҡуяйым. Йә, Байрамғол ағай, Ильясов иптәш, был юлы фронтҡа нәмәләр әҙерләнегеҙ? Йөкләмәне үтәп булдымы? Тәәәәәк, яҙайым, 5 тоҡ кипкән бәрәңге, һалдаттарға посылка, хаттар.

*Күмәкләп тоҡтарҙы сығара башлайҙар*

**Уполномоченный:** Йә, тиҙерәк булығыҙ, миңә бит поездға алып барып еткерергә кәрәк. Әйберҙәрегеҙҙе оҙатып кем бара?

**Икенсе инәй:** Кем булһын инде, әлбиттә Байрамғол ҡарт, ауылдың берҙән-бер ире, ә йәштәр, һеҙ олатайығыҙ менән барырһығыҙ, ярҙам булыр.

*Поезд тауышы ишетелә, тоҡтарҙы сығаралар*

**Беренсе инәй:**Имен-аман ғына йөрөп ҡайтығыҙ ил батырҙары!Тыуған ил өсөн! Сталин өсөн! Тиҙерәк һуғыш бөтһөн өсөн! Имен генә барып етһен! Бисмилла – рахман-рәхим!

**Икенсе инәй:** Беҙ ебәргән аҙыҡ-түлектәребеҙ утлы-боҙло һуғыш ҡырҙарындағы һалдаттарыбыҙға көс өҫтәһен, туҡ йөрөһөндәр. Тиҙерәк һуғыш уттары һүнер, һай аҫыл ил улдары яуҙан еңеп ҡайтығыҙ, Алла бирһә.



**Өләсәй:** Эй, балаҡайҙарым, иртәгә тағы эш, трудодень үтәргә кәрәк, ҡайтып ял итәйек, иртән иртүк тороп эшкә сығарға кәрәк бит.

*Ҡатын-ҡыҙҙар яйлап ҡына сығып китәләр, ә Айһылыу килен радионың тауышын аса.*

**Айһылыу килен:** Ҡәйнәм киске яңылыҡтарҙы тыңлап алайыҡ әле, хәрби ғәсҡәрҙәр ҡайһы ҡалаларҙы азат иттеләр икән?

*Өләсәй иплән кенә һикегә барып ултыра, уйға ҡала, Айһылыу килен күҙ йәштәрен һөртөп, тыңлай.*

**Алып барыусы:** Бөйөк Ватан һуғышы – оло тарихи ваҡиға. Тарихлы халыҡ– бәхетле халыҡ. Ул тарихи үткәнен һаҡлаусы, ирек, бәхет өсөн көрәшеүсе улдарын ололауы, онотмауы менән бәхетле.Еңеү көнөн бер кем дә, бер ҡасан да онотмаясаҡ. Хәҙерге тыныс тормош, күңелле көндәр өсөн, йыр һәм бейеүҙәр өсөн үҙебеҙҙең олатай – оләсәйҙәребеҙгә, ҡартатайҙарыбыҙға бурыслыбыҙ. Ҡәҙерен беләйек тыныс тормошобоҙҙоң! 75 йыл тыныс күк аҫтында йәшәйбеҙ. Илебеҙ сәскә ата. Халҡым көр күңелле. Эшләйбеҙ, ижад итәбеҙ, байрамдарҙа йырлап, бейеп күңел асабыҙ. Тол ҡатын-ҡыҙҙар, етем сабыйҙар тарихта ғына ҡалһын ине. Донъялағы бар халыҡтар ҙа дуҫ-татыу йәшәһен! Еңеүҙең 75-се яҙы һеҙгә тик яҡшы кәйеф һәм шатлыҡ алып килһен.Бәхет, именлек һәм оҙон ғүмер теләйбеҙ!

**_Ибраҡова З.Р.,_**
*өлкән тәрбиәсе,*
**_Хәбаева А.Т.,_**
*тәрбиәсе, “62-се балалар баҡсаһы”, Стәрлетамаҡ ҡалаһы*

## «ШӘЛ БӘЙЛӘҮ» ӨМӘҺЕ

*(башҡорт йолаларына арнала)*

**Маҡсат:** Балаларға башҡорт халҡының йолалары, байрамдары, тормош – көнкүреше, кәсебе, халыҡ сәнғәте хаҡында белеем биреү, ҡул эштәрен өйрәтеү, башҡорт халҡының ҡомартҡылары аша мили рух, халҡына ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ, ата-бабанан ҡалған мираҫты ҡәҙерләү, һаҡлау тойғоһо уятыу.

**Байрам барышы:**

*Өй эсе боронғоса биҙәлгән. Өләсәй менән ейәнсәр керә.*

**Ейәнсәр:** Өләсәй, әкиәт һөйлә әле.

**Өләсәй:** Ярар, балам, һөйләрмен, беләм, ҡыҙым, әкиәт яратҡаныңды. Бөгөн мин һиңә башҡорт халҡының йолалары тураһында һөйләмәксемен.

**Килен:** (керә) Ҡәйнәм, күрше еңгәләр шәл бәйләү өмәһенә керәбеҙ тиҙәр ине.

**Өләсәй:** Бәй, килен, шулаймы, әйҙә улай булғас килһендәр, бына Ильнара ҡыҙым да белеп, өйрәнеп ултырыр. Бар әле, Ильнара ҡыҙым, йәһәт кенә курше инәйҙәреңде саҡырып ҡайт, ә һин, килен, самауыр ҡуй, шыжлап торһон.

*Ильнара сығып китә. Балалар керәләр.*

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, өләсәй, һеҙҙә бөгөн шәл бәйләү өмәһе икән, бына Ильнара беҙҙе лә саҡырып китте, балалар башҡорт халҡының йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен онотмаһын, белеп үҫһендәр өсөн беҙ ҙә килергә булдыҡ.

**Өләсәй:** Бик һәйбәт булған, әйҙәгеҙ түрҙән уҙығыҙ, балалар, хәҙер өмәселәр ҙә килеп етерҙәр.

*Шаулашып, гармунға ҡушылып йырлашып өмәселәр килеп керәләр.*

**Өмәселәр:** Һаумыһығыҙ, Хәлиҙә апай, өмәгә саҡырып һәйбәт иттең әле, һеҙҙә ҡунаҡтарҙа бар икән, ошо йолаларҙы балаларыбыҙ өйрәнеп, һаҡлап ҡалһа шәп булыр ине.

**Өләсәй:** Әйҙәгеҙ, күршеләр, һеҙҙә рәхим итегеҙ, түрҙән үтегеҙ, бына балалар ҙа өмәгә килделәр.

*Өлкәндәр ултырышалар.*



**Тәрбиәсе:**
Шәл бәйләйбеҙ, шәл бәйләйбеҙ,
Ауылда шәл өмәһе.
Йәше-ҡарты, бала-саға –
Шау-гөр килә һәммәһе.
Өй эстәре – мамыҡ ҡына,
Шатлыҡ тулы өй эсе.
Эй, өмәләр! Күңелдәргә
Байрам – ябай йорт эше.
Шәл бәйләү өмәһе
Йылдарына бер була.
Үҙе йырлы, үҙе моңло
Ауыл шатлыҡҡа тула.

**Малай:** Ҡыҙҙар йыйылған өйгә
Ҡыҙҙар килгән өмәгә.
Нисек итеп шәл бәйләргә
Еңгәләрҙән күрмәгә.
**Ҡыҙ бала:** Онотолған ғөрөф-ғәҙәттәрҙе
Яңыртабыҙ хәҙер көндән-көн.
Уйын йолалары, йыр, бейеү,
Һәр киләсәк көндө биҙәһен.

**Тәрбиәсе:** Эш эшләп кенә тик ултырмайыҡ. Әйҙәгеҙ әле йомғаҡ уйынын уйнап алайыҡ. Ошо йомғаҡты ҡулдан ҡулға ебәрәбеҙ, көй туҡтағас кем ҡулында йомғаҡ ҡала, шул кешегә наказ бирәбеҙ. Әйҙәгеҙ әле серле һүҙҙәр әйтәйек:

Серле йомғаҡ ҡулымда
Ҡарағыҙ әле бында.
Йомғаҡ кемдә туҡтала
Үҙ һөнәрен күрһәтә.
*Уйнайҙар.*
**Тәрбиәсе:** Йомғаҡ Юлиәлә туҡтаны. Уға ниндәй наказ бирәбеҙ?
**Балалар:** Шиғыр һөйләһен.
**Ҡыҙ бала:** Шәл бәйләнем, шәл бәйләнем,
Алдарҙа мамыҡ ҡына.
Шәл бәйләргә йыйыла
Гел уңған ҡыҙҙар ғына.
**Тәрбиәсе:** Йомғаҡ Даниста туҡтаны. Уға ниндәй наказ?
**Балалар:** Бейеһен.
*Данис бейей, уйын дауам итә.*
**Килен:** Йомғаҡ миндә туҡтаны, әйҙәгеҙ әле мин бейеп алайым.

**Өмәселәр:** Эйе шул, ә беҙ таҡмаҡ әйтербеҙ.

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, йомғаҡ өләсәйҙә туҡтаны, ул беҙгә шәл бәйләү өмәһе тураһында һөйләһен.

**Балалар:** Һөйләһен, һөйләһен.

**Өләсәй:** Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары элек-электән шәл бәйләргә оҫта булғандар. Дебетле кәзәләрҙе беҙҙең яҡта күпләп көтәләр. Кәзәне һайлап алыуҙа, үҫтереүҙә, бағыуҙа ҡайһы бер серҙәр бар. Кәзәне тарарҙан алда уны һалҡын һарайҙа тоталар һәм әҙләп кенә көн һайын көнбағыш ашаталар, шулай итһәң, дебете ялтыр була һәм тиҙ ҡалҡа. Тәүҙә кәзәне тарайҙар, мамығын тетәләр һәм иләйҙәр, һуңынан сиратып йомғаҡҡа урайҙар. Ошо эштәрҙе башҡарғас, төрлө матур биҙәктәр ҡулланып, йылы шәл бәйләйҙәр. Шәл бәйләгәндә ҡатын-ҡыҙҙар киске ултырмаға йөрөгәндәр. Һөйләшә-һөйләшә, күмәкләшеп, бер-береһенә өйрәтеп, йырлашып эшләгәндәр. Бына шулай, балалар, шәл бәйләү өмәһе күңелле байрам ул.

**Тәрбиәсе:** Рәхмәт, өләсәй! Шәл бәйләүе еңел түгел, уның да үҙенә күрә серҙәре бар икән. Әйҙәгеҙ әле, балалар, апайҙарҙың йәш саҡтарын иҫтәренә төшөрөп, уларға эштәренә дәрт өҫтәп, күңелле итеп йырлашып, ҡапма-ҡаршы әйтешеп алайыҡ.

*«Ҡапма-каршы әйтеш» – йыр.*

**Тәрбиәсе:** Һай, афариндар!

**Малай:** Эх, күңелдәр ҙә күтәрелеп китте, йәгеҙ, ҡыҙҙар, Һеҙ бейеп күрһәтегеҙ әле.

*Бейеү – «Ҡыҙҙар бейеүе».*

**Ҡыҙ бала:** Әйҙәгеҙ әле «Ебегән» уйынын уйнап алайыҡ.

**Тәрбиәсе:** Эйе шул, үҙебеҙҙең яратҡан уйындарыбыҙҙың береһе, башҡорт халыҡ уйыны «Ебегәнде» уйнайыҡ, әйҙәгеҙ, еңгәләр, һеҙ ҙә тороғоҙ, арып киткәнһегеҙҙер.

*Уйын – «Ебегән».*

**Өмәселәр:** Үәт, маладистар, күңелдәр күтәрелеп китте, эй, рәхмәт яуғырҙары. Эй, илаһым, йәш саҡтар иҫкә төшөп китте.

**Өләсәй:** Эй, һыуһап киткәнһегеҙҙер, килен, бар әле кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙҙы килтер, ҡунаҡтарҙы һыйлап алайыҡ.

*Ҡымыҙ эсәләр.*

**Малай:** Эх, ҡымыҙ тәмле булды, рәхмәт, өләсәй!

**Тәрбиәсе:** Их, ҡымыҙы, ҡымыҙы,
Был ҡымыҙға ни етә.
Йөрәктәрҙе елкендереп,
Йырлата ла бейетә.

– Ҡымыҙ эсеп дәртләндек, әйҙәгеҙ әле «Шәл бәйләнем» йырын йырлашып алайыҡ. Ә беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ бейеһендәр.

*Өлкәндәр балаларға шәл бирә, ә килен ҡәйнәһенә бүләк итә. Шәл менән бейеү.*

**Килен:** Эх, башҡорт шәлдәре,
Матур ҡабарып тора.
Шәл бәйләгән апайҙарҙың
Ҡулдары уйнап тора.

**Тәрбиәсе:** Өләсәй, шәл бәйләү өмәһе күңелле байрам икән, рәхмәт, бик оҙаҡлап киттек, беҙгә ҡайтырға ваҡыт.

**Өләсәй:** Китмәй тороғоҙ (теләктәр теләп йомғаҡ бирә). Әйҙәгеҙ, килен, оло өйгә сәйәҙерлә әле, кереп сәй эсеп алайыҡ. *Сығалар.*

*Иҫәнғолова В.А.,*
*тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыукай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

# «ҠОЯШ»
# БЕРЕНСЕ КЕСКӘЙҘӘР ТӨРКӨМӨ

***Маҡсат:*** тура һыҙыҡты һуҙырға өйрәтеү, мамыҡ таяҡсаларҙы дөрөҫ тоторға, буярға өйрәтеү, үҙ аллылыҡ тәрбиәләү, ваҡ ҡул моторикаһын, түңәрәк форманы һәм һары төҫтө нығытыу, күңел күтәренкелеге, ҡыуанысло кәйеф булдырыу.

***Йыһаз:*** А4 ҡағыҙ, һары төҫтәге буяу, мамыҡ таяҡса, кантондан ҡояш, ҡыҫтырғыс, һары төҫтә кәрзинкә, йомғаҡ, салфетка, һыу.

***Дәрес барышы:*** Һаумы, ҡояш!Һаумы, зәңгәр күк!
Һаумы, елкәй!
Һаумы, бәләкәй йомғаҡ!
Һаумы, иртә!Һаумы, көн!
Һаумыһығыҙ, барығыҙ ҙа!

- Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙгә кем килгән?

*Балалар:* Ҡуян!



- Эйе, ҡуян. Унын кәрзине бар. Кәрзинендә нимә бар икән? Әйҙә, ҡарайыҡ әле.
- Был нимә ул? Ҡуян беҙгә нимә алып килгән? Йомғаҡ! Ул йомғаҡ нимәгә кәрәк икән? Әйҙә ҡуяндан һорайыҡ.
- Балалар, был серле йомғаҡ. Ҡуян беҙҙе туғайға сәйәхәткә саҡыра. Ризаһығыҙмы барырға?
- Афариндар! Тик серле һүҙҙәрҙе әйтергә кәрәк!

Һин тәгәрә, тәгәрә, йомғаҡ!
Тик бер үк ҡабаланма,
Беҙгә тура юлды күрһәт!

- Әйҙәгеҙ, балалар, йомғаҡ артынан барайыҡ.

-Балалар, ҡарағыҙ әле, был кем ул?



*Балалар:* Ҡояш!
*Тәрбиәсе:* Ҡояш ниндәй ул, балалар?
*Балалар:* Күңелһеҙ.
Тәрбиәсе: Ни өсөн ул күңелһеҙ?
*Балалар:* Уның нурҙары юҡ.
*Тәрбиәсе:* Әйҙәгеҙ ҡояшҡа ярҙам итәйек. Миндә серле ҡыҫтырғыстар бар, улар ярҙамында ҡояшҡа нурҙар бүләк итәйек.

- Афариндар, ҡарағыҙ әле, беҙҙең ҡояшҡа ҡалай күңелле булып китте. Ул ҡыуана.
- Балалар, беҙҙең ҡояшҡа бер ваҡытта ла күңелһеҙ булмаһын, беҙ уғакүп итеп ҡояшты һүрәткә төшөрәйек.
- Әйҙәгеҙ урындарға ултырышайыҡ. Һүрәт төшөрөү алдынан ҡулдарҙы ял иттерәйек. (Ҡулдарҙы бергә ҡуйыйыҡ… )

- Һеҙҙең алдығыҙҙа ҡояш төшөрөлгән ҡағыҙҙар, тик уның нурҙары юҡ. Ҡояш ниндәй төҫтә?

*Балалар:* Һары.

*Тәрбиәсе:* Ҡояштың нурҙары ниндәй төҫтә?

*Балалар:* Һары.

*Тәрбиәсе:* Шулай булғас, беҙ һары төҫ менән буяйбыҙ. Мамыҡ таяҡсаны алабыҙ, уны ҡулдарҙа дөрөҫ тотабыҙ. Бер осон һыулайбыҙ, уны һары төҫкә манып, ҡояшҡа тура һыҙыҡтар һыҙабыҙ. Минең ҡояшыма күңелле булыпкитте. Хәҙер һеҙ буяп ҡарағыҙ.

*Балалар үҙ аллы эшләйҙәр.*

***Ишкилдина Н.Ш.,***

*башҡорт теле уҡытыусыһы, «Шишмәкәй» балалар баҡсаһы,*

*Морак ауылы, Күгәрсен районы*

## «УРАЛ БАТЫР» ЭПОСЫН ЯТТАН ҺӨЙЛӘҮСЕЛӘР БӘЙГЕҺЕ

(21 февраль – Бөтә донъя туған телдәр көнөнә арналған байрам сценарийы)

**Маҡсат**: балаларға бөтә телдәрҙең тиң һәм матур булыуын, һәр кем үҙ туған телендә иркен аралаша алыуын аңлатыу

**Белем биреү бурысы**: “Урал батыр” тураһында белемде нығытыу.

**Белемде үҫтереү бурысы**: баланың һөйләү һәләтен үҫтереү.

**Тәрбиәүи бурыс:** ерҙә дуҫлыҡты, туғанлыҡты, татыулыҡты һаҡлауҙы тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу**: башҡорт халыҡ кейемдәре, мультимедиялы проектор, ҡурай моңо, эпос буйынса төшөрөлгән һүрәттәр күргәҙмәһе.

**Байрам барышы:**

Ҡурай моңо яңғырай. Өләсәй менән ҡулына китап тотҡан малай сыға.

**Малай**: Өләсәй, ә һин гел ошолай ҡарт булдыңмы?

**Өләсәй**: Юҡ, балам. Мин дә һинең һымаҡ бәләкәй генә бала инем. Эй, ғүмер тигәнең, балаҡайым, ошо йомғаҡ кеүек инде ул, әгәр ғүмер йомғағын һүтә башлаһаң, үҙе бер тарих яҙырлыҡ.(Өләсәйҙең ҡулында йомғаҡ, шуға күрһәтеп һөйләй)

**Малай**: Ә һин минең кеүек әкиәт тыңларға яраттыңмы?

**Өләсәй**: Әлбиттә, минең үҫкәнем.

**Малай**: Өләсәй, Бер тигәс тә ни яҡшы?

-Ер әсәнең аманатын онотмаһаҡ шул яҡшы.

**Ике тигәс тә ни яҡшы?**

-Тыуған илем , Башҡортостан сәскә атһа шул яҡшы.

**Өс тигәс тә ни яҡшы?**

Кешеләрҙең уй – хыялы изге булһа шул яҡшы.

**Дүрт тигәс тә ни яҡшы?**

Үҫеп килгән балалар телен белһә, илен һөйһә, йола һаҡлаһа – шул яҡшы.

**Биш тигәс тә ни яҡшы?**

Изге мираҫ –“Урал батыр” гел йәшәһә – шул яҡшы!

**Малай**: Өләсәй, ә минең Урал батыр тураһында күберәк белгем килә.

Өләсәй: Бик яшы, балам. 21 февраль – “Бөтә донъя туған телдәр” көнө билдәләнә. Шул уңайҙан, ”Шишмәкәй” балалар баҡсаһында ошо сараға арнап “Урал батыр” эпосын төрлө телдә яттан һөйләү бәйгеһе үтә. Унда һинең тиҫтерҙәрең дә ҡатнаша. Әйҙә уларҙы ҡаршы алайыҡ.

Хоровод “Мы разные, но мы вместе”.

Сәсәндәр парады. ( милли кейемдәрҙәге балалар талғын көй аҫтында залға инә, төрлө телдә сәләм бирәләр).

– башҡортса – Һаумыһығыҙ!

– татарса – Исәнмесез!

– инглиз телендә– Hellow!
– урыҫ телендә – Здравствуйте!
(балалар ултыра)
**Бала**: 21 февраля – День родного языка.
На свете много стран больших,
И много малых есть,
И для народности любой
Язык свой – это честь.
Конечно, нам дороже всех!
Наш любимый – Родной язык! -( вместе)
**Алып барыусы**: Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый баҫһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт, татар, сыуаш, мари булып
Үҙ телендә һөйләшергә, оялһа?!
**Алып барыусы**: Урал батырҙың рухы был ҡорға риза булһын!
Урал рухы йәшәһен, Күктәр фатиха бирһен!
Фатиха бир беҙгә, Урал батыр!
– фото «Урал батыр» ( Урал батырҙың балаларға телде онотмауҙарын белдергән аудиояҙма тыңлау)
(Урал батыр булып кейенгән ҡурайсы сыға, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа тәбиғәт тауыштарын сағылдырып уйнай)
**Алып барыусы**: Башта халҡыбыҙҙың ғорурлығы, бөйөк ҡомартҡыбыҙ "Урал батыр " эпосы тураһында бер кәлимә һүҙ.
**Ведущая**: Сейчас, кратко о эпосе «Урал-батыр».
**реб.1**. Нам есть чем гордится: прекрасна природа нашего края, красивые наши города и села, богата полезными ископаемыми наша Республика. Но самое главное богатство – это люди.
**реб.2**. Так же богата башкирская земля на богатырей. История Башкортостана начинается со сказочного богатыря Урала – батыра.
**реб.3**. «Урал Батыр» – это информация о давно забытом прошлом и передает ее все новым и новым поколениям.
**реб.4**. Каждый человек, любящий свой край, должен знать его историю, а прежде всего прошлое.
– фото М. Бурангулов
**реб.5**. «Урал-батыр» – это башкирский национальный эпос, записан в 1910 году Мухаметшой Бурангуловым.
– фото Урал и Шульган
**реб.6**.. В эпосе "Урал батыр"воспевается легенда о двух братьях: Шүлгән и Урал. Старший брат Шүлгән был непослушным сыном, а младший – Урал, делал добро и помогал людям.
– надпись "Урал батыр"
**Алып барыусы:**
Бөтә милләт балаларын
"Урал батыр" бергә туплаңы.
Исемеңде данлап, илен ҙурлап,
Майҙан тота ул һәм ҡыҙҙары.
(Бәйге талаптары буйынса, йәш сәсәндәр «Урал-батыр» эпосынан өҙөктө Рәсәй халыҡтары телдәрендә һәм сит телдәрҙә яттан һөйләйҙәр).
**(Бәйгеселәр сығышы)**
**Алып барыусы**: А сейчас внимание на экран. Перед вами – Ильгина Гиззатуллина, ей 5 лет. В связи с переездом она не смогла сегодня присутствовать.

**Алып барыусы**: Был күренекле эпос Башҡортостандың ете мөғжизәһенә инә.

**– “7 чудес РБ”**

**реб.1**: В 2022 году исполняется 113 лет со времени записи башкирского эпоса “Урал-батыр”, признанного одним из семи чудес Башкортостана.

**реб.2**: В Уфе проходил крупнейший международный фестиваль традиционной культуры – Всемирная Фольклориада, гости посещали пищеру « Шүлганташ»

**Реб.3**.: “Урал-батыр” – самое крупное и древнее произведение башкирского фольклора, дошедшее до нас из глубин веков, наших далеких предков.

**реб.4**: «Урал-Батыр» принадлежит к древнему жанру башкирской народной поэзии – ҡобайыр ( кубаир).

**Алып барыусы**: Башҡортостан ере – ҡобайырҙар иле, Урал батыр – уның ынйыһы. Беҙгә бөгөн район Ағинәйҙәре лә килеп еткән. Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ!

**Ҡобайыр “Уралым**” ( Ағинәйҙәр сығышы).

**Ведущ**: Прошло много времени. Урал и Шүлгән ушли каждый по своей дороге. В пути много бед встречалось. Возвратились батыры к людям с радостным известием и тогда поселились в долинах четырёх рек семь башкирских родов и на Земле появились белые лебеди.

**Выход батыров (танец “7 ырыу”)**

– фото (7 ырыу тамғаһы)

**Ведущий**: С тех пор в нашей республике Башкортостан живут в мире и согласии люди разных национальностей, сохраняя свои традиции, не забывая свои корни, своих предков.

Хоровод “Главное вместе, главное дружно”.

**Ведущ:** Эпос “Урал-батыр” занимает достойное место среди великих памятников народов мира. Поэтому переводчики его переводили на русский, английский, турецкий и другие языки (**выступление воспитателей** – чтение эпоса на башкирском, татарском, русском, на английском языке)

**Воспитатель**.: Мне очень хочется верить, что мы сегодня многое поняли и усвоили. Каждый человек, живущий на планете, испытывает чувство гордости за свою Родину, свой народ и страну, свою землю и историю. И нам сегодня стоит помнить о прошлом, знать настоящее, чтобы построить светлое будущее.

**Тәрбиәсе**. Бөгөнгө бәйгенең төп маҡсаты – халҡыбыҙҙың бай рухи ҡомартҡыһын үҙләштереү, киләсәк быуындарға еткереү.

**Воспитатель**: Дорогие дети, не забывайте свой родной язык, историю своего народа. Сохраняйте самые яркие и прекрасные обычаи, традиции своих предков. Любите, берегите их! Будьте патриотами своей Родины.

**Ведущ**: Добро, сделанное Урал батыром и его потомками, не забывается людьми. Напоминает нам о нём Республика Башкортостан, в которой мы живём. Вода, которую мы пьём, и гордые имена, имена, что светятся в памяти народной, словно звёзды в небе.

**Флешмоб**. (Зрители и участники все повторяют строки эпоса о добродетели)

**Алып барыусы**:

Донъяла мәңге ҡалыр эш ул – **яҡшылыҡ** (балалар әйтә)
Донъяны матур төҙөгән,
Ул да булһа – **яҡшылыҡ**
Күккә лә осор – **яҡшылыҡ**,
Һыуға ла батмаç – **яҡшылыҡ**,
Утҡа ла янмаç – **яҡшылыҡ**,
Телдән дә төшмәç – **яҡшылыҡ**.

**Ведущ:** Мир в котором мы живём– это сад, всё живое растёт в том саду, и поколения сменяют поколения.

**Песня о дружбе.**

Слово жюри для награждения участников конкурса.

**Ведущий:** А сейчас всех приглашаю на выставку рисунков наших воспитанников и их родителей, посвященных эпосу «Урал –Батыр».

Всем большое спасибо за участие!

Сара ла ҡатнашыусыларға ҙур рәхмәт!

Һау булығыҙ!

***Йәнбирҙина А.Ф.,***
*"Баланы үҫтереү үҙәге – балалар баҡсаһы",*
*Түбән Йәркәй ауылы, Илеш районы*

**"ИЛЕШ РАЙОНЫНА – 85 ЙЫЛ"**

өлкәндәр һәм мәктәпкәсә әҙерлек төркөмөндә
күңел асыу иртәлеге

**Маҡсат:** Балаларҙа тыуған еренә тоғролоҡ, мөхәббәт тәрбиәләү, уның тарихы, халҡының көнкүреше менән кескәйҙәрҙе таныштырыу, райондың билдәле шәхестәре, уларҙың илебеҙ алдындағы ҡаҙаныштары тураһында һөйләү.

**Йыһаз:** Өй эсе күренеше, ситән, көнкүреш әйберҙәре, биҙрәләр, кәсәләр, ҡамсылар.

**Ролдәр:** Алып барыусы, әбей.

*Балалар музыкаға теҙелеп керәләр, артҡы стена буйлап баҫалар. Ултырғыстар ике яҡҡа ҡуйылған. Тын ғына музыка яңғырай (Р.Хәсәнов "Томанлы иртә").*

**А.б.:** Хәтерләүҙән ҡурҡмайым мин!
Үткәндәрҙе онотмайым!
Беләм йыраҡ бабайҙарҙың
Нисек итеп көн иткәнен,
Ни иккәнен, ни сиккәнен
Ниндәй уйҙар, ниндәй моңдар
Беҙгә ҡалдырып киткәнен.
Иҫтә тотам уларҙың мин
Һуғыштарҙа ҡан түккәнен,
Тыуған ерҙең ирке өсөн
Зиндандарҙа интеккәнен.
Һәр ҡарыш ер һуғарылған,
Шаһит йәндәр ҡандарында.
Үткән яуҙар шәүләһе бар
Туған ерҙең таңдарында.
Һәр нигеҙҙең, һәр ауылдың,
Һәр ҡаланың үткәне бар...
Ғибрәт алырлыҡ мираҫтың
Ҡалғаны бар, киткәне бар.
Ғорур һүҙ әйт, һораһалар,
Ниндәй ерҙән? Мин Илештән!
Киләсәккә айыҡ ҡарар
Үҙ тарихын аныҡ белгән.

**А.б.:** Эйе, һәр халыҡтың үткәне, киләсәге, һәр кешенең туған ере бар. Туған ер һәр кешегә ғәзиз, ҡәҙерле. Беҙ Башҡортостанда йәшәүебеҙ менән ғорурланабыҙ. Уның зифа буйлы ҡайынлы урмандарын, көмөш һыулы күлдәрен, балыҡ менән тулы киң йылғаларын яратабыҙ, туған яғыбыҙҙың тәбиғәтенә һаҡсыл ҡарарға өйрәнәбеҙ.

Ватан ул туған ил,
Бына беҙ торған урын.
Был ерҙә ғүмер кисергән,
Атай – бабайҙар борон
Йырсылар торған был ерҙә,

Сәсәндәр булған элек.
Ватандың нимә икәнен
Әйткәндәр былай тип:
Эй Туған ил – Туған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Ирҙәрҙе ир иткән ер,
Яуызды хур иткән ер.
Батырға дан, биргән ер.
Ана шул ер – туған ил,
Ана шул ер – туған ер.

**Йыр “Ватан”** Ф. Гершова муз., Х. Мөхәмәдъяров һүҙ.

**А.б.:** Башҡортостаныбыҙҙа 54 район бар. Унын төйәге булып –беҙҙең Илешебеҙ тора. Илешебеҙ – күп милләтле район. Унда татарҙар , башҡорттар, урыҫтар, сыуаштар, марыйҙар һәм башҡа милләт кешеләре бер ғаилә кеүек бергәләп дуҫ – татыу йәшәйҙәр. Илештең эш һөйөүсән, унған, тырыш халҡын күреп беҙ һоҡланабыҙ, районыбыҙҙың иҫ киткес матур тәбиғәте, бай тарихы, булдыҡлы кешеләре менән ғорурланабыҙ.

Башҡортосан! Шиңмәҫ гөлдәр иле,
Ә Илешем уның бер гөлө,
Хеҙмәт тәме, йәшәү йәме менән
Илешемдең үтә һәр көнө.
Илеш иле – игенселәр иле.
Иңдәрендә тоя ул ғәмен.
Байрамдарҙа ҡунаҡ өҫтәленең
Иң түренә ҡуя икмәген.
Илеш – иле аҡ ҡайындар иле,
Илешлелә Ватан хаҡлығы.
Һәр кешелә изгелек һәм сафлыҡ
Һәр күңелдә ҡайын аҡлығы.
Илеш иле – һандуғастар иле,
Халыҡ бында йырға табына.
Сөнки күңелдәргә бишектән үк,
Мәңге һүнмәҫ бер моң алына.
Илеш ул шағирҙар иле,
Шиғыр кеүек көҙө, яҙыла.
Ағиҙелдә, Сөндә, Базыла.

**А.б.:** Эйе шул, беҙҙең Илешебеҙ Башҡортостандың иң гүзәл төбәгендә урынлашҡан. Күҙҙең яуын алып торған бормалы Ағиҙел, Сөн, Базы буйҙарынан тамыр алған, илгә тоғро хеҙмәт иткән яҡташтарыбыҙ мәңге беҙҙең күңелдәрҙә. Балалар, һеҙ уларҙы беләһегеҙме?

**А.б.:** *(серле генә тауыш менән)*

Мин һеҙҙе халҡыбыҙҙы үткәне менән яҡынданыраҡ таныштырмаҡсы булам. Борон – борон заманда түгел, бынан 85 йыл элек, нәҡ ошо беҙ һеҙҙең менән торған ерҙә Илеш районы барлыҡҡа килгән. Уның үҙәге итеп Йәркәй ауылы һайланған. Элек – электән Илеш халҡы хеҙмәт итеп көн күргән. Бәләкәс дуҫтарым, ә һеҙҙең өләсәй, олатайҙарҙың элек нисек йәшәгәнен, ниндәй уйындар уйнағанын, ниндәй йырҙар йырлағанын белгегеҙ киләме?

**Балалар :** Эйе.

**А.б.:** Ашыҡмағыҙ, дуҫҡайҙарым. Хәҙер мин үҙемдең өләсәйемдең һандығын асып, серле яулыҡты алайым әле . Бына ул, мин ошо серле яулыҡты һелтәгәс, беҙ үткәндәргә сәйәхәт итеп алырбыҙ *( яулыҡты һелкеп ала).* Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ! Серле яулығым, беҙҙе сәйәхәткә алып бар.

*(Әҙерлек төркөмө балалары ултыра, арткы фон йәнләнә башлай.Өйҙән әбей сыға, ҡулында самауыр.)*

**Әбей**: Балаларым тороғоҙ! Атай – әсәйҙәрегеҙ таң менән эшкә китте. Беҙҙең дә эшебеҙ бик күп. *(Балалар эшкә тотона).*

**Әбей:** *(тамашасыларға ҡарап)* Дуҫҡайҙарым, элекке ваҡытта кескенә балалар балалар баҡсаһына йөрөмәгән. Улар атай-әсәйҙәре эшкә киткәс, өйҙәге эш менән мәшғүл булғандар. Күрәһегеҙме? *(Әбей балаларҙы маҡтай ).*



Сылтыр– сылтыр аға шишмә,
Һис тә тыймалы түгел.
Ә һыуҙары шундай йомшаҡ,
Эсеп туймалы түгел. *(Көйәнтә менән һыу алып ҡайта).*
Әсәй сәйҙе ярата,
Сәйһеҙ мин дә түҙмәйем.
Сәйгә ҡушыр үләндәр күп,
Үсһен әле өҙмәйем *(Самауырҙан сәй ҡоя).*

***Бейеү "Биҙрәләр"***

Гәрәбә алтын бойҙай,
Бирҙе бит быйыл Хоҙай.
Алтын бойҙай ҡаҙанда,
Тандыр, усаҡ янғанда,
Танһыҡҡа ғына талҡан,
Әллә ҡасан алған дан.*(Иләк менән он иләй).*
Тирмәндә "дөбөр-дөбөр",
Бойҙайҙы һалып өлгөр.
Тарттым – тарттым ярманы,
Бер бойҙайҙа ҡалманы,
Аҙырағын иләнем
Эше бик тип тимәнем. *(Ҡул тирмәне менән бойҙай тарта).*

**Әбей:** Балалар , әйҙәгеҙ, әҙерәк ял итеп алайыҡ.

***Уйын "Сабата".***

Бешәләрҙә бешәләр,
Ҡойоп – ҡойоп эсәләр.
Бештем – бештем ҡымыҙҙы,
Хуш еҫтәре сыҡҡансы,
Көбә торҙо тыпырҙап,
Тәмле генә булһасы,
Атай эштән ҡайтыуға
Бешеп кенә етһәсе.

**Малай:** Эх матур башҡорт ҡыҙҙары,
Зифа икән буйҙары.
Изге икән уйҙары
Дәртле һуң бейәүҙәре.
Дәртле һуң бейәүҙәре.

***Бейеү "Кәсәләр".***

***Музыка яңғырай "Священная война".***

Әбей янына бер ҡыҙ менән малай килеп ултыра. Ҡулдарын әбейҙең теҙҙәренә һалалар.

**Әбей**: Бына шулай эшләп-уйнап йәмле итеп йәшәп ятҡанда, илебеҙгә яуыз дошман һөжүм итте. 1941 йылдан алып 1945 йылға тиклем, 4 йыл буйына илебеҙ һуғыш ғазаптары кисерҙе. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Башҡортостаныбыҙҙың ҡурҡыу белмәҫ батыр улдары, башҡа ил халҡы менән бер рәттән, Ватанды һаҡлауға күтәрелделәр. Якташыбыҙ осоусы Муса Гәрәевты кем генә белмәй ҙә, уның батырлығы менән кем генә һоҡланмай.

Унығ исеме тарих биттәрендә юылмаҫ хәтер билдәһе булып яҙылды. Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәтле йылдары йырағая барһа ла, кешеләр күңелендәге,
йөрәктәр, яралар һаман да төҙәлмәй.

Беҙ һуғышты онотманыҡ,
Китмәҫ тә ул беҙҙең күңелдән,
Сөнки унда, беҙҙә ятып калдыҡ,
Унда беҙҙең дә ҡан түгелгән.
Әгәр һуҡыш сыҡһа яңынан,
Ер һыҡраныр ауыр яранан.
Йәш егеттәр китер яу ҡырына,
Ҡайтмаҫ өсөн өйгә яңынан.
Әгәр һуғыш булһа, тағын етем,
Ҡалыр беҙҙең ғәзиз әсәләр.
Күпме туйҙар булмай ҡалыр илдә,
Тыумай ҡалыр күпме балалар.
Әгәр һуғыш булһа, ул сағында,
Ситләп үтмәҫ үлем беҙҙе лә.
Ҡәһәр һуҡкан һуғыш мәрхәмәтһеҙ,
Алмаҫ ул беребеҙҙе лә.
Беребеҙ ҙә теләмәйбеҙ ҡабат,
Һуғыш уттарына керергә.
Бына шуға күрә кәрәк беҙгә,
Тыныслыҡтың ҡәҙерен белергә!

***Йыр “Һаҡлағыҙ ер шарын”.***

Кәрәк беҙгә егеттәрҙең,
Арыҫлан кеүектәре.
Беҙ нәҡ шундай арыҫландар,
Беҙ Илеш егеттәре.
Яҡты булһын халҡыбыҙҙың,
Алға барыр юлдары.
Үҙебеҙ яҡтыртасаҡбыҙ,
Беҙ бит Илеш улдары.
Эй малайҙар, эй ҡыҙҙар,
Уйнағыҙ ҙа ,көлөгөҙ.
Байрам итәйек, килегеҙ,
Гөрләп торһон бейеүҙәр.

***Бейеү “Батырҙар”.***

Атам – әсәм бейегән,
Күңел асҡан бейеүҙән.
Ҡарап торһон бөтә дуҫ – иш,
Тартынмайбыҙ бейеүҙән.
Беҙ бейебеҙ, бейебеҙ,
Яҡты көндән туймайбыҙ,
Ҡулды – ҡулға саба –саба,
Йырлайбыҙ ҙа бейейбеҙ.

***Бейеү “Башкорт ҡыҙҙары”.***

**А.б.:** Серле яулығым! Сәйәхәтебеҙ тамам! *( Яулыгын һелтәй)* Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, дуҫтарым *(йомалар).* Беҙҙе Илештең үткәненән – баҡсабыҙға ҡайтар.

**А.б.:** *(һандыкҡа һалып ҡуймаксы була, шул вакыт)* Күрегеҙсе, өләсәйемдең ҡумыҙы бит был! *(кумыҙҙа башкорт халык көйөн уйнай).* Минең өләсәйемдең һандығында бик күп серле әйберҙәр, яйы сыҡканда , мин һеҙгә тағын да күрһәтермен әле *(һандыкты яба).*

Әйтегеҙсе балалар бер тигәндә ни яҡшы?

– Тыуып үҫкән ил яҡшы!
Ике тигәндә ни яҡшы?
– Дуҫ-татыу йәшәү яҡшы!
Өс тигәндә ни яҡшы?
– Шәжәрәһен белгән шул яҡшы!
Бер тигәндә ни яман?
– Үткәнен белмәгән шул яман!
Ике тигәндә ни яман?
– Илен һатҡан шул яман!
Өс тигәндә ни яман?
– Уйнамаған шул яман!
*Малай йүгереп сыға (ҡулында ҡурай, башында бүрек, елән кейгән).*
Ҡурай тартып ебәрергә ,
Их , мин яратам.
Шатлығымды, һағышымды,
Шулай таратам.
Ҡурай моңон ишеткәндәр,
Килеп етәләр.
Теҙелешеп, етәкләшеп,
Бейеп үтәләр.
***Уйын "Ҡурай"***
Ҡурай йыры уйлатҡан,
Күңелдәрҙе уяҡан.
Шат дәртлене йырлатҡан,
Ҡайғылыны йыуатҡан.
Мөлдөрәп ятҡан күлдәрҙә,
Балыҡтар уйнап тора.
Зифа буйлы ҡамыштар,
Шым ғына йырлап тора.
Йәшел хәтфә кеүек,
Матур болон.
Нурҙар сәсеп ята донъяға,
Һығылып үҫкән талдар араһынан,
Көмөш таҫма кеүек Һыу аға.
Тыуған яғым алтын баҫыу,
Ҡара тупраҡ, ҡалын урман.
Тыуған ерем – Илешкәйем,
Һинең менән ғорурланам!
Илешкәйем, һин беҙҙең,
Тыуған – үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, өй биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.
Илешебеҙ, үҙ еребеҙ,
Беҙҙең яҡты өйөбөҙ.
Янабыҙҙа, көйәбеҙҙә,
Рәхәтләнеп бейейбеҙ.
***Бейеү "Полька".***
Бабайҙарҙың йөрәгендә,
Әрнейҙер яралары.
Онотмайыҡ тарихты,
Беҙ Илеш балалары.
Беҙҙең атайҙарыбыҙҙы,

Беркем дә өркөтмәне.
Беҙҙе лә ҡурҡытмаҫтар,
Беҙ Илеш бөркөттәре.
Илешебеҙ – үҙ илебеҙ,
Беҙҙең ғәзиз еребеҙ.
Ошо ғәзиз еребеҙҙең.
Балалары инде беҙ.
Ҡояш беҙгә гел кәрәк!
Гел ҡояшлы ер менән,
Гел ҡояшлы көн кәрәк!
Йыр "Ҡояшлы ил!"

***Йәнбирҙина А.Ф.,***
*"Баланы үҫтереү үҙәге – балалар баҡсаһы",*
*Түбән Йәркәй ауылы, Илеш районы*

## "САМОЛЁТТА СӘЙӘХӘТ"

Компьютер технологияһын ҡулланып, мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө өсөн танып-белеү үҫеше буйынса асыҡ дәрес өлгөһө

**Маҡсат:**

а) кескәйҙәрҙе самолет төрҙәре менән таныштырыу;

б) Бөйөк Ватан һуғышы геройы Муса Гәрәев тураһында таныштырыу; белемдәрен камиллаштырыу;

в) яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, әйтелешен өйрәтеү, бәйләнешле телмәр үҫтереү;

г) компьютерҙа балаларҙың эшләү һәләтен үҫтереү; ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү;

д) кескәйҙәрҙең аппликация күнекмәләрен камиллаштырыу, уларҙың ижатын үҫтереү.

**Бурыстар:**

**өйрәтеүсе:** балаларҙа тыуған илгә һөйөү, батырға ҡарата хөрмәт тәрбиәләү; һаҡлау, уларға ярҙам итеү теләге тыуҙырыу.

**үҫтереүсе:** балаларҙың аң белемдәрен, телмәрен үҫтереү, шымартыу, байытыу; уйлау, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.

**тәрбиәүи:** батырҙарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, өлкәндәргә ярҙам итеү теләге тыуҙырыу; патриотик тәрбиә биреү.

**Йыһазландырыу:**

Компьютерҙар, мультипроектор, дәреслек, слайдтар, күрһәтмә материалдар, дидактик уйынға карточкалар, плакат, пилотка, аппликацияла ҡуллана торған материалдар.

***Дәрес барышы:***

**Ойоштороу моменты**.

***Тәрбиәсе:*** Һаумыһығыҙ, балалар!

***Балалар:*** Һаумыһығыҙ!

***Тәрбиәсе***: Беҙ һеҙҙең менән башҡорт теле дәресенә йыйылдыҡ, тимәк беҙ нисек һөйләшәбеҙ?

***Балалар***: Башҡортса һөйләшәбеҙ.

**Төп өлөш.**

*Бармаҡтар менән һаулыҡ һорашыу:*

*Алтын ҡояш, һаумы,*
*Зәңгәр һауа, һаумы,*
*Шаян елкәй, һаумы,*
*Кескәй имән, һаумы,*
*Беҙ йәшәйбеҙ был ерҙә,*

*Сәләмләйбеҙ һеҙҙе лә!*

*Шул ваҡыт экрандан видеошылтырау ишетелә, осоусы ярҙам һорай:*

***Осоусы:*** Һаумыһығыҙ балалар, мәжбүри ултырырға тура килде, сөнки тәгәрмәс ватылды. Зинһар өсөн ярҙам итегеҙ миңә!

***Тәрбиәсе***: Балалар нимә эшләйбеҙ? Нисек ярҙам итәбеҙ?

***Балалар***: Ярҙам итергә кәрәк, тәгәрмәс алыштырырға, ашығыс ярҙам саҡырырға, ремонтларға кәрәк.

***Тәрбиәсе***: Эйе, тимәк ярҙам итергә, һеҙ әҙерме?

***Балалар:*** Эйе, әлбиттә әҙер.

Ҡарағыҙ әле, өҫтәлдә дәфтәр биттәре бар, ашығыс рәүештә график диктант яҙып үтәйек.

***Тәрбиәсе:*** Балалар, нимә килеп сыҡты *(болт),* тимәк, беҙ самолеттың, ватылған тәгәрмәстәренә болт эшләп ҡуйҙыҡ – ремонтланыҡ.

***Осоусы:*** Рәхмәт һеҙгә, кескәй дуҫтарым. Миңә ярҙам иткәнегеҙ өсөн, мин һеҙҙе үҙемдең самолетымда, сәйәхәткә саҡырам.

*Самолет төшкән тауыш ишетелә.*

*Сәйәхәткә барғанда,*<br>*Ултыр һин самолетҡа,*<br>*Һауа юлынан осорһоң,*<br>*Сәләм биреп болотҡа.*

***Осоусы:*** Рәхим итегеҙ, кескәй дуҫтарым, заманса йыһазландырылған самолетҡа!

***Тәрбиәсе***: Балалар, самолетта үҙебеҙҙе нисек тоторға кәрәк?

***Балалар***: Тауышланмаҫҡа, йүгермәҫкә, осоусыға ҡамасауламаҫҡа.

***Тәрбиәсе***: Афарин, балалар пилоткаларҙы кейеп, урындарығыҙға ултырығыҙ, ҡайыштарҙы эләктерегеҙ. Беҙҙең осҡан самолет, заманса йыһазландырылған: телевизор, хатта компьютер ҙа бар.

*Самолет һауаға күтәрелгән тауыш ишетелә.*

Ә һеҙ балалар самолеттың тарихын беләһегеҙме?

***Балалар***: Шарҙа осҡандар, ағастан эшләгәндәр...

***Тәрбиәсе:*** Дөрөҫ. Зәңгәр экрандарға иғтибар итәйек.

*Тәрбиәсе самолеттың тарихы менән таныштыра.*

***Уйын "Оса – осмай".****(Балалар оса торған транспортты исемдәрен атап өҫкә теҙә,осмай торғанын аҫҡа теҙә)*

***Тәрбиәсе***: Ә беҙ һеҙҙең менән ниндәй самолетта осабыҙ?

***Балалар***: Ҙур, кешеләр йөрөтә торған.....

***Тәрбиәсе***: Балалар, ә беләһегеҙме самолеттар төрлө төрҙәргә бүленә.

*Тәрбиәсе экрандағы самолет төрҙәрен аңлата ( йөк, хәрби, кешеләр, ашығыс ярҙам күрһәтә торған).*

***Физминут:***

*Беҙ осабыҙ, осабыҙ,*<br>*Ҡулдарыбыҙҙы һуҙҙыҡ,*<br>*Самолетты осорҙоҡ,*<br>*Уң ҡанат алда,*<br>*Һул ҡанат алда,*<br>*1, 2, 3, 4 – осоп китте самолет.*

*( балалар һүҙҙәргә ярашлы хәрәкәттәр яһайҙар).*

***Тәрбиәсе:*** Беҙ ял итеп , көс йыйҙыҡ, компьютерҙар алдына ултырабыҙ. Компьютер алдында ултырғанда , ҡағиҙәләрҙе иҫкә төшөрәбеҙ.

*Тәрбиәсе таҡта алдындағы плакатҡа күрһәтә.*

***Компьютерҙа пазл йыйыу.***

*Тәрбиәсе балалар менән күҙҙәргә гимнастика яһап, ял итеп алалар.*

***Тәрбиәсе:*** Балалар, һеҙ ысын самолет күргәнегеҙ бармы?

***Балалар***: Эйе, аэропортта йылы яҡҡа осҡанда, Үрге Йәркәйҙә самолет бар.

***Тәрбиәсе***: Эйе, беҙҙең районда Муса Гәрәев музейы алдында самолет бар. Ни өсөн уның самолеты тора? Кем һуң ул Муса Гәрәев?

***Балалар***: Ул герой, һуғышта ҡатнашҡан, ике тапҡыр Советар Союзы геройы.

***Тәрбиәсе***: Афарин, кескәй дуҫҡайҙарым! Эйе, быйыл беҙҙең яҡташыбыҙ Муса Гәрәевтың тыуыуына 100 йыл була.

Хәҙер, мин һеҙҙе онлайн – сәйәхәттә Муса Гәрәев музейын ҡарарға саҡырам.

*Тәрбиәсе экрандан Муса Гәрәевтың тыуған йорто, музейы менән таныштыра.*



***Тәрбиәсе***: Бөтә кеше лә Муса Гәрәев кеүек осоусы була алмай, әммә уның кеүек булыр өсөн ниндәй булырға кәрәк?

***Балалар***: Уңған, көслө, етеҙ, батыр, ҡыйыу, аҡыллы, иғтибарлы, сос.

***Тәрбиәсе:*** Афарин дуҫтарым, күңелдәр күтәрелеп китте. Инде беҙгә ҡайтырға ваҡыт етте.

*Самолет төшкән тауыш ишетелә.*

***Балалар:*** Рәхмәт!

***Тәрбиәсе:*** Ҙур рәхмәт һеҙгә, беҙҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс сәйәхәткә алып барҙығыҙ.

Рәхмәт әйтеп, иҫтәлеккә самолет янында төшкән фотоны ебәрәбеҙ.

( *Экранда самолет янында төшкән фото).*

***Осоусы:*** Рәхмәт балалар, һау булығыҙ!

***Тәрбиәсе:*** Сәйәхәт иҫтәлеге итеп, әллә самолет эшләп алабыҙ мы?

*Тәрбиәсе балаларға өҫтәл янына саҡырып, әҙер самолет шаблонына, йәшел төҫ, йондоҙ йыртып йәбештерәләр.*

Ҡарағыҙ әле, ниндәй матур самолет килеп сыҡты беҙҙең!

***Рефлексия.***

Бөгөн беҙ нимә эшләнек? Кемгә ярҙам иттек? Уның менән нимә булған? Һеҙгә ҡыйын булдымы? Бирелгән биремдәрҙе үтәй алдығыҙмы?

Афарин дуҫтарым, бөгөн мин бик шатмын, сөнки һеҙ бөтә бирелгән бурыстарҙы еренә еткереп эшләнегеҙ.

*Балаларҙың яуаптары.*


***Йәнбирҙина А.Ф.,***
*"Баланы үҫтереү үҙәге – балалар баксаһы",*
*Түбән Йәркәй ауылы, Илеш районы*

## "ЮЛ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ"

*уртансы төркөм балалары өсөн дәрес өлгөһө*

Маҡсат: Светофор менән таныштырыу, һөнәрҙәр, транспорт тураһында белемдәрен нығытыу, "р" өнөн нығытыу, юл ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүҙе өй-рәтеү, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Һүҙлек эше: светофор, тротуар.

Йыһазландырыу: юл билдәләрен күрһәтеүсе һәм дидактик уйындар өсөн атрибуттар, ҡала урамы сағылдырылған плакат, өс төҫлө флаг, өс төҫлө алты шар.

**Дәрес барышы**

-Балалар, бөгөн дәрестә беҙ юл ҡағиҙәләре менән танышыуҙы дауам итәбеҙ. Уларҙы белеү транспортта йөрөүселәргә лә,йәйәүлеләргә лә кәрәк.

-Ә һеҙ ниндәй транспорт төрҙәрен беләһегеҙ?
-Балаларҙың яуаптары (ер, һауа, һыу транспорты).
-Дөрөҫ. Бөгөн беҙ ер транспортында – машинала сәйәхәткә сығабыҙ. Һеҙ әҙерме?
-Эйе.
-Машинаны йөрөткән кеше кем була?
-Шофер.

Урамдарҙа йөрөүе
Бик ябай ғына түгел.
Уның ҡағиҙәләре бар
Уларҙы бик яҡшы бел!
Белергә кәрәк шоферға,
Кәрәк йәйәүлегә лә,
Әле бәләкәй булһаҡ та
Белергә кәрәк беҙгә лә.

-Моторҙы тоҡандырығыҙ! Р-р-р-р ...(дөрөҫ әйтеү)
*Балалар ҡулдарын өҫкә күтәреп, мотор әйләнеүен күрһәткән хәрәкәт яһайҙар.*
-Беҙ беренсе туҡталышҡа яҡынлашабыҙ. Ҡарағыҙ әле, нимә күрәһегеҙ?
-Светофор.
-Ә нимә була ул светофор?
– Ул урамда хәрәкәт йүнәлешен күрһәтә.Төрлө төҫтәр менән сигнал бирә.
– Уның ниндәй төҫтәре бар?
– Ҡыҙыл, һары, йәшел.
– Ул төҫтәр нимәне аңлата?
– Ҡыҙыл-туҡта, һары– әҙерлән, йәшел– атла.
– Дөрөҫ.
*Бында эшләнеп бөтмәгән светофор тора– макетка төҫтәрен дөрөҫ кенә итеп бына ошо ҡыҙыл, һары,йәшел түңәрәктәрҙе йәбештерегә кәрәк.Мольбертта торған светофорға балалар түңәрәктәрҙе йәбештерә.(Йәбештереү ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү)*
Уйын “ Светофор “.
*Балалар залдың бер яғында, тәрбиәсе икенсе яғында тора.Тәрбиәсе төрлө төҫтәге флагтар менән сигнал бирә, балалар яңылышмай үтәргә тейештәр.*
*Йәшел – атларға, һары – урында атларға, ҡыҙыл – туҡтарға. Кем яңылыша,шул уйындан сыға. Бер нисә тапҡыр ҡабатларға.*
-Был туҡталышта оҙаҡ булдыҡ, икенсеһенә ҡуҙғалайыҡ. Унда беҙҙе “ эйе йәки юҡ” уйыны көтә.
-Һеҙ тротуарҙан йөрөйһөгөҙме?(эйе)
-Светофорҙа ҡыҙыл янһа, һеҙ юлды аша сығаһығыҙмы? (юҡ)
-Йәшел утта сығаһығыҙмы? (эйе)
-Автобус артына йәбешеп йөрөргә яраймы? (юҡ)
-Афарин! Күп беләһегеҙ икән!
-Моторҙы тоҡандырығыҙ! Р-р-р... (дөрөҫ әйтергә)
Өсөнсө туҡталышта викторина “Юлда”
-Тротуарҙан йәйәү йөрөгән кеше кем була? (йәйәүле)
-Машинала ултырып йөрөгән кеше кем була? (пассажир)
-Машина тауыш бирһә, ул нисек атала? (сигнал)
-Светофорҙың нисә күҙе? (өс)
-Машина ҡайҙа йоҡлай? (гаражда)
-Автобус көткән урын (туҡталыш)
-Юлдар, өйҙәр, парктар, уйын урындары булған ер (урам)
-Поезд, трамвай юлы нисек атала? (рельс)
-Ҡағиҙәне боҙған кешегә ниндәй яза бирәләр?(штраф)
Ә хәҙер ҡыҙыҡлы һорауҙарға ла яуап бирәйек.

-Почтальон Печкинға ниндәй транспорт бүләк иттеләр? (велосипед)

-Мәскәй Әбейҙең транспорты нимә? (һепертке)

-Емеля нимәгә ултырып батшаға барған? (мейес)

-Ниндәй сәйер өй һуң был, эсе тулы балалар, бензин менән туҡлана, итектәре-резина? (автобус)

Һуңғы туҡталышта беҙҙе “ Светофорҙы тоҡандыр “ уйыны көтә. Кем алдараҡ тоҡандыра, шул алда ҡайтып китә.

*Балалар ике төркөмгә бүленеп, бер бер артлы теҙелеп баҫалар. Алдағы бала өҫтән ҡыҙыл шар ебәрә. Балалар бер-береһенә шарҙы бирәләр, иң аҙаҡта торған бала шарҙы күтәреп күрһәтә – ҡыҙыл ут яна. Шулай дауам итә. Йәшел шарҙы яндырғас, ҡайтырға мөмкин.*

-Бына беҙ ҡайтып та еттек. Әйҙәгеҙ, машинанан төшәйек. Был төркөмдә бик аҡыллы балалар икән. Юл ҡағиҙәләрен беләләр. Һеҙ бер ҡасан да бәләгә ос-рамаҫһығыҙ, тип ышанғы килә.

***Күҙәшева Р.М.,***
*тәрбиәсе, «Ләйсән» балалар баҡсаһы,*
*Иҫәнғол ауылы, Ейәнсура районы*

## УРТАНСЫ БАШҠОРТ ТӨРКӨМӨ БАЛАЛАРЫ ӨСӨН “НАҘЛЫҠАЙҘЫҢ ТЫУҒАН КӨНӨ” ИНТЕГРАЦИЯЛАНҒАН ДӘРЕС КОНСПЕКТЫ

**Белем биреү өлкәһе:** «Тирә-йүнде танып-белеү үҫеше»

**Йәш төркөмө:** уртансы (4-5 йәштәге осор)

**Маҡсат:** Уртансы башҡорт төркөмө балаларының йыл программаһын нисек үҙләштереүҙәренә күҙаллау.

**Бурыстары:** Балаларҙың йыл миҙгелен айыра белеүҙе,тәүлек әйләнәһе өлөштәрен,әйберҙәрҙе классификациялау һәм уларҙың ниндәй ҡорамалдан эшләнеүен,төҫтәрҙе,геометрик фигураларҙы (квадрат, түңәрәк, овал,ө смөйөш), төп һәм рәт һандарын дөрөҫ әйтеү һәләтен,белемдәрен үҫтереү һәм нығытыу.

Йомаҡты сисеү, айырым өлөштәрҙән бер бөтөн төҙөү һәләте үҫтереү, ҡайсы менән ҡулланыу оҫталығын киңәйтеү.

Балаларҙың телмәр үҫешен һәм һүҙ байлығын үҫтереү. Күҙәтеүсәнлекте үҫтереү, иғтибарлылыҡты, хәтерҙе һәм логик фекерләү ҡеүәһен камиллаштырыу. Көйгә ярашлы хәрәкәт яһарға өйрәтеү. Бер-береһенә итәғәтле, ағымлы ҡараш, матурлыҡҡа ынтылыш тәрбиәләү. Матур йыр тыңлап шатлыҡ тойғоларын уятыу.

**Әҙерлек эше:** Үткән темаларҙы ҡабатлау һәм нығытыу.

**Интеграция өлкәләре:** «Социаль-коммуникатив үҫеш», «Тирә-йүнде танып-белеү үҫеше», «Телмәр үҫеше», «Художество-эстетик яҡтан үҫеш», «Физик үҫеш».

**Һүҙлек эше:** Наҙлыҡай, бәпембә, умарта, самауыр.

**Йыһазландырыу:** ағастар, шәхси гигиена әйбере (теш щеткаһы), бал, хат, ватман, ҡағыҙ мольберт, телевизор.

**Йөкмәткеһе.**

**I. Ойоштороу мәле.**

**Тәрбиәсе һәм балалар:**

Һаумыһығыҙ! Һаумы әле!
Ниндәй матур һүҙ икән,
Һәр көнөлдә иретерлек
Һәр кемгә лә үҙ икән.

– Һаумыһығыҙ, балалар! Һаумыһығыҙ, ҡунаҡтар!

**Балалар:** Һаумыһығыҙ, Рәсилә Минислам ҡыҙы!

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙгә бөгөн күп ҡунаҡтар килгән. Әйҙәгеҙ ҡунаҡтар менән һаулыҡ һорашайыҡ: «Һаумыһығыҙ!»

**Тәрбиәсе:** Балалар, мин иртәнсәк балалар баҡсаһына килеп инһәм, өҫтәлемдә бер хат ятасы. Кемдән икән был хатты беҙ йомаҡ сискәс кенә белербеҙ. Тыңлайбыҙ йомаҡты: “Йылан түгел – саға,ҡош түгел – оса”. Кем был? (Бал ҡорто).

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ! Афарин, балалар! Был хатты беҙгә бал ҡорто-Наҙлыҡай яҙып ебәргән икән. Наҙлыҡай бал ҡортоның исеме. Бергәләп әйтәйек әле: Н-а-ҙ-л-ы-ҡ-а-й. Балалар экранға күҙ һалайыҡ әле,кемде һеҙ күрәһегеҙ? Эйе, бал ҡорто. Кем ул бал ҡорто? (Бөжәк). Асып уҡып ишеттерәйем әле Наҙлыҡайҙың хатын,нимә тип яҙған икән.

***Хат: Хәйерле иртә, балалар! Минең бөгөн тыуған көнөм. Дуҫтарымды, күрше тирәләремде ҡунаҡҡа саҡырған инем, һис тә өлгөрә алмайымсы. Зинһар, уртансы башҡорт “Бал ҡорттары” төркөмө балалары миңә ярҙам итегеҙ әле.Минең йәшәү адресым Ейәнсура районы Ялан ауылы, Баҫыу урамы 5-се һанлы йорт”.***

- Балалар, ә беҙ йәшәгән район, ауыл нисек атала? (Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылы)

– Ә ниндәй балалар баҡсаһына һеҙ йөрөйһөгөҙ әле? (Ләйсән балалар баҡсаһы уртансы башҡорт “Бал ҡорттары” төркөмөнә йөрөйбөҙ)

– Афарин балалар, ә Республикабыҙ нисек атала? (Башҡортостан).

- Афарин, балалар! Йәшәү адресығыҙҙы беләһегеҙме ул? Сафина, Самира, Айзилә, Ынйыҡай әйтеп үтегеҙ әле.

- Балалар,хәҙер тышта ниндәй миҙгел? (яҙ миҙгеле)

- Афарин,балалар!Бөтөнләй онотолоп киткәнмен бит. Беҙҙе ярҙамға бал ҡорто саҡырған ине бит. Наҙлыҡайҙың тыуған көнө, шулаймы балалар? Ә беҙ нимә бүләк итербеҙ икән? Тыуған көнгә буш ҡул менән барыу килешмәҫ ул. Ә, белдем, белдем. Әйҙәгеҙ балалар, беҙ Наҙлыҡайға үткән дәрестә яулыҡ семәрләп эшләгән инек, шул яулыҡты бүләк итһәк бик шәп булыр тип уйлайым мин. Бүләк булды. Ә беҙ Наҙлыҡайға нимә менән барырбыҙ икән, балалар һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (Самолет, поезд, автобус, вертолет, кәмә, пароход һ.б)

- Балалар, минең балаҫ самолетым бар. Шул балаҫ-самолет менән осоп барһаҡ тиҙерәк булыр, сөнки Наҙлыҡай беҙҙең ярҙамға мохтаж бит. Әйҙәгеҙ ултырышайыҡ балалар балаҫ-самолетҡа.

- **II. Төп өлөш.**

- **Тәрбиәсе:** Балалар бына килеп тә еттек. Бында умарталар күп, шулаймы балалар? Әйҙәгеҙ, һанайыҡ әле нисә умарта бар бында? Төп һандар менән һанап үтәйек әле. (Бер, ике, өс, дүрт, биш умарта).

- -Эйе, дөрөҫ! Афарин, балалар! Биш умарта. Ә хәҙер, рәт һаны буйынса һанайыҡ әле. (Беренсе, икенсе, өсөнсө, дүртенсе, бишенсе)



- -Афарин, балалар! Бына был умартаға нисә һаны яҙылған? (Биш) Наҙлыҡай нисәнсе умартала йәшәй. (Бишенсе).Эйе, дөрөҫ.

**Наҙлыҡай ҡаршы ала.**

**Наҙлыҡай:** Һаумыһығыҙ, балалар! Мин һеҙҙе бик ныҡ көткән инем. Һис тә өлгөрә алмайым да ҡуям. Әле бер эшкә тотонһам, икенсеһенә өлгөрмәйем. Шулай итеп ҡабаланып йөрөй торғас самауырымды ла ҡулымдан төшөрөп ебәреп ваттым. Хәҙер ни эшләргә инде миңә?

**Тәрбиәсе:** Борсолма Наҙлыҡай! Беҙ хәҙер балалар менән һеҙгә тиҙ генә яңынан самауыр төҙөп бирербеҙ. Шулаймы, балалар?!

**(Киҫелгән һүрәт өлөшөнән бер һүрәт төҙөү)**

**Наҙлыҡай:** Һай афарин балалар, ҡайһылай шәп булды! Әйҙәгеҙ балалар бергәләшеп самауырҙы ҡайнатайыҡ. Өҫтәл тирәләй теҙелеп торайыҡ балалар.

**(Динамик пауза Самауыр ҡайнатыу)**

Беҙҙең матур самауыр (Ҡулдарҙы ҡуйып билгә, самауырҙы күрһәтәбеҙ)

Уң яҡта ла самауыр, һул яҡта ла самауыр!

Пых, пых, пых тиеп
Парын сығара самауыр!
Өҫтән дә,аҫтан да сыға пар!
Пых, пых, пых тиеп сыға пар!
Бына шулай ҡайнатабыҙ самауырҙы.



**Наҙлыҡай:** Самауыр ҡайнап сыҡты, балалар ҡарағыҙ әле өҫтәлемдә һауыт-һабаларым етәрлек микән? Әллә артыҡ әйберҙәр ҡуйғанмынмы? Ниндәй әйбер артыҡ? (теш щеткаһы-ул шәхси гигиена әйбере).

**Тәрбиәсе:** Афарин балалар. Теш щеткаһы өҫтәлдә артыҡ әйбер тип дөрөҫ әйттегеҙ, ә ҡалған әйберҙәрҙе дөйөмләштереп ниндәй әйберҙәр тип әйтәбеҙ әле?

**Балалар:** Һауыт-һабалар.

**Тәрбиәсе:** Балалар, сынаяҡтар, ҡалаҡтар, самауыр ниндәй материалдан яһалған? Самауырҙың беҙәге нисек атала? (ҡусҡар)

**Балалар:** Сынаяҡтар-пласмастан, ҡалаҡтар-тимерҙән, самауыр-ағастан, өҫтәл дә ағастан яһалған.

**Наҙлыҡай:** Афарин балалар, ҡайһылай һеҙ күп нимәгә өйрәнгәнһегеҙ икән балалар баҡсаһына йөрөп. Балалар, иртәнсәк йоҡонан торғас та мин торт бешергән инем, әммә ләкин биҙәп –семәрләп өлгөрмәнем тортты. Ярҙам итегеҙ әле зинһар. Әйҙәгеҙ, үтегеҙ, өҫтәл артына ултырығыҙ. Бына ошо һүрәткә ҡарап, мин бешергән тортты биҙәйек әле. Ниндәй фигуралар менән биҙәлгән торт? (Түңәрәк, овал). Дөрөҫ, афарин! Һеҙҙең алдығыҙҙа ниндәй геометрик фигуралар ята?

**Балалар:** квадрат, тура дүртмөйөш.

**Наҙлыҡай:** Квадраттан ниндәй геометрик фигура ҡырҡып бул? (Түңәрәк) Ә нисек итеп? Ә тура дүртмөйөштән ниндәй фигура яһап була?

**Балалар:** Квадраттың мөйөштәрен түңәрәкләп ҡырҡһаң, түңәрәк килеп сыға. Тура дүртмөйөштән овал ҡырҡырға була.

**Наҙлыҡай:** Эйе, дөрөҫ балалар. Квадраттың мөйөштәрен түңәрәкләп ҡырҡһаң түңәрәк килеп сыға. Тура дүртмөйөштән овал ҡырҡырға була. Балалар, күрһәтегеҙ әле миңә нисек ҡайсыны дөрөҫ итеп тоторға? Ҡайсы менән эшләгән ваҡытта балалар бик һаҡ булабыҙ, сөнки осло предмет. Үҙегеҙҙең һәм эргәгеҙҙә ултырған күршегеҙҙең күҙенә төртөп ҡуймағыҙ, зинһар. Шулай уҡ бармаҡтарығыҙҙы ҡарағыҙ, ҡырҡып ҡуймағыҙ бер үк. Бына, балалар, мин һеҙгә тәүҙә күрһәтәм, нисек квадраттан түңәрәк, тура дүртмөйөштән овал ҡырҡырға. Квадраттың мөйөштәрен (остарын) түңәрәкләп ҡырҡабыҙ. Балалар, һеҙҙең алдығыҙҙа елем бар, төҫһөҙ яғын әйләндереп, бумала ярҙамында бына ошолайтып елемде һөртөп һылайбыҙ һәм бына ҡағыҙ мольбертҡа (тортҡа) йәбештерәбеҙ. Мин һеҙгә үҙем эшләгән елемде ҡуйҙым, ҡурҡмайынса ҡулланығыҙ, һаулыҡҡа зыян итмәй ул, сөнки он һәм һыу ярҙамында эшләнем мин уны. Артыҡ елемде сепрәк салфетка ярҙамында һөртөп ҡуйырға онотмайбыҙ, балалар. Барығыҙға ла аңлашылдымы, балалар? Башлайбыҙ эште.

Кемдәр эштәрен тамамлаған ҡулдарығыҙҙы еүеш салфетка ярҙамында таҙарта торһағыҙ ҙа була. Афарин балалар,бик матур торт килеп сыҡты! Оҡшаймы һеҙгә? Миңә бик ныҡ оҡшаны торт.



**Тәрбиәсе:** Наҙлыҡай тортҡа шәмдәр ҡуйған. Ҡарағыҙ әле, балалар. Шәмдәр барыһы ла бер төҫтәме? (юҡ, шәмдәр төрлө төҫтә)

– Ниндәй шәм киң, нидәй шәм тар? Ҡайһыныһы бейек, ҡайһыныһы тәпәш? (Күк төҫлө шәм киң, ҡыҙыл шәм тар. Һары шәм бейек, йәшел шәм тәпәш).

– Тортта нисә шәм ҡуйылған? Әйҙә һанайыҡ әле.(дүрт). Шулай итеп , Наҙлыҡайға нисә йәш тула? Дүрт йәш Наҙлыҡайға. Нисә һанын ҡуябыҙ тортҡа?(дүрт һанын).

**Тәрбиәсе:** Балалар, ул ниндәй тыуған көн булһын инде Аҡ ҡаласһыҙ, шулаймы?! Наҙлыҡайға “Аҡ ҡалас” ты йырлайыҡ тыуған көнө менән ҡотлап. Түңәрәккә тороғоҙ, балалар.

Наҙлыҡайҙың тыуған көнөнә,
Беҙ бешерҙек аҡ ҡалас.
Бына шундай бейек ул,
Бына шундай тәпәшлектә,
Бына шундай киңлектә,
Бына шундай тарлыҡта!
Аҡ ҡалас,аҡ ҡалас,
Теләгәнеңде ал да ҡас!

**Наҙлыҡай:** Ҙур рәхмәт һеҙгә, балалар. Һеҙ миңә ярҙам иттегеҙ. Һеҙҙең менән миңә бик күңелле булды. Мин һеҙгә күстәнәс әҙерләнем.Иртәнсәк иртүк тороп мин яҙғы сәскәләрҙән, бәпембә сәскәһенән татлы, шифалы бал йыйҙым. Бына ошондай һауыттарға һеҙгә тултырып әҙерләнем һәр берегеҙгә. Тәрбиәсе апайығыҙға бирәм, балалар баҡсаһына ҡайтҡас таратып бирер. Балалар, һеҙ балалар баҡсаһына ҡасан киләһегеҙ? (иртәнсәк) Балалар баҡсаһынан ҡасан ҡайтаһығыҙ?(кис). Ә ҡасан уйнайһығыҙ? (көндөҙ). Йоҡлайһығыҙ? (төндә). Һау булығыҙ балалар! Киләһе осрашҡанға тиклем.



***Тәрбиәсе һәм балалар һаубуллашып, балалар баҡсаһына ҡайтырға сығалар, балаç-самолетҡа ултыралар.***

**Йомғаҡлау өлөшө (Рефлексия).**

**Тәрбиәсе:** Ҡайтып та еттек балалар. Ултырышығыҙ, балалар. Беҙ һеҙҙең менән ҡайҙа, кемгә ҡунаҡҡа барып ҡайттыҡ? Нимәләр эшләнегеҙ? Оҡшанымы һеҙгә ҡунаҡта булыу? Нисә йәш тулды Наҙлыҡайға? Миңә лә, балалар, һеҙ бик нык оҡшанығыҙ, әүҙем булдығыҙ. Афарин!

***Ҡунаҡбаева З.Н.,***
*18-се балалар баҡсаһы, Учалы районы*

## “ҠУРАЙ СЕРЕ”
## ӨЛКӘНДӘР ТӨРКӨМДӘ АСЫҠ ДӘРЕС

**Маҡсат:** балалар баҡсаһында өйрәнгән белемдәрҙе нығытыу.

**Бурыстар:** Балалар менән үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөп ҡабатлау, телмәрҙәрен үҫтереүҙе дауам итеү, үтелгән йырҙарҙы, уйындарын нығытыу. Фекерләү, уйлау һәләттәрен, аң-белемдәрен үҫтереү. Телде өйрәнеүгә, тирә-йүнгә, хайуандарға-ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш, башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы ҡурайға һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** ҡурай, «ҡурай» уйыны, башҡортса йыһазланған мөйөш, тәрбиәсе милли кейемдә, презентация, ҡурай көйө, йыр «Дуҫтарымдың теле» (*Г. Мустафина)*

**Һүҙлек:** ҡурай, серле, таж, ҡаҙ, өйрәк, күркә, тауыҡ, әтәс.

**Алдан әҙерләнгән эш:** шиғыр– мәҡәлдәрҙе ятлау, аҙна көндәрен нығытыу.



**Дәрес барышы:**

Һаумыһығыҙ!
Һаумы, уң куршем,
Һаумы, һул куршем,
Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!!!

**Урындарығыҙға ултырышығыҙ.**

- Бөгөн миңә серле ҡумта килеп төштө. Эсендә нимә бар икәнен белгегеҙ киләме? Улайһа, асып ҡарайыҡ әле…. (ҡумтаны асып “Ҡурай” уйынын сығарам).

- Был нимә, балалар? Ҡайҙа беҙ уны күрәбеҙ?

– Дөрөҫ, балалар, был ҡурай. Ҡурай – башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы. Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән. Ҡурай сәскәһенең ете тажы ете ырыу, ә ҡурай берҙәмлек татыулыҡ символы тиккә генә халыҡ «Ҡурай халыҡ күңелен юрай» тип әйтмәгәндер инде. Был ҡурай ҙа ябай түгел, үҙенең ете серен, ете эшен тәҡдим итә.

**Әйҙәгеҙ, 1-се тажын асайыҡ, һеҙгә беренсе эш: «Һандарҙы нығытыу»** Кем һанап күрһәтә? Афарин, Сафия, бик тә дөрөҫ! Әйҙәгеҙ бергәләп ҡабатлайыҡ. «Бер, ике, өс, дүрт, биш, алты, ете, һигеҙ, туғыҙ, ун». Афариндар.



**Әйҙәгеҙ, 2-се тажын асайыҡ, һеҙгә икенсе эш: Йорт ҡоштарын һанап үтәйек.**

-Ҡаҙ, өйрәк, күркә, тауыҡ, әтәс.

-Афариндар.

– Ҡарағыҙ әле, был кем ? Ҡаҙ! Ҡаҙ нисек ҡысҡыра? –ға– ға– ға.

– Ә был кем?– тауыҡ. Ошо схемаға ҡарап тауыҡ тураһында һөйләп үтәйек.

– Тауыҡ Ҡайҙан килеп сыға? Нимә бирә? Эйе дөрөҫ ит бирә ,йомортҡа һала, себеш сығара. Туҡлана: бөжәктәр, бойҙай, үлән менән.

**-Әйҙәгеҙ 3-се тажын асайыҡ , һеҙгә өсөнсө эш: Йорт хайуандарын һанап үтәйек.**

– Был кем? Эт. Эт ни эшләй? Өрә – нисек?

– Һау– һау– һау!

-Ә бесәй нисек мыяулай? мрр-мррр.

-Мәҙинә беҙгә бесәй тураһында шиғыр һөйләп ишеттерә.

Бесәй, бесәй, бесәй шул,
Бесәй әле кескәй шул.
Үҙе мырлай ҙа мырлай,
Әллә ул шулай йырлай?

-Һай афарин, Мәҙинә!

**Физминутка**

Ял итеп алайыҡ әле. Бөтәбеҙ ҙә, урындарыбыҙҙан торҙоҡ, минең арттан ҡабатлап, ошолай башҡортса ҡурай көйөнә бейеп күрһәтәйек.



Бер тиһәм – һик(е)реп торам,
Өс тигәндә ҡул сабам,
Дүрт – бөйөргә таянам,
Биш тиһәм тыпырлатам,
Ай, бейергә яратам!

– Афарин, балалар! Ял итеп алдыҡ.

**4-се тажында иһә аҙна көндәрен һанап үтергә кәрәк.**

-Дүшәмбе, шишәмбе, шаршамбы, кесеаҙна, йома, шәмбе, йәкшәмбе. Кем ҡабатлап ишеттерә? Һай афарин, Эльза!

**5-се тажында миҙгелдәрҙе ҡабатлап үтәйек**

-Йәй, ҡыш, көҙ, яҙ. Яҙғыһын ниндәй үҙгәрештәр күрәһең? Дөрөҫ, ҡояш нығыраҡ йылыта, ҡоштар йылы яҡтан ҡайта, ҡарҙар ирей, һыу таша , талдар бөрөһөн аса.

**6-сы тажында мәҡәлдәрҙе ҡабатлайыҡ**

-Кем ниндәй мәҡәл белә? Йә, Радмир: «Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ». Мәҙинә : «Егәрленең ҡулы етәү». Эмир : «Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.»**.** Данис: «Теле барҙың иле бар».

**7-се тажында һеҙгә етенсе эш: төҫтәрҙе нығытайыҡ**

-Кем белә?Афариндар.

-Аҡ, ҡара, ҡыҙыл, һара, йәшел, күк, көрән. Тағы ла берҙе ҡабатлайыҡ. Афарин, балалар , бына беҙ ҡурай уйынының ете тажында асып бөттөк.

**Йомғаҡлау.**

-Ниндәй эштәр башҡарҙыҡ?( ҡурай уйынына ҡарап ҡабатлап үтеү). Серҙәре менән таныштыҡ. Афарин, балалар, ә хәҙер иһә беҙҙең ятраҡан йырыбыҙҙы йырлап ишеттерәйек.

**«Дуҫтарымдың теле»**.(*Гульнара Мустафина)*



1. Һыйыр сыҡты яланға, яланға,
Үләндәрҙе ашарға, ашарға.
Мө-мө-мө, һөт бирергә мөмкинме,
Мө-мө-мө, һөт бирергә мөмкинме?
2. Йылы һарыҡтың туны, их туны.
Йөрөмә, һарыҡ, туңып, эй туңып.
Бә-бә-бә, һалҡын ҡурҡытмай бер ҙә,
Бә-бә-бә, һалҡын ҡурҡытмай бер ҙә.
3. Һаҡалын тарай, тарай, их тарай.
Кәзә көтөүгә ҡарай, эй ҡарай.
Мә-мә-мә, һин мине ямаҡ тимә,
Мә-мә-мә, һин мине ямаҡ тимә.
4. Әтәс китте ҡалаға, ҡалаға,
Дауаларға тамағын, тамағын.
Ки-ки-ри-күк, ҡалала табиптар күп,
Ки-ки-ри-күк, ҡалала табиптар күп.

***Ҡәйепҡолова З.Ғ.,***
*укытыусы –логопед, «Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһы», Сибай ҡалаһы*

## “ҠЫШ БАШЛАНДЫ”

*(Мәктәпкә әҙерлек төркөмө өсөн эшмәкәрлек)*

**Маҡсат:** Балаларҙың белемдәрен нығытыу, дөйөмләштереү, һүҙ байлығын арттырыу. Ҡыш тураһында, ҡыш миҙгеленең билдәләрен нығытыу, ҡышҡы уйындар тураһында белемдәрен туплау. Һүрәттәргә ҡарап һөйләмдәр төҙөү. Үҙ аллы яуаптар бирә белеүҙе нығытыу.

**Коррекция-өйрәтеү бурыстары:** “Ҡ” өнөн ижектәрҙә, телмәрҙә һәм текстарҙа айырырға өйрәтеү. Өн-анализы һәм синтезы күнекмәләрен формалаштырыу. Һөйләмдәр схемаһын үҙләштереүгә күнектереү. Һүрәтләү таблицаһы буйынса хикәйә төҙөү.

**Коррекция-үҫтереүсе бурыстары:** Фонематик анализ һәм фонематик ҡабул итеү күнекмәләрен үҫтереү. Юғары психик һәләттәрен, бәйләнешле телмәр, логик фекерләүҙе үҫтереү.

**Коррекция-тәрбиә биреү бурыстары:** Тыуған яҡҡа, тәбиғәткә ҡарата иғтибарлы булырға, һөйөү уятыуҙы дауам итеү. Тәбиғәткә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һөйөү уятыу.

**Йыһазландырыу:** морфологик таблица, балыҡ схемаһы, һөйләм төҙөү өсөн һыҙыҡтар, түңәрәктәр, ҡар бөртөктәре.

**Алдан алып барылған эштәр**: схемалар ярҙамында һөйләмдәр төҙөп өйрәнеү.

**Һүҙлек эше:** һыуыҡ, бәҫ, буран, ел, ҡар, ҡыш, шыршы, ҡар бабай.

**I. Ойоштороу өлөшө:**

- Һаумыһығыҙ, балалар! Һаумыһығыҙ ҡунаҡтар!

**II. Төп өлөш.**

- Балалар, мин һеҙгә бер ҡыҙыҡ ҡына йомаҡ алып килдем, әйҙәгеҙ әле, иғтибар менән тыңлайыҡ һәм йомаҡтың яуабын сисәйек.

Көндәре һыуыҡ булыр,

Ерҙең өҫтө аҡ булыр
Балалар санала шыуыр,-
Был ниндәй ваҡыт булыр? (Ҡыш)
-Эйе, афариндар, ҡыш. Ә ҡыш еткәнен һеҙ ҡайҙан белдегеҙ?
-Көн һыуыҡ, ҡар яуа, буран, ел, көрт.
– Эйе , бик яҡшы.
-Әйҙәгеҙ, ҡыш миҙгеленең айҙарын тиҙ генә иҫкә төшөрөп үтәйек әле.
-Декабрь, ғинуар, февраль.
– Эйе, афариндар! Тимәк беҙ һеҙҙең менән ҡыш тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

Балалар, кемдер ишек шаҡый түгелме? Ҡайҙа ҡарайым әле. Ҡар бабай үҙенең ҡар бөртөктәрен ебәргән. Ә унда һеҙгә эштәр ҙә бирелгән. Әйҙәгеҙ, кем беренсе эште ала? Уны ҡарап үтәйек әле.

**1-се эш.**

**А)Ҡышҡы тәбиғәткә генә хас һүҙҙәрҙе әйтеп сығығыҙ?**

-Ҡар, буран, һыуыҡ, көрт, ҡыш бабай, ҡарһылыу, ҡар бабай, боҙ, коньки, саңғы.

**Б) Ҡар һүҙенә тамырҙаш һүҙҙәрҙе әйтеп китегеҙ әле?**

– Ҡар бабай, ҡарһылыу, ҡарлы, ҡар бөртөгө.
-Афариндар, беренсе эште эшләнек.

**2-се эш.**

**А) Өндәр линейкаһы ярҙамында һүҙҙәр яҙ.**

Һеҙҙең алдығыҙҙа линейка ята. Шул линейка ярҙамында һүҙҙәр яҙайыҡ.
-Ҡар, боҙ, сана, тун, бәҫ, ағас.
-Афариндар!
Линейкаларҙы һалдыҡ



**Б) “Балыҡ” һүрәте ярҙамында өндөң урынын билдәләп үт..**

- Ҡыш, шыршы, шәл, ҡояш, йомшаҡ. Был һүҙҙәрҙә “Ш” өнөнөң урынын табайыҡ. Баштамы, урталамы, аҙаҡтамы?



**3-сө эш.**

**А.) Ҡыш миҙгеленә ярашлы һөйләм төҙөргә кәрәк. Һөйләмдәрҙе схемалар менән билдәләргә тәкдим итәм. (Таҡтала һөйләмдәр төҙөйбөҙ)**

/____ _____ .
/____ _____ ______ .
/____ _____ ______ ______ ______ .

Тышта буран.
Мин ҡышты яратам.
Балалар санала, саңғыла, коньки ла шыуалар.
Афариндар!!! Әйҙәгеҙ баҫып торҙоҡ, ял минуты эшләп алайыҡ.

**Б.) Ял минуты “Ап-аҡ ҡына ҡар яуа”**

Ап-аҡҡына ҡар яуа
Ергә йондоҙҙар тама.
Әйҙә бергә уйнайыҡ
Йүгерешеп алайыҡ.
Һикерешеп ҡар өҫтөндә
Аҡ ҡуяндар булайыҡ
Аҡ ҡарҙан ҡарбабайҙы
Өйөп кенә ҡуяйыҡ.

- Бик яҡшы, афариндар!
- Афариндар!

**4-се эш.**



**А) Йәй миҙгеле менән ҡыш миҙгелен сағыштырып үтегеҙ**.

1. Йәйгеһен ямғыр яуа, ә ҡышҡыһын.....(ҡар яуа)
2. Йәйгеһен көндәр оҙон, ә ҡышҡыһын.... (көндәр ҡыҫҡа)
3. Йәйгеһен көндәр йылы, ә ҡышҡыһын ... (көндәр һыуыҡ)
4. Йәйгеһен бөтә ер йәм-йәшел, ә ҡышҡыһын.... (бөтә ер ап-аҡ)
5. Йәйгеһен ағастар япраҡлы, ә ҡышҡыһын .... (ағастар яланғас)
6. Йәйгеһен ҡояш йылыта, ҡыҙҙыра, ә ҡышҡыһын .... (ҡояш яҡтырта, ләкин йылытмай)

**5-се эш .**

**Морфологик таблица менән эш.**

**Ошо таблицаға ҡарап, ҡыш миҙгеле тураһында хикәйә төҙөргә кәрәк. Иғтибар менән ҡарағыҙ әле, ҡыш миҙгеленә тап килгән һүрәттәр бирелгән. Шул һүрәткә ярашлы буш клеткаларға вертикаль рәүештә һүрәттәр ҡуйып, һөйләмдәр төҙөргә кәрәк.**

1. Ҡар яуа. Өй баштарында, ағас ботаҡтарында, юлда, тауҙарҙа, бөтә ерҙә лә ҡар ята.
2. Ҡояш болот аҫтында, әҙ йылыта. Көндәр ҡыҫҡа, төндәр оҙон.
3. Кешеләр йылы тун кейәләр. Шарф, бейәләр, аяҡтарына быйма кейәләр.
4. Балалар санала, саңғыла, конькила шыуалар.
5. Хайуандар, ҡоштар нисек ҡышты үткәрә? Айыу өңөндә йоҡлай. Ҡуян тунын алыштыра. Ҡоштарға тағараҡтар эшләйбеҙ.
6. Китапта ҡыш һүҙе нисек яҙыла? Ҡ-тартынҡы, Ы-һуҙынҡы, Ш-тартынҡы. Ҡыш һүҙендә нисә ижек? (1 ижек) Мин ҡышты яратам!

**III. Йомғаҡлау.**

- Балалар, беҙ бөгөн һеҙҙең менән ҡыш миҙгеле тураһында һәйләштек. Ә хәҙер әйтегеҙ әле кемгә ниндәй эштәр оҡшаны?
- Бик күп эштәр эшләнек, йомаҡтар систек, өндәр линейкаһында һүҙҙәр яҙҙыҡ, балыҡ һүрәте менән өндең урынын билдәләнек, схема буйынса һөйләмдәр төҙөнөк, морфологик таблицала һөйләмдәрҙән хикәйә төҙөнөк.
- Афариндар! Эштәрен эшләп бөткәс, ҡар бабай ҙа бик ҡыуанғандыр инде. Әйҙәгеҙ, саф һауаға сығып ҡар бабайҙы ҡарҙан яһап ҡуяйыҡ, балалар.
- Һау булығыҙ!!!

***Ҡәйепколова З.Ғ.,***
*укытыусы –логопед, «Бала үҫтереү үҙәге – «Ҡурай» балалар баҡсаһы», Сибай ҡалаһы*

Танып белеү эшмәкәрлеге

**«СИБАЙЫМДЫҢ АҪЫЛТАШЫ – ЙӘШМӘ»**

(Өлкәндәр төркөмө)

***Бурыстар:***

***<u>Үҫтереүсе:</u>*** Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы йәшмә ташы менән таныштырыу. Балаларҙың логик фекерләүҙәрен, иғтибарҙарын, хәтерҙәрен, уйлау һәләттәрен үҫтереү. Белем алыуға ынтылыш формалаштырыу, модель – схемалар ярҙамында бәйләнешле телмәр

үҫтереүҙе дауам итеү. ТРИЗ элементтарын ҡулланып балаларҙың логик фекерләүҙәрен үҫтереү.

***Өйрәтеүсе:*** Эҙләнеү-тикшеренеү эшмәкәрлеге аша лупа менән таштарҙың төҙөлөшөн тикшереп ҡарау, таш үҙенсәлектәрен өйрәнеү. Тыуған илебеҙ байлығы йәшмә ташы һәм уның сифаттарын өйрәнеү. Тәбиғәткә булған ЭКО система бәйләнешен күрә белергә өйрәтеү

***Тәрбиәүи:*** Балаларҙы үҙ-ара дуҫ булырға, татыу уйнарға өндәү, йылы мөнәсәбәт булдырыу, бер – береһенә ярҙам итеү теләге уятыу, эшмәкәрлеккә ҡыҙыҡһыныу тойғолары уятыу, йәнһеҙ тәбиғәт өлгөлренә һаҡсыл ҡараш һәм Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү.

***Йыһазландырыу:***

Экран, проектр, ноутбук, компьютер,магнитофон, флешка, тау макеты.

**Материалдар:** «Аҙыҡ сылбыры»на, «Бөжәкте эшләп бөтөр» уйыны өсөн карточкалар, стакандар, ҡәләмдәр,таҡталар, өҫтәлдәр, указка, пластилин,

**Эш ҡоралдары:**

Аҡ халаттар, һыу ҡойолған стакандар, клеенка, лупалар.

***Өлкәләр интеграциялары: (эшмәкәрлектәр буйынса)***

- телмәр үҫтереү эшмәкәрлеге;
- уйын эшмәкәрлеге.

***Һүҙлек эше:***

Йәшмә, флешка, ҡаҙылма байлыҡтар;

***Алдан алып барылған эш:***

“Ирәндек” башҡорт халыҡ әкиәте менән танышыу, модель – схемалар менән эшләү. Йыл миҙгелдәре буйынса әңгәмәләр. Башҡортостандың тәбиғәте, ҡаҙылма байлыҡтары тураһында иллюстрациялар ҡарау. Башҡортостандағы тауҙар, йылғалар, тәбиғи ҡомартҡылар буйынса видео яҙма, таштан эшләнгән сувенирҙар һүрәтен ҡарау. «Малахит» магазинына, таштар музейына экскурсияға барыу.

**Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге барышы**

***Тәрбиәсе уйнап йөрөгән балаларҙың иғтибарын “Хазиналар утрауы” мөйөшөнә йәлеп итә.***

***Тәрбиәсе:*** Тыңлағыҙ әле, балалар, ҡайҙандыр сихри бер көй ишетелә. Йәгеҙ әле эҙләгеҙ, ҡайҙан сыға икән ул көй? (балалар эҙләйҙәр). Беҙҙең хазиналар утрауында бер ҡумта көй сығарып ултыра. Был кемдең ҡумтаһы икән? Һин алып килдеңме, Риана? (Хазиналар утрауы янына килеп ҡулына ала)

***Тәрбиәсе:*** Әйҙәгеҙ асып ҡарайыҡ әле, эсендә нимә бар икән?

(эсенән тәрбисе флешка сығара) Был нимә ул?

**Балалар:** Флешка.

**Тәрбисе:** Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Уны ҡайҙа ҡуялар?

**Балалар:** Компьютерға ҡуялар. Ноутбукка, магнитофонға, телевизорға, музыкальный центрға ҡуялар.

**Тәрбиәсе**: Балалар, ә унын эсендә нимә булыуы мөмкин?

**Балалар:** Мәғлүмәттәр һаҡлана. Унда һүрәттәр була. Яҙыуҙар, Йырҙар. Төрлө яңылыҡтар була. Әкиәттәр ҙә булыуы мөмкин.

**Тәрбиәсе**: Әйҙәгеҙ әле ҡуйып ҡарайыҡ. Ә төркөмдә нимә бар? Нимәгә ҡуяйыҡ?

**Балалар:** Магнитофонғамы әллә ноутбуккамы?

**Тәрбисе флешканы магнитофонға ҡуя.**

Тауыш ишетелә:

*Ҡәҙерле балалар! Мин тау батшаһы Ирәндек булам. Һеҙҙе бик аҡыллы, белемле балалар тип ишеткәйнем. Шуға күрә лә һеҙҙе хазиналар эҙләргә үҙемдең тауҙар иленә сәйәхәткә саҡырам. Унда һеҙ таубатшалығының бөтмәҫ – төкәнмәҫ хазиналарын табырһығыҙ. Ә юлды һеҙгә ошо тылсылмы ҡумта күрһәтер.*

**Тәрбиәсе:** Ә юл күренһен өсөн флешканы балалар инде ҡайҙа ҡуяйыҡ?

**Балаларҙың яуаптары:** компьютерға, ноутбукка ҡуяйыҡ.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ әле, ноутбукка ҡуйып ҡарайыҡ.

**Флешка компьютерға ҡуйыла.**

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, балалар, флешка беҙгә нимә күрһәтә? (экранға ҡарайҙар)

**Балалар:** Был карта. Ул юлды , һандарҙы күрһәтә.

**Тәрбиәсе:** Шулай булғас, балалар, беҙгә юлға сығырға кәрәк. Мин һеҙгә һауа шарына ултырып осорға тәкдим итәм. Һеҙ әҙерме?

***<u>Тын алыу күнегеүҙәре башҡарыла «Һауа шарында осоу»</u>***

Түңәрәккә торҙоҡ,

Ҡулдар менән тотондоҡ,

Тынды алабыҙ– түңәрәк эсенә киләбеҙ,

Тынды сығарабыҙ– түңәрәкте ҙурайтабыҙ.

Шарыбыҙ әҙер булды, осоп та киттек беҙ!

**Тәрбиәсе:** Беҙ һеҙҙең менән ҡайҙа килеп төштөк?

**Балалар:** Яланға. (Музыка уйнай)

**Тәрбиәсе:** Яланға ҡарап нимә әйтергә була, балалар?

**Балалар:**Үләндәр һарғайған.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ әле ялан буйлап атлайыҡ. (музыка яңғырай)

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле тирә-яҡҡа, ниндәй матурлыҡ? Бар тирә-яҡ алтынға күмелгән. (пауза) Ә мин бер ниндәй ҙә тереклек күрмәйемсе бында. Ҡайҙа бөжәктәр, ҡайҙа себен-серекәйҙәр? Ҡайҙа булғандар? Ни өсөн улар юҡ булғандар? (һүрәткә ҡарайҙар)

**Балалар:** Сөнки көҙ еткән, улар көҙ көнө ағас ҡайрыларына инеп йәшенеп бөтәләр, ер аҫтына инеп китәләр. Көҙ көнө йоҡоға талалар.

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, ҡайһылыр бөжәктәр йәшенеп өлгөрмәгән. Ниндәйҙәре йәшенеп өлгөрмәгәнен белер өсөн, һүрәттәрҙе эшләп бөтөргә кәрәк.

**Һүрәт төшөрөү «Бөжәкте эшләп бөтөр»**

**Эш барышын аңлатыу:** Һәр бер балаға берәр карточка таратып бирелә. Ул карточкала бөжәктең ярты кәүҙәһе һүрәтләнгән, яртыһын эшләп бөтөрөр кәрәк. Был уйын балаларҙың күреү һәләттәрен арттыра, иғтибарҙарын үҫтерә, ҡул суҡтарын нығыта.

**Тәрбиәсе**: Ниндәй бөжәктәр килеп сыҡты? Ниндәйҙәре йәшенеп өлгөрмәгән? (Балалар исемдәрен һанап китәләр).Үрмәксе йәшенеп өлгөрмәгән. Был күбәләк. Ә был ҡамҡа.

**Тәрбиәсе:** Был бөжәктәрҙе нисек һаҡларға була?

**Балалар:** Бөжәктәрҙе тапамаҫҡа, үлтермәҫкә. Тәбиғәтте һаҡларға.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, һығымта яһайыҡ.

**Балалар**: Һәр бөжәк тәбиғәттә кәрәк. Уларҙы һаҡларға кәрәк.

**Тәрбиәсе балаларҙың иғтибарын экранға йүнәлтә.** Балалар, беҙ бында ла хазина тапманыҡ бит, артабан юлға сығайыҡ. Картаға ҡарайыҡ әле, ул нимәне күрһәтә? Ҡайҙа барығыҙ, ти?

**Балалар:** Ике һанын күрһәтә.

**Тәрбиәсе:** Ике һаны артында ниндәй сер йәшеренгән икән, белгегеҙ киләме? Һеҙ барырға әҙерме?

**Балалар**: Эйе

**Тәрбиәсе балаларҙы артабан атларға саҡыра:**

*Барабыҙ, барабыҙ,(атлайҙар)*
*Ялан буйлап барабыҙ,*
*Уң яҡҡа ла ҡарайбыҙ, (уңға ҡарайҙар)*
*Һул яҡҡа ла ҡарайбыҙ, (һулға ҡарайҙар)*
*Һикереп тә алабыҙ,(һикереү)*
*Сүкәйеп тә алабыҙ,(сүкәйеү)*
*Ниндәй матур мөғжизә,(ҡулдарҙы ситкә йәйеү)*
*Тирә – яҡ алтын төҫтә.*

***Экранда урман һүрәте күренә. (музыка уйнай)***

**Тәрбиәсе**: Һеҙ нимә күрәһегеҙ?

**Балалар:** Урман

**Тәрбиәсе:** Урман икәнен ҡайҙан белдегеҙ?

**Балалар:** Ағастар һарғайған. Япраҡтар ҡойолған.

**Тәрбиәсе:** Ниндәй миҙгел һүрәтләнгән?

**Балалар:** Көҙ

**Тәрбиәсе**: Көҙ икәнен ҡайҙан белдегеҙ?

**Балалар:** Ағастар һарғайған

**Тәрбиәсе:** Балалар урманда нимәләр йәшәй икән?

**Балалар:** Айыу, төлкө, ҡуян, бүре, тейен, һеләүһен.

**Тәрбиәсе:** Бер һүҙ менән нисек атайбыҙ уларҙы?

**Балалар:** Йәнлектәр, ҡыр хайуандары

**Тәрбиәсе:** Балалар, нисек уйлайһығыҙ, йәнлектәргә йәшәү өсөн нимә кәрәк?

**Балалар:** Аҙыҡ кәрәк.

**Тәрбиәсе:** Һәр йәнлектең, ҡоштоң үҙ аҙығы була. Мин һеҙгә аҙыҡ сылбырын төҙөргә тәҡдим итәм.

**Уйын "Аҙыҡ сылбыры" төҙөү**

( Төлкөнөң, турғайҙың, ҡарсығаның аҙыҡ сылбырын төҙөү. Төҙөгән аҙыҡ сылбыры тураһында һөйләү.)

**Тәрбиәсе**: Нисек итеп аҙыҡ сылбырын һаҡларға?

**Балалар:** Аҙыҡ сылбырын өҙмәҫкә кәрәк.

**Балалар:** Тәбиғәтте бергәләп һаҡларға..

**Тәрбиәсе**: Эшебеҙҙе эшләп тә бөттөк, һаман хазина күренмәй. Әйҙәгеҙ. артабан картаға ҡарайыҡ, Карта нимә күрһәтә?

**Балалар:** Өс һанын күрһәтә.

(Атлап китеү, Экранда тау һүрәте күренә)

**Тәрбиәсе:** Балалар беҙ һеҙҙең менән ҡайҙа килеп еттек?

**Балалар:** Тауҙарға килеп еттек.

**Тәрбиәсе**: Башҡортостандағы ниндәй тауҙарҙы beләһегеҙ?

**Балалар:** Ирәндек, Ирәмәл, Янғантау, Шихан, Ямантау, Торатау

**Тәрбиәсе**:Беҙҙең яҡта ниндәй тауҙар бар?

**Балалар**: Ирәндек тауы бар.

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, балалар, тауҙар ҙа беҙгә ниндәйҙер һынау әҙерләгән.

***<u>Схемаға ҡарап һөйләмдәр төҙөү.</u>***

(Таҡта янына саҡыра. "Ирәндек" әкиәтенән өҙөк һайланған.)

**Тәрбиәсе :** Афариндар, ә без хазина таптыҡмы, балалар?

**Балалар**: Юҡ, тапманыҡ.

**Тәрбиәсе:** *Экрандан тауыш*. Афарин, балалар, әкиәтте яҡшы беләһегеҙ икән. Бына һеҙ эҙләгән ҡумта. Рәхим итеп алығыҙ!

**Слайдта Ҡумта һүрәте күренә. Тәрбиәсе ҡумтаны ала һәм аса башлай.**Музыка ишетелә.

**Тәрбиәсе:** Бында нимә ята, балалар?

**Балалар:** Таш ята.

**Тәрбиәсе:** Ниндәй таш?

**Балалар:** Йәшмә ташы.

***(Тәрбиәсе йәшмә ташын ҡайҙан табалар, шул турала аңлата)***

**Тәрбиәсе:** Балалар, йәшмә ташын тауҙарҙан табалар. Ул борон вулкандар урғылып атылғанда барлыҡҡа килгән икән. Ә хәҙер мин һеҙҙе таштарҙы тикшереп ҡарарға саҡырам. Бының өсөн беҙ лабараторияға барабыҙ. Лабораторияға инер алдынан үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен иҫкә тошороп китәйек.

***Үҙ-үҙеңде тотоу ҡағыҙәләре.***

- Халаттарҙы кейәбеҙ!
- Рөхсәтһеҙ теймәҫкә!

- Бер-беребеҙгә ҡамасауламаҫҡа!
- Ҡулды ауыҙға яҡын алып бармаҫҡа!
- Күҙҙәргә бысраҡ ҡул менән теймәҫкә!
- Эш бөткәс, урындарҙы йыйыштырырға! (инәйек лабораторияға)

**Лаботаторияла эш.**

**Тәрбиәсе:** Таштарҙы лупа аша тикшереп ҡарайыҡ, ҡарар алдынан күҙҙәргә гимнастика эшләп алайыҡ.

Уңға, һулға, өҫкә, аҫҡа.
Түңәрәк тирәләй ҡарайбыҙ
Донъяны яҡшыраҡ курер өсөн
Алыҫҡа, яҡынға ҡарайбыҙ
Күҙ тирәһендә нөктәләргә баҫып
Көс бирәбеҙ уларға.

***1 Лупа менән эш.***

**Эш тәртибе буйынса лупалар менән таштарҙы ҡарайбыҙ.**

**Тәрбиәсе:** Һығымта яһайыҡ әле, лупа менән ҡарағанда нимәләрен күрҙегеҙ?

**Балалар:** Таштың төҙөлөшө асыҡ күренә. Төҫтәре асыҡ күренә. Ҡырҙары күренә.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ әле һығымта яһап китәйек.

(Баларҙың яуаптары)

***2. Таш менән пластилинды сағыштырыу***

**Эш барышы:** Бер ҡулға ташты, икенсеһенә пластилинды тотоп сағыштырыу.

**Тәрбиәсе:** Икәүһен ике ҡулға ҡыҫып тотоғоҙ, нимә булды?

**Балалар:** Пластилин ҡыҫыла, йомшара, йәмшәйә, ә таш юҡ.

**Тәрбиәсе:** Пластилинды ташҡа һуғып ҡарағыҙ әле, нимә булыр?

**Балалар:** Пластилин йәмшәйә

**Тәрбиәсе:** таш еңелме әллә пластилинмы?

**Балалар:** пластилин

**3. Тәжрибә “Ташты Һыуға һалыу ”**

**Тәрбиәсе:** Ташты һыуға һалып ҡарайыҡ инде. Нимә булыр? Таш йөҙәме, юҡмы?

**Балалар:** Таш бата, һыулана. Сөнки ул ауыр.

**4. Уйын «Яҡшы – насар»**

**Тәрбиәсе:** Ә йәшмә ташы нимәһе менән яҡшы, нимәһе менән насар?

**Балалар:** Яҡшы – матур-матур биҙәүес әйберҙәре эшләйҙәр, йорттарҙы биҙәйҙәр.
Яман – ул ҡиммәтле әйберҙәр рәтенә инә, ташты сығарыуы ҡыйын.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, афарин! Ә хәҙер урындарҙы йыйыштырайыҡ, халаттарҙы сисәйек тә лабораториянан сығайыҡ.

***Йомғаклау.***

**Тәрбиәсе:** Балалар бына һеҙ йәшмә ташы менән таныштығыҙ.

***Системалы оператор ысулы буйынса*** ( таҡтала һүрәт тора.)

1. Уртала йәшмә ташы тора?
2. Ҡиммәтле таштар рәтенә инә. (өҫкә)
3. Төрлө төҫтәге минирал ҡатнашмаларынан тора. (кварцтан)
4. Боронғо вулкандарҙан барлыҡҡа килгән.
5. Йәшмә ташынан сувенирҙар, биҙәүес әйберҙәре эшләйҙәр, йорттарҙы биҙәйҙәр.

Тәрбиәсе: Афарин.

***(Экрандан тауыш, Ирәндек һөйләй, мактай)***

***Ҡәҙерле, балалар. Һеҙҙең уңғанлығығыҙға инандым, афариндар! Ысынлапта бик күп беләһегеҙ икән, ҙур рәхмәт. Һеҙ тағы ла ныгыраҡ тыуған ерегеҙҙе яратығыҙ, тәбиғәтте һаҡлағыҙ, улар менән ғорурланығыҙ! Афариндар! Һау булып торогоҙ!***

**Тәрбиәсе:** Балалар, нимә белдек? Ниндәй яңы белем алдығыҙ?

**Тәрбиәсе:** Алан, һиңә бөгөнгө эшмәкәрлек оҡшанымы?

**Тәрбиәсе:** Нимәһе менән оҡшаны?

**Тәрбиәсе:** Нимәһе менән яҡшы булды?
**Тәрбиәсе:** Нимәһе менән насар булды?
**Тәрбиәсе:** Таштарҙың тағы ла ниндәй әһәмиәте бар? Ҡайҙа ҡулланалар?
**Балалар:** Өйҙәр, һәйкәлдәр төҙөйҙәр.
**Тәрбиәсе**: Ә хәҙер мин һеҙҙе ҡоролмаларҙан өйҙәр, һәйкәлдәр төҙөргә саҡырам.

***Маннапова С.Р.,***
*тәрбиәсе, Бала үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## “ҠАР БӨРТӨКТӘРЕ”

**Тема:** Ҡар бөртөктәре (рәсем төшөрөү)

**Маҡсат:** Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Ҡышҡы тәбиғәткә һоҡланыу тойғолары уятыу, миҙгелдәге үҙгәрештәрҙе күрә белергә өйрәтеү. Ҡар бөртөктәрен мамыҡ таяҡсалар менән эшләргә өйрәнеү; ритмға эйәреп хәрәкәттәр эшләү, ябай йомғаҡлау эшләргә өйрәнеү.

**Йыһазландырыу:** төҫлө ҡағыҙ, мамыҡ таяҡсалар, төҫлө буяу, аҡ краска, һыу, ҡар һалынған биҙрә, ҡағыҙҙын эшләнгән ҡар бөртөктәре.

**Дәрес барышы:**

-Һаумыһығыҙ, балалар!

-Һаумыһығыҙ!

-Балалар, әйҙәгеҙ әле ҙур түңәрәк эшләйек. Ҡарағыҙ әле, беҙгә бөгөн ҡунаҡтар килгән. Улар менә һаулыҡ һорашайыҡ! Һаумыһығыҙ!

-Афарин. Ә хәҙер ҡунаҡтарға үҙебеҙ турала һөйләп ишеттерәйек.

Бына танауым,
Был – минең ҡашым,
Күҙем, ҡолағым,
Ә бына башым!

– Афарин, балалар! Ә хәҙер исемдәребеҙҙе әйтәйек.

Мин – Лилиә!

(Һәр балаға туп тотороп исемдәрен әйттереү)

– Афарин, балалар, ултырғыстарға ултырайыҡ.

Әйтегеҙ әле, балалар, ни эшләп тышта һыуыҡ, ҡар яуа? Ниндәй миҙгел?

Эйе, дөрөҫ. Ҡыш.

(Биҙрә менән ҡар индереү).

Балалар, әйтегеҙ әле, минең ҡулымда нимә икән? Эйе, биҙрә. Уның эсендә ҡар индерҙем һеҙгә. Кем әйтә, ҡар ниндәй төҫтә? Тотоп ҡарағыҙ әле, ҡар тағы ла ниндәй? Ҡарҙы ашарға яраймы? Эйе, юҡ, сөнки ул бысраҡ һәм һыуыҡ. Ә яҡындан ҡараһаҡ, ҡар бөртөктәре ниндәй икән? Кем белә? Төрлө-төрлө бер-береһенә оҡшамаған селтәрҙәр. Тәҙрәгә ҡарағыҙ әле, матурмы? (Ҡағыҙҙан эшләнгән төрлө ҡар бөртөктәре эленгән).

Ҡыш пейзажы менән һүрәт күрһәтеү.

Ағастар ап-аҡ. Ҡар бөртөктәре ни өсөн ағастарҙың өстөнә ятҡан икән? Эйе, ағастар ҡыш көнө өшөмәһен өсөн. Балалар, һеҙ ҡар бөртөктәренең һауала нисек осҡанын күргәнегеҙ бармы? Әйҙәгеҙ әле апайҙарға ла күрһәтәйек. (Балалар өйрөлә, ел ыңғайына осалар һәм ергә түшәлеп ятауҙы күрһәтәләр).

Уй, ҡарағыҙ әле балалар, минең ҡулыма ҡар бөртөгө килеп төштө. (ҡар бөртөгө). Балаларға таратып биреү. Әйҙәгеҙ өрөп ҡарайыҡ, осорҙар микән. Афарин.



Ял минуты:
Тау өҫтөндә ҡар-ҡар,
Тау аҫтында ҡар-ҡар,
Шыршы өҫтөндә ҡар-ҡар,
Шыршы аҫтында ҡар-ҡар.
Ә ҡар аҫтында, айыу йоҡлай.
Тш-тш, тауышланмайыҡ.

IV. Ә хәҙер балалар, ҡар бөртөктәрен эшләйек.

Кем әйтә, ниндәй төҫ менән эшләйбеҙ? Эйе, аҡ. (Күк ҡағыҙға, аҡ төҫ менән ҡар бөртөктәрен эшләү). Тәүҙә эшләп күрһәтеү. Балаларға ярҙам итеү.



Балаларҙың эшенә анализ эшләү. Маҡтау.

Балалар, ә беҙҙең эшләгән ҡар бөртөктәре иреймe? – Юҡ, сөнки был һүрәт.

Әйҙәгеҙ әле, беҙҙәләге ҡарҙы ҡарайыҡ әле. Ҡар ирeп бөтөп бара. Ни өсөн икән? – Эйе, сөнки группала йылы.

Иғтибарығыҙ өсөн, ҙур рәхмәт!



***Мусина Ә.М.,***
***Шәғәлина Ә.И.***
*тәрбиәселәр, 72-се һанлы балалар баҡсаһы,*
*Учалы ауылы, Учалы районы*

## БАЛАЛАР БАҠСАҺЫНДА “ТӨЛКӨ МЕНӘН ТОРНА” ӘКИӘТЕН СӘХНӘЛӘШТЕРЕҮ ӨСӨН СЦЕНАРИЙ

(уртансылар төркөмө өсөн)

**Маҡсат:** башҡорт телендә телмәр үҫешенә булышлыҡ итеү, сәхнәлә үҙеңде тота белергә өйрәтеү, халыҡ әкиәттәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу, тиҫтерҙәргә , ҡарата хөрмәт, дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре тәрбиәләү.

**Ҡатнашалар:**
Әкиәтсе
Торна
Төлкө
Торна ҡыҙҙар

*Ҡурай моңо. Торналар тауышы. Әкиәтсе малай сәхнәгә инә.*

**Әкиәтсе.** Хәйерле көн, ҡәҙерле тамашасылар! Әкиәт иленә рәхим итегеҙ!

Борон-борон заманда, ҡарға – команда, өйрәк үрәтник булған замандарҙа йәшәгән, ти, торна менән төлкө.

***Торналар бейеүе.***

**Әкиәтсе.** Торна менән төлкө бик дуҫ булған. Улар бергәләп уйнағандар.

**Торна.** Төлкө дуҫ, минең һеңлеләр матур уйын беләләр. Йә, туғандарым, күрһәтегеҙ әле.

***Торна ҡыҙҙар һамаҡлай:***

*Беҙ, беҙ, беҙ инек,*
*Беҙ ун ике ҡыҙ инек.*
*Баҙға төштөк, май ашаныҡ,*
*Аҡ келәттә бал ашаныҡ,*
*Бер таҡтаға теҙелдек,*
*Таң атҡансы юҡ булдыҡ!*

*Түңәрәктә ултырған ҡыҙҙар бер-береһенең баш бармаҡтарын тотошалар ҙа беҙ тигән саҡта аҫҡа эйеләләр, икенсе тапҡыр беҙ тигәс баштарын күтәрәләр. Юҡ булдыҡ тигән һүҙ әйтелеү менән, бармаҡтарын ысҡындыралар ҙа һиҙҙермәй генә "күл" артына инеп юғалалар.*

**Торна.** Иии, минең һеңлеләр! Матурҙар, шуҡтар үҙҙәре.

**Әкиәтсе.** Төлкө торнаны ҡунаҡҡа саҡырған.

**Төлкө.** Торна дуҫым, миңә ҡунаҡҡа кил. Шундай итеп һыйлармын.

**Торна.** Ярай, килермен.

*Музыка. Торна менән төлкө йорттарына таралыша.*

*Төлкө "бутҡа" бешерә.*

**Әкиәтсе.** Төлкө бутҡа бешергән дә уны йоҡа ғына итеп таҡтаға һылап ҡуйған. Торна килгән.

**Торна.** Сәләм, дуҫым! Мин килдем.

**Төлкө.** Сәләм, дуҫҡайым. Әйҙә, рәхим ит. Аша, дуҫым, аша, их, тәмле!

**Әкиәтсе.** Торна, бахыр, суҡыштары менән таҡтаны туҡылдатып, соҡоп ҡараһа ла, бер ҙә эләктерә алмаған. Шул арала төлкө бутҡаны ялап та ҡуйған.

*Төлкө эсен һыйпай. Кирелә.*

**Торна.** Рәхмәт, төлкө дуҫ, иртәгә үҙең миңә ҡунаҡҡа кил.

**Әкиәтсе.** Шулай тигән дә торна ҡайтып киткән.

*Төлкө һуҙылып төшөп ята. Ҡойроғон һыйпай. Торна бутҡа бешерә. Музыка.*

**Әкиәтсе.** Икенсе көн төлкө торнаға килгән. Торна бутҡа бешереп, үҙе нәҙек, үҙе тәрән сүлмәккә һалып ҡуйған.

**Торна.** Аша, дуҫым, аша.

**Әкиәтсе.** Төлкө, күпме генә тырышмаһын, нәҙек муйынлы сүлмәктән ашай алмаған, ас көйө ултырған. Ә торна суҡышын сүлмәккә тығып ебәрә лә ашай ҙа ашай икән. Бутҡаны ашап бөткән, ти.

**Торна.** Төлкө, мине ҡунаҡҡа саҡырып таҡтаға һалынған бутҡаңды үҙең ашап бөтөрҙөң, ә мин ҡарап ултырҙым. Мин дә һине шулай һыйларға булдым. Ашҡа – аш, ташҡа – таш, хәйләгә – хәйлә.

**Әкиәтсе.** Ошолай итеп, торна менән төлкөнөң дуҫлығы бөткән, ти. Дуҫлыҡ менән шаярырға ярамай.

*Әкиәтсе уртала, төлкө менән торнаны етәкләй, торна ҡыҙҙар сыға.*

*Тәрбиәсе ролдәрҙе башҡарыусылар менән таныштырғандан һуң,”Әкиәт” йыры башҡарыла.*

**“Әкиәт” йыры**

Булат Пирғәлин көйө,
Әлфиә Шәғәлина һүҙҙәре



1. “Борон-борон заманда
Йәшәгән әбей, бабай”.
Онотолоп тыңлайбыҙ –
Әкиәт һөйләй апай.



2. Әкиәттә бар айыу,
Әкиәттә бар ҡуян.
Хәйләкәр төлкөбикә
Барыһын алдап ҡуйған.



3. Әкиәттәр тыңлаһаҡ
Яҡты булыр уйыбыҙ.
Әкиәттәге кеүек
Һәр саҡ уңған булырбыҙ!

**_Рамаҙанова Г.Р.,_**
*тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## «МИНЕҢ ҠУРСАҒЫМ»

**Маҡсат:** ҡурсаҡтарҙы тасуирларға һәм сағыштырырға, һөйләмдәр төҙөргә өйрәтеү, күҙәтеүсәнлек, иғтибарҙы үҫтереү, «Ҡ» өнөн нығытыу, ҡурсаҡтарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Һүҙлек эше:** *купшы, кунаҡ.*

**Типик грамматик конструкциялар:** *Заһиҙә ҙур ҡурсаҡ. Зөлфиә бәләкәй ҡурсаҡ. Ул купшы күлдәк кейгән.*

**Йыһазландырыу:** ҙур һәм бәләкәй ҡурсаҡтар.

**Дәрес барышы**

-Балалар, ҡурсаҡ шиғыр һөйләй,әйҙәгеҙ,тыңлайыҡ.
Сәп-сәп-сәпәкәй,
Минең ҡурсаҡ бәләкәй,

Ҡулын күтәргән була ла,
Сәпәкәй иткән була.

Ошо шиғырҙы отоп алайыҡ..(Шиғыр һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарып, балалар шиғыр ятлайҙар, «Ҡ»өнөн нығытып үтәләр.)

- Ҡарағыҙ әле был ҡурсаҡҡа.Уның исеме Зәһиҙә.( Ҡурсаҡтың исемен ҡабатлау).
- Зәһиҙә өҫтөнә нимә кейгән?
- Зәһиҙә күлдәк, ойокбаш, туфли, кейгән.
- Зәһиҙәнең күлдәге ниндәй?
- Зәһиҙәнең күлдәге матур, ҡупшы. Зәһиҙәгә бер үҙенә уйнауы күңелһеҙ.Ул үҙенә ҡунаҡҡа иптәш ҡыҙын саҡырған. ( Тәрбиәсе ишекте шаҡыған тауыш сығара һәм ҡулына икенсе ҡурсаҡ ала).

– Балалар, бына Зәһиҙәнең иптәш ҡыҙы ла килеп етте. Уның исеме Зөлфиә. ( Исемен ҡабатлау.)

– Иғтибар менән Зөлфиәгә ҡарайыҡ әле.Ул нисек кейенгән?

– Зөлфиә тун, башлыҡ кейгән.

-Дөрөҫ, тышта һалҡын булғанға, ул йылы кейенгән. ( Уйын майҙансығында ҡурсаҡтар өсөн ике яһалма бүлмә эшләнгән. Өй йыһаздары төрлө размерҙа.)

-Балалар, әйҙәгеҙ ҡурсаҡтарҙы сағыштырайыҡ.Ҡайһы ҡурсаҡ ҙур?

-Зәһиҙә ҙур ҡурсаҡ.

-Ә Зөлфиә бәләкәй ҡурсаҡ.

-Бүлмәләр нимә менән айырыла?

-Бер бүлмә ҙур ,ә икенсе бүлмәлә бәләкәй өй йыһаздары ҡуйылған.

-Зәһиҙәне һәм Зөлфиәне һеҙ ҡайһы бүлмәләргә индерер инегеҙ?

-Зәһиҙәне бәләкәй бүлмәгә индерер инек.

– Ни өсөн?

-Сөнки Зәһиҙә ҙур ҡурсаҡ,ә Зөлфиә бәләкәй ҡурсаҡ.

-Афарин , балалар! Хәҙер ҡурсаҡтар менән уйнарға була.

**Сюжетлы-ролле уйын:** «Ҡурсаҡтарҙы ашатайыҡ».

***Ризванова А.Р.,***
*Детский сад № 1, с.Раевский, Альшеевский район*

## КОНСПЕКТ
## ОРГАНИЗОВАННОЙ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЙ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ В ФОРМЕ КВЕСТА В ОБЛАСТИ ПОЗНАВАТЕЛЬНОГО РАЗВИТИЯ НА ТЕМУ «В ПОИСКАХ СЮРПРИЗА» ДЛЯ ДЕТЕЙ ПОДГОТОВИТЕЛЬНОЙ ГРУППЫ

**Цель:** создание условий для развития познавательной и речевой активностей детей.

**Задачи:**

**-образовательные:** закреплять и расширять знания детей о РБ, формировать умение и навыки детей вести беседу на башкирском языке, формировать социально-коммуникативные умения и навыки;

**– развивающие:** уточнять и активизировать словарь по теме «родной край», упражнять в правильном оформлении речевого высказывания на башкирском языке, развивать логическое мышление, самостоятельность и инициативность, сообразительность;

**-воспитательные:** приучать работать в команде**,** способствовать сплочению детского коллектива, развивать интерес к **башкирскому языку.**

**Активный словарь:** тирмә, нардуған, ҡыш, Өфө, сәк-сәк, туп, саңғы, сана.

**Пассивный словарь:** ҡумыҙ.

**Интеграция по видам деятельности:** игровая, коммуникативная, двигательная.

**Оборудование:** интерактивная доска, проектор, экран, ноутбук, сундук, письма-конверты с заданиями, аудиозапись с мелодией кубыза, аудиозапись к играм «Тирмэ», «Нардуган».

**Демонстрационный материал:** башкирский народный музыкальный инструмент – кубыз, 7 лепестков цветка курая из бумаги жёлтого цвета, иллюстрации к сказкам «Медведь и пчелы», «Хитрая лиса», карточки-рисунки «артикуляционное упражнение», «одежда», «капельки», «лыжи», «санки», карточки с башкирскими буквами .

**Раздаточный материал:** на подгруппу детей: пазлы к сказкам «Медведь и пчелы», «Хитрая лиса», башкирские платки для игры.

**Предварительная работа:** чтение **башкирских народных сказок**; экскурсия в мини– музей в детском саду.

Ход квеста:

**Воспитатель**: Здравствуйте! Һаумыһығыҙ, балалар, ҡунаҡтар!

*Дети проходят в муззал.*

**Воспитатель**: Балалар, я хотела показать вам сегодня башкирский музыкальный инструмент, только почему-то никак не могу его найти. Что же делать? А какие башкирские музыкальные инструменты вы знаете? Балалар, вы поможете мне найти музыкальный инструмент?

**Дети**: Поможем!

**Воспитатель**: Рәхмәт, балалар! Вместе мы найдем его гораздо быстрее!

**Воспитатель**: Если хотите найти пропажу, нам нужно отправиться в путешествие, во время которого я предлагаю вам выполнить 7 заданий, за каждое из них буду давать по одному лепестку курая. Эти лепестки будут ключом к сундуку, в котором и лежит наша пропажа и еще сюрприз для вас.

**Воспитатель**: Балалар, вы хотите отправиться в путешествие? Тогда в добрый путь! Хочу вам напомнить: чтобы успешно выполнить все задания, вам нужно быть сегодня особенно дружными, внимательными и работать в команде. Все 7 заданий будут вот в таких пластиковых конвертах разного цвета. Нам надо выбрать, кто будет собирать эти лепестки. Какую башкирскую считалку мы знаем?

По считалке:

1,2,3.
Баҙға төштөм, май ашаным,
Таң атҡансы, юҡ булдым.

**Воспитатель**: Лепестки будет собирать …

**Комната № 1. Муззал.**

**Воспитатель**: У меня в руках первый конверт с заданием: «Если правильно и быстро назовете ответы викторины на башкирском языке, тогда получите первый лепесток курая».

**Викторина «Назови быстро на башкирском языке».**

Воспитатель: 1. Как называется Республика, в которой мы живём (Башҡортостан).
2. Какое сейчас время года? (ҡыш).
3. Столица Республики Башкортостан (Өфө).
4. Сладкое национальное блюдо башкир (сәк-сәк).
5. Кисломолочный продукт из кобыльего молока (ҡымыҙ).

**Воспитатель**: Первый лепесток курая ваш. Афарин! С первым заданием вы успешно справились!

**Где можно найти 2-й конверт с заданием подскажет карточка.**

*Показываю карточку с артикуляционным упражнением.*

**Комната № 2. Кабинет логопеда.**

**Игра «Назови правильно буквы башкирского алфавита».**

*Воспитатель показывает на листе А4 башкирские буквы.*

**Воспитатель**: Афарин, со вторым заданием вы тоже справились отлично и получаете второй лепесток курая.

**Воспитатель** : А теперь отгадайте загадку, и вы узнаете, где спрятан следующий конверт с заданием:

Он стрелой летит порой,
Может просто прыгать вскачь,
Связан с каждою игрой
Мой веселый круглый…
*( мяч).*

**Воспитатель**: Как будет на башкирском языке?(туп)

Вы догадались, где спрятан конверт?

**Дети**: В физкультурном зале.

*Идем в физзал.* **Комната № 3.**

*Конверт лежит в ящике с мячами.*

**Воспитатель**: Давайте посмотрим *(вскрывает конверт и читает)*: «Вы получите следующий лепесток курая, если сможете изобразить без карандашей, красок и бумаги древнее жилище башкир – юрту».

**Воспитатель**: Как же это сделать? Подумайте вместе.

Песню знаем про юрту? Стих?

*Если дети не могут долго найти ответ, воспитатель предлагает им вспомнить башкирскую народную игру »Юрта» и таким образом выполнить задание.*

***Под музыку проводится игра «Тирмә».***

*Беҙ күңелле, шат балалар,*
*Уйнайбыҙ ҙа бейейбеҙ.*
*Ҙур түңәрәккә йыйылып,*
*Матур тирмә яһайбыҙ.*

**Воспитатель**: Афарин, и с этим заданием вы справились. Получаете ещё один лепесток.

**Воспитатель**: Дальше куда идти вы узнаете, ответив на вопрос.

Подберите слово наоборот к слову ЗИМА (лето).

**Воспитатель**: Подумайте вместе, куда нужно идти.

Какое помещение у нас в садике похоже на лето?

Где у нас круглый год зеленые растения? Правильно, в игротеке много зелёных растений.



**Комната № 4. Игротека.**

*Рядом с растениями дети находят конверт, воспитатель читает задание:* «Дорогие ребята, если вы знакомы с башкирскими сказками, то с этим заданием вы справитесь очень легко».

Для выполнения этого задания вам нужно разделиться на 2 команды.

Выбирайте карточки. Детям предлагаются карточки («саңғы”, “сана”).

Задание по пособию «Бабушкины сказки».

Собрать из пазлов башкирские сказки.

*Фрагменты лежат на столах.*

*На мольбертах – иллюстрации сказок.*



**Воспитатель**: Ребята, что у вас получилось? Что вы собрали? Какая сказка?

Скажите на башкирском языке, как будет волк, лиса, старик, пчелы, медведь.

**Воспитатель**: Афарин, с этим заданием вы тоже справились отлично и получаете ещё один лепесток курая.

**Воспитатель**: Куда дальше нам идти, подскажет карточка.

*На карточке изображены капельки.*

**Воспитатель**: Что означают капельки, как вы думаете?

Может, в нашем саду есть группа по названию «Капельки»?

Значит, куда мы пойдем?

**Комната № 5. Группа «Капельки».**

*У доски дети находят конверт с заданием.*

*Воспитатель открывает конверт, читает задание:*

«Назови правильный ответ». Проводится интерактивная игра.

**Воспитатель:** Послушайте вопрос. На доске будут варианты ответов. Вам нужно назвать по-башкирски цифру, которая указывает на правильный ответ. Например, …. После выполнения задания дети получают следующий лепесток курая.

**Воспитатель:** Куда нам идти нам поможет карточка-подсказка.

На карточке нарисованы куртка и варежки.

**Воспитатель:** Куда мы идем?

**Комната 6. Раздевалка.**

Дети находят конверт с заданием. «Рассказать стихотворения на башкирском языке».

*Предлагаю сесть на скамейки.*

**Воспитатель**: Кто хочет рассказать стихотворение?

*После каждого стихотворения дети хлопают.*

*Получают следующий лепесток курая.*

**Воспитатель:** Афарин, и с этим заданием мы успешно справились! Получайте ещё один лепесток курая.

**Воспитатель**: Прислушайтесь. Что вы слышите? Как вы думаете, куда нам надо идти?

*Звучит башкирская музыка.*

**Комната 7. Муззал.**

**Воспитатель:** Мы вернулись в муззал!

*На бумбоксе лежит конверт.*

А вот и конверт. Письмо: У башкирского народа много праздников: и летние, и весенние, и осенние, и зимние.

Какой башкирский зимний праздник вы знаете? Ответив на этот вопрос и показав игру, вы получите последний лепесток курая.

**Воспитатель:** Я вам предлагаю поиграть в башкирскую хороводную игру «Нардуган».

**Башкорт халык уйыны «Нардуған» .**

Балалар түңәрәк яһап торалар, уртала – алып барыусы. Ул балаларға берәй бирем табырға тейеш, мәҫәлән, «мин бейергә булдырам», «мин ҡырҡырға булдырам», «мин сабырға булдырам» һ.б. Балалар түңәрәк буйлап атлап йөрөйҙәр:

Һин уртала, ә беҙ ситтә
Әйләнәбеҙ, нардуған.
Ни эшләһәң, ни күрһәтһәң,
Мин шуны булдырам.

*Алып барыусы (утын ярыу хәрәкәттәре яһай, ә балалар урында торған килеш уны күҙәтәләр):*

Нардуған, нардуған,
Утын яра булдырам.
*Балалар биремде ҡабатлайҙар:*
Нардуған, нардуған,
Улай мин дә булдырам.
*Йәки:*
*Алып барыусы тура тороп күрһәтә (шулай уҡ бейеү, бесән сабыу, утау һ.б. хәрәкәттәр яһай), ә балалар урында торған килеш яңы бирем ала:*
Нардуған,нардуған,
Туп-тура тор һин, туған.
*Балалар биремде ҡабатлайҙар:*
Нардуған, нардуған,
Улай мин дә булдырам.
*Алып барыусы үҙ урынына икенсе баланы һайлап ала һәм уйын ҡабатлана.*
(А. Ҡобағошов «Салауат күпере» китабынан).
**Воспитатель**: Афарин, балалар! Вот мы собрали все 7 лепестков. Проверьте, правильно? Вспомните, в начале нашего путешествия я вам говорила, что лепестки являются ключом к сундуку.
**Воспитатель**: Посмотрите вокруг, может быть, вы увидите, что нам нужно найти.
*Дети в музыкальном зале находят сундучок, а он закрыт.*
**Воспитатель**: Сундук закрыт, а у вас ключ – лепестки курая. Как вы думаете, что мы будем делать дальше? Дети выкладывают на рисунок на крышке сундука лепестки курая и считают на башкирском языке.
*Воспитатель открывает сундук.*
**Воспитатель**: Что это? (кубыз).
**Воспитатель:** Кубыз на башкирском языке будет ҡумыҙ. Повторите, пожалуйста.
**Воспитатель**: Ну, вот и нашёлся наш кубыз, ребята. А всё благодаря тому, что вы были сегодня самыми дружными, внимательными. Афариндар!
**Воспитатель**: Послушайте, пожалуйста, как звучит кубыз.
*Включается музыку кубыза.*
**Воспитатель**: Послушайте мелодию кубыза. На следующих занятиях мы с вами еще много раз услышим музыку кубыза.
**Воспитатель**: Понравилось вам наше квест-путешествие? Какое задание для вас было самым легким? сложным?Для многих….Кому-то было трудно….
Мне тоже очень понравилось наше квест-путешествие. Вы работали в команде дружно, вы многое знаете. Афариндар!
**Воспитатель**: Для вас еще есть тут сюрприз: чак-чак. Как будет чак-чак по-башкирски? Чак-чак передам вам в группу попробовать за столом с остальными ребятами и с воспитателями. Нам пора возвращаться в группу. «Һау булығыҙ!» – говорим нашим гостям.
*Возвращаемся в группу.*

*Салахутдинова Ф.Ф.,*
*МАДОУ Центр развития ребенка детский сад*
*№30 «Улыбка», г. Октябрьский*

# КОНСПЕКТ ОРГАНИЗОВАННОЙ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЙ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ ПО ПОЗНАВАТЕЛЬНОМУ РАЗВИТИЮ В СТАРШЕЙ ГРУППЕ НА ТЕМУ: «БАШКИРСКИЙ НАРОДНЫЙ МУЗЫКАЛЬНЫЙ ИНСТРУМЕНТ КУРАЙ»

**Цель:** Ознакомление детей с башкирским национальным инструментом «Курай»

**Задачи:**

- Познакомить детей с музыкальным башкирским инструментом Курай
- Познакомить детей с легендой о «Курае».
- Закрепить знания детей Государственной символики Республики Башкортостан.
- Совершенствовать речь детей, умение свободно высказывать свои мысли (составить предложения), обогащать словарный запас.
- Воспитание патриотических чувств: ценностного отношения к прекрасному; воспитание любови к малой Родине и музыкальному искусству своего народа, любознательность.

**Демонстрационныйматериал:** видеопроектор со слайдами, башкирские музыкальные инструменты (курай, кубыз, думбыра), флаг республики Башкортостан.

Д: ***(Англия)***
В: Верно. Скажите, как называются люди, которые живут в **Англии?**
*Д:(ответы детей)*. Их называют – **англичане.**
В: А столица Англии как называется, давайте прочитаем.
Д: город Лондон.
В: Что вы можете рассказать об этой стране?
Д: ответы детей.
В: Ребята, а вы знаете, что в каждой стране есть свои денежные банкноты, монеты. А чем отличаются банкноты от монет?
Д: (Банкноты из бумаги, монеты из металла и они имеют разные формы).
В: А как называются российские деньги? (Купюры)
В: Ребята, а в Англии главная денежная единица – купюры это фунты стерлингов, а монеты – пенсы.
В: А сейчас, я вам предлагаю выполнить задания по финансовой грамотности.
Игра : « Дорого – дешево»
Цель: познакомить с понятиями « дороже \дешевле»
Материал : карточки с разнообразным товаром .
Ход игры:
1.предлагая детям пары карточек ,определить ,какой товар дешевле, какой товар дороже.
2.предложить детям выбрать карточки с самыми дешевыми товарами , с самыми дорогими товарами
3.предложить выбрать ряд товаров по возрастанию стоимости ,от самого дешевого до самого дорогого
В: Молодцы! Вы справились с заданием.
В:Следующая остановка это наша Родина. Что вы можете рассказать о нашей стране?
Д: Ответы детей
В: Посмотрите, мальчики и девочки у меня в руках куб «Любознайка», где даны разные задания, и я думаю что вы сможете их выполнить так как вы знаете историю, культуру нашей страны.
В: Ребята, кто это? (Башкирская матрешка)
В: А как вы узнали, что это башкирская матрешка, а не русская?
Д: По элементам башкирского узора, цвета…
В: А здесь, что вы видите? Эмблема, какого города здесь нарисовано?
Д: Ответы детей (прочитают название города и эмблема г. Уфа)
В: А что такое Уфа?
Д: Столица Республики Башкортостан
В: Ребята, посмотрите, а здесь живут сказочные персонажи,
Игра с персонажами

В: Ребята, все вы любите читать и слушать сказки, а как вы думаете, какие бывают сказки?

Д: Авторские и народные.

В: Да, молодцы.

В: А на этой стороне нашего куба что вы видите?

Д: Шары разных цветов, название цветов на англ.яз

В: А сейчас, предлагаю назвать цвета шаров на английском языке ()

Д: Ответы детей

В: Почему рассказывая о нашей Родине мы разговаривали на трех языках?

Д: Ответы детей (Так как проживают люди разных национальностей)

В: Да, наша Родина многонациональная, здесь живут люди, которые говорят на разных языках, не смотря на то что у них своя культура, свои традиции, они живут все дружно и мирно. Завершая эту тему я, хотела пригласить вас составить пословицу о дружбе, но вот потерялась моя карточка и не могу полностью составит (Дружба – великая сила)

Д: Дети за столом из данных слов составляют слово «дружба» из конструкторов серии «Забияка». И составляют главное слово

В: Да, ребята, справились вы со всеми заданиями, молодцы. А сейчас, мальчики и девочки, возьмите свои стульчики и сядьте в круг.

В: Рефлексия.: Ребята вам понравилось занятие? Что особенно вам понравилось? Какие трудности у вас были при выполнении заданий? В какие страны мы с вами отправились в путешествие? Что нового узнали?

Һ.Һеҙҙең менән сәйәхәт итеү бик оҡшаны! Рәхмәт һеҙгә! Мин һеҙгә бүләктәр алып килдем!

(раздает значки)

В: Спасибо, молодцы!

***Усманова С.Р.,***

*музыка етәксеһе, Баланы үҫтереү үҙәге – «Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## “ЯНСЫҠ БАЙРАМЫ”

*Залда янсыҡтар күргәҙмәһе һәм проектор ҡуйылған.*

*Залға ҡыҙҙар йүгереп килеп сығалар.*

**Беренсе ҡыҙ**: Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ “Дүртмөйөш”уйынын уйнап алайыҡ.

**Ҡыҙҙар**: Әйҙәгеҙ, Раушания, һин, уртала!

*“Бейеүсе” көйөнә бейеп, уйынды уйнайҙар.*

*Уйын аҙағында ике ҡыҙ килеп инә, янсыҡ тотоп алғандар.*



**Икенсе ҡыҙ**: Беләһегеҙме, миндә нимә бар?

**Ҡыҙҙар**: белмәйбеҙ, нимә ул?

**Икенсе ҡыҙ**: Янсыҡ.

**Ҡыҙҙар**: нимә ул янсыҡ?

**Өсөнсө ҡыҙ**: өләсәйем “Янсыҡ” байрамына әҙерләнә. Әйҙәгеҙ, киттек уның янына, үҙенән һорайыҡ.

*Өләсәй күренә.Ҡыҙҙар уның янына ултыралар.*

**Икенсе ҡыҙ**:Өләсәй, ҡыҙҙар янсыҡ тураһында белергә теләй.

**Өләсәй:** Һаумыһығыҙ ҡыҙҙарым! Әйҙә аңлатып китәйем әләйһә. Янсыҡ-ауыҙын бөрмәләп, баулап тегелгән бәләкәй тоҡсай. Янсыҡтың нисек килеп сығыуы тураһында ҡыҙыҡлы легенда бар, тыңлағыҙ, һөйләйем.

“Урал” көйө яңғырай, проекторҙа легендаға бәйле һүрәттәр күрһәтелә.

**Өләсәй**: Борон башҡорттар яуҙа күп ҡатнашҡандар. Бер ваҡыт бик матур ерҙе яулап алғандан һуң, ерҙең матурлығына, ундағы ҡыҙҙарҙың һылыулығына һоҡланып, тыуған яҡтарына ҡайтмай ҡалғандар.Туғандары, ата-әсәләре хат яҙғандар, ҡайтыуҙарын һорағандар, әммә яугирҙар һаман ҡайтырға теләмәгән. Бер ваҡыт туғандары йөҙ йәшлек аҡһаҡалға барғандар, ярҙам итеүен үтенгәндәр. Аҡһаҡал оҙаҡ уйлағандан һуң былай тигән: "Ирәндек һәм Ирәмәл тауҙарынан, Йүрүҙән буйҙарынан, Дим далаларынан үләндәр йыйып алып килегеҙ". Үләндәрҙе йыйып, тоҡҡа тултырып яугирҙәргә сапҡындарҙан ебәргәндәр. Тоҡто асҡандан һуң, яугирҙәрҙең күҙҙәренән йәштәр килеп сыҡҡан, күңелдәрен һағыш баҫҡан һәм улар ҡайтыр юлға сыҡҡан.Шунан бирле яуға оҙатҡанда, яугирҙарға янсыҡ биреп ебәргәндәр.Улар тыуған яҡтарына һәр саҡ һағынып ҡайтыр булған, сөнки тыуған яҡтан да ҡәҙерлерәк ер юҡ донъяла!

**Ҡыҙҙар**: өләсәй, ниндәй янсыҡтар була?

**Өләсәй**: бына тыуған яҡтың янсыҡтарын ҡарағыҙ, тыуған яҡтың еҫе сыға янсыҡтарҙан (үләндәр тултырылған янсыҡтар)

*Балалар янсыҡтарҙы тотоп ҡарай.*

**Өләсәй**:хәҙер ҙә һалдаттарҙы оҙатҡанда янсыҡ бүләк итеү йолаһы бар, ҡарап китәйек әле.

*Залға ағинәй һәм малайҙар сыға.*

**Ағинәй:**Уландарым, тыуған яҡҡа имен-һау әйләнеп ҡайтығыҙ.Тыуған илегеҙҙе онотмағыҙ, ошо тыуған яғығыҙҙың хуш еҫле янсыҡтарын һеҙгә бүләк итәбеҙ.

Һәр бер малайға ясыҡ бүләк итә, малайҙар мәҡәл әйтә.



**Беренсе малай**:Үҙ илем алтын бишек!

**Икенсе малай**: Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул!

**Өсөнсө малай:** Ат туйған ерендә, ир-егет тыуған илендә!

**Дүртенсе малай**: Алтын-көмөш яуған ерҙән, тыуып үҫкән ил яҡшы!

**Бишенсе малай:** Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫле!

*Бөтәһе бергә*:Тыуған илеңде онотма!

**Ағинәй**:Аҡ юл һеҙгә, уландарым! Тыуған илегеҙ һеҙҙе көтә!

Малайҙар "Һыбайлылар" бейеүен башҡара, сығып китәләр.

Өләсәй: Янсыҡтар бүләк итеү хәҙерге ваҡытта ла бар.Туй көнөндә еңгәй ҡәйнештәренә янсыҡ бүләк итә. Әйҙәгеҙ ҡарайыҡ әле, ҡәйнеш янсыҡтары нисек була икән?

*Залға еңгәй һәм ике ҡәйнеш сыға.*

**Беренсе ҡәйнеш**: Еңгәйебеҙ өйҙәме
Бүләктәре түрҙәме?
Ҡәйнештәрең бүләк көтә,
Беҙгә бүләк тейәме?

**Еңгәй**: Еңгәйегеҙ өйҙәлер
Бүләктәре түрҙәлер.
Йомағыма яуап әйтһәң,,
Һеҙгә бүләк тейәлер?

Йомаҡ:

Аҡлы-суҡлы,төрлө епле
Ситтәре матур уҡалы.
Мәрйендәр менән биҙәлгән,
Һәр саҡ янымда йөрөгән,
Нимә булыр ул ҡәйнеш?

**Икенсе ҡәйне**ш:
Аҡлы-суҡлы,төрлө епле
Ситтәре матур уҡалы.
Мәрйендәр менән биҙәлгән,
Һәр саҡ янымда йөрөгән,
Янсыҡ булыр ул еңгәм.
**Еңгәй**: һай, афарин, ҡәйнештәрем!
Бына һеҙгә янсыҡтарым!
Еңгәй янсыҡтар бүләк итә.



**Ҡәйнештәр**: рәхмәт, еңгәй!

**Өләсәй**: бына былары (күргәҙмәлә янсыҡтар) заманса янсыҡтар-телефондар өсөн эшләнем.Ҡыҙҙар, кемегеҙ "Урал батыр" эпосын һөйләп күрһәтә, шуға бүләк итәм.

***Ҡыҙҙар "Урал батыр" эпосынан өҙөктәр һөйләй***.Ҡыҙҙарға янсыҡ бүләк ителә.

**Өләсәй**: шулай итеп, һеҙҙең менән янсыҡ төрҙәрен ҡарап сыҡтыҡ. Әйҙәгеҙ ҡыҙҙарым ҡунаҡтарға ла янсыҡтарҙы күрһәтәйек.

***Янсыктар менән дефиле.*** Матур көй аҫтында барлыҡ ҡатнашыусылар үтә.

Иң беренсе
-ҡыҙҙар –заманса янсыҡтар менән
-өләсәй –тыуған яҡ янсыҡтары менән
-ағинәй, малайҙар – яугир янсыҡтары менән
-Еңгәй, ҡәйнештәр – ҡәйнеш янсыҡтары менән

**Өләсәй**: Хөрмәтле ҡунаҡтар! Янсыҡ байрамында ҡатнашыусылар! Барыҙға ла бөгөнгө байрамда ҡатнашыуығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!Тыуған илебеҙҙе яратып, ҡәҙерләп, йолалаларыбыҙҙы һаҡлап, үҙ телебеҙҙә һөйләшеп йәшәйек!

***Усманова С.Р.,***
*музыка етәксеһе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

## БИШЕК – ҘУР ДОНЪЯҒА ИШЕК

(балалар баҡсаһының өлкән төркөмдәре өсөн фольклор байрамы)

**Маҡсаты:**
– балаларҙы бишек йырҙары, халыҡ уйындары менән таныштырыуу;
-балаларҙың бишек йырҙары буйынса белемдәрен киңәйтеү;
-һүҙлек байлығын арттырыу, хәтерен, иғтибарын үҫтереү;
-башҡорт халкының ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** аудиояҙмалар (шиғыр "Бишек йыры", бала илаған тауыш), ҡурсаҡтар, бишек, биләүҙәр, бәләкәй өҫтәлдәр, шылтыраҡтар.

Зал байрамса биҙәлгән.Ултырғыстар ҡуйылған. Ултырғыска ҡурсаҡтар һалынған. Бишек эленгән. Бишектә аҡ биләүгә төрөлгән "бала" ҡурсаҡ ята.

Моңло талғын көй барышында шиғыр уҡыла, аудиояҙма.

*Бишек йыры. Иң беренсе тапкыр*
*Ишеткән йыр– ергә тыуғас та.*
*Илауынан туктаһын,тип,балам,*
*Көйләнгәндер беҙгә ул башта.*
*Әлли-бәлли,әлли-бәлли-бәү тип,*
*Ғәзиз әсәм уны көйләгән.*
*Ошо йыры менән әсәйҙәр бит,*
*Сабыйына бәхет теләгән.*
*Бишек йыры-беҙҙең иң беренсе*

*Йырлаган йыр донъя йөҙөндә.*
*Әсәйемә ҡушылып бишегемдә*
*Көйләгәнмен уны үҙем дә.*
*Телебеҙҙе асҡан йыр ул беҙҙең,*
*Әлифбаһы тыуган телдең ул.*
*Бишек йыры-иң бөйөк йыр ерҙә,*
*Ғүмерҙәрҙе башлай беҙҙең ул!*



Бала илаған тауыш ишетелә. Әсәй кеше йүгереп сәңгелдәк янына килә. Шул ваҡыт малайҙар һәм ҡыҙҙар килеп инә.

**Беренсе бала**: Мин бәүетәм бәпәйҙе.

**Икенсе бала**: Юҡ, мин бәүетәм.

**Әсәй:** Балалар, бәпәйҙең йоҡоһо бөткәндер, әйҙәгеҙ уны үҫтереп, әүрәтеп, уйнатып алайыҡ. Ҡыҙҙар, һеҙ ҙә ҡурсаҡтарығыҙҙы уйнатып алығыҙ. (Ҡыҙҙар ҡурсаҡтарын ала, бишектә ятҡан көйө һыйпап, “үҫтерә”ләр, иркәләйҙәр).

**Бергә:**
Үҫә-үҫә бәпкәйем,
Үҫә-үҫә ҙур була.
Ҡояш кеүек һөйкөмлө,
Үҙе һүҙгә йор була.
**Беренсе бала:**
Әлли-бәлли итә ул
Йоҡлап ҡына китә ул.
Йоҡолары туйып алһа,
Уйнап ҡына китә ул.
**Икенсе бала:**
Бәллә-бәлли бәү генә,
Бәпес бәләкәй генә.
Бөтә белгән һөнәре
Сәпәк-сәпәкәй генә.
**Өсөнсө бала:** (сәпәкәй итә)
Сәп-сәп сәпәкәй,
Минең ҡустым бәләкәй.
Сәпәкәй иткән була ла
Үҙе ҡыуанған була.
**Дүртенсе бала:**
Сәп-сәп сәпәкәй,
Минең ҡустым бәләкәй.
Сәпәкәй иткән була ла,
Ҡулын күтәргән була.
**Әсәй:** Әйҙәгеҙ, бәпәйҙе һикертеп алайыҡ.
Малайҙар һамаҡ әйтә, әсәй баланы һәм ҡыҙҙар – ҡурсаҡтарын һикертә.
**Беренсе малай:** Бәпес,бәпес,бәпестәй,
Бәләкәй генә бәпестәй.
Бәпелдәтеп һөйөргә.
Арҡалары йәтештәй.
**Икенсе малай:**
Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бәләкәй генә бәпес тә.

Һикереп тора, уйнап тора.
Ҡойоп ҡуйған кәртешкә.
**Өсөнсө малай:**
Текер-текер йөрөһөн.
Дегәнәк тә теймәһен.
Күп кешеләр уны һөйһөн,
Күҙҙәр генә теймәһен.
***Әсәй:*** Һай, афариндар! Бик матур һамаҡтар беләһегеҙ икән. Әйҙәгеҙ,калғай баҫтырып ҡарайыҡ әле.
(иҙәндән атлатып ҡараған булалар, бергәләп һамаҡлайҙар)
Әйҙә балам ҡалғай баҫ,
Ҡалғай-ҡалғай,
Ҡалғай баҫа, ҡалғай баҫа.
Тәтәй була,тәтәй була.
Ҡалғай баҫһаң, тәпәй була.
Баҫалмаһаң төпәй була.(йығылды тигәндә, тотоп алалар)
***Әсәй:***Беҙҙең малайҙар буласаҡ атайҙар, бәпестәрҙе уйнатып алһындар әле.
Малайҙар ҡурсаҡтарҙы алып, бармаҡ уйындары уйнайҙар.
“Бутыр-бутыр бутҡа”.
Бутыр-бутыр бутҡа бешә,
Уртаһына май төшә.
Килгән ҡунаҡ беҙгә төшә,
Беҙгә төшмәй, кемгә төшә
Майлы бутҡа беҙҙә бешә.
Атайға ҡалаҡ, әсәйгә ҡалаҡ,
Ағайға ҡалаҡ, апайға ҡалаҡ,
Бәпәйгә ҡалаҡ ҡайҙа?
Йәки :
Баш бармаҡ бау ишә,
Имән бармаҡ имән киҫә,
Урта бармаҡ утын яра,
Атһыҙ бармаҡ ат ҡыуа,
Сәтәкәй бармаҡ сәй эсә.
Малайҙар ҡурсаҡтарҙы арҡаларына һалып ат булып һикерткән булалар (түңәрәк буйлап)
Бала илаған тауыш ишетелә.
***Әсәй:***Әйҙәгеҙ, бәпәйҙе тәтәй менән әүрәтәйек әле.
Малайҙар көй аҫтында төрлө тәтәйҙәр менән уйнайҙар.
(шылтыраҡтар менән инструменталь ансамбль)



*Башҡорт халыҡ көйө “Ҡарабай”*
***Әсәй:*** Һай, үҫкәндәрем, афариндар! Бына бәпәйҙе арыттыҡ. Әйҙәгеҙ, матур ғына итеп биләүгә төрәйек тә, бишеккә һалып бәүетербеҙ. Һеҙ бөтәгеҙ ҙә бәләкәй саҡта бишектә үҫкән балалар. Бишек– бала өсөн бетеү ул, баланы һаҡлау урыны.Бишектә әсәһенең йырын тыңлап, бәүелеп үҫкән бала сәләмәт, ныҡ, көслө рухлы була. Бишекте өй түренә элгәндәр, матур япмалар менән ҡаплағандар, бетеү ҡуйғандар. Буш бишекте бәүетергә, бала ятҡанда эргәһендә йүгереп уйнарға ярамай, шулай уҡ шәп итеп бәүетергә ярамай.
Әйҙәгеҙ хәҙер ҡыҙҙарҙы ярыштырып алайыҡ. Биләүҙәргә ҡурсаҡтарҙы төрәйек әле, кем беренсе бөтөр икән?

(күңелле көй аҫтында бәпәй төрәләр)

**Әсәй** :Һай уңғандарым, барығыҙ ҙа матур итеп төрөп тә ҡуйҙығыҙ.Ҡыҙҙар әйҙәгеҙ, бәпәйҙәрҙе тынысландырып алайыҡ.Ҡурсаҡтарҙы ҡулдарына алып, бәүелткән булалар.

**Беренсе ҡыҙ:**
Йоҡла-йоҡла һин, балам
Һине бишеккә һалам.
Һин йоҡоға киткәнсе
Үҙем янында ҡалам.

**Икенсе ҡыҙ:**
Бәү-бәү бәпәйем,
Хәҙер килә әсәйең,
Хәҙер килә атайың.
Улар килгәнсе бәүетә,
........апайың.(исемен әйтә)

**Өсөнсө ҡыҙ:**
Әлли-бәлли –бәү-бәү,
Әлли-бәлли –бәү-бәү.
Йоҡла инде йом күҙең,
Минең матур йондоҙом.

*Ҡыҙҙар башкарыуында ҡурсактар менән бейеү.*

Әсәй бәпәйҙе бишеккә һала.

**Әсәй:** Әйҙәгеҙ, бергәләшеп “Бишек” йырын йырлап йоҡлатайыҡ.

*Күмәкләп бишек йырын йырлайҙар.*

Бала йоҡлағас, йыр бөткәс, бишекте япма менән ҡаплайҙар, бармаҡтарын иренгә ҡуйып “тсс” тиҙәр. Аяҡ осона ғына баҫып, сығып китәләр. Моңло ғына бишек көйө яңғырай.

***Фаткуллина Ю.И.***
*старший воспитатель МБДОУ детский сад № 2 с.Месягутово.*

## ИНТЕГРИРОВАННОЕ ЗАНЯТИЕ «ПУТЕШЕСТВИЕ В ВОЛШЕБНЫЙ МИР»

**Образовательные области**: ведущая – «Познавательное развитие», а также «Художественно-эстетическое развитие», «Физическое развитие», «Социально-коммуникативное развитие», «Речевое развитие» и «Конструирование»

**Тема занятия:** интегрированное занятие «Путешествие в Волшебный мир»

**Возрастная группа:** старшая подготовительная группа.

**Цель занятия:** закрепление знаний о названиях видов транспорта на трех языках через использование инновационных технологий.

**Задачи занятия:**

**Образовательные:** закрепить названия цветов спектра на трех языках.

**Развивающие:** развивать умение последовательно выполнять действия в соответствии со словесной инструкцией педагога.

**Воспитательные:** воспитывать интерес к башкирскому, русскому и английскому языкам; воспитывать умение договариваться друг с другом в коллективной деятельности.

**Дополнительные задачи:**

**Техническая:** возводить строительные конструкции в соответствии со словесной инструкцией.

**Изобразительная:** закреплять умения рисовать одновременно двумя руками.

**Игровая:** в игре “По цепочке” последовательно передавать предмет друг друну, учитывая левую, правую сторону.

**Дидактическая:** развивать графомоторные навыки, межпорлушарное взаимодействие, зрительно-моторную координацию (глаз-рука, способность точно направлять движение), через нейроигры тренировать у детей память, внимание, слуховое внимание, развивать мышление, мелкую моторику.

**Словарная работа:** a transport, a tractor, a train, a motor ship, a plane; a car, a ship, a rocket, a bike, a wheel; транспорт, трактор, поезд, теплоход, самолет, машина, корабль, ракета, мотоцикл, колесо; транспорт, трактор, поезд, теплоход, самолет, машина, карап, ракета, мотоцикл, тәгәрмәс.

**Планируемый результат занятия**: дети выполняют различные задания, узнают новые формы и приемы, умеют договариваться друг с другом через игр.

**Подготовительная работа:** рассматривание предметных картин по теме, развивающие игры.

**Материалы и оборудование:** здоровьесберегающие технологии, музыкальная физкультминутка; ИКТ, письменные и устные упражнения, нейроигры, аудио и видеоматериалы. ИКТ оборудование: проектор, телевизор, ноутбук, колонка, таичборд, баннер «цветные клетки», машина, иллюстрации по теме «Транспорт».

**1. Организационно-мотивационный этап**



- Здравствуйте, дети! Здравствуйте!

-Ребята, мы с вами начнем наше занятие с приветствия. Повторяйте за мной. Какие вы молодцы! (Аудиозапись. Приветствие на столе).

**2. Основной этап**

**2.1. Этап постановки проблемы**

-Я приглашаю вас в Волшебный мир. В этом волшебном мире мы с вами будем говорить на 3-х языках. Кто я? (Башкирка)

Перед вами волшебные площадки.

**2.2. Этап ознакомления с материалом**

№1. Первая площадка. Первая площадка:

-Звуки транспортных средств, которые вы услышали, крепим на таичборд.

-Дети, какие звуки слышны? (Машина, самолет, мотоцикл и тд.)

-Молодцы!

-Как будет мотоцикл на английском? (A bike)

-Как будет машина на английском? (A car)

-Как будет самолет на английском? (A plane)

-Молодцы! Мы с вами сегодня будем говорить о транспорте.

№2. Вторая площадка.



Работа с “Игрой – модуль”. Слушайте загадку:

1.Не птица, а летает

И поднимается до звёзд. (Ракета) – каждый стрит ракету (индивидуальная работа)

-А теперь строим ракету из модулей.

-Дети, что у нас получилось? Ракета. Молодцы!

-Строим машину из модулей:



2.Руль, педаль и тормоза,

И четыре колеса.

Двигатель, багажник, шины

И мотор есть у.... (Машины) – строим вместе (групповая работа)

-Мы сейчас с вами вместе построим одну большую машину.

-Ребята, что у нас получилось? Машина.

-Машина на английском как будет? (a car). Молодцы!

**2.3. Этап практического решения проблемы**

№3. Третья площадка:

-Кто я? Английская девушка.

-Продолжаем нашу работу.

-Слушаем задание: найди контур картинки и соедини их (Find the outline of the picture and connect them).

**Find the outline of the picture and connect them**

**Найди контур картинки и соедини их**

**Һүрәтенең контурын тап һәм уларҙы тоташтыр**











Хорошо, молодцы, и с этим заданием вы справились.

-А теперь немножко отдохнём.

Физкульминутка. Physical minute (На английском)

Let’s do the exercises with a very nice boy. Repeat after him, please.

-Давайте сделаем упражнения с очень милым мальчиком. Повторяйте за ним, пожалуйста

Well done! Wonderful!

-Отличная работа! Замечательно! Продолжаем работу, присаживаемся на свои места.

№4. Четвертая площадка. Работа в трех группах (фронтальная работа)

-Переворачиваем бумагу. Нужна помощь пилоту, шоферу, командиру. Pilot, driver, commander need help – work in three groups (front-line work)

-Поможем, дети? Да.

-Мы с вами разделимся на три группы. Первая группа: Аделина, Алмаз и Арсен; вторая группа: Мирас, Ангелина и Илюза; третья группа: Амина, Вильдан и Асия. Взяли фломастеры и начинаем работу: нужно начертить пунктирные точки по линии.

Первая группа: пилот водит……самолёт;

Вторая группа: водитель водит…..машину;

Третья группа…..капитан водит……корабль.

**The pilot of the plane**

**Пилот самолета**

**Самолеттың пилоты**





**Car driver**
**Водитель машины**
**Машина йөрөтөүсе**





**The commander of the ship**

**Командир корабля**

**Корабль командиры**







-Молодцы, ребята.

№5. Пятая площадка. Игра “Цветные квадраты”

-Кто я? Русская.

-У каждого из вас на столе есть цветные клетки, для этого нужно все виды транспорта поставить по цвету. Я буду говорить цвет транспорта на английском, а вы будуте правильно распределять по клеткам (Red, yellow, blue, green).

-Молодцы, с этим заданием тоже справились.

№6. Шестая площадка. Нейроигра



-Ребята, посмотрите на экран телевизора. Что вы видите? Сломалось колесо машины, нужно починить.

-Правильно, чтобы починить колесо, нужно двумя руками одновременно обвести контур колеса. Для этого сначала руками повторим это упражнение. Приступаем, начинаем обводить.





– Молодцы! Справились и с этим заданием.

**3. Заключительный этап**

№7. Седьмая площадка. Игра по цепочке.

-У машины снова сломалось колесо, нужно починить. Починим, ребята? Да…

-Тогда строимся по цепочке и повторяем за мной. По цепочке для машины передаем: ключи, бензин, документ. Раз, два, три, четыре…Молодцы!

-Теперь эта машина ваша. Можете забрать в группу.

-Молодцы, ребята, вы сегодня хорошо занимались.

-Вот и мы с вами в детском саду.

-Дети, вам понравилось занятие? Да...

-Что больше всего понравилось?

-Что было тяжело? Всё было легко.

-Алмаз, тебе что понравилось? Мне понравилась игра с модулями.

-Илюза, тебе что понравилось? Больше всего понравилось обводить колесо двумя руками.

-Ребята, теперь эта машина ваша. Можете забрать в группу. До свидания!

***Фәттәхова Р.Ш.,***
*5-се һанлы мәктәп,*
*Иглин ауылы, Иглин районы*

## ПО ООД В СТАРШЕЙ ГРУППЕ
## КВЕСТ-УЙЫН «БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ ТАРИХЫ ҺӘМ МӘҘӘНИӘТЕ»

***Маҡсат:*** балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәниәте менән таныштырыуҙы дауам итеү.

***Талаптар:***

1. *Белем биреү маҡсаты:*

Фонемалар өҫтөндә эш: башкорт теленең үҙенсәлекле өндәре әйтелеше өҫтөндә эште дауам итеү; фонематик ишетеү һәләтлектәрен үҫтереү.

Грамматик яҡтан һөйләмде дөрөҫ төҙөү: күрһәтеү алмаштарын ҡуллана белеү (был тирмә); һүҙлек запасын байытыу.

Тирмә, милли башҡорт аштары, башҡорт халҡының милли кейеме тигән һүҙҙәр менән таныштырыуҙы дауам итеу.

Ғәилә тураһында балаларҙың булған белемдәрен ҡабатлау, ғаилә ағзаларының исемдәрен нығытыу.

Шәжәрә төшөнсәһен формалаштырыу.

2. *Үҫтереү маҡсаты:* Ике тел күренештәрен күҙәтеү (башҡорт һәм урыҫ), сағыштырыу, дөйәмләштереү нигеҙендә тел һиҙемләүҙе, хәтәрҙе үҫтереү, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү, балаларҙың бер-береҡһенә ҡарата иғтибарын үҫтереү.

3. *Тәрбиәүи:* Башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, башҡорт халҡының мәҙәниәте, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре аша телгә ҡыҙыҡһыныу үҫтереү, төркөмдә ыңғай атмосфера тыуҙырыу, дуҫлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

***Методы:*** күргәҙмәлелек + һүҙ методы + практик метод

***Методик алымдар:*** тылсымлы мәл, проблемалы ситуция, баһалау, һорауҙар һәм яуаптар, тәржемә итеү, яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, уйын алымы, һүрәт ҡарау.

*Дети заходят в зал. Воспитатель приветствует детей.*

Һаумыһығыҙ, балалар! (ответы детей)

Хәйерле көн, дуҫтарым,
Бәләкәй ҡояштарым
Нурҙар һибеп торайыҡ,
Күңел асып уйнайыҡ.

-Балалар, һеҙ китаптар яратаһығыҙмы? Ребята, а вы любите книги? (ответы детей). Сегодня я хочу показать вам одну необычную книгу. Это лепбук. Ой, ребята, что же случилось с книгой? Улий на обложке есть, а пчелки нет *(на экране появляется пчелка).*

Пчелка : «Һаумыһығыҙ, балалар. У меня случилась беда. С моей книги пропали все картины. Я улетела их искать, но никак не найду. Помогите мне пожалуйста”.

-Ребята, поможем пчелке? (ответы детей). Тогда нам нужно отправиться в путешествие. Предлагаю пойти пешком *(под музыку идут на помощь пчелке).*

-Ребята, я вижу первую картину из книги *(показывает картину юрты на А4).* Посмотрите на картину, что на ней нарисовано? *(ответы детей – юрта).* Афарин, балалар, посмотрите на экран. Юрта –это жилище башкир. Башкирский народ использовал для украшения своего жилища вышитые ковры, полотенца, праздничную одежду, украшения *(слайды внутреннее убранства юрты).* Ребята, скажите пожалуйста, как будет на башкирском языке слово “юрта”? (*ответы детей – тирмә).* Афарин, балалар. Василиса, повтори, как будет слово юрта на башкирском языке?

-А сейчас, я предлагаю вам пройти к столу и украсить юрты орнаментами *(дети располагают орнаменты по своему желанию).* Посмотрите, ребята, какие красивые юрты у вас получаются. А вы знаете, что у каждого орнамента есть свое название: *кускар* – бараньи рога, *сердечко* – знак гостеприимства, *бегущая волна*– символ течения жизни, ограда –символ

дома*(пока дети выкладывают орнаменты, на экране слайд юрты, а педагог рассказывает об орнаментах).*

-Афарин, балалар, теперь мы можем вернуть первую картину в книгу. А нам пора двигаться дальше. А вот и вторая картина. Посмотрите, что на ней нарисовано? *(ответы детей – башкирские национальные блюда).*



Афарин, балалар.

Я предлагаю вам сесть на подушки.

Ребята, тут у нас башкирская кухня. Посмотрите, какой красивый самовар, посуда. А вы знаете, что башкирский народ считался самым гостеприимным. И когда они встречали гостей, накрывали столы. А к чаю готовили сладости, хотите мы с вами приготовим сладкое блюдо к чаю.

А какие башкирские национальные блюда вы знаете?

*(ответы детей – бишбармаҡ, катыҡ, корот, айран, ҡымыҙ, бауырһаҡ).*

Я предлагаю вам поиграть в игру. Посмотрите на экран. Игра называется «Четвертый лишний» «Дүртенсе артыҡ». Как вы думаете, какое блюдо на экране лишнее и почему? *(ответы детей: «пицца», не башкирское национальное блюдо).*



– Афарин балалар. Бик яҡшы уйнап алдыҡ. Вернем картину с башкирскими национальными блюдами в книгу.

– А нам пора двигаться дальше. Интресно, какая же картина ждет нас дальше? Ребята, посмотрите на картину. Что здесь нарисовано? *(ответы детей – национальные костюмы башкирского народа).*

-Афарин, балалар. На картине мы видим национальные костюмы башкирского народа – башҡорт халҡының милли кейемдәре. Ребята, сегодня вы и сами красивых национальных костюмах. Для того, чтобы вспомнить элементы башкирского национального костюма, предлагаю вам поиграть. Девочки будут называть элементы мужского национального костюма, а мальчики назовут элементы женского национального костюма. *(Платье, камзул, селтәр или нагрудная повязка. Тюбетейка, штаны, камзол, мужская рубаха*). Во время игры педагого предлагает вспомнить названия элементов костюмов на башкирском языке.

-Афарин, балалар. Башҡорт халҡының милли кейемдәрен яҡшы беләһегеҙ. А сейчас предлагаю вам немного отдохнуть *(готовый танец детей, либо импровизация).*

-Мы немного отдохнули, вернем картину в книгу и будем двигаться дальше.

-А вот и последняя картина нашей книги. Ребята, а сейчас садитесь на стулья. Посмотрите, что нарисовано на картине? *(ответы детей – дерево).*



– Это не простое дерево, а радословная. Это дерево рассказывает нам об истории нашей семьи, нашей родословной: наших родителях, братьях, сестрах, бабушках и дедеушках. Каждый человек должен знать свою родню, свою семью, свою родословную –шәжәрә. Давайте вместе повторим – шәжәрә. Алиса, повтори за мной – шәжәрә.

– Ребята, корни дерева – это наши предки;ствол – это наши бабушки, дедушки, ветки – это мамы и папы, братья и сестры, а на самом верху дерева находитесь вы сами. Предлагаю

вам поиграть в пальчиковую игру “Минең ғаиләм”. Ребята, а хотите я вам расскажу о своей семье?

*Рассказ педагога о своей родословной.*

-Был мин. Это я . Минең исемем Роза. Меня зовут Роза. Это моя мама. Минең әсәйем. Это мой папа. Минең атайым. Был өләсәй. Моя бабушка. Был олатай. Мой дедушка. Ребята, я хочу, чтобы вы тоже знали свою родословную –шәжәрә. И я вам предлагаю побеседовать дома с родителями, узнать о своих бабушках, прабабушках и дедушках. Мне будет интересно послушать каждого из вас и помочь вам составить свое родословное дерево – шәжәрә. Нам пора вернуть картину в книгу.

А вот и наша пчелка нашлась. Пора и пчелке занять свое место на обложке. Ребята, мы сегодня сделали доброе дело. Вернули все картины в книгу. Кому мы сегодня помогли? А какие картины мы нашли? (рефлексия: уточнить что нашли, спросить переводы на башкирский и т.д.)

Спасибо вам, ребята, за то, что вы такие отзывчивые и добрые. И я хочу подарить вам смайлики *(предлагает из коробочки выбрать понравившийся смайлик)*. Я рада, что ваши смайлики все улыбаются, а это занчит, что у вас хорошее настроение. А нам пора с вами прощаться. Һау булығыҙ!

***Хакова Э.Р.,***
*12-се һанлы “Алтынсәс”*
*балалар баҡсаһы, Дүртөйлө ҡалаһы*

## ***“БАЛ БАЙРАМЫ”***

**Маҡсат:**

1) балаларҙы башҡорт балы һәм кешенең балды тәү башлап тәмләп ҡарауы тураһында легенда менән таныштырыу;

2) балаларҙың иғтибарын, ишетеү һәләтен, телмәрен үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу;

3) балаларҙа дөрөҫ һәм матур һөйләшергә өйрәнеү теләге тыуҙырыу;

4) башҡорт халыҡ сәнғәтенә, башҡорт халыҡ әкиәтенә, башҡорт теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, һөйөү уятыу; тере тәбиғәткә иғтибар, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Тере йәнде күҙәтеүҙән ләззәт алыу.

**Йыһазландырыу:** айыу аҡланы, һый-хөрмәт теҙеп ултыртылған өҫтәл, бер яҡта умартасылыҡ, бал төрҙәре, умартасы кәрәк яраҡтары; алғы стенала “Ҡотло булһын бал байрамың!” тигән яҙыу.

**Барышы:**

**Алып барыусы:** Хәйерле иртә алһыу таңдарға,
Хәйерле иртә зәңгәр һыуҙарға,
Хәйерле иртә зифа талдарға,
Хәйерле иртә барлыҡ дуҫтарға,
Хәйерле иртә наҙлы елемә,
Хәйерле иртә тыуған еремә.

Хөрмәтле ҡунаҡтар! Бөгөн һеҙҙе айыу ағай, һәм айыу апай үҙ аҡланлығына “Бал байрамына” саҡыра. Рәхим итегеҙ!

**Айыу ағай:** Ни эшләй унда мейесең,
Ҡасан бешә бәлешең?

**Айыу апай:** Бәлеш әҙер, атаһы,
Ҡалды уттан алаһы.

(ишек шаҡыйҙар)

**Айыу апай:** Ишек шаҡыйҙар, бабай,
Ҡунаҡтар килә,буғай!

**Алып барыусы:** Һаумыһығыҙ, айыу ағай! Һаумыһығыҙ, айыу апай! Бөгөн һеҙҙә байрам икәнлеген ишетеп, һеҙҙең аҡланлыҡҡа килдек.

**Айыу ағай:** Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, түрҙән уҙығыҙ! (балалар, бал ҡорттары инәләр). Тағы ла оҙаҡламай байрамға, урмандаш дуҫтарым ҙа килеп етәрҙәр.

**Айыу апай:** Бөгөн беҙҙә бал байрамы. Шифалы бал тураһында әңгәмәләшеп, уның төрҙәре менән танышып үтәрбеҙ. Ә нимә һуң ул бал?

**1бала:** Башҡорт балы-бик шифалы!
Башҡорт балы-ныҡ файҙалы!
Башҡорт балын ашаһағыҙ,
Сирләмәҫһегеҙ, ныҡ булырһығыҙ!

**Алып барыусы:** Балалар, ә беҙгә балды кемдәр бирә? Дөрөҫ, бал ҡорттары. Улар балды кеше өсөн генә түгел, ә үҙҙәренә ҡышҡа запас итеп йыя. Һәм ҡыш буйы балды ашап сыға.

**2 бала:** Беҙҙең баҡсала йәшәй,
Иртә таңдан эш башлай,
Гөлдәрҙән-гөлгә ҡунып,
Бик күп бал йыйып ташлай.

**3 бала:** Кескәй генә, төймә генә
Был бал ҡорто.
Үҙе матур, үҙе йәтеш
Торған йорто.

**4 бала:** Умартасы бабай уны
Маҡтап туймай
Ҡыуанысынан бал ҡорто
Былай уйлай:

**Бал ҡорто:** Ә мин тағы алыҫтарға
Осормон да,
Иң-иң нәфис сәскәләрҙе
Ҡосормон да,
Иң-иң тәмле, иң-иң шифа
Йыйырмын бал.
Умартасы бабай
Мине оҙатып ҡал.

**Алып барыусы:** Балалар, кешеләр бал ҡорттары өсөн өйҙәр төҙөйҙәр. Нисек атала ул? (умарта). Һәр бер умартала бал ҡорттарының өлкән татыу ғаиләһе йәшәй. Ә бал ҡорттарының ғаиләһендә ниндәй ҡорттар була? Инә ҡорт, меңгә яҡын ата ҡорт, бер нисә мең эшсе ҡорт. Уларҙың һәр береһенең үҙ эше була. Берәүҙәре нектар йыя, икенселәре өй һаҡлайҙар, өсөнсөләре, өй таҙарта (елләтә). Шулай итеп, бал ҡорттары һәрбереһе үҙен, үҙенең эшен яратып башҡара.

**Йыр "Мин үҙемде яратам".**

**Алып барыусы:** Бына шулай балалар, бал ҡорттары шул тиклем эшсән, уңған. Ер йөҙөндә бер ниндәй бөжәк тә,бал ҡорттарының умарта эсендә башҡарған эштәрен ҡабатлай алмай. Шуға ошо егәрле бөжәк-йортҡа һәйкәл ҡуйылған.

**Алып барыусы:** Киң беҙҙә ҡыр-аҡландар,
Гөл-сәскәгә ҡапланған.
Гөж-гөж итә, гөж итә,
Бал ҡорто осоп китә.
(бал ҡорттары инәләр).

**Бейеү "Бал ҡорттары".**

**1 бал ҡорто:** Беҙ, беҙ-бал ҡортобоҙ,
Баҡса-урманда йортобоҙ,
Шифа балды йыябыҙ,

Кәрәҙҙәргә ҡуябыҙ.

**2 бал ҡорто:** Гөл-сәскәләргә ҡунып,
Уларҙан һут алабыҙ,
Шуға ифрат тәмле шул
Беҙҙең сәскә балыбыҙ.

**3 бал ҡорто:** Йүкә сәскәһенән дә
Йыябыҙ беҙ һары бал.
Башҡортостан илендә
Баллап сәйҙәр эсеп ал.

**4 бал ҡорто:** Бал ҡорттары йыр йырлай,
Мең-мең сәскә йымылдай.
Шаулап тора умарта,
Бал кәмемәй, гел арта.

**Айыу ағай:** Рәхмәт һеҙгә ҡортҡайҙар.

**Йырлы-уйын "Кәрәҙгә бал йый".**

**"Дусым" йыры** (ҡуяндар башҡарыуында).

**Айыу апай:** Ишек шаҡыйҙар, бабай,
Ҡунаҡтар килә, буғай!

**Ҡуян:** Хөрмәтле ағаҡайым,
Бал байрамы менән ҡотлайым!
Гөрләп үтһен бал байрамың
Көйлө барһын тормошоң!

**Айыу ағай:** Рәхмәт һиңә, шеш ҡолаҡ,
Шатлыҡтар булһын уртаҡ.

**Айыу апай:** Рәхим ит, әйҙә түргә,
Ағайың менән бергә.

**Ҡуян:** Тра-та-та, тра-та-та,
Ҡуян мәжлес ярата!
(ишек шаҡыйҙар).

**Инә айыу:** Һаубыҙ әле, Төлкө дуҫ,
Әйҙә, әйҙә, түргә уҙ.

**Төлкө:** Ҡотло булһын бал байрамың!
Айыу мәңге йәшәһен!

**Айыу ағай:** Рәхмәт ҡотлауҙарыңа,
Ултыр табын ҡырына.

**Төлкө:** Шыу, энекәш ситкәрәк,
Апайыңа урын кәрәк.

(Бүләген тапшыра һәм Ҡуянды ситкә этеп, Айыу янынан урын ала).

**Алып барыусы:** Ҡуян шаулап тормоған,
Эстән генә уйлаған:
"Беренсе булыу шарт түгел
Икенсе лә яраған".

**Алып барыусы:** Ә кешеләр бал ҡорттары менән ҡасан дуҫлашты икән? Нисек уйлайһығыҙ?

**Балалар:** Беҙ белмәйбеҙ, апай. Үҙең һөйлә әле.

**Алып барыусы:** Тыңлағыҙ, әләйһәң. Ул бына былай булғандыр. Борон-борон заманда бер һунарсы һунарҙан һыбай ҡайтып килгән, ти. Бер саҡ уның аты бышҡырып, үрәпсеп, артҡа сигенә башлаған. Һунарсы ни булды тип алан-йолан ҡаранһа-ни күҙе менән күрһен-яҡын ғына бер ағас башында айыуҙы шәйләп ҡала. "Нимә эшләй был ағас башында? " -тип текләберәк ҡараһа, айыу ниндәйҙер ҡорттар менән алыша, ти. Ул үҙенең алғы тәпәйҙәрен ағас өңөнә тығып ала ла мөңрә-мөңрәп ялай икән. Һунарсы уҡ-һаҙағын алып та ебәргән, айыу гөрҫ итеп ергә ҡолап та төшкән. Үкергән януарға тағы ла бер нисә уғын тоҫҡап атҡан егет.

Тайыш табан тынып ҡалғас, кеше унының эргәһенә килеп иғтибарлабыраҡ ҡараһа-ни күҙе менән күрһен-хайуандың алғы тәпәйҙәрендә ул ашаған нәмә ҡалған. Хуш еҫ килгәс, һунарсы тәмләп ҡарай. Был нәмәнең бик тәмле икәнен белгәс, ул бал ҡорттары ҡунған ағасҡа үҙ тамғаһын һала ла ҡайтып китә. Шулай булғандыр, ахырыһы, кешенең балды тәү башлап ҡарауы.

**Алып барыусы:** Беҙ балды ниндәй тинек?

**5 бала:** Үҙе тәмле, үҙе туҡлыҡлы, үҙе шифалы был тәбиғәт бүләге. Унының тураһында күп әҫәрҙәр ижад иткәндәр.

**Бала:**

Гөлфиә Юнысова **“БАШҠОРТОСТАН”.**

Башҡортостан, һин беҙҙең
Тыуған, үҫкән илебеҙ.
Беҙгә икмәк, өй биргән,
Һыуын эскән еребеҙ.

Тауың бирә һары алтын,
Ерең бирә ҡара алтын.
Балыҡҡа бай һыуҙарың,
Ашлыҡҡа бай ҡырҙарың.

Ағасҡа бай урманың,
Таҡыр һинең юлдарың,
Матур һинең ҡырҙарың,
Батыр һинең улдарың.

Башҡортостан, беҙ һине
Һөйәбеҙ, яратабыҙ,
Һин бит тыуған еребеҙ,
Әсәйебеҙ, атабыҙ!

Киң Рәсәй илендә
Үҫкән матур сәскә һин,
Дуҫ илдәр менән бергә
Сәскә булып йәшә һин!

**Алып барыусы:** Шулай итеп, беҙҙең Башҡортостан тәбиғәте умартасылыҡты үҫтереүгә бик уңайлы.

**Йыр “Башкортостан-илгенәм”.**

**6 бала:** Беҙҙә бының өсөн баллы үҫемлектәр бигерәк күп.
(сәскәләр инә).

**Бейеү “Сәскәләр”.**

**1 сәскә:** (еркәүек)

Еркәүек мин, еркәүек-
Наҙлыҡаймын, иркә бик.
Сәскәләрем ваҡ ҡына,
Сайҡаламын һаҡ ҡына.
Бал ҡорттары гөжләйҙәр
Минең тирәлә генә.
Бал йыялар тырышып,
Тажым тирбәлә генә.

**2 сәскә:** (күгәрсен күҙҙәре)

Ер күлдәгендә
Зәңгәр төймәләр.

Килешер ине,
Ҡыҙҙар кейһәләр.

**3 сәскә:** (һары сәскә)
Алтын тажлы һары сәскә
Ҡояш төҫөндә,
Иҙгелеккә балҡып үҫәм
Ерҙең өҫтөндә.

**4 сәскә:** (әлморон)
Ниндәй матур әлморон,
Әлморон үҫкән урын.
Сәскәләрем ал ғына,
Ҡояш һирпкән бал ғына.

**5 сәскә:** (Ҡыңғырау сәскә)
Ел иҫкәс, ҡыңғырау сәскә
Ҡыңғырап китте.
Уның янына бал ҡорто
Килеп тә етте.
Ел шаярған булып ҡына
Өрҙө лә өрҙө.
Ҡыңғырау сәскә һаман да
Ҡыңғырай бирҙе.

**Алып барыусы:** Башҡортостан урмандарының яртыһынан күбеһен йүкә, саған, тал ағастары тәшкил итә. Быларҙан тыш, баҫыуҙарҙа ҡарабойҙай, көнбағыш үҫә. Сәскәнән сәскәгә ҡунып, ҡорттар татлы һут, һеркә йыя. Улар һутты балға, һеркәне һитәгә әйләндерә. Былар икеһе лә кеше өсөн ифрат файҙалы. Быларҙан тыш ҡорт елеме (прополис), ҡорт һөтө лә кеше өсөн бик кәрәк– уларҙан дарыу яһайҙар.

**Айыу апай:** Ишек шаҡыйҙар, бабай,
Ҡунаҡтар килә, буғай!

**Айыу апай:** Эйе, эйе, инегеҙ!

**Терпе:** Әле, иҫәнмеһегеҙ!

**Айыу ағай:** Һаумы, Терпе туғаным.

**Терпе:** Ахыры саҡ-саҡ һуңланым
Шулай булһа ла ҡорҙашты
Ҡотларға тип уйланым
Урмандашым, йәштәшем!
Ҡотло булһын бал байрамың.
Иң изге теләктәр менән
Һинең Терпе тиңдәшең.

**Айыу ағай:** Рәхмәт, тоғро иптәшем.

**Терпе:** Шыу, Төлкөбай, әҙерәк,
Мин оло, һин йәшерәк.

**Алып барыусы:** Ҡуян шаулап тормаған,
Эстән генә уйлаған:
“Икенсе булыу шарт түгел,
Өсөнсө лә яраған”.

(ишек шаҡыйҙар)

**Айыу апай:** Әйҙүк, әйҙүк, өйҙәбеҙ,
Тилмерешеп көтәбеҙ.

(бүре инә)

**Бүре:** Сәләм бирҙек был өйгә!
Оҙаҡланым-бигәйбә.

**Айыу ағай:** Сәләм алдыҡ, Бүребай,

Ауыҙыңа бал да май.
**Бүре:** Рөхсәт итһә айыуҡай
Ҡотлау өсөн һүҙем бар
Айыу ҡуҫтым, мең йәшә.
Килен менән тиң йәшә.
Бал байрамы менән ҡотлайым,
Бәхет, һаулыҡ теләйем.
**Айыу ағай:** Рәхмәт "Бүре, зурланың,
Байрамымды нурланың.
**Бүре:** Ары шыу әле, Терпе,
Тамам бигерәк асыҡтым.

(Терпе, Төлкө, Ҡуян ситкә шыуа, Бүре Айыу янынан урын ала. Ҡуян, шулай итеп, табындан бөтөнләй ситкә ҡысырыҡлап сығарыла. Ҡуяндан башҡа барыһы ла һый-хөрмәткә ябырыла, ашай башлай. Үрелеп-үрелеп ҡара?а ла, Ҡуяндың аш-һыуға буйы етмәй.

**Алып барыусы:** Ҡуян шаулап тормаған,
Эстән генә уйлаған:
"Ашау-эсеү шартмы?
Миңә
Былай ҙа бик яраған.
Ашын ҡулға тотманым,
Тамсы ҙыуын йотманым.
Уның ҡарауы Айыуҙы
Иң беренсе ҡотланым".

**Уйын «Йәшерәм яулыҡ».**

Йәшерәм, йәшерәм яулығымды
Йәшел ҡайын аҫтына.
Һиҙҙермәйсә һалып китәм
Бер иптәшем артына.

**Алып барыусы:** Кемдә яулыҡ? Миндә. Салауатҡа ниндәй яза бирәбеҙ? Шиғыр һөйләһен.

**Әҙилә Фәйзуллина "Башҡортостаным".**

**Бала:**
Башҡортостан-тыуған ерем,
Башҡортостан-ғәзиз илем.
Киләсәген алдан уйлап,
Бирә беҙгә ныҡлы белем.
Башҡортостан-шатлыҡ ере,
Башҡортостан-дуҫлыҡ иле,
Был ерҙә тигеҙ яңғырай
Һәр халыҡтың милли теле.
Төп байлығы уның-халҡы:
Төрлө-төрлө милләттәр.
Уларҙың татыулығына
Көнләшер күп дәүләттәр.
Башҡортостан илгенәм,
Берҙән-берем, гөлгөнәм.
Бәхетле тормошта һин
Гөрләп йәшә гел генә.

**Алып барыусы:** Афарин, Салауат! Уйынды Салауат дауам итә. Ә Рөстәмгә ниндәй яза бирәбеҙ? Бал төрҙәрен һанап сыҡһын. (Йүкә балы, сәскә балы, ҡарабойҙай балы, клевер балы,солоҡ балы, бөрлөгән балы). Афарин!

**Парлы бейеү.**

**Алып барыусы:** Бына һеҙҙең менән һаубуллашыр ваҡыт та етте. Был бал байрамы һеҙҙең күңелдәргә дәрт арттырһын. Бөгөнгөләй бергә булайыҡ, дуҫ һәм татыу торайыҡ.

Дуҫлыҡ ебе өҙөлмәҫ ул
Моңло халыҡ бар ерҙә.
Беҙҙең ошо осрашыу
Иҫтә ҡалыр ғүмергә.

**Айыу ағай:** Беҙҙең бал байрамыбыҙға килгәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Ә хәҙер, әйҙәгеҙ бергәләшеп бал менән сәй эсеп алайыҡ.

***Хакова Э.Р.,***
*12-се һанлы "Алтынсәс"*
*балалар баҡсаһы, Дүртөйлө ҡалаһы*

## *"МОҢ БАЙРАМЫ"*

**Маҡсат:** балаларҙы халыҡ музыка ҡоралдары менән таныштырыуҙы дауам итеү; балаларҙың уйыны аша тасуири һөйләү мәҙәниәтен, ижади һәләтен, ролдәрҙе тасуири башҡарыу оҫталығын үҫтереү; балаларҙа музыкаға ҡыҙыҡһыныу уятыу, ритмды һәм динамик ишетеү һәләтен үҫтереү, көй менән бергә хәрәкәт итеү; бер-береһенә ихтирам, тыуған иленә, теленә, халҡына һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

**Бергә:** Алтын ҡояш, һаумы!
Зәңгәр һауа, һаумы!
Шаян елкәй, һаумы!
Кескәй имән, һаумы!
Беҙ йәшәйбеҙ бер ерҙә,
Сәләмләйем, һеҙҙе лә!

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, ниндәй матур алансыҡ. Бөгөн мин һеҙҙе бөтәгеҙҙе лә, ошондай матур алансыҡҡа, моң байрамына саҡырам. Рәхим итегеҙ!

**"Аҡ сәскәләр" бейеүе.**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ һеҙҙең менән ниндәй илдә йәшәйбеҙ? Дөрөҫ, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостанда йәшәйбеҙ. Башҡортстан-беҙҙең Тыуған илебеҙ. Ата-олатайҙарыбыҙ ҙа ошонда йәшәгән. Кешенең, ата-әсәһе кеүек үк, Тыуған иле лә берәү генә була.

**Тәрбиәсе.** Беҙҙең еребеҙ ҙур һәм бай. Башҡортостанда күккә олғашҡан бейек тауҙар ҙа, ҡара урмандар ҙа күп, далалар ҙа бар.

Башҡортостан-тыуған ерем,
Һине һөйәм, һине яратам.
Һинең менән һәр саҡ ғорурланам,
Һине маҡтап йырҙар таратам.

**Йыр "Тыуған илем".**

**Тәрбиәсе :** Ә хәҙер инде балалар моң байрамы булғас,халҡыбыҙҙың музыка ҡоралдарын иҫкә төшөрөпкитәйек. (Ҡурай моңо яңғырай).

**Тәрбиәсе:** Балалар, был ниндәй музыка ҡоралы?

**Балалар:**Ҡурай.

**Тәрбиәсе:** Эйе, был ысынлап та ҡурай. Ҡурай-ул үлән. Ҡураған көпшәнән яһалғанға ҡурай тип атағандар ҙа инде. Ҡурай тураһында халҡыбыҙҙың бик күп әкиәт, легенда,ҡобайырҙары бар.

Балалар,ҡурайға нисә йәш тип уйлайһығыҙ? Ҡурай 4 мең йәштән дә өлкәнерәк икән. 922 йылда башҡорт ерҙәре аша ғәрәп илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан Болғар ханлығына барған. Шунда халҡыбыҙҙың ҡурайы һәм үҙе ишеткән " Сыңрау торна" көйө тураһында яҙып ҡалдырған. Тыңлап алайыҡ әле, балалар, ошо көйҙө.

**"Сыңрау торна" көйө яңғырай.**

**1-се бала.** Беҙҙең тыуып үҫкән ерҙә,

Тыңла,үләндәр йырлай.
Нимә тиеп һораһағыҙ,
Ул-моңло ҡырлы ҡурай.
**“ Ҡурай” бейеүе башҡарыла.**
**2-се бала.** Ябай ҡурай моңға урай,
Һис тауыш юҡ шылт иткән.
Йырлатҡан да, бейеткән дә–
Моң тирмәне шул икән.
**Тәрбиәсе:** Ҡаһым түрә, Салауат та
Булғаноҫта ҡурайсы.
Әйҙә, егет, оялмасы,
Ҡурайыңда уйнасы.
**Егет ҡурайҙа уйнай.**
**Тәрбиәсе**: Ә хәҙер инде ниндәй музыка ҡоралын күрәһегеҙ? Дөрөҫ,ҡумыҙ.
**1-се бала.** Таҡмаҡтар әйтәм әле,
Ҡумыҙым сиртәм әле,
Таҡмаҡ әйтеп, ҡумыҙ сиртеп,
Һеҙҙе бейетәм әле.
**Тәрбиәсе ҡумыҙҙа уйнай.**
**2-се бала.** Сың-сыңла һин, ҡумыҙым,–
Бейеһен егет, ҡыҙың.
Бер дәртләнеп алһындар,
Етеҙ, оҫта баҫһындар.
**Уйын “Аҡ тирәк-күк тирәк”.**
**Тәрбиәсе:** Йәгеҙ балалар “Аҡ тирәк-күк тирәк” тигән уйынды уйнап алайыҡ.
Аҡ тирәк-күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
Беҙгә Дилә кәрәк.
-Был ҡыҙға ниндәй яҙа?
Әтәс булып ҡысҡырһын.
–Ки-кри-күк! (өс тапҡыр). Афарин!
Аҡ тирәк-күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
Беҙгә Салауат кәрәк.
-Был малайға ниндәй яҙа?
Шиғыр һәйләһен.
**С. Юлаев. Тыуған илем.**
Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым.
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан
Уралым–
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.
**Тәрбиәсе:** Йәгеҙ тағы ла бер тапҡыр уйнап алайыҡ.
Аҡ тирәк-күк тирәк, беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
Беҙгә Азалия кәрәк.
-Былҡыҙға
ниндәй яҙа?
Башҡорт халыҡ аштарын һанап сыҡһын.(баурсаҡ,бәлеш...)
**Тәрбиәсе:** Балалар,ә был ниндәй уйын ҡоралы?
**Балалар:** Гармун.
**1-се бала.** Уйнайым, уйнайым гармунда,
Күпме моң, күпме көй бар унда!

Гел генә ҡулымда гармуным,
Минең дә үҙ көйөм, бар моңом.
**2-се бала.** Көйөмдөң юҡ әле һүҙе лә,
Шулай ҙа бик матур үҙемә.
Гармунды ҡулымдан ҡуймайым,
Көй сығыр тиеп мин уйлайым.
**3-сө бала.** Гармуным үҙе лә тырыша,
Ҡулыма нығыраҡ һырыша.
Күңелле ауаздар ишәйә,
Гармуным, гармуным, нишләй, ә!
Тырышып,тырышыпуйнайым,
Иң оҫта гармунсы булайым.

**Йыр " Гармуным". (Вильдан башҡара).**

**Татар бейеүе. (малайҙар башкарыуында).**

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер мин һеҙгә бер шиғыр уҡып ишеттерәһем килә. Иғтибар менән тыңлағыҙ.

**Тәрбиәсе:** Скрипкала һыҙҙыра сиңерткә,
Барабан ҡаға ҡуян,
Һандуғастар ҡурай тарта–
Бар урман моңға тулған.
Ҡумыҙ сиртә май ҡуңыҙы,
Аттар думбыра ҡаға,
Һыбыҙғы көйләй йомран,
Шишмә сылтырап аға.

**Тәрбиәсе:** Тимәк, халҡыбыҙҙың бөтә уйын ҡоралдары ла борон-борондан килгән тәбиғәт моңдарына ауаздаш икән.

**"Төлкө , ҡуян һәм әтәс" экиәтен сәхнәләштереү.**

**Тәрбиәсе:** Ә, хәҙер беҙ һеҙҙең менән байрамыбыҙҙы йомғаҡлап"Төлкө,ҡуян һәм әтәс" экиәтен сәхнәләштереп алайыҡ.

-Борон-борон заманда йәшәгән ти төлкө менән ҡуян. Төлкө бик тә хәйләкәр булган. Бер генә төн йылынып сығарға һорағанда, ҡуянды ҡыуып сығарған.

**Төлкө.** Ҡалай нисек һыуыҡ бында.
–Һаумы,ҡуяндуҫ!
Ҡуянҡай,индер әле,йылынып ҡыны сығайым әле?
**Ҡуян.** Әйҙә ин,түрҙән уҙ.
(төлкө ҡуянды ҡыуып сығара,ҡуяндың ҡаршыһына эт осрай.)
**Эт.** Бахыр ҡуянҡай,һин нимә илайһың?
**Ҡуян.** Нисек иламаҫҡа,мине йортомдан тәлкә ҡыуып сығарҙы.
**Эт.** Әйҙә киттек,мин ярҙам итермен. Төлкө сығып ҡас бынан.
**Төлкө.** Һикереп,йүгереп сығармын, тырнап,соҡоп ташлармын. (эт ҡурҡып ҡаса,ҡуяндың ҡаршыһына терпе осрай.)
**Терпе.** Бахыр ҡуянҡай,һин нимә илайһың?
**Ҡуян.** Нисек иламаҫҡа,мине йортомдан төлкө ҡыуып сығарҙы.
**Терпе.** Илама,мин уны ҡыуып сығарырмын. Әйҙә киттек. Төлкө сығып ҡас бынан.
**Төлкө.** Һикереп,йүгереп сығармын, тырнап,соҡоп ташлармын.
(терпе ҡурҡып ҡаса,ҡуяндың ҡаршыһына бүре осрай.)
**Бүре.** Бахыр ҡуянҡай,һин нимә илайһың?
**Ҡуян.** Нисек иламаҫҡа,мине йортомдан төлкө ҡыуып сығарҙы.
**Бүре.** Илама,мин уны ҡыуып сығарырмын. Әйҙә киттек. Төлкө сығып ҡас бынан.
**Төлкө.** Һикереп,йүгереп сығармын, тырнап,соҡоп ташлармын. (бүре ҡурҡып ҡаса,ҡуяндың ҡаршыһына айыу осрай.)
**Айыу.** Бахыр ҡуянҡай,һин нимә илайһың?

**Ҡуян.** Нисек иламаҫҡа,мине йортомдан төлкө ҡыуып сығарҙы.

**Айыу.** Илама,мин уны ҡыуып сығарырмын. Әйҙә киттек. Төлкө сығып ҡас бынан.

**Төлкө**. Һикереп,йүгереп сығармын, тырнап,соҡоп ташлармын.

(айыу ҡурҡып ҡаса,ҡуяндың ҡаршыһына әтәс осрай.)

**Әтәс.** Бахыр ҡуянҡай,һин нимә илайһың?

**Ҡуян.** Нисек иламаҫҡа,мине йортомдан төлкө ҡыуып сығарҙы.

**Әтәс.** Илама,мин уны ҡыуып сығарырмын. Әйҙә киттек.

**Әтәс.** Ки-кри-күк! Арҡамда салғы килтерәм,төлкөнө ҡыуып сығарам, ҡас бынан төлкө.

**Төлкө:** Кейенәм.

**Әтәс.** Ки-кри-күк! Арҡамда салғы килтерәм,төлкөнө ҡыуып сығарам, ҡас бынан төлкө.

**Төлкө.** Хәҙер кейенеп бөтәм.

**Әтәс.** Ки-кри-күк! Арҡамда салғы килтерәм,төлкөнө ҡыуып сығарам, ҡас бынан төлкө. (төлкө сыға.)

**Төлкө.** Ҡуянҡай, йәнлектәр, мине ғәфү итегеҙ. Башҡа бер ҡасан ҡыйырһытмам (ошо көндән башлап йәнлектәр дуҫ, татыу йәшәйҙәр)

**Тәрбиәсе:** Мин бөгөнгө байрамыбыҙҙы, Башҡортостандың мәғариф үҫтереү институты доценты, "Осҡон"программаһының авторы Нафиҡова Зәкиә Ғәлиәхмәт ҡыҙының һүҙҙәре менән тамамлаһым килә: "Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙҙең ғөрөф-ғәҙәттәргә, үҙебеҙҙең йолаларға ҡайтабыҙ икән, үҙебеҙҙең әкиәттәрҙе, көйҙәрҙе, музыка ҡоралдарын, аш-һыуҙы иҫкә төшөрөп көндәлек тормошта ҡулланабыҙ икән, тимәк беҙҙең киләсәк бар".

**Йыр "Ерем, телем".**

**Тәрбиәсе:** Ошоноң менән байрамыбыҙ тамам, иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Һеҙгә һаулыҡ, шатлыҡтар теләйбеҙ. Һәр ваҡыт сәскәләрҙәй балҡып, янып тороғоҙ. Киләһе осрашҡанға тиклем, һау булығыҙ.

–Һау булығыҙ!

***Хакова Э.Р.,***
*12-се һанлы "Алтынсәс"*
*балалар баҡсаһы, Дүртөйлө ҡалаһы*

## «ТЫЛСЫМЛЫ УРМАНҒА СӘЙӘХӘТ»

**Төп белем биреү өлкәһе:** телмәр үҫтереү; тирә-яҡ мөхит менән таныштырыу

**Интеграция өлкәләре:** танып белеү, социаль-коммуникатив үҫеш, физик үҫеш (хәүефһеҙлек, уйын, коммуникация)

**Маҡсат:** тыуған яҡтың ҡыш миҙгеле тураһында күҙаллауҙар үҫтереү; ҡыр, йорт хайуандары һәм йорт ҡоштары менән таныштырыуҙы дауам итеү, белемдәрен тәрәнәйтеү.

**Белем биреү бурыстары:** ҡыш миҙгеле буйынса тәрбиәсе һорауҙарына яуап бирергә өйрәтеү; балаларҙа ҡыр хайуандары тураһында төшөнсәне киңәйтеү; йорт хайуандары һәм йорт ҡоштарының кеше эргәһендә йәшәүҙәре, ниндәй файҙа килтереүҙәрен айыра белергә өйрәтеү.

**Үҫеш бурыстары**: матурлыҡты күрә белеү һәләтен үҫтереү; әкиәт сәхнәләштергәндә ролдәрҙе уңышлы башҡарырға; ҡышҡы матурлыҡты күрә һәм таный белергә; кешеләргә изгелек эшләү теләгенә ирешеү; балаларҙың хәтерен, уйлау һәләтен, иғтибарлылығын үҫтереү; балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләү.

**Тәрбиәүи бурыстар:** аралашыу сифатын, изгелек мөнәсәбәтен, ярҙамсылыҡ, матурлыҡ хисе; Тыуған ереңә, атай-олатайҙарға ҡарата ғорурланыу тойғоһо, ихтирам; йәнлектәргә һөйөү; тирә-яҡ тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Һүҙлек эш:** ҡыш, ҡар, һалдат

**Эш алымдары:** әңгәмә, уйын, һүрәт ярҙамында күрһәтеү, ҡабатлау, практик эш

**Типик грамматик конструкция:** Ҡар аҡ төҫтә.

**Йыһазландырыу:** аудиояҙма, урманлыҡ, компьютер**,** ҡырҡылған һүрәттәр.

**Эшмәкәрлек барышы:**

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, балалар!

**Балалар:** Һаумыһығыҙ!

**Тәрбиәсе:** Балалар, мин һеҙҙе тылсымлы урманға сәйәхәткә саҡырам. Әйҙәгеҙ, урманға таба юлланайыҡ.

**Тәрбиәсе:**

Ҡар бөртөгө, йондоҙ кеүек
Ер өҫтөнә ҡойола.
Һаулыҡ теләп, уңыш теләп,
Беҙҙең сара башлана.

Бына урманға ла килеп еттек. Тирә – яҡта ниндәй матурлыҡ. Ағастар ап – аҡ шәл ябынған. Аяҡ аҫтында күпме ҡар ята. Нимә ята? Ҡар беҙҙең ниндәй төҫтә? (аҡ). Бергә ҡабатлайбыҙ. Ҡар аҡ төҫтә.

Тышта ниндәй йыл миҙгеле һуң?(Ҡыш) Бар йыл миҙгел дә үҙенсә матур. Ә ҡыш –ул йыл миҙгелдәренең иң – иң матурҙары. Эйе бит?

Балалар, күҙҙәребеҙҙе йомоп, уй менән ошо хоҙур тәбиғәт донъяһына сумайыҡ.

Тышта ҡар яуа, ҡар бөртөктәре ашыҡмай ғына ергә ҡойола. Әйҙәгеҙ уларҙы усыбыҙға ҡундырайыҡ һәм тәрән һулыш алып, уларға өрәйек. Көслөрәк, тағы ла көслөрәк…

Ошо матурлыҡҡа һоҡланып «**Ҡыш** « тураһында шиғырҙар уҡып ишеттерәйек.

1.Ер йоҡоһо. (Дарина)
Ҡырға аҡ ҡарҙан
Юрған ябынған
Ер яҙға саҡлы
Йоҡоға талған.

2. Буран. (Диана)
Урамда буран
Мин өйҙә торам,
Тәҙрә аша
Тик ауыҙ йырам.

3.Ҡар бөртөгө. (Рената)
Мин кескәй ҡар бөртөгө
Аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына.
Мине күреп ҡалам тиһәң,
Көтөп торсо саҡ ҡына.

4.Ҡар яуа (Рина)
Ҡар яуа,
Ҡар яуа,
Ҡарға тулған
Бар һауа.
Ҡар яуа,
Ҡар яуа,
Өҫтөбөҙгә күк ауа!

5. Тышта ҡар яуа. (Рамазан)
Тышта ҡар яуа,
Ниндәй саф һауа!
Әйҙә сығайыҡ,
Сана шыуайыҡ.
Ҡырға барайыҡ,
Юлдар ярайыҡ.
Биттәр ал булһын

Күңелле ял булһын.
**Тәрбиәсе:** Афарин, балалар! Бик матур шиғырҙар.
**Уйын: “Танып бел”**

Ә хәҙер экранға иғтибар менән ҡарайбыҙ. Һеҙ унда ниндәй ҡыр хайуандарын күрәһегеҙ? Дөрөҫ, айыу. Ә айыу нимә ярата?(бал).

Был төлкө. Төлкө нимә ярата?(тауыҡ, сысҡан).
Был тейен.Тейен нимә ярата? (сәтләүек).
Был терпе. Терпе нимә ярата? (алма, бәшмәк).
Был ҡуян. Ҡуян нимә ярата?(кишер, үлән).
Афарин, балалар! Ә хәҙер ял да итеп алайыҡ.

**Логоритмик күнегеү: « Тәбиғәт ҡосағында «**

Балалар
Урманлыҡҡа баралар,
Йәнлектәрҙе күрәләр.
Тейен сәпәкәй итә,
Ҡуян һикереп ала.
Ә айыу-тайыш табан
Башын ғына һелкетә.
Төлкө апай менән
Бүре лә килә.
Йәнлектәр йыйыла
Тәбиғәт ҡосағына.
**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер мин һеҙгә йомаҡ ҡоям, яуабын сисеп ҡарағыҙ.
Кемдер ул беҙгә,
Юлда һикереп килә.
Ҡолағы оҙон,
Ҡойроғо ҡыҫҡа.
Үҙе бигерәк шаян
Исеме уның …
**Балалар:** Ҡуян.
Көй яңғырай, залға Ҡуян килеп инә.
**Ҡуян.**
Танышайыҡ, мин – Ҡуян,
Урман эсендә оям.
Бары тик оямда ғына
Үҙемде батыр тоям.
Бында ниндәй байрам? Бөтәһенә лә күңелле.
**Ҡуян.**
Ишеттем йыр – бейеүҙе,
Күңелле уйындарҙы.
Бергә уйнағым килә,
Йыр йырларға, көлөргә.
**Тәрбиәсе.** Беҙ балалар менән ҡышҡы урманға сәйәхәт итергә килдек.
Йә, әйҙә беҙҙең эргәгә. Бик тә күңелле беҙҙә.

Ҡуянҡай, һин нишләп бик бойоҡ? Бына миңә ошо уйынды бүләк иттеләр. Мин нисек уйнарға белмәйем. Балалар, әйҙәгеҙ ҡуянға ярҙам итәйек.

**Уйын: “Ҡырҡылған һүрәттәр”.**

**Тәрбиәсе:** Ҡуянҡай, беҙҙең балалар бик уңғандар, аҡыллылар. Тиҙ генә йыйып та ҡуйҙылар. Бында ниндәй һүрәттәр килеп сыҡты? (һалдат һүрәттәре). Һалдаттар илебеҙҙе дошмандарҙан һаҡлайҙар. Оҙаҡламай Ватанды һаҡлаусылар көнө лә етә. Беҙ ҙә малайҙарыбыҙҙы, атайҙарыбыҙҙы, олатайҙарыбыҙҙы байрам менән ҡотлайбыҙ.

**Ҡуян:** Рәхмәт һеҙгә, балалар!

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ ҡуянға үҙе тураһында йыр йырлап ишеттерәйек

**Йыр «Аҡ ҡуян»**

Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡойроғо ҡыҫҡаҡ ҡына
Ҡолағы ергә тейгән.

**Тәрбиәсе:** Афарин, балалар! Бик матур йыр йырлап, күңел асып алдыҡ! Әйҙәгеҙ ҡунаҡты беҙ кишер менән һыйлайыҡ.

**Ҡуян:** Рәхмәт балалар!

**Уйын: "Ҡуян"**

**Тәрбиәсе:** Йәгеҙ балалар беҙ һеҙҙең менән ҡуяндарға әүерeләбеҙ.

Ҡуян саба шәп, шәп
Ҡуян саба үәт, үәт
Һин ҡылый күҙ, йүгермә
Бер ҙә генә һикермә.
Ә ул һаман шәп, шәп
Ә ул талмай үәт, үәт
Саҡ тын ала, йүгерә
Балаларын күрергә.

**Тәрбиәсе:** Ҡасығыҙ, ҡуяндар.

Ҡотолоп булғанда.

**Тәрбиәсе:** Ҡалай ниндәй етеҙ ҡуяндар булдығыҙ һеҙ. Афарин!

Әйҙәгеҙ бөгөнгө сарабыҙҙа әкиәт тә ҡарап үтәйек.

**Әкиәт сәхнәләштереү «Эш табылды «** (башҡорт халыҡ әкиәте)

Борон –борон заманда йәшәгән ти, бер кеше. Ул көн һайын арып-талып үҙенең эшен башҡарған, ғаиләһен хәстәрләгән.

Көндәрҙән бер көндө кеше янына килгән – ти, хайуандар.

-Әй кеше, беҙгә эш кәрәк.

-Ә һеҙ нимә эшләй беләһегеҙ?

-Мин ат. Йөк ташыйым. Ер һөрәм. (Иһо-һо)

-Бик шәп.

-Мин һыйыр. Мин һөт бирәм.(Мө-мө)

-Бик шәп.

-Мин кәзә. Мин йон бирәм. (Мә – ә – ә)

-Бик шәп.

-Мин тауыҡ. Мин йомортҡа бирәм. (Ҡыт-ҡытаҡ)

-Бик шәп.

-Мин бесәй. Мин сысҡан тотам.(Мыяу-мыяу)

-Бик шәп.

-Мин эт. Мин йорт һаҡлайым. (Һау-һау)

-Бик шәп.

-Ә мин, булам әтәс.

-Иртә таңдан һеҙҙе уятам. (Ки-кри-күк)

Шулай итеп хайуандар үҙҙәренә эш тапҡандар. Кешеләргә хеҙмәт итә башлағандар. Һәрбер хайуандың үҙ эше билдәләнгән. Һәм бөтә хайуандар ҙа һәр бер йортта үҙ хужаларына ҙур иптәш, ҙур ярҙамсы булғандар.

**Тәрбиәсе.** Афарин, бик тә яҡшы башҡарҙығыҙ.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ә һеҙгә урманда байрам оҡшанымы? Эйе, бик күңелле, матур байрам булды! Беҙ һеҙҙең менән нимәләр эшләнек? (уйнаныҡ, йырланыҡ, шиғырҙар һөйләнек, әкиәт ҡараныҡ). Миңә һеҙҙең менән эшләүе бик еңел тойолдо.

Был йыл һеҙгә ҡар бөртөктәре кеүек аҡ бәхеттәр алып килһен!

Ошондай аҡ ҡар бөртөктәрен һеҙгә бүләк итәм. Ә хәҙер, балалар баҡсаһына ҡайтайыҡ! Ҡуян менән хушлашайыҡ!

**Балалар:** Һау бул, ҡуян дуҫ!

**Ҡуян:** Һау булығыҙ, балалар! Киләһе осрашҡанға тиклем.

Сарабыҙҙы ошо шиғыр юлдарын уҡып тамамларбыҙ.

Аҡ күбәләк кеүек ҡарҙар
Яуалар ҙа яуалар.
Уйнайбыҙ ҙа, көләбеҙ ҙә,
Беҙ бәхетле балалар.

***Хужина Н.А., Закирова Л.И.,***
*МАДОУ Детский сад №15 «Крепыш»,*
*Учалинский район РБ*

## «МАРКЕРЫ ИГРОВОГО ПРОСТРАНСТВА КАК ОДИН ИЗ КОМПОНЕНТОВ РАЗВИВАЮЩЕЙ СРЕДЫ ДЛЯ ДОШКОЛЬНИКОВ»

**Цель:** ознакомление педагогов с инновационными технологиями по созданию развивающей предметно-пространственной среды – маркерами игрового пространства и вариантами игр и упражнений по изучению родного башкирского языка, становлению всех сторон речи на основе данных оборудований.

**Зеленый маркер**






**Задачи:**

-подчеркнуть актуальность формирования речи ребенка на родном языке,

– дополнять развивающую предметно-пространственную среду по речевому развитию детей,

– применять игровые маркеры, как развивающие пособия.

**Ход мастер-класса:**

Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле коллегалар!

-Здравствуйте, уважаемые коллеги! Разрешите представиться. Я, Хужина Нажия Аминовна, воспитатель подготовительной группы детского сада №15 с изучением родного башкирского языка.

Тыуған телем –башҡорт теле,
Башҡа телде лә беләм.
Иң яҡыны– әсәм теле,
Бирә ул миңә белем.
(Н.Салимов)

В соответствии с Конституцией Республики Башкортостан (раздел 1, глава 1, статья 1) башкирский язык наравне с русским языком имеет статус государственного языка Республики. В этих условиях проблема сохранения и развития башкирского языка как родного и государственного языка приобретает особую актуальность. Определяя значимость родного языка, Мустай Карим писал: «Родному языку нет цены, он бесценен, как бесценна любовь к Отечеству, народу».

Формирование речи ребенка на родном языке происходит в раннем и дошкольном возрасте. Ребенок в дошкольном возрасте усваивает разговорный язык, происходит становление всех сторон речи: фонематической, лексической и грамматической. Владение родным языком в дошкольном возрасте является необходимым условием решения задач умственного, эстетического и нравственного воспитания детей. Чем раньше начнется обучение родному языку, тем свободней ребенок будет пользоваться в дальнейшем.

Одно из условий речевого развития детей – это обеспечение развивающей предметно-пространственной среды, которая предоставляет каждому ребёнку равные возможности приобрести те или иные качества личности, возможности для его всестороннего развития.

Задача дошкольного учреждения состоит в том, чтобы создать такую развивающую среду, которая обеспечивала бы ребенка всевозможным материалом для его активного участия в различных видах деятельности. Игра в дошкольном возрасте влияет на развитие всех сторон личности ребенка. Многообразие сюжетов затруднительно при использовании традиционного детского оборудования как «кухня», «парикмахерская», «супермаркет» и др. Для того, чтобы игра получила свое развитие, дошкольникам необходим так называемый маркер игрового пространства или маркер воображаемого мира. Сегодня мы хотим поделиться опытом работы по применению данных оборудований.

Что такое маркеры? Маркеры игрового пространства представляют собой уменьшенный предметный образец пространства и объектов воображаемого мира. Это может быть домик с внутренней обстановкой, дом-теремок, ракета, рама, изображающая нос корабля или переднюю стенку автобуса и т.п. Это нестандартное оборудование, изготовленное своими руками, носит развивающий характер, соответствует требованиям ФГОС ДО к развивающей предметно-пространственной среде. Цели игрового маркера:

-вызвать у детей интерес к использованию инновационного оборудования в совместной и в свободной деятельности;

-развивать воображение при использовании маркеров игрового пространства;

– воспитывать интерес детей к познавательно-речевой деятельности.

Маркеры обладают рядом достоинств и отвечают современным требованиям ФГОС ДО:

-легко трансформируются;

-многофункциональны;

-вариативны;

– активизируют двигательную активность;

-рассчитаны на все возрастные категории от 3 до 7 лет;

-отвечают гигиеническим требованиям (легко моются, безопасны);

-имеют эстетичный вид;

-занимают мало места при хранении;

Для создания маркеров понадобится: несколько полипропиленовых листов или картон, ПВХ панели, нож для бумаги, линейка, карандаш, скотч, самоклейка, цветные картинки для оформления сюжета. Маркеры также можно изготовить из полипропиленовых труб. При изготовлении маркеров приветствуется сотрудничество с родителями воспитанников, а также включение в изготовление атрибутов к играм самих воспитанников. Маркеры игрового пространства позволяют создавать условия для творческой деятельности детей, развития фантазии, формирования игровых умений, реализации игровых замыслов, воспитания дружеских взаимоотношений между детьми. Используя маркеры, дети самостоятельно организовывают и преобразовывают игровое пространство.

Представляем вашему вниманию несколько маркеров и на их основе покажем варианты игр и упражнений по обучению башкирскому языку.

**1) Маркер зеленого цвета**

Для пополнения и закрепления словарного запаса по лексическим темам: «Деревья», «Грибы», «Ягоды», «Цветы», «Времена года», «Птицы», «Дикие животные», мы используем маркер зеленого цвета, превращая его в «лес».

**«Һаумы, тылсымлы урман!**
**Һинә һоҡланып торам!»**

В тоже время этот маркер трансформируется в спортивный тренажер, где реализуется двигательная активность детей. Например:

**1 вариант:** Воспитанники прокатывают мяч друг другу и называют деревья. **Приглашаю поиграть.** (имән, ҡайын, ҡарағай, ҡарағас, шыршы, йүкә, уҫаҡ, тирәк).

**2 вариант:** называют действия:

-птиц (һандуғас һайрай, ҡарға ҡарҡылдай, тумыртҡа туҡылдай, һайыҫҡан шыҡырлай и т.д.);

-животных (буре олой, ҡуян ырғый, айыу йоҡлай, тейен һикерә).

Зеленый маркер трансформируется в ширму, забор, дорогу, кузов машины, мост с речкой. (Слайды)

**«Башҡортостаныбыҙ буйлап**
**Сәйәхәткә сығайыҡ.**
**Тыуған яҡтын матурлығын ҡарайыҡ.**
**Беҙҙең яҡта тауҙар бейек –ошолай,**
**Беҙҙең яҡтың йылғалары киң-ошолай».** Заучивание стихов на башкирском языке с показом для быстрого запоминания. (Слайд).

**2) Маркер голубого цвета.**

Изображая озеро из голубого маркера, мы работаем над формированием у воспитанников элементарных математических представлений. Например, счет на башкирском языке.

**Берәү, икәү, өсәү, дүртәү**
**Бишәү минең бармағым.**
**Һанай, һанай балыҡ тотам,**
**Емләйем дә ҡармағым** («озеро», ребенок «ловит» магнитных рыбок и считает). Это способствует развитию зрительного ориентира и координации движений. Голубой маркер можно превратить в речку, дорогу.

Собрав маркер в прямоугольной форме, можно применить его как «автобус» для сюжетно-ролевой игры. Колеса прикрепляются на веревочках или прищепками. (Показ слайдов).

**3) Разноцветный маркер.**

Этот маркер можно превратить в **«Карусель».**

-Дети под музыку идут по кругу, по окончанию музыки останавливаются и придумывают слова на соответствующий цвет детали. (һары лимон, йәшел үлән, аҡ ҡар, ҡара ер и һ.б.). В ходе этой игры можно применять стихотворение А. Игебаева «Ниндәй төҫ матурыраҡ?» (стр.215 хрестоматия «Башкортостан– Гөлбостан», М.Ғали «Төҫтәр»).

**Һары –көҙгө япраҡтар,**
**Әфлисундар– һап-һары.**
**Бик матур була куктең**
**Лимон һары саҡтары…**

– этот маркер можно применять в сюжетно-ролевой игре «Цирк».

– другая сторона маркера бело-синего цвета превращается в «Корабль» и дети отправляются в путешествие.

-кармашки можно применять для мнемодорожек при составлении рассказов и оформления сюжетно-ролевой игры.

– в играх-драматизациях.

Уважаемые коллеги, какие варианты игр у вас возникли?

Высокий маркер трансформируется в «дом», отрабатывается речевой материал по теме: «Ғаилә».

Если повесим табличку «Касса», «Регистратура» можно отработать связную речь, диалогическую речь. (слайды )

Проведенная нами работа позволила разнообразить материальное оснащение группы, которое побуждает детей проявлять инициативу и самостоятельность в разных видах деятельности, в том числе и общении. Мы будем рады, если наш опыт работы вам понравился и, вы будете его применять. Желаем вам интересных форм создания развивающей предметно-пространственной среды детского сада в соответствии с требованиями ФГОС.

***Хәкимова З.И.,***
*Баланы үҫтереү үҙәге – 6-сы һанлы балалар баҡсаһы,*
*Раевка ауылы, Әлшәй районы*

## БАШҠОРТОСТАН МУЗЕЙЫНА ВИРТУАЛЬ ЭКСКУРСИЯ

**Дәрес барышы.**
Түңәрәккә баҫабыҙ
Һин минең дуҫ, мин һинең
Ҡулға ҡул тотоношоп
Бер – беребеҙгә йылмайып
Һаулыҡ һорашабыҙ
Һаумыһығыҙ, балалар!!!

**Тәрбиәсе.** Балалар, ҡарағыҙ әле экранға. Нимә күрәһегеҙ? (Карта Башкортостана)
Беҙҙең республика нисек тип атала? (Башкортостан)
Башҡортостан тураһында кем шиғыр ятлап күрһәтә?
*Рианна һәм Руслан беҙгә шиғыр ятлайҙар*
*Бала.Рианна*
Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем!
*Бала Руслан*
Башҡортостан һин беҙҙең
Тыуып үҫкән еребеҙ
Беҙгә икмәк, өй биргән
Һыуын эскән еребеҙ!!!
(Ултырышығыҙ, балалар)

**Тәрбиәсе.** Балалар, әлеге ваҡытта ниндәй йыл миҙгеле?

Ә бына ҡыш ваҡытында нимә менән шөғөлләнәбеҙ? (Сана, саңғы, тау шыуабыҙ).

Балалар, көндәр һыуыҡ ваҡытта мин һеҙҙе бөгөн виртуаль экскурсияға саҡырам.

Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ был ниндәй бина? (музей). Эйе, беҙ был музейҙа бер тапҡыр булдыҡ.

Музейға барып ингәс тә иң беренсе булып нимә тора? (тирмә).

Ни өсөн ул музейҙа тора һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Эйе, балалар, был тирмә, башҡорт халҡының йәшәйешен һеҙҙең кеүек кескәй балалар белһен өсөн музейға тапшырғандар. Ул музейҙа төп экспонат булып тора.

**Тәрбиәсе.** Тышын нимә менән ҡаплағандар? (Кейеҙ)

Ә кейеҙҙе нимәнән эшләгәндәр? (Йөндән)

**Тәрбиәсе.** Тирмә эсе нимә менән биҙәлгән? (Эсенә матур – матур һуғылған балаҫтар йәйгәндәр) (Кейемдәре, йоҡлағанда ҡуллана торған әйберҙәре, ашамлыҡтар, һауыт – һабалары, балаҫтары, сәңгелдәк, һандыҡ)

Эйе, балалар, Рианна әйте һандыҡ тип, беҙ бөгөн шул һандыҡ тураһында һөйләшәбеҙ. Һандыҡ нимәнән эшләнгән? (ағастан)

Һандыҡ ни өсөн кәрәк булған? (кейемдәрен һаҡлағандар)

**Тәрбиәсе.** Башҡорт халҡының ғөрөф – ғәҙәте булған. Элек электән һаҡланып килгән кейемдәрен, биҙәгестәрен, иң яҡшы, ҡиммәтле әйберҙәрҙен һандыҡ эсендә һаҡлағандар. Һуңынан һандыҡты үҙҙәренең балаларына, оноҡсаларына быуын быуындан биреп ҡалдырған булғандар. Ә хәҙер һандыҡтың эсендә нимәләр бар икән, ҡарап үтәйек әле.

*(Һандыҡ эсенән балаҫ алына*).

**Тәрбиәсе.** Нимә ул? (Балаҫ).

Нимәнән һуғылған балаҫ?

Балаҫта ниндәй орнаменттар ҡулланылған?

Ниндәй төҫтәргә буялған?

Эйе балалар йөндө башта, иләйҙәр, сираталар, йыуалар, һуңынан төрлө төҫтәргә маналар.

Был башҡорт орнаменты менән һуғылған балаҫ.

Була геометрик һәм үҫемлек орнаменты.

**Тәрбиәсе.** Был геометрик орнаменттар. Ниндәй фигуралар күрәһегеҙ? (төрлө төҫтә түңәрәктәр, ромбтар, өсмөйөштәр менән тора)

Үҫемлек орнаменты. Йәгеҙ әле бергәләп ҡарап әйтәйек (япраҡ, сәскә, төрлө үҫемлек емештәренән тора)

Беҙҙең төркөмдә лә шундай балаҫ бар бит! Унда ниндәй орнаменттар күрәһегеҙ?

Төп орнаментың ерлеге : ҡара, ҡыҙыл, һары булған балалар.

Ҡара төҫ – ер төҫө,

Ҡыҙыл – таң ата,

Һары төҫ – ҡояшты аңлата.

Хәҙер беҙ һеҙҙең менән уйын уйнайбыҙ “Балаҫ йыйыу”.

Балалар, ниндәй орнамент менән һеҙҙең балаҫығыҙ? Геометрик орнамент менәнме үҫемлек орнаменты менәнме?

**Уйын “Балаҫ йыйыу”** (өҫтәлдә балаҫ йыйыла)

(Бер өҫтәлдә ҡара ерлекте, икенсе өҫтәлдә һары ерек, өсөнсө өҫтәлдә ҡыҙыл ерлек ята)

**Тәрбиәсе**. Ә һеҙҙең йыйған балаҫта ниндәй ерлек, Искәндәр? Ә һеҙҙең балаҫығыҙҙың ерлеге ниндәй, Рианна? Нимәне аңлата ерлеге? Руслан, һеҙҙең балаҫ ниндәй?

**Тәрбиәсе.** Һандыҡ эсенәндә тағы ла бик матур әйберҙәр бар?

Нисек уйлайһығыҙ был нимә ул? (башҡорт халыҡ күлдәге)

Нимә менән биҙәлгән?

Дөрөҫ, балалар. Башҡорт күлдәге ысын сәнғәт оҫтаһы тип әйтһәк тә була.

Күлдәк әберкәләре матур төҫлө атлас таҫмалар менән биҙәлгән.

**Тәрбиәсе**. Ә быны күлдәк өҫтөнән нимә кейгәндәр? (**камзул**)

Камзул – ул ҡыҫҡа, еңһеҙ булған. Нимә менән биҙәлгән? (тәнкәләр менән биҙәлгән. Камзулды күлдәк өҫтөнән кейгәндәр)

Күлдәк өҫтөнән тағы ла оҙон, еңле кейем кейгәндәр. Ул – **елән** тип атала. (Бер нисә баланан әйттерәм) Нисек биҙәлгән?

Тағы нимә ята икән һандыҡта? (күрһәтәм) Ситек.

Нимәнән тегелгән был ситек?

Биҙәктәре бармы был ситектең?

**Тәрбиәсе.** Балалар беҙҙең яратҡан “Итек – ситек” уйыны бар. Әйҙәгеҙ әле бергәләп уйнап алайыҡ.

Һеҙ нисек уйлайһығыҙ нимә был?

Был матур костюмдарҙы тағы ла баш кейемдәре **ҡашмау** биҙәп тора.

**Ҡашмау** арттан елкә яғынан оҙонлғо менән ҡаплап торған.

Был баш кейемен дә төрлө – төрлө тәнкәләр менән биҙәгәндәр. (Бер нисә бала ҡабатлай)

Ә быныһын нимә тип уйлайҙығыҙ?

**Сулпы** – башҡорт ҡыҙҙарының баш биҙәгесе. Башҡорт халҡының кейемдәре көмөш тәңкәләр, мәрйендәр, ҡиммәтле таштар менән биҙәлгән.

Был биҙәгестәр йөрөгән ваҡытта үҙенә башҡа матур моң сығарып йөрөгән. Шуның өсөн халыҡ әйтә: “Башҡорт ҡыҙын иң тәүҙә ишетәһең, күрер алдынан”

Балалар, беҙ һеҙҙең менән бөгөн ниндәй музейҙа булдыҡ? (Башҡорт халыҡ музейында)

Нимәләр менән таныштыҡ?

Был экспонаттар араһында һеҙгә ҡайһылары нығыраҡ оҡшаны?

Балалар, беҙ был музейҙа булғайныҡ, һәм альбом яһай башлағайныҡ.

Бөгөнгө дәрестә күргән экспонаттарҙы йыйып альбомға һалып ҡуйырға тәҡдим итәм.

***Хәкимова З.И.,***

*Баланы үҫтереү үҙәге – 6-сы һанлы балалар баҡсаһы,*

*Раевка ауылы, Әлшәй районы*

## ЙӨН ҺӘМ УНЫҢ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

**Тема: “Йөн һәм уның үҙенсәлектәре”**

**(танып белеүҙе үҫтереү, өйрәтеү)**

Йөн тураһында белемдәрҙе киңәйтеү күҙаллана, уның сифаты һәм үҙенсәлеге ҡарала, башҡорт орнамент технологияһы менән эшләгәндә кейеҙ, боронғо ысулдарын ҡарау; яңы һүҙҙәр менән балаларҙың телмәрен әүҙемләштереү, йөн үҙенсәлектәрен билдәләү; коллективта эшләү һәләтен үҫтереү; ҡулдарҙың ваҡ моторикаһын үҫтереү, хәтерҙе, фекерләүҙе, иғтибарҙы формалаштырыу; тирә-яҡ донъяны танып белеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү; мәҙәни ҡиммәттәребеҙгә ихтирам тәрбиәләү.

**Төп белем биреү өлкәһе**: сәнғәт-зауыҡ үҫеше

**Интеграция өлкәләре**: танып белеү, социаль-коммуникатив үҫеше, уйын, художестволы эстетик, коммуникация).

**Маҡсаттар:**

Белем биреү маҡсаттары:

• Башҡорт халҡының һарыҡ йөнөнән эшләнгән ҡулланмалар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Кейеҙ баҫыу тураһында балаларға башланғыс белем биреү;

Телмәрҙәрен яңы һүҙҙәр менән байытыу;

Үҫеш маҡсаттары:

• Балаларҙың бәйләнешле телмәрен үҫтереү;

• Бармаҡ хәрәкәтен үҫтереү;

• Балаларҙа ижади һәләтлелекте һәм үҙаллылыҡты тәрбиәләү.

Тәрбиәүи маҡсаттар:

Балаларҙа башҡорт халҡының боронғо шөғөлдәренә иғтирам, үҙ-ара дуҫлыҡ, халыҡ ижадына хөрмәт тәрбиәләү.

Һүҙлек эш: кейеҙ, тетеү.

Эш алымдары: әңгәмә, схемалар менән эш, йомаҡ сисеү, практик эш тәжрибә, практик эш.

Йыһазландырыу: схемалар, ноутбук, экран, тәжрибә өсөн әсбәптәр, алдан баҫылған кейеҙ, аҡ һарыҡ йөнө

Әҙерлек эше: йөндән эшләнгән уйынсыҡтар, көнкүрешендәге йөндән эшләнгән әйберҙәр;

Түшелдерек, түбәтәй өсөн орнаменттар.

Дәрес барышы:

(Балалар түңәрәк яһап баҫалар).

Тәрбиәсе. Ниндәй яҡшы балалар

Иртән осрашыу менән
Теләй алам һәр дуҫыма
Хәйерле иртә һәм көн!

Беҙҙә бер беребеҙгә балалар хәйерле көн теләйек!

Хәйерле иртә (исемдәрен әйтеп сығалар)

- Балалар, минең ҡулымда ҡумта. Был ҡумтала нимәлер бар. Уны белер өсөн һеҙгә йомаҡ сисергә кәрәк.

Йылыта, кейендерә кешене һөйөндөрә.

- Нисек уйлайһығыҙ нимә ул?
- Эйе, был йөн.
- (ҡумтаны асып йөн күрһәтә)

Был хаҡта нисек белдегеҙ?

Беҙ бөгөн һеҙҙең менән йөн тураһында һөйләшәбеҙ балалар.

- Кеше уны яһаймы или берәй ерҙән аламы? Кем беҙгә йөн бирә?

Һарыҡ беҙгә йөн, ит, тире бирә. Йөндән юрған, свитер, башлыҡ, бейәләй, свитер, бәйләйҙәр. Тиреһенән тун теккәндәр.

- Ә ни өсөн кәрәк һуң йөн кешегә?
- Балалар, йөндән тағы ла кейеҙ яһайҙар.

(схема ҡуйыла)

Балалар, беҙ һеҙҙең менән кейеҙҙе нисек баҫҡандарын схема аша һөйләп ҡарайыҡ.

(тәрбиәсе иң беренсе үҙе һөйләп үтә).

Кем беренсе һөйләп үтә. Эҙмә – эҙлекле дөрөҫ итеп һөйләп үтәйек.

1. Йөндө тетәбеҙ.
2. Йәйеп һалабыҙ.
3. Һабындың иҙмәһе өҫтөнә һибелә.
4. Йылы һыу ҡоябыҙ.
5. Уҡлауға уратып, тәгәрәтәбеҙ.
6. Тәгәрәткәндән һуң, кейеҙ әҙер булғас, һалҡын һыуҙа сайҡатып һәм киптерелә.

Бына шулай өйҙә кейеҙ баҫыла.

Схема буйынса бер дүрт бала һөйләй.

- Балалар элек – электән үк башҡорт халҡы кейеҙҙе бик киң ҡулланған. Кейеҙ – уларҙың иң ҡиммәтле әйбер тип һаналған. Кейеҙҙе улар тирмә тышын ҡаплағандар, тирмә эсенә йәйгәндәр аяҡ аҫтына, шулай уҡ кейгән кейемдәре, барыһы ла йөндән, кейеҙҙән тегелеп кейелгән.

- Кейеҙ халыҡ йолалары, ғөрөф– ғәҙәттәренә айырылғыһыҙ өлгө булып торған.

Кейеҙ етештереү мөмкинселегe хәҙерге беҙҙең замандала бик киң ҡулланыла, балалар.

Беҙҙең Башҡортостанда ла кейеҙ етештереүҙе үҫтерәләр, сөнки төрлө матур пальтолар



Төрлө төрлө аяҡ кейемдәре



Баш кейемдәре





Балаҫтар һәм башҡа төрлө әйберҙәр етештерәләр. Бына ниндәй матур кейемдәр, етештерелә хәҙерге замандала кейеҙҙән. Ниндәй мөһим роль уйнай балалар.

**Ял минуты:**

Күрһәт әле үҫкәнем
Нисек йөндө йыуалар?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай йыуалар (хәрәкәт күрһәтәләр)

Күрһәт әле үҫкәнем
Нисек йөндө тетәләр?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай тетәләр.(*хәрәкәт күрһәтәләр*)

Күрһәт әле үҫкәнем
Нисек кейеҙ баҫалар?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай баҫалар. *(хәрәкәт күрһәтәләр*)

Күрһәт әле үҫкәнем
Нисек күңел асалар?
Бына шулай, бына шулай,
Бына шулай күңел асалар (*хәрәкәт күрһәтәләр*).

**Тәжрибә үткәрелә**

Йөн – ниндәй ул? Йөн тураһында белер өсөн, әйҙәгеҙ үҙенсәлектәрен билдәләйек – ниндәй ул, нимәнән ҡурҡа, ни өсөн йөн киң ҡулланыла.

1 . ҡулға алып тотоп ҡарайыҡ – ниндәй?
Тимәк ниндәй символ һайлайбыҙ? (йомшаҡ)
2. биткә ҡуйып ҡарайыҡ (йылы)
Йылы билдәһен һайлайбыҙ
3. һуҙып ҡарайыҡ ( һуҙыла)
Һуҙыла билдәһен һайлайбыҙ
4. кире бергә йыйып ҡарайыҡ( йыйыла)
Билдәләйбеҙ
5. ус төбөнә һалып йомарлап ҡарайыҡ( йомарлана)
Йомарлана – билдәләйбеҙ
6. йоморо йөндө усҡа һалып ҡуйып ҡыҫып ҡарайыҡ(ҡыҫыла)
Ҡыҫыла билдәһен ҡуябыҙ.
7. ҡайсы алып киҫеп ҡарайыҡ(киҫелә)
Киҫелә билдәһен ҡуябыҙ.

8. кисточка алып буяп ҡарайыҡ(буяла)

Буяла

Афарин балалар. Йомғаҡ яһап тағыла бер тапҡыр схемаға ҡарап йөндөң үҙенсәлектәрен әйтеп сығайыҡ.

Балалар һеҙ нисек уйлайһығыҙ ни өсөн кешеләр юрған, мендәр йөндән эшләргә тырышалар. Ниндәй маҡсат менән? Йөн йылы, буяла, йомшаҡ........

Уйлап ҡарағыҙ әле йөн булмаһа, беҙ йөндө башҡа әйбергә алмаштыра алабыҙмы?

**Йәбештереү.**

Балалар, йөн үҙенсәлектәре иҫ киткес. Кейеҙҙән төрлө-төрлө биҙәгестәр, сувенирҙар, сумкалар, һырғалар, мәрйендәр эшләргә өйрәнгәндәр. Хәҙер беҙ һеҙҙең менән өҫтәлгә яҡыныраҡ килеп, ҡыҙҙар кейеҙҙән матур түшелдеректәр, малайҙар үҙҙәренә түбәтәйҙәр биҙәргә тәҡдим итәм. Бының өсөн беҙ алдан орнаменттарын киҫеп ҡуйғайныҡ, балалар.

***Хәкимова З.И.,***

*Баланы үҫтереү үҙәге – 6-сы һанлы балалар баҡсаһы,*

*Раевка ауылы, Әлшәй районы*

## КӨЛМӘҪБИКӘ ҠУНАҠТА

**Өйрәтеү:**

Башҡорт халҡының борон-борондан килгән тормошо һәм хеҙмәте, һөнәр-кәсептәре, халыҡ ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү. Солоҡ кәсебе тураһында төшөнсә биреү, уның ҡорамалдары менән таныштырыу. Балаларҙы заманса тегелгән башҡорт кейеменә аңлатма биреү. Заманса төҙөлөштәргә, тирә-яҡтың атамалы урындарына иғтибар биреү.

**Үҫтереү:**

Төп фекерҙе эҙмә-эҙлекле аңлатып биреү һәләтен үҫтереү

Һүҙлек запасын байытыу,бәйләнешле телмәрҙе активлаштырыу.

**Тәрбиәләү:**

Балаларҙа башҡорт халҡының йолаларына, ғөрөф – ғәҙәттәрнә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү, күҙәтеүсәнлек, иғтибарлылыҡ тәрбиәләү.

Предварительная работа: беседы о том, где мы живем (Республика Башкортостан, город Уфа, какие народы населяют нашу республику (башкиры, татары, русские) – их языки; экскурсия в детсадовский мини-музей «Жилище башкир», настольно-печатные игры: «Сотки ковёр», «Найди свой элемент», «Собери башкирскую посуду», «Башкирское лото».

**Чтение легенды “Курай”**

Балалар, беҙҙә бөгөн ҡунаҡтар. Әйҙәгеҙ, һаулыҡ һорашайыҡ.

Һаумыһығыҙ !!!

Урындарына ултырышалар

**Дәрес барышы**

**Тәрбиәсе**

Балалар мин һеҙгә бөгөн әкиәт һөйләйем.

Борон – борон заманда бер ил батшаһы йәшәгән. Уның Көлмәҫбикә тигән ҡыҙы булған. Ул бер ваҡытта ла көлмәгән, шатланмаған. Бер ваҡыт ул ҡысҡырып илай башлаған.

У – у – у – Миңә бында бик күңелһеҙ, йәшәйһем килмәй. Донъя күреп, икенсе илдәрҙәлә йөрөп ҡайтаһым килә тип илаған.

А – а – а! “Беләм мин һинең тылсымлы балаҫың бар икәнен, һиңә уны ниндәйҙер төбәктән ебәрҙеләр. Мин шул яҡҡа балаҫҡа ултырып осаһым килә” – тип илаған атаһына!

Көлмәҫбикә шул балаҫҡа ултыра ла осоп китә.

**Тәрбиәсе.** Балалар, Көлмәҫбикә ниндәй балаҫҡа ултырған?

**Балалар.** Башҡорт халҡының биҙәге менән биҙәлгән.

Күп йылғалар, күлдәр аша үтә икән, иң ҙур – Ағиҙел йылғаһы турыһында туҡтала. Йылға ҡырында матур бер ҡала урынлашҡан булған. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ул ҡала нимә тип атала? (Өфө) Балалар, Көлмәҫбикә ниндәй төбәккә эләккән? (Башҡортостанға)

**Тәрбиәсе.** Ә Көлмәҫбикә китеп бара икән, Өфө ҡалаһы урамдары буйлап бара торғас бер матур , ҙур бина күреп ҡала.

**Тәрбиәсе.** Балалар һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был ниндәй бина икән?

**Балалар.** Төрлө яуаптар бирәләр. Өй, банк, офис, дворец һ.б.

**Тәрбиәсе.** Ул башҡорт халыҡ музейы. Көлмәҫбикә хайран ҡалған был музейҙа. Нимәләр генә юҡ унда. Шулай йөрөй торғас унда бер нимә күреп ҡалған.

Көлмәҫбикә аптырап ҡалған?

Балалар нимә ул?

**Балалар.** Был тирмә, элек башҡорттар йәшәгәндәр.

**Тәрбиәсе.** Тышын нимә менән ҡаплағандар? (Кейеҙ)

**Тәрбиәсе.** Тирмә тиҙ генә һүтелеп, йыйыла торған булған. Эсенә матур – матур һуғылған балаҫтар йәйгәндәр.

**Тәрбиәсе.**Тирмә эсендә тағы ла нимәләр булған балалар?

**Балалар.** Кейемдәре, йоҡлағанда ҡуллана торған әйберҙәре, ашамлыҡтар, һауыт – һабалары, балаҫтары, сәңгелдәк, ҡул тигермәне, ҡаба булған. Ҡаба – ул йөн иләй торған ҡорал.

**Тәрбиәсе.**Тирмәнең эсе, балалар , нисәгә бүленгән?

**Тәрбиәсе.** Ни өсөн икегә бүленгән?

**Балалар.** Бер яғында ҡатындар торған, икенсе яғында ирҙәр торған.

**Тәрбиәсе.** Ҡатындар нимә менән шөғөлләнгәндәр?

**Балалар.** Бала ҡарағандар, ашарға бешергәндәр,

**Тәрбиәсе.** Балаҫ һуҡҡандар, йөн иләгәндәр. Шуның өсөн һауыт – һаба, кейем һалым, эш ҡоралдары бөтәһе лә ҡатын ҡыҙҙар яғында булған. Балалар күрәһегеҙме, йөн иләй торған ҡорал элек башҡорт халҡы ҡаба тип атаған. Ҡабатлағыҙ әле – ҡаба. (Ҡаба)

**Тәрбиәсе.** Ирҙәр нимә эшләгәндәр?

**Балалар.** Улар малсылыҡ менән шөғөлләнгәндәр, һунарға ла йөрөгәндәр, балыҡ тотҡандар.

**Тәрбиәсе.** Дөрөҫ, балалар. Шуның өсөн ирҙәр яғында, стена ла уҡ, мылтыҡ, сумка кеүек әйберҙәр элеүле торған.

**Тәрбиәсе.** Көлмәҫбикә тирмә ҡырында нимәлер күреп ҡала. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ ,балалар ,был нимә? (Һандыҡ)

**Тәрбиәсе.** Ни өсөн һандыҡ кәрәк булған?

**Балалар.** Ҡатын – ҡыҙҙар ҡунаҡҡа кейгән әйберҙәрен һалып ҡуйғандар, йоҡлағанда ҡулланған әйберҙәрен өҫтөнә даҫлап ҡуйғандар.

**Тәрбиәсе.** Бына ниндәй матур башҡорт халҡының кейеме элеүле тора.Был баш кейемдәре. Ниндәй төҫлө матур мәрйен тәнкәләр менән биҙәлгән.

Ә бына башҡорт халҡының күлдәктәре ниндәй матур төҫлө туҡымаларҙан тегелгән. Көмөш тәнкәләр, төҫлө таҫмалар менән биҙәлгән. Күлдәк өҫтөнән камзул кейгәндәр. Камзулды ла матур ялтырап торған көмөш тәңкәләр менән биҙәгәндәр.

**Тәрбиәсе.** Көлмәҫбикә шул ваҡыт бер моң ишетеп ҡалған.

**Ҡурай моңо яңғырай.**

**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ әле беҙҙә тыңлайыҡ, балалар!!!

**Тәрбиәсе:** Был ниндәй моң ?

**Балалар:** Ҡурай (Тыңлайҙар)

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ. Балалар, Көлмәҫбикә ҙә иҫе китеп тыңлап тора был моңдо.

Ҡурай – башкорт халыҡ инструменты. Ҡурай – ете тажлы сәскәнән яһала. Ул беҙҙең Башҡортостада үҫә.

**Тәрбиәсе.** Әйҙәгеҙ, әле беҙ һеҙҙең менән “Ҡурай” уйыны уйнап алайыҡ.

**Уйын “Ҡурай”**

Әйҙә дуҫтар баҫайыҡ
Ҙур түңәрәк яһайыҡ
Кем ярышҡа сығырын
Шуны эҙләп табайыҡ!

**Балалар ултыралар урындарына.**

**Тәрбиәсе.** Көлмәҫбикә музейҙың залы буйлап киткән, һәм ул бына нимә күреп ҡалған. Һеҙ нимә тип уйлайһығыҙ? (Умартасы) яуаптар төрлөсә булырға мөмкин.

**Тәрбиәсе.** Элек башкорттар солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгәндәр.

Башҡорт урманында солоҡсолоҡ менән шөғөлләнеүе бик еңел булған. Ҡырағай ҡорттар үҙҙәре ағас һайлап ағас ҡыуышлығында йәшәгәндәр. Кешеләр әҙер балды йыйып ҡына алғандар. Һуңғараҡ кешеләр баллы – ҡортло ағасҡа тамға һалып барғандар. Ағас башына менер өсөн улар үҙҙәренә арҡан ишкәндәр, билдәрен бәйләп, ағас башына менгәс, иркенләп эшләп бал алып төшкәндәр. Тағы ла ҡоралдары булған. Ағастан эшләнгән төрлө һауыттар, күс йыя торған һауыттар ҡулланғандар. Хәҙерге ваҡытта ла солоҡло ағастар Бөрйән заповеднигында һаҡлана, хатта Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Шуның өсөн дә башҡорт балы бөтә илгә дан тота.

**Тәрбиәсе.** Балалар балды ниндәй һауытта һаҡлағандар? (яуап)

**Тәрбиәсе.** Балды ағастан яһалған ҙур батман да һаҡлағандар. Ҡабатлағыҙ әле балалар – батман.

**Тәрбиәсе.** Шулай итеп Көлмәҫбикәгә бирелгән ваҡыт үтеп тә киткән. Ә музейҙа әле башҡорт халҡының ҡыҙыҡлы ваҡытларын сағылдырған әйберҙәр күп. Беҙ улар тураһында киләһе дәрестәрҙә өйрәнәбеҙ.

Ә беҙ Көлмәҫбикәгә башына кейә торған ҡашмау бүләк итәйек.

**Йәбештереү** “Ҡашмау биҙәү” Өҫтәл ҡырына яҡырыныраҡ киләйек балалар.

**Тәрбиәсе.**

Көлмәҫбикәгә Башҡортостанда бик оҡшаған. Ул үҙенең балаҫына ултырып ҡайтып киткән, һәр ваҡыт Башҡортостанды иҫенә тошороп гел йылмайып, шатланып йәшәгән. Балалар беҙҙең хәҙерге Башҡортостаныбыҙ бай, йәмле, матур төйәк.

Беҙҙә хәҙер матур – матур йорттар, тигеҙ юлдар, күперҙәр, заводтар, фабрикалар төҙөлә. Ә шулай ҙа беҙ үҙҙебеҙҙең үткәнебеҙҙе онотмаҫҡа тейешбеҙ!

Ошоноң менән балалар беҙҙең дәрес тамам.

**Использованная литература**:

1. Азнабаева Ф.Г Осҡон.
2. Агишева Р.Л. Я– башҡортостанец.
3. Гасанова Р.Х. Земля отцов
4. Азнабаева Ф.Г., Альбакова Г.Ш., Буранбаева А.Р., Муртаева К.Ф. Башҡортостан – тыуған илем. Уфа, 2016 й.
5. Ахмеров Р.Б. Об истоках декаративно-прикладного искусства башкирского народа. Уфа, 1996.
6. Галина Г.С. Из истории башкирской музыкальной культуры.Уфа,2002.
7. Молчева А. В. Народное декоративно-прикладное искусство Башкортостана – дошкольникам. – Уфа: Башкирское издательство «Китап», 1995.
8. Шитова С. Н. Башкирская народная одежда. – 1-е изд. – Уфа: Китап, 1995.
9. Булгаков Р. М. Материальная культура башкирского народа. – Уфа: Китап, 1998.

***Хәкимова З.И.,***
*Баланы үҫтереү үҙәге – 6-сы һанлы балалар баҡсаһы,*
*Раевка ауылы, Әлшәй районы*

# БӘЙЛӘНЕШЛЕ ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ДӘРЕСЕ
# “ӘСӘ РӘХМӘТЕ”

(төрлө йәштәге балалар төркөмө өсөн)

**Образовательная область:** познавательное развитие.

**Виды детской деятельности:** игровая, продуктивная, коммуникативная, чтение художественной литературы.

**Цель:** способствовать углублению у детей чувства привязанности и любви к самому близкому человеку – маме.

**Задачи:**

**Образовательные:**

Формировать уважительное и бережное отношение к маме, нравственные качества;

Формировать умение давать моральную оценку героям художественных произведений, отвечать на вопросы.

**Развивающие:** развивать познавательную активность, логическое мышление, речь детей, память; умение пользоваться ножницами, развивать мелкую моторику рук.

**Воспитывающие:** воспитывать у детей доброе, внимательное, уважительное отношение к маме, стремление помогать ей, и радовать ее;

Воспитывать дружеские взаимоотношения, выдержку, умение работать в коллективе.

**Средства:** пиктограмма, демонстрационные картинки для рассказа, «лучики» для игры, клей, салфетка.

**Дәрес барышы:**

Түңәрәккә баҫабыҙ
Һин минең дуҫ, мин һинең
Ҡулға ҡул тотоношоп
Ҡунаҡтарға йылмайып
Һаулыҡ һорайбыҙ
Һаумыһығыҙ , ҡунаҡтар!!!
(Балалар ултырышалар)

**Тәрбиәсе.**

Мин һеҙгә шиғыр уҡып китәм.

**Әсә.**

“Әсәй” тигән оло һүҙҙе
Тәү башлап бала әйтә
Әсәләрҙәй изге йәндәр
Юҡтыр ул был донъяла!!!
Төндәр буйы йоҡламайса
Әкиәт һөйләгән – әсә.
Үҫ, балам, үҫ тиҙерәк, тип
Көйҙәр көйләгән әсә.
(Г. Муллағалиева.)

**Тәрбиәсе.**

Нимә тураһында шиғыр? (Әсә)

Беҙ бөгөн әсәй тураһында һөйләшәбеҙ.

Ер шарында ниндәй генә милләт йәшәһә лә, улар барыһы ла “Әсә”тигән һүҙҙе үҙҙәренсә әйтәләр, һәм ул һүҙҙәр барыһы ла оҡшаш яңғырай.

Тыңлағыҙ әле:

Французлар – маман

Немецтәр – мама
Әрмәндәр – мамаджан
Ә бына русстар нимә тип әйтәләр? (Мама)
Татарҙар нисек әйтәләр? (Әни)
Башҡорттар нимә тип әйтә балалар? (Әсәй, инәй)
**Тәрбиәсе.** Әсәйҙәр тураһында күп йырҙар, шиғырҙар, хикәйәләр, әкиәттәр яҙылған.Мин һеҙгә “Әсә рәхмәте” тигән хикәйә уҡыйым, уны Ә. Хәсән яҙған. (уҡый)
(Тәрбиәсе һорауҙар бирә)
Рөстәмдең әсәһе нимәгә хафаланды?
**Балалар.**
Өй эшен бөтөрөп китмәгәнгә.
**Тәрбиәсе.**
Өй эсенә ингәс нимә эшләне?
**Балалар.** Аптыраны
**Тәрбиәсе.** Ни өсөн?
**Балалар.** Рөстәм өй эштәрен бөтөргән, иҙән йыуған, утын ярған,ҡош – ҡорттарҙы ашатҡан.
**Тәрбиәсе.** Һуңынан әсәһенең кәйефе ниндәй ине балалар? (шат, күңелле булып китте)
**Тәрбиәсе.** Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн Рөстәм шулай әсәһе ҡайтыуына бөтөн эшен эшләгән?
**Балалар.** Әсәһе эштән арып ҡайта. Әсәһен шатландырырға уйлаған. Уның эше бик ауыр икенен аңлаған.
**Тәрбиәсе.**
Рөстәм һеҙгә ниндәй яғы менән оҡшаны?(аҡыллылығы һәм егәрлеге)
Һеҙ уға оҡшарға теләр инегеҙ ме? (эйе)
Һеҙ нисек ярҙам итәр инегеҙ әсәйҙәрегеҙгә?
**Әйҙәгеҙ, һеҙҙең менән уйын уйнап алайыҡ.**
**“Уңған эш нурҙары”**
*(Һәр бала килеп бер ҡояш нуры алып ҡояшка беркетеп ҡуя)*

- Иҙән һыуыртам
- Һауыт-һаба йыуышам
- Гөлдәргә һыу һибәм
- Өҫтәл ултыртышам
- Өҫтәл йыйышам
- Карауат йыйышам
- Ҡурсағымдың күлдәген йыуам
- Үтекләйем
- Ҡар көрәйем
- Утын ташышам

**Тәрбиәсе.**
Афарин, балалар, бына ниндәй матур йәмле кояш нурҙарын йыйҙыҡ. Күпме эш һөнәрҙәре менән әсәйҙәрегеҙҙе шатландырып тораһығыҙ икән балалар.
**Тәрбиәсе.**
**Балалар, әсәй тураһында шиғыр ятлап алабыҙ.**
Беҙ уны схема ярҙамында ятлайбыҙ.
Мин әсәйем менән уйнайым, бейейем, уҡыйым, йырлайым. (кескәйҙәр менән бергә)
**Түңәрәккә баҫайыҡ**
**Ял минуты яһайыҡ.**
**(Кескәйҙәр сығып китәләр)**
**Тәрбиәсе.**
**Беҙ балалар һеҙҙең менән тағы ла уйын уйнап алабыҙ.**
**“Һөйләмде дауам ит”**

- Минең әсәйем иң...
- Минең әсәйем тәмле...
- Минең әсәйем шатлана...
- Миңә оҡшай, ҡасан мине әсәйем...
- Минең әсәйем ҡайғыра...
- Мин әсәйемде күрһәм...

**Тәрбиәсе.**

Афарин балалар.

Бына миндә әсә кеше. Минең дә ике балам, ике ейәнсәрем бар. Улар миңә көн дә шылтыратып, минең хәлемде белеп, үҙҙәренә кәрәк кәңәштәрен һорап торалар. Бының өсөн мин бик ҡыуанам. Мин ҡыуанғас улар ҙа бик шат.

Һеҙ ҙә шулай әсәйҙәрегеҙҙе шатландырып, һөйөндөрөп, бүләктәр биреп, яғымлы һүҙҙәр әйтеп тороғоҙ.

Бына оҙаҡламай әсәйҙәр байрамы яҡынлашып килә, сер булмаһа беләйек әле, һеҙ нимә бүләк итәр инегеҙ әсәйҙәрегеҙгә?

**Балалар.**

Мунсаҡ, сәскә, картина, йөҙөк, открытка һ.б.

**Тәрбиәсе.**

Бына миңә Гөлемештең бүләге бик тә оҡшаны, балалар. Мин һеҙгә открытка яһарға тәҡдим итәм.

Открытка салфеткалар менән биҙәлә.

*(Йөрәк төҫлө картондан киҫелгән, икенсеһе бәләкәй форматта киҫелә. Бәләкәйе биҙәлә салфеткаларҙан яһалған йомроҡайҙарҙан. Һуңынан оло йөрәккә йәбештерелеп ҡуйыла.)*

**Тәрбиәсе.**

Афарин, балалар. Мин уйлайым һеҙҙең әсәйҙәр был бүләкте алғас: “ Минең ғаиләмдә ниндәй ихтирамлы, иғтибарлы, яғымлы, һөйкөмлө кеше – минең улым йәки минең ҡыҙым үҫә тип шатланыр” – тип уйлайым. Бүләктәрҙе әсәйҙәргә бүләк итәрбеҙ!

**Афарин, балалар!**

***Хәкимова З.И.,***
*Баланы үҫтереү үҙәге – 6-сы һанлы балалар баҡсаһы,*
*Раевка ауылы, Әлшәй районы*

## “ӨЛӘСӘЙҘӘ ҠУНАҠТА”

**Маҡсат:** Башҡорт халҡының ижадына ҡарата балаларҙың рухи донъяһын байытыу, ижадҡа ынтылышы булған балаларҙың һәләттәрен үҫтереү, тел байлығын байытыу. Халҡыбыҙҙың байрамдарын, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыуҙы дауам итеү, камиллаштырыу. Халыҡ уйындары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Тыуған теленә ҡарата ғорурлыҡ хисе, мөхәббәт тәрбиәләү.

Зал матур өй йыһаздары менән биҙәлгән, һике өҫтөнә матур балаҫ йәйелгән. Һике өҫтөндә өлсәй йөн иләп ултыра.

Ҡыҙҙар һәм малайҙар бергәләшеп инәләр:

**Ҡыҙ бала:** Һаумы, өләсәй! Нимә эшләйһең? Беҙ һиңә ҡунаҡҡа килдек.

**Өләсәй:** Һаумыһығыҙ, бәләкәстәрем! Түрҙән уҙығыҙ, минең оноҡсаларым! Рәхмәт һеҙгә, хәл һорашып тораһығыҙ! Ултырышығыҙ ҡайҙа һеҙгә оҡшай! Бына йөн иләп ултырам, һеҙгә ойоҡ баштары, бейәләйҙәр бәйләргә. Аяҡ ҡулдарығыҙ ҡыш көнө өшөмәһен тимен. Бына минең иң бәләкәстәрем үҙ эштәрен эшләп ултыралар. Ә һеҙ ниндәй ҡул эштәре алып килдегеҙ?

(ҡыҙҙар киргеләрен тотоп сигә башлайҙар, йөн йомғағын йомарлайҙар, йөн тетәләр, малайҙар быйма төпләп ултыралар, тағараҡтарҙы, сыйырсыҡ ояларын тәртипкә килтерәләр )

**Өләсәй йыр йырлай “Шәл бәйләнем”**
**Өләсәй**: Мин һеҙгә әкиәт тә һөйләп китәйем әле , балаҡайҙарым. Тыңлап ҡарағыҙ әле
**(Әкиәт һөйләй)“Айыу һәм төлкө”**
Һеҙгә оҡшанымы мин һөйләгән әкиәт?
Эй, балаҡайҙарым һеҙ нимә эшләп шым ғына ултыраһығыҙ әле?
**Моңайышып ултырмайыҡ**
**Уйындарҙа уйнайыҡ**
**Баҫайыҡ түңәрәккә**
**“Түбәтәй” уйынына**
(Балалар түңәрәкә баҫып түбәтәй уйыны уйнайҙар)
Тюп, тюп тюбәтәй
Тюбәтәйең уҡалы
Сиккән матур түбәтәйең
Бына кемдә туҡталды
Утырышалар.
**Өләсәй:**
**Йомаҡ әйтәм, йомаҡ әйтәм,**
**Уны сискән сос булыр,**
**Сисәлмәгән тик торор.**
Дүрт ағайға бер эшләпә (Өҫтәл)
Ҡолағы бар – ишетмәй
Аяғы бар – атламай
Тауышы бар – һөйләшмәй (Самауыр)
Нескә билле бер ҡыҙыҡай
Бейеп туҙан туҙҙыра (Һепертке)
Бәләкәй генә аҡ килен
Йүгерә – йүгерә ҡунаҡ һыйлай (Сәйнүк)
**Өләсәй:** Афарин балалар.



Һеҙ ниндәй һөнәрҙәр беләһегеҙ? Атай – әсәйҙәрегеҙгә нисек ярҙам итәһегеҙ?
**Ҡыҙҙар:** табаҡ, һауыт – йыуабыҙ, иҙән һеперәбеҙ, йөн иләйбеҙ, йөндө тетәбеҙ, сигеү сигәбеҙ;
**Малайҙар:** утын ярабыҙ, һыу керетәбеҙ, һарыҡтарға ашарға бирәбеҙ, уларға һыу эсерәбеҙ,бесән һалабыҙ,
**Йыр “Ҡара ҡаршы әйтешеү”**
**Өләсәй:** Афарин, балалар! Эй, минең күршеләрем дә кереп киләләр.
**Миләүшә:** Беҙ ҙә һеҙгә ҡунаҡҡа килдек әле! Үҙебеҙ менән бейеү алып килдек.
**“Кәсә” бейеүе (бейейҙәр).**
**Өләсәй:** Рәхмәт һеҙгә, күрше ҡыҙҙары. Бик матур бейеү бейенеләр.
(Сығып китәләр һаубуллашып)
**Өләсәй:** Ә хәҙер балалар башҡарыуында таҡмаҡтар тыңлап алайыҡ.
**Йыр “Эх, тала, тала беләгем” (таҡмаклар)**
1. Әтәс менгән ситәнгә Нурсултан
Кикирикүк итәргә
Әтәскә лә хәбәр килгән
Армияға китәргә
2. “Әтәс әйтә бармайым” Ильназ
“Тауыҡ әйтә ҡалмайым”

Әтәс армияға китһә
Бер күкәй ҙә һалмайым
3. Иҫәнмеһеҙ, һаумыһыҙ Ильяс
Ниңә кәзә һаумайһыҙ
Әтәсегеҙ күкәй һалған
Ниңә сығып алмайһыҙ?
4. Ике һарыҡ юлға сыҡҡан Алмаз
Ҡулдарында чемодан
Ирендәрен буяғандар
Биттәре йыуылмаған
5. Ике себеш алып киткән Радмила
Беҙҙең шишмә улағын
Әтәс юлда тотоп алып
Борған икән ҡолағын
**Өләсәй:** Афариндар балалар.
Бергәләшеп баҫайыҡ
Яһайыҡ беҙ түңәрәк
“Итексе” уйынына
**Өләсәй:**
Башҡорт халыҡ ижадында
Кешенең һәр эшенә
Әйтеме, мәҡәле бар
Иҫкә төшөрәйек әле.
Балалар мәҡәлдәр әйтәләр:
1.Кем эшләмәй, шул эшләмәй.
2.Китап белем шишмәһе.
3.Икмәк – иң ҙур байлыҡ.
4.Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын
5.Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ
6.Олоно ололаһаң, үҙеңде ололарҙар
7.Уңған кеше – алтын кеше



**Өләсәй:** Ә хәҙер беҙгә Радмила “Тейен тубырсыҡ яра” тигән йыр башҡара.
1. Ҡарағай башы тейен, тейен,
Тейен тубырсыҡ яра 2тап.
Хатта тейен, тейен, тейен,
Тейен тубырсыҡ яра 2тап.
2. Ҡайын туҙы, ҡайын туҙы,
Ҡайын туҙы аҡ ҡына
Ҡайын араһында йөрөй
Ап – аҡ ҡуян һаҡ ҡына 2тап.
3. Ҡоштар һайрай, ҡоштар һайрай,
Ҡоштар һайрай тирәктә 2тап.
Үҙебеҙҙең урман, ҡырҙар
Эх матур шул бигрәк тә 2тап.



4. Һыу буйында, һыу буйында
Һыу буйында аҡ тирәк 2тап.
Инде сәпәкәй итегеҙ
Бергәләп шәп иттереп 2тап.

**Ҡыҙ бала:** Өләсәй беҙ шиғырҙар ҙа ятланыҡ.

Беҙҙең ауыл егеттәре Рианна
Берһенән – берһе матур,
Үҙе матур, һүҙе матур,
Тыуған илдә бер батыр
Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары Ислам
Береһенән – береһе сибәр
Шул сибәрҙәр хөрмәтенә
Йыйылдыҡ беҙ был өйгә



**Өләсәй**: Афарин, балалар. Сәй ҡайнағансы уйын уйнап алайыҡ әле

**Уйын "Йөн урау"**

Афарин, балалар, бына беҙ уйын уйнағансы сәй ҙә ҡайнап сыҡты, рәхим итегеҙ!

**Балалар**: Өләсәй, ҙур рәхмәт, бик тәмле булды. Беҙгә ҡайтырға кәрәк!

***Шәғәлина Ә.И.,***
*72-се һанлы балалар баҡсаһы,*
*Учалы ауылы, Учалы районы*

## "ХАЙУАНДАР ДОНЪЯҺЫНА ҠЫШҠЫ СӘЙӘХӘТ"

(өлкәндәр төркөмөндә интеграциялы ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге)

**Маҡсат:** ҡырағай хайуандар һәм уларҙың ҡыш миҙгелендәге йәшәйеше тураһында һөйләргә өйрәтеү.

**Бурыстар:**

- белем биреүсе: ҡырағай хайуандарҙың ҡыш миҙгелендәге йәшәйеше тураһында белемдәрҙе киңәйтеү, урманда үҙенде тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу;
- үҫтереүсе: бәйләнешле телмәр, логик фекерләүҙе, һүҙ байлығын үҫтереү, һаулыҡты нығытыу;
- ҡырағай хайуандарға шәфҡәтлелек, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Күргәҙмә материалдар: "**Урманда үҙенде тотоу ҡағиҙәләре" (һүрәттәр), уйынсыҡтар (айыу, ҡуян, бүре, терпе, төлкө, тейен, болан, ҡабан), йәнлек эҙҙәре төшөрөлгән һүрәттәр.

**Йыһазландырыу:** "Ҡырағай хайуандар ҡышты нисек үткәрә?" (презентация), "Хайуандар донъяһында" көйө, талғын көй (тәрбиәсе ҡарамағында).

**Барышы:**

**1. Инеш өлөш.**

**а) сәләмләү.**

Хәйерле көн теләп ҡояш ҡалҡа,
Уяналар ауыл, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем,
Хәйерле көн һеҙгә, балалар!
Яҡшы кәйефтәр теләйем. Иҫәнләшәйек.
Бөтөнөбөҙ – бер ғаилә,
Бөтөнөбөҙ – бер бөтөн,
Беҙгә бәхет, шатлыҡ килтер,
Һаумы, ҡояш,
Һаумы, көн!

**б) мотивация.**

- Балалар, әлеге мәлдә йылдың ниндәй миҙгеле?
- Ҡыш.

- Дөрөç. Ҡыш беҙҙә бик ҡаты, буранлы. Ә ҡышты урмандағы йәнлектәр нисек уҙғара икән, белергә теләйһегеҙме? (Балаларҙың яуаптары). Улайһа, мин һеҙҙе урманға сәйәхәткә алып бармаҡсымын. Юлланыр алдынан урманда үҙебеҙҙе тотоу ҡағиҙәләрен иçкә төшөрөп үтәйек. (Тәрбиәсе һүрәттәр күрһәтә).

Урманда ут яғыу тыйыла.

Үҙеңдең артынан сүп-сар ҡалдырырға ярамай.

Урманда шауларға ярамай.

Ағас ботаҡтарын һындырырға ярамай.

Хайуандарҙы йәберләргә ярамай.

Бына ошо ябай ғына ҡағиҙәләрҙе тотһаҡ, беҙҙең урмандар мәңге йәшәр.

Шулай итеп, сәйәхәткә юлландыҡ.

(“Хайуандар донъяһында” көйө яңғырай)

**2.Төп өлөш.**

**а) йомаҡтар.**

- Ҡышҡы урман бигерәк тә матур, саф һауа. Тәбиғәт иһә тып-тын ҡалған. Ҡарағыҙ әле, балалар, бында ниҙер бар. Нимә икән ул? (Балаларҙың яуаптары) Эйе, балалар былар – хайуандарҙың эҙҙәре. Йомаҡтың яуабын тапһаҡ, эҙҙең ҡайһы хайуандыҡы икәнен белербеҙ. (Тәләүсе һәр бала берешәр “эҙ” ала).

Йәйен – һоро, ҡышын – аҡ,
Ҡыçҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ. (Ҡуян)
Йәйен – урманда батша,
Ҡышын – ҡарҙан да аçта. (Айыу)
Ҡойроғо көлтә кеүек,
Яратҡаны – сәтләүек.
Ҡыуышҡа яһай өйөн,
Был ни? Әлбиттә , (тейен).
Энәләре күп булһа ла,
Кейем текмәй был кейек.
Сәнскеле балаһын да
Һөйә “йомшағым” тиеп. (Терпе).
Ҡара морон, һарғылт йөн,
Көлтә ҡойроҡ, хәйләкәр.
Тауыҡ итен бик ярата,
Ялан, урманда йәшәр. (Төлкө)

- Афарин, үçкәндәрем! Урманда был урында бына ниндәй хайуандар йөрөгән. Моғайын, үҙҙәренә аҙыҡ эҙләгәндәрҙер.

**б) мәғлүмәт биреү.**

- Балалар, хәҙер мин һеҙгә ҡырағай хайуандарҙың ҡышты нисек уҙғарыуы хаҡында һөйләп үтмәксемен. Уңайлы итеп ултырҙыҡ. Иғтибарҙы интерактив таҡтаға йүнәлтәйек.

Ҡышты ҡайһы бер ҡырағай хайуандар йоҡлап уҙғара. Йоҡо ваҡытында улар бер нимә лә ашамай, үçмәйҙәр һәм бер ниндәй ҙә тауышҡа иғтибар итмәйҙәр, уянмайҙар.

Йоҡоға талыр алдынан, улар көҙөн бик күп итеп туҡланып, май ҡатламы туплай. Ошо май ҡатламы уларҙы ҡышҡы һалҡындан һаҡлай ҙа инде.

Ҡышын ҡырағай хайуандар һыуыҡтан түгел, бигерәк тә, аҙыҡ етмәүҙән йонсой. Өшөмәç һәм үлмәç өсөн, уларға аҙыҡ кәрәк.

***Слайдтар ҡарау (презентация)***

**в) уйындар.**

- Балалар, әйҙәгеҙ, ҡышҡы тәбиғәттә бер аҙ уйнап ял итеп алайыҡ. Түңәрәккә баçтыҡ.

**Ҡурҡаҡ ҡуян**

Ап-аҡ ҡына ҡурҡаҡ ҡуян
Ҡолаҡтарын уйната. *(ҡулдарҙы баш осона ҡуябыҙ)*

Ҡуянҡайға һыуыҡ ҡышын
Ҡулын шулай йылыта. *(ҡулды ҡулға һуғабыҙ)*
Сәп-сәп, сәп-сәп.
Тик тороуы һыуыҡ уға
Шуға һикереп йылына. *(һикерәбеҙ)*
Һоп-һоп, һоп-һоп.

**Тайыш табан**

Урман буйлап йырлай-йырлай,
Тайыш табан атланы. *(Айыу булып атлау)*
Тубырсыҡтар йыйған саҡта *(эйелеп тубырсыҡ йыйыу)*
Маңлайына сәпене. *(Ус менән маңлайға һуғыу)*
Асыуынан сыҙай алмай
Дөп тә дөп ул һикерҙе. *(Аяҡтар менән тыпырлау)*

- Балалар, ә хәҙер тын алыу юлдарына күнегеүҙәр эшләп алайыҡ.

*(Талғын көй яңғырай)*

*"Елкәй" күнегеүе*

*Төп торош: танауыбыҙ менән иркен итеп тын алабыҙ, 1 – көслө итеп тынды сығарабыҙ. 2 – 3-4 секундҡа тынды тотабыҙ. 3 – ҡымтылған ирен аша көслө итеп тынды бүлеп-бүлеп сығарабыҙ. (5 тапҡыр)*

- Тағы ла бер күнегеү: күҙҙәр өсөн. Беҙҙең күҙҙәр яҡшы күрһен, уларҙы беҙ һаҡларға тейешбеҙ.

*(Талғын көй яңғырай)*

*Уңға ҡарайбыҙ, һулға ҡарайбыҙ, уңға, һулға (5 тапҡыр)*

*Аҫҡа ҡарайбыҙ, өҫкә ҡарайбыҙ, аҫҡа, өҫкә. (5 тапҡыр).*

**г) "Нимә йәшенде?" (дидактик уйын).**

- Балалар, тағы бер уйыным бар. Бына ҡарағыҙ әле, өҫтәлдә "хайуандар" теҙелешеп ултыра . Нимәләрҙе күрәбеҙ ? (Был – айыу, тейен, төлкө, ҡуян, терпе, бүре). Балалар, башҡорт телендә беҙ кешене генә кем тибеҙ, ә хайуандар нимә һорауына яуап була. Ошо хайуандарҙың береһен мин йәшерәм, ә һеҙ нимә юғалғанын әйтегеҙ.

- Афарин, балалар!

**д) ҡырағай хайуандар тураһында һөйләтеү.**

- Балалар, ә хәҙер һәр берегеҙ үҙегеҙҙең күңелегеҙгә яҡҡан хайуанды алығыҙ, һәм барыбыҙ ҙа урындарға ултырабыҙ. Әйҙәгеҙ, уларҙы һыйпап, наҙлап алайыҡ. Яратып ҡына, иркәләп кенә беҙ уларға өндәшәйек әле. Ҡуян – ҡуянҡай, тейен – тейенкәй, айыу – айыуҡай, бүре – бүрекәй, терпе – терпекәй, болан – боланҡай.

Ә хәҙер, ҡыҙҙар һәм малайҙар, үҙегеҙ һайлаған хайуан тураһында һөйләп үтегеҙ.

Был – ҡуян. Уның ҡолағы – оҙон, ҡойроғо – ҡыҫҡа. Ул йәй һоро төҫтә була, ә ҡышын аҡ тунын кейә.

Был – бүре. Ул һоро төҫтә. Уның тештәре бик үткер. Ҡыш ул бигерәк уҫал.

Был – айыу. Айыу – бик ҙур хайуан. Айыу ҡышын өңөндә йоҡлай..

Был – төлкө. Уның ҡойроғо бик матур, оҙон. Төлкө – бик хәйләкәр йәнлек.

Был – терпе. Терпе сәнскеле. Ҡыш терпе йоҡлай.

Был – тейен. Ул ағас ҡыуыштарында йәшәй. Тейен сәтләүек ярата. Ҡышҡылыҡҡа күп запас туплай.

Был – болан. Болан – бик матур хайуан.Уның мөгөҙө ҙур, тармаҡлы. Ҡыш болан ағас ҡабығы, бесән ашай.

*(Кем һөйләп бөтә, уйынсыҡты кире өҫтәлгә ҡуя).*

- Балалар, ә бына ҡабан тороп ҡалды бит. Әйҙәгеҙ, ҡабан тураһында бергәләп һөйләп китәйек әле.

Был – ҡабан. Уны тағы ла ҡыр сусҡаһы, тиҙәр. Уларға ҡышын бик ауыр.

**3.Йомғаҡлау. Рефлексия.**

- Афарин, ҡыҙҙар һәм малайҙар. Был хайуандар барыһы ла ҡайҙа йәшәй? (Балаларҙың яуаптары). Тимәк, улар ниндәй хайуандар? (Яуаптар). Эйе, улар – ҡырағай хайуандар һәм урманда йәшәйҙәр. Берәү генә булһа, хайуан, тибеҙ, ә күп булһалар, хайуандар. Ҡуян – ҡуяндар, бүре – бүреләр, айыу – айыуҙар, төлкө – төлкөләр һ.б. Башҡорт теле – бик бай тел, хайуан һүҙен тағы ла йәнлек, кейек һүҙҙәре менән дә алыштырырға мөмкин. Йәгеҙ, ҡабатлап әйтәйек әле: хайуан, йәнлек, кейек. Афарин, аҡыллыларым!

- Ҡыҙҙар һәм малайҙар, бөгөн барығыҙ ҙа бик әүҙем булдығыҙ. Ихлас уйнаныҡ, хайуандар тураһында матур итеп һөйләнек. Бигерәк тә, ..., ..., матур, оҫта һөйләнеләр, ..., ..., ҡыйыуыраҡ булығыҙ, яраймы.

- Беҙ бөгөн ҡышҡы урманға сәйәхәт иттек, ҡырағай хайуандарҙың ҡышты нисек уҙғарыуы хаҡында белдек, эҙҙәрен осраттыҡ,йомаҡтар систек, уйнаныҡ, хайуандар тураһында матур итеп һөйләнек.



- Балалар, һеҙгә ҡырағай хайуандар иленә сәйәхәт оҡшанымы, бигерәк тә нимәләр оҡшаны? *(Балаларҙың яуаптары).*

- Сәйәхәтебеҙ тамам. Беҙгә ҡайтырға ваҡыт. Бөгөнгө сәйәхәттән һеҙгә иҫтәлеккә ҡырағай хайуандар һындары төшөрөлгән буямдар тапшырам. Ҡайтҡас, матур итеп буярһығыҙ.

- Урманға һәр миҙгелдә сәйәхәт итербеҙ. Урман, хайуандар менән һаубуллашайыҡ.
- Һау булығыҙ! Киләһе осрашҡанға тиклем.

*(“Хайуандар донъяһында” көйө яңғырай, балалар сығалар.)*

***Шәрипова З.М.,***
*Ж. Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназия,*
*Стәрлетамаҡ ҡалаһы*

## «АЙЫУҠАЙ ТЕДДИ ЭҘҘӘРЕ БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ» (ПОЛИЛИНГВАЛЬ УҠЫТЫУ БУЙЫНСА ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ)

**Маҡсат:** тема сиктәрендә лексик күнекмәләр формалаштырыу.

**Бурыстары:**

– һорауҙарға ҡыҫҡа формала яуап бирә белеү: No. Yes;

– инглиз өндәрен дөрөҫ һәм аныҡ әйтә белеү оҫталығын үҫтереү;

– иғтибар, логик фекерләү, хәтер, телмәр әүҙемлеген үҫтереү;

-күреү хәтере үҫешен, образлы һәм ғәмәли йоғонтоло, имитациялау һәләттәрен үҫтереүҙе дауам итеү;

– «Animals», «Colors», «We count», «Family», «Хәрәкәт» темалары буйынса лексик берәмектәр нығытыу;

– хайуандарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәт тәрбиәләү; ҡырағай хайуандарҙы бер-береһенән айыра белергә, билдәләре буйынса классификациялау, һорауҙарға тулы яуап бирергә, коллективта эшләй белергә өйрәтеүҙе дауам итеү;

– ғаилә ағзаларына һөйөү тәрбиәләү, иптәштәргә ҡарата игелекле мөғәмәлә тәрбиәләү, башҡаларға ярҙам итеү теләген үҫтереү ;

**Йыһазландырыу:** яҙма, ҡағыҙҙан эҙҙәр, асылмалы тәҙрәле өй, ҡыр хайуандары, йырҙың аудиояҙмаһы («Clap your hands», «My family», «Был мин»).

**Һүҙлек эше:** хайуандар, сысҡан, тәлмәрйен (animals, mouse, frog)

**1. Ойоштороу.**

– Балалар әйҙәгеҙ әле бер-беребеҙҙе сәләмләп алайыҡ (тәүҙә башҡортса, артабан инглиз телендә сәләмләү):

Һаумы, ҡояш!
Һаумы, яҡты көн!
Һаумыһығыҙ, балалар!
Мин сәләмәт, мин матур
Салауат кеуек батыр!
Good morning! Good morning!
Good morning to you!
Good morning! Good morning!
I`m glad to see you!

**2.Төп өлөш:**

**Тәрбиәсе:** балалар, матур һөйләр өсөн беҙгә тел – язычок тураһындағы әкиәтте иҫкә төшөрөргә кәрәк.

**Фонетик күнегеү.**

Язычок решил искупаться. Вода была очень холодная, но язычек обо всем забыл и просидел в пруду долго – долго, пока не замерз [θ θ θ].Он вернулся в свой домик, кончик его прыгнул на любимое место на потолке, но и там он продолжал слегка дрожать. В спешке язычек забыл закрыть наружную дверь, и она захлопала [w]. Язычек ее быстро закрыл, и лег в постель под одеяло.Не удалось язычку уберечься от простуды. У него разболелось горлышко, начался кашель [k], поднялась температура, и он несколько раз чихнул [t]. Наконец пришел доктор, покачал головой, когда узнал про купание и велел язычку сказать [α:], но у язычка получилось что-то совсем другое: странное [ə], потом [i] и наконец [i:].

**Тәрбиәсе:** Хәҙер бергәләшеп башҡорт һәм инглиз телендә 10-ға тиклем һанап алайыҡ.

–Бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа дуҫыбыҙ Тедди килергә тейеш ине (балалар күҙҙәрен йомоп ике телдә лә һанап ишеттерәләр).

Open your eyes (күҙҙәрҙе астыҡ). Айыуҡайҙы күрәһегеҙме? Where's Тедди? I can't see him. Can you see him, Асия? And you, Амиля, can you see Тедди? (Тәрбиәсе балаларҙан уларҙың Тедди айыуын күрәләрме-юҡмы икәнлеген һорай)

**Балалар:** Юҡ, күрмәнек. No,we can't

**Тәрбиәсе:** Айыуҡай бында күренмәй.Тедди is not here. Ах, ҡарағыҙ але, балалар. Был нимә? Oh, look, what is it? (иҙәндә – алдан таратып һалынған төрлө төҫтәге эҙҙәр) I can see somebody's steps. They may be Кеpy 's. Oh, there's a note here. Бында хатта бар. (Ағас эргәһендә хат ята. Тәрбиәсе хатты алып ҡысҡырып уҡый) «Тедди яҡында. Эҙҙәр буйынса барығыҙ» «Тедди is near here. Follow the steps». Балалар, минең уйлауымса, был уйынды Тедди үҙе уйлап сығарған. Улайһа.... Эҙҙәр буйлап барайыҡ. Теддины табырға тырышып карайыҡ. Let's follow the steps. Let's try to find Тедди. Stand up. Oh, there's something else written in the note.

Әйҙәгеҙ, яҙыуҙа яҙылғандарҙы үтәйек һәм беҙ Теддины таба аласаҡбыҙ.

«күк төҫтәге эҙгә һикерегеҙ» – «jump to the blue step», «йәшел төҫтә йүгерәбеҙ» – « run to the green step», «ҡыҙыл төҫтә осабыҙ» – «fly to the red step», «һары төҫтә бейейбейбеҙ» – «dance to the yellow step», «аҡ төҫ йөҙәбеҙ» «sweem the white step». (Балалар сиратлап бойороҡто үтәйзәр)

– Балалар,беҙ был йөкләмәне үтәнек, әммә Тедди һаман да күренмәй.

**Тәрбиәсе:** Беҙ һеҙҙең менән эҙ буйлап барҙыҡ һәм өйгә килдек. Был бик яҡшы ғаилә.Ҡарағыҙ әле, өйҙөң тәҙрәләре лә бар.Улар төрлө төҫтә.

**Бармаҡ гимнастикаһы «Минең ғаиләм» – «My family»**

–Ҡыҙыл төҫтәге тәҙрәне асабыҙ. Let's open the red window.

–Был кем? Oh, who is this?

**Ғаилә темаһы буйынса лексиканы ҡабатлау**

**Балалар:** Был әсәй. This is Mother.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, был әсәй. I see, mother, OK, now let's open the orange window. (Открывает оранжевое окошко.)

–Who is it?

**Бала:** Был атай. This is Father.

**Тәрбиәсе:** Эйе, атай. Father, I see. Хәҙер һары төҫтәге тәҙрәне асып ҡарайыҡ. –Now the (yellow) window. Был кем? Who's here? (һуңынан башҡа тәҙрәләр ҙә асыла)

**Бала:** Был апай, ағай, олатай, өләсәй, бәпес.(This is Sister,Brother, Grandmother, Grandfather, Baby).

**Тәрбиәсе:** Афарин, балалар, һеҙ бөтә ғаилә ағзаларын беләһегеҙ

**Тәрбиәсе:** Арып та киттегеҙ ахырыһы, әйҙәгеҙ, һеҙҙең менән уйнап алайыҡ.

Clap, clap, clap your hands as slowly as you can.
(күнегеүҙе үтәгеҙ һәм уны яй ғына әйтегеҙ)
Clap, clap, clap your hands as quickly as you can.
(ә был күнегеү бик тиҙ башҡарыла һәм әйтелә)
Tap, tap, tap your knees as slowly as you can.
Tap, tap, tap your knees as quickly as you can.
Shake, shake, shake your hips as slowly as you can.
Shake, shake, shake your hips as quickly as you can.
Stamp, stamp, stamp your feet as slowly as you can.
Stamp, stamp, stamp your feet as quickly as you can.
-»Well done!»

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙгә тағы бер эш бар, конвертта Тедди беҙгә хайуандар тураһында йомаҡтар ебәргән.

Йөрөмәй ул буранда,
Ҡышын йоҡлай урманда,
Йәйен солоҡ «таҙарта»,
Еләкте лә ярата. (Айыу)
Рассказал мне Микки Маус,
Что мышка по-английски…(mouse)
Ҡылый күҙ, оҙон ҡолаҡ,
Баҡсаны үтмәй урап,
Һайлап, кишер кимерә,
Бигерәк шәп йүгерә. (Ҡуян)
Ҡара морон, һарғылт йөн,
Көлтә ҡойроҡ, хәйләкәр,
Тауыҡ итен бик ярата,
Ялан, урманда йәшәр. (Төлкө)
Расскажу, дружок, тебе я
Что мишка по – английский…(a bear)
Поймать лисичка захотела
Зайчишку маленького…(hare)
С берега в водичку скок
Зеленая лягушка…(frog)
Есть такой цветочек «флокс»
А лисичка будет…(fox)

**Тәрбиәсе:** «Who is it?» (frog, bear, heare, fox,mouse).

**Балалар:** It is animals.

**Тәрбиәсе:** Әмилә, ҡыш көнө айыу нимә эшләй? (йоҡлай – sleep)

**Тәрбиәсе:** Асия, ҡуян нимә эшләргә ярата? (һикерергә – jump)

(тәлмәрйен нимә эшләй белә(һикерә) төлкө йүгерә, сыскан йүгерә ҡырҡып алынған һүрәттәрҙе өстәл артында йыйыу балаларҙың яуаптары ике телдә лә тормошҡа ашырыла).

Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, әҙерәк ял итәйек.

**«Был мин»**

Бына танауым,
Был минең ҡашым,
Күҙем, ҡолағым,
Ә бына башым.
Ауыҙҙы асһам,
Телем күренә.
Теҙелгән тешем
Өс бөртөк кенә.
Ҡулды күтәрҙем –
Аяҡ тыпырлай.
Үҙенән-үҙе
Бейергә һорай.

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ әле бергәләшеп инглиз телендә лә тән өлөштәрен ҡабатләп үтәйек. (head – баш, hear – сәс, nose – танау, eyers – күҙ, tongue – тел, ears – ҡолаҡ, hand – ҡул, negs – аяҡ, knees – тубыҡ).

**Тәрбиәсе:** Афарин балалар! Иғтибар менән ҡарағыҙ әле, беҙҙең өҫтәл аҫтында нимәлер бар (тәрбиәсе иплэп кенә Теддиҙы килтереп сығара).

**Айыуҡай:** Һаумыһығыҙ, балалар! Мин бик шатмын һеҙҙе күреүемә. Hello, kids! I am so glad to see you! (айыуҙың тауышы аудиояҙманан ишеттерелә).

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙгә айыуҡай Теддиҙың һынауҙарын үтәргә оҡшанымы? (балаларҙың яуаптары).

–Ниндәй һүҙҙәр хәтерегеҙҙә ҡалды?

–Афарин, балалар.

**Әҙәбиәт**:


1. Аҙнабаева Ф.Г., Нафиҡова З.Ғ. Тылсымлы өндәр.– Өфө, 2004.
2. Йәғәфәрова А.Ш., Юлмөхәмәтов М.Б. Йәйғор: балалар баҡсалары өсөн хрестоматия (ике томда). Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 2006.
3. Нафиҡова З. Ғ. Уйнай-уйнай үҫәбеҙ. Методик ҡулланма. Өфө: БМУИ, 2007.
4. Ураҡсина Р. М. Тәтәй ҡалаҡ баҙарҙа. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1996.
5. Шалаева Г. П., Крижановская Т. В. Английский для детей.– 2014.


© Шарипова З. М, 2023

***Әбүбәкерова Ә.Р.,***
*55-се балалар баҡсаһы, Салауат ҡалаһы*

## «БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ҠЫРАҒАЙ ХАЙУАНДАРЫ»

**Өҫтөнлөклө белем биреү өлкәһе:** «Танып-белеү өлкәһе».

**Белем биреү өлкәләре интеграцияһы:** «Телмәр үҫеш өлкәһе», «Физик үҫеш өлкәһе», «Художестволы-эстетик өлкә».

**Маҡсат:** Башҡортостанда йәшәүсе ҡырағай хайуандар тураһында балаларҙың белемдәрен камиллаштырыу.

**Бурыстар:**

**Белем биреүсе:** Хайуандар тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу, хәүефһеҙлек тураһында һөйләшеү аша белемдәрен арттырыу.

**Үҫтереүсе:** Иғтибарҙы, фекерләүҙе, ижади һәләтте, күҙәтеүсәнлекте, телмәрҙе, фантазияны, хәтерҙе, фонематик ишетеү хәләтен, ваҡ моториканы үҫтереү.

**Тәрбиәләүсе:** Йәшәгән ерҙең ҡырағай хайуандарына, тәбиғәтенә һаҡсыл ҡараш, ҡыҙыҡһыныу, һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһон, берҙәмлек, алдан планлаштыра белеүҙе, балаларҙың бер-береһе менән килешеп эшләүгә ҡыҙыҡһыныутәрбиәләү.

**Балалар эшмәкәрлеге төрҙәре:** эҙләнеү-тикшеренеү, коммуникатив, хәрәкәт әүҙемлеге.

**Йыһазландырыу:** аудиояҙмалар (ат сабыу, буран, ҡар ҡыштырлау тауыштары, Р. Сәлмәнов муз., Ҡ. Даян һүҙ. «Тышта ҡар яуа» йырының минусы, ҡурай моңо), «Аҡбуҙат» журналы, мышы, тейен төшөрөлгән видео, проекторҙа Аҡбуҙат, хайуандарҙың һүрәттәре, колонка, мольберт, хайуандар төшөрөлгән һүрәттәр, уйынсыҡ фотоаппарат, экран менән видеопроектор, мнемотаблица, хайуандарҙың эҙҙәре төшөрөлгән коверттар, тубырсыҡтар, кәрзин, шыршы энәләре тултырылған тоҡсай, макет, йорт, ҡырағай, йылы яҡтарҙа йәшәүсе хайуандарҙың, ағастарҙың макеттары.

**Әҙерлек эше:** «Тышта ҡар яуа» йырын, «Аҡ ҡуян» шиғырын ятлау, хайуандар тураһында шиғырҙар уҡыу, йомаҡтар ҡойоу. Саф һауала саҡта ҡышҡы тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү, ҡырғай хайуандар төшөрөлгән һүрәттәр ҡарау, темаға ярашлы дидактик уйындар менән таныштырыу.

**Ойоштороу төрҙәре:**

**I Ойоштороу мәле**

Балалар түңәрәктә торалар.

- Хәйерле иртә балалар! Хәлдәрегеҙ нисек?

Һаумы, ҡояш!

Һаумы, зәңгәр күк!

Һаумы, тыуған яғым!

Һаумы, яҡын дуҫым!

- Балалар, әйҙәгеҙ **тел төҙәйткесте** иҫкә төшөрәйек

Ыҡ-ыҡ бөгөн урамда һыуыҡ

Аҡ– аҡ тирә яҡ ап-аҡ

Ҫә-ҫә һалҡын ел иҫә

Ҙә– ҙә кәйефтәр һәйбәт беҙҙә.

- Балалар, мин ял көнө үҙебеҙҙең ҡала паркына барҙым. Унда ниндәй хайуанды күрҙем икән нисек уйлайһығыҙ? (Тейенде).

- Эйе, дөрөҫ, экранға ҡарағыҙ әле, бына ниндәй етеҙ тейендәр йәшәй паркта. **Видео күрһәтелә**

- Балалар, ә тейендең тунына иғтибар иттегеҙме? Ниндәй төҫтә ул? (Һоро)

- Дөрөҫ, тейендәрҙең туны йәй ерән төҫтә, ҡышҡылыҡҡа һоро төҫкә инә.Тейендең ҡойроғо уға ағастан-ағасҡа һикерергә ярҙам итә.Тейендәр ағас өңөндә, ботаҡтарҙан яһалған ояларҙа йәшәйҙәр. Улар ояларына йылы булһын өсөн мүк, төрлө ҡоштарҙың ҡаурыйҙарын түшәйҙәр.

Тейен – йорт хайуанымы йәки ҡырағай хайуанымы? (Ҡырағай хайуан).

**II Сюрприз моменты**

**Экранда Аҡбуҙат һүрәте күренә, ат тояҡтары тауышы, ат кешнәгән тауыш ишетелә.**

- Балалар, ишетәһегеҙме? Беҙгә кемдер ашыға. Балалар, был бит беҙҙең Аҡбуҙат.

Ул беҙгә журнал алып килгән икән! **(Экранда «Аҡбуҙат» журналы һүрәте)**

- Ҡарғыҙ әле, был ниндәй журнал ул? («Аҡбуҙат» журналы)

- Эйе, был беҙҙең яратып уҡыған «Аҡбуҙат» журналы.

Тәрбиәсе журналды асып ҡарай.

- Балалар, был журналда һәр теләгән бала үҙенең яраткан ижады менән бүлешә ала. Мин һеҙгә ҡышҡы урманға барып уның матурлыҡтарын фотоға төшөрөп ебәрергә тәҡдим итәм. Бының өсөн беҙгә фотоаппарат алырға кәрәк буласаҡ.

**III Төп өлөш**

**1. Урмандағы хәүефһеҙлек тураһында әңгәмә.**

- Балалар, ә урманда беҙ ниндәй ҡағиҙәләрҙе үтәргә тейешбеҙ?

(Ағастарҙың ботаҡтарын һындырмаҫҡа, боҙҙан йөрөмәҫкә, тайып йығылыу ихтимал, бер-берендән йыраҡ китергә ярамай, аҙашырға мөмкин, тауышланмаҫҡа, ҡарҙы ашарға ярамай, сөнки унда микробтар күп, ауырып китергә мөмкин)

- Афарин, балалар!

2. **Р. Сәлмәнов муз., Ҡ Даян һүҙ. «Тышта ҡар яуа»йырын йырлау.**

– Балалар, хәҙер саңғыларҙы кейеп урманға юл тотайыҡ.

3. **«Тылсымлы конверттар» уйыны.**

– Балалар, ҡарағыҙ әле бында ниндәйҙер конверт ята. Эсендә хат та бар.

Тәрбиәсе хатты уҡый «Балалар, был мин Аҡбуҙат. Һеҙ ҡышҡы урманда аҙашмаһын өсөн, мин һеҙгә ярҙам итеп торормон. Шул йүнәлеш буйынса барығыҙ».

1. **Бүре**

Тәрбиәсе 1-се конвертты аса һәм эш төрөн уҡып ишеттерә.

«Пазылды йыйһағыҙ ниндәй хайуандың эҙе икәнен белерһегеҙ».

Балалар эҙҙәр буйынса барып бүре төшөрөлгән һүрәткә тап булалар.

– Был нимә? (Бүре)

– Ә бүре характеры буйынса ниндәй ул? (Уҫал, яуыз)

– Бүре –йыртҡыс хайуан. Ҡыш көнө бүреләр өйөрҙәре менән йәшәйҙәр, сөнки уларға шулай аҙыҡ табыуы еңелерәк. Бүреләр ҡаранғыла ла бик яҡшы күрәләр, улар бик яҡшы ишетәләр ҙә. Бүре тунының төҫөн ҡышҡылыҡҡа алыштырмай.

( Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә, «Афарин» тигән тауыш ишетелә)

2. **Төлкө**

- Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙҙең арттан нәмәлер күҙәтә.
- Был нәмә ул? (Төлкө)
- Төлкө тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ? (Матур, хәйләкәр, йырҡыс хайуан). Ул берәй ҡоштомо, сысҡандымы һағалап тораҙыр инде. Етеҙ ҡуяндарҙы тотоуы уға ауыр икән.Төлкөләр 100 метрға тиклем ишетә алалар.Ҡарағыҙ әле төлкө ниндәй эҙҙәр ҡалдыра икән.



- Әйҙәгеҙ мнемоаблицаны уҡып ҡарайыҡ (Төлкө урманға йүгерҙе).
- Эйе, ул үҙенә аҙыҡ эҙләп йүгереп киткәндер.
- Афарин, балалар!

(Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә, «Афарин» тигән тауыш ишетелә).

(Саңғыла йөрөү тауышы ишетелә, балалар саңғыла йөрөү хәрәкәттәре эшләйҙәр).

3. **Ҡуян**

- Ҡарағыҙ әле, был ерҙән дә нәмәҙер йүгереп үткән. Кем нисек уйлай, был нәмәнең эҫе икән? Бында Аҡбуҙат беҙгә ярҙам итәм тиеп бер йомаҡ та ебәргән (Тәрбиәсе конвертты асып йомаҡты уҡый).

Йәйен һоро, ҡышын аҡ<br>Уға шулай яҡшыраҡ.

- Нәмә ул был? (Ҡуян)

Бала шыршы артынан сығып ҡуян тураһында шиғыр һөйләй.

Танышайыҡ, мин – ҡуян,<br>Урман эсендә оям,<br>Бары тик оямда ғына<br>Үҙемде батыр тоям.

**«Аҡ ҡуян» шиғырын хор менән һөйләү.**

( Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә «Афарин» тигән тауыш ишетелә)

- Балалар, ҡалай һеҙ афаринһығыҙ ул, әйҙәгеҙ үҙебеҙгә сәпәкәй итеп алайыҡ.

(Ат тояктары тауышы, ат кешнәгән тауыш ишетелә. Экранда Аҡбуҙат күренә).

- Нимә булды Аҡбуҙат? Тәрбиәсе коверттан алып «Урманда шауларға ярамай» тигән яҙыуҙы уҡый.
- Ә ни өсөн ярамай?

4. **Айыу хырылдаған тауыш ишетелә** (Балалар саңғыла йөрөү хәрәкәттәре эшләйҙәр)

- Ҡарағыҙ әле бында нәмә йоҡлап ята икән?(Айыу)
- Айыу ҡыш көнө нәмә эшләй? (Йоҡлай)

(Саңғыла йөрөү тауышы ишетелә, балалар саңғыла йөрөү хәрәкәттәре эшләйҙәр)

5. **Тәрбиәсе ағас төбөндә шыршы энәләре менән тоҡсай табып ала**

- Балалар, ҡарағыҙ әле, был нимә ул? (Шыршы энәләре)
- Аҡбуҙат бының менән нәмә әйтергә теләгән икән?
- Ә, бында конверт эсендә нәмәҙер яҙылған да бит:

«Йомаҡтың яуабын әйтегеҙ, был хайуан тураһында шиғыр һөйләгеҙ».

Энәле шыршы төбөндә
Энәле генә йомғаҡ.

- Балалар, кем йомаҡтың яуабын әйтер? (Терпе)
- Эйе, был терпе. Ә терпе кыш көнө нәмә эшләй? Әйҙә, терпе тураһында шиғыр һөйләп ишеттер әле (Бер бала шиғыр һәйләй).

Ул өҫтөнә йәй ҙә, ҡыш та
Энәле күлдәк кейә.
Шулай ҙа уны әсәһе
Йомшағым, тиеп һөйә.

( Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә «Афарин» тигән тауыш ишетелә)

(Саңғыла йөрөү тауышы ишетелә**,** балалар саңғыла йөрөү хәрәкәттәре эшләйҙәр)

**6 «Тубырсыҡтарҙы йый» хәрәкәтле уйыны. (**Ҡурай моңо яңғырай)

- Балалар, ҡарағыҙ әле, күпме тубырсыҡтар яталар бында, ҡарағай тубырсыҡтары ла, шыршы тубырсыҡтары ла бар.

Буран тауышы ишетелә

- Әйҙәгеҙ, уларҙы алып ҡулдарыбыҙға ошолай итеп массаж яһайыҡ (Балалар тубырсыҡты ҡулдарына алып, ике ҡул араһында ышҡып массаж яһайҙар).

– Хәҙер кәрзиндәргә малайҙар ҡарағай тубырсыҡтарын, ә ҡыҙҙар шыршы тубырсыҡтарын йыяйыҡ, аҙаҡ уларҙан төрлө уйынсыҡтар яһарбыҙ.

( Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә «Афарин» тигән тауыш ишетелә)

- Балалар, Әйҙәгеҙ ҡышҡы урманда иҫтәлеккә фотоға төшәйек. (Бер бала уйынсыҡ фотоаппарат менән «фотоға төшөрә»).

7. **Мышы тураһында видео ҡарау.**

-Балалар, бында тағы ла бер конверт ята. Был ниндәй хайуандың эҙе икән?(Балалар мышының эҙҙәрен ҡарайҙар)

(Мышы ҡысҡырған тауыш ишетелә)

- Балалар, был нәмә ул?(Мышы)
- Ҡалай яҡшы булды, беҙ урманда мышыны күреп ҡалдыҡ.Мышы бейеккә 2 метр самаһы. Мышыларҙың мөгөҙҙәре 20 килограмға тиклем етә.
- Мышылар нимә ашарға яраталар икән?
- Йәй көнө мышылар бәшмәктәр, үлән, мүк, ә ҡыш – ағас ҡайыры, ағастарҙың ваҡ ботаҡтары менән туҡланалар.
- Балалар, мышы ҙур хайуан булһа ла ул бер нәмәгә лә теймәй, ә мышының дошмандары бик күп бүреләр, һунарсылар.

**8. «Ҡойроҡтоң хужаһын тап» уйыны**



– Балалар, бында тағы ла бер конверт ята. Асып ҡарайыҡ әле. (Тәрбиәсе конвертты асып, унын эсендә ятҡан хатты уҡый). «Балалар, һеҙ бөгөн республикабыҙҙа йәшәгән ҡайһы бер ҡырағай хайуандар тураһында белемдәрегеҙҙе арттырҙығыҙ. Һеҙгә бер уйын тәҡдим итәм, был уйында ниндәй хайуанға нәмә кәрәк икәнен күрһәтегеҙ».

(Балаларға ҡойроҡһоҙ (мөгөҙһөҙ) хайуандар һәм айырым ҡағыҙға хайуандарҙың ҡойроҡтары (мөгөҙө) төшөрөлгән һүрәттәр тәҡдим ителә, бер бала хайуан төшөрөлгән һүрәтте, икене бала уның ҡойроғо (мөгөҙө) төшөрөлгән һүрәтте тотоп парлашып баҫалар).

- Балалар, был бөтә хайуандар нисек аталалар? (Ҡырағай хайуандар)
- Дөрөҫ! Афарин балалар! Дәүләт ҡырағай хайуандарҙы яҡлар, һаҡлап ҡалыр өсөн заказниктар һәм ҡурсаулыҡтар булдырған.

( Экранда Аҡбуҙаттың һүрәте күренә «Афарин» тигән тауыш ишетелә)

- Бына урмандан ҡайтырға ла ваҡыт етте.

Саңғыла йөрөү тауышы ишетелә (Балалар саңғыла йөрөү хәрәкәттәре эшләйҙәр)

-Бына беҙ баҡсабыҙға ла ҡайтып еттек, саңғыларыбыҙҙы сисеп бер урынға ҡуяйыҡ (Саңғыны сискән хәрәкәттәр яһала).

– Әйҙәгеҙ әле урманда төшкән фотоһүрәттәрҙе «Аҡбуҙат» журналына ебәрәйек.(Экранда электрон хат киткән һүрәт күрһәтелә).

– Бына ҡарағыҙ әле ниндәй матур беҙҙең фотоһүрәттәр!

(Экранда урманда осраған хайуандарҙың, ҡышҡы урман фотоһүрәттәре күрһәтелә).

**IV Рефлексия. Йомғаҡлау. «Макетҡа ҡырағай хайуандарҙы урынлаштыр» уйыны.**(Ҡурай моңо яңғырай)



- Балалар, беҙ бөгөн урманда ҡырағай хайуандарҙы күрҙек. Әйҙәгеҙ ошо макетка үҙебеҙҙең ҡышҡы урманға сәйәхәтебеҙ ваҡытында нәмәләр күргәнбеҙ шуларҙы урынлаштырайыҡ

(Балалар йорт, йылы яҡта йәшәгән хайуандар араһынан ҡырағай хайуандарҙы, республикала үҫкән ағастарҙы табып макетҡа урынлаштыралар).

Балаларҙың белемдәрен асыҡлау, арттырыу маҡсатында түбәндәге һорауҙар бирелә:

- Был хайуандар араһынан йыртҡыс хайуандарҙы табығыҙ.
- Ҡайһы хайуандар ҡыш йоҡлайҙар?
- Урманданиндәй ағастар үҫәләр?
- Ә ниндәй хайуан сәтләүек ярата?
- Мышы нәмә менән туҡлана? һ.б.
- Балалар, бөгөн һеҙ үҙегеҙгә ҡыҙыҡлы нәмәләр белдегеҙ? Һеҙгә нәмәләр оҡшаны?
- Беҙҙең Башҡортостан Республикаһында тәбиғәт иҫ киткес матур.

Ә ошондай матур тәбиғәтте һаҡлап ҡалыу өсөн беҙгә нәмә эшләргә кәрәк?

**-Әйҙәгеҙ тәбиғәт тураһында мәҡәлде иҫкә төшөрәйек.**

«Тәбиғәт беҙҙең – өйөбөҙ».

– Балалар, һеҙ һәр ваҡыт республикабыҙҙың тәбиғәтен яратырһығыҙ, яҡларһығыҙ, һаҡларһығыҙ тип ышанам.

***Әлбәкова Г.Ш.,***
*өлкән тәрбиәсе, Баланы үҫтереү үҙәге –*
*«Айыуҡай» балалар баҡсаһы, Баймаҡ ҡалаһы*

**« БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ»**

**Бурыстар:**

**Белем биреүсе:** Башҡортостан Республикаһының ете мөғжизәһе менән таныштырыу. Башҡортостанды бөтә донъяға танытҡан башҡорт балы, ҡурай, С.Юлаев һәйкәле,.”Урал батыр” эпосы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Янғантау, Красноусол минераль һыуы – беҙҙең ҡомартҡыларыбыҙ тигән төшөнсәне камиллаштырыу.

**Үҫтереүсе**: тыуған илгә, уның шәхестәренә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, тыуған яҡ ҡомартҡыларына ҡыҙыҡһыныусанлыҡ формалаштырыу.

**Тәрбиәләүсе**: күҙәтеүсәнлек, күҙаллауҙы, телмәрҙе үҫтереү.

**Көтөлгән һөҙөмтәләр:** Башҡортостан Республикаһының ете мөғжизәһен белә

**Йыһазландырыу:** мультимедия экраны, планшеттар, ноутбук , презентация, оригами өсөн материал, танграм, солоҡ макеты, кәрәҙ, ҡырҡылған һандар

***Үткәреү алгоритмы***

Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, малайҙар!
Әйҙәгеҙ, “**Әйтеш” уйынын**
уйнап алайыҡ?
(балалар һандарҙы һайлап алалар)
Бер тигәс тә ни яҡшы?
Берҙәм булһаң – шул яҡшы.
Ике тигәс ни яҡшы?
Икәү булһаң – шул яҡшы.
Өс тигәс тә ни яҡшы?
Өс таған булһаң – шул яҡшы.
Дүрт тигәс тә ни яҡшы?
Дәртле булһаң – шул яҡшы.
Биш тигәс тә ни яҡшы?
Башҡорт булһаң – шул яҡшы.
Алты тигәс – ни яҡшы?
Алдан барһаң – шул яҡшы.
Ете тигәс – ни яҡшы?
Егет булыу – шул яҡшы.

-7 һаны башҡорт халҡы өсөн изге һан.

- 7 һанына ҡағылышлы нимәләр беләһегеҙ?

( 7 ырыу, ҡурайҙың 7 тажы, йәйғор төҫтәре, Етегән йондоҙ)

-Афарин. Бөгөн беҙ 7 һанына бәйле Башҡортостаныбыҙҙың 7 мөғжизәһе тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

-Мин һеҙҙе сәйәхәткә саҡырам.

**Беренсе мөғжизә– «Урал Батыр» эпосы.**

*(Ат сапҡан тауыш ишетелә, слайдта Аҡбуҙат һүрәте күренә).*



– Бына Аҡбуҙатыбыҙ осоп килеп тә етте. Аҡбуҙат һеҙгә танышмы, балалар?

-Урал батыр эпосынан.

-Эйе, балалар, ” Урал батыр эпосы” – башҡорт халҡының борон-борондан, телдән телгә күсеп, һаҡланып килгән ғәжәйеп һоҡланғыс эпосы – 4576 шиғри юлдан тора. Йәшәйешебеҙҙең, ғүмер итмешебеҙҙең нигеҙе ул “Урал батыр” эпосы.

-Ә кем беҙгә эпостан өҙөк ятлап ишеттерергә теләй?

*(Балалар эпостан өҙөктәр һөйләп ишеттерә).*

**Икенсе мөғжизә – Шүлгәнташ мәмерйәһе**

Был ни мөғжизә?(алда Шүлгән таш мәмерйәһе күренә). Ниндәй районда урынлашҡан? Кемдәр күргәне бар был мөғжизәне? Әйе, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың көньяғында урынлашҡан Бөрйән районына килеп еттек. Ниндәй мәмерйә был? Унда нимә бар икән? Әйҙәгеҙ,инеп ҡарайыҡ.

*(Виртуаль экскурсия)*

Еребеҙҙең йөҙөк ҡашы булған, 2 саҡрымдан ашыу оҙонлоҡҡа һуҙылған, данлыҡлы мөһабәт Шүлгәнташ мәмерйәһе. 1959 йылда унда таш быуаттың тәүге палеолит осоронда, йәғни беҙҙең эраға тиклем 40 – 10 мең йылдар элек, йәшәгән тәүтормош кешеләренең мәмерйә стенаһына төшөрөлгән һүрәттәре табылғас, ул бөтә донъяла танылыу таба. Мәмерйә стеналарында ҡыҙыл буяу (охра) менән ҡырағай ат, мамонт, носорог һүрәттәре эшләнгән.



**Өсөнсө мөғжизә – Салауат Юлаев һәйкәле.**

-Йыр тыңлап алайыҡ.

*(«Һай-һай , Салауат»)*

– Кем тураһында йырлана был йыр?

-Салауат Юлаев тураһында.

-Кем ул Салауат Юлаев?

-Башҡорт халҡының милли батыры.

-Салауат Юлаевтың Өфөләге һәйкәле – Башҡортостандың уникаль мөғжизәһе.

Салауат Юлаев һәйкәле – Рәсәйҙә ат һынындағы иң ҙур һәйкәл, бейеклеге – 9,8 метр, ауырлығы – 40 тонна. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Салауат Юлаевҡа ҡуйылған һәйкәлдең скульпторы – Сосланбек Тавасиев.

Салауат Юлаев һәйкәле – баш ҡалабыҙҙың символы. Ул Ырымбур юлы менән машинала үткәндә лә, самолеттан да бик һәйбәт күренә.

-Әйҙәгеҙ әле, пазл ярҙамында Салауаттың һәйкәлен йыяйыҡ.

**Дүртенсе мөғжизә – Красноусол минерал һыуҙары.**

-Кем һыуһап китте? Кемдең һыу эскеһе килә?

-Был ниндәй һыу ул?

– Эйе, был Красноусол минерал һыуҙары. Улар нимә менән дан тота?

– Был минерал һыуҙар кальций сульфатына, минерал тоҙҙарға һәм файҙалы микроэлементтарға бик бай. Шуның өсөн, һыуҙы дауалау өсөн дә ҡулланалар.

Тимәк , беҙ тағы ла бер мөғжизәбеҙҙе таптыҡ.

*(глобуста Урал тауҙарын күрһәтеү)*

**Бишенсе мөғжизә – Янғантау.**

Был беҙҙең планетала ер аҫтынан бер туҡтауһыҙ ҙур күләмдә йылылыҡ, эҫе пар, газ сығып торған берҙән– бер урын. Тауҙың сере 200 йылдан ашыу ғалимдарҙың иғтибарын йәлеп итеп тора. Тау янында химик элементтарға бай, шифалы Ҡорғаҙаҡ урғыла.



-Балалар, танграм ысулы менән Янғантауҙы эшләп ҡарайыҡмы?

*( тау эшләйҙәр)*

**Алтынсы мөғжизә – ҡурай**

-Ҡыҙҙар, малайҙар, йомаҡты сисегеҙ.

Бәләкәй генә көпшәлә
Уйылғандар тишектәр.
Моңло тауыш сығарһа,
Бейеп китә ситектәр. /ҡурай/

Ҡурай – башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.

Ҡурай үләне башҡорт халҡының символы. Уның ете тажы, берләшкән ете ырыуҙы символлаштыра. Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән.

*("Ҡурайсы" уйыны)*



**Етенсе мөғжизә – башҡорт балы.**

-Балалар, кем таный, был нимә?

Мин – бал ҡорто
Без-без, без-без, без итәм,
Бар яланды бер итәм.
Тәмле, татлы бал эҙләп
Әллә ҡайҙарға етәм.
Мең төрлө гөл-сәскәнең
Шифалы һутын йыям,
Ҡышҡылыҡҡа әҙерләп
Кәрәҙҙәремә ҡоям.

-Эйе, был бал ҡорто, уның исеме Наҙлыҡай. Ул татлы һуттар йыйырға тип сәскәнән сәскәгә оса, әйҙәгеҙ күңелле генә итеп "ҙ – ҙ – ҙ" тип безелдәп алайыҡ уның менән бергә.

*("ҙ" өнөнә күнегеү)*

– Нимә ул бал?

– Бал үҙенең составы һәм дауалау көсө буйынса һирәк осрай торған уникаль продукт .

– Ә балды бал ҡорттары нимәнән йыя?

– Сәскәләрҙән.

– Ниндәй балдар була?

– Йүкә, ҡарабойҙай, сәскә балдары.

(Солоҡ, умарта макеттарын күрһәтеү, әңгәмә)

Был һүрәттә ниндәй әкиәт?

Был "Айыу менән бал ҡорттары" әкиәте. Айыу ағасҡа менеп бал ашаған, урмансы уның ҡойроғон балта менән сапҡан.

Йәй көнө бал ҡорттары кәрәҙгә тултырып бал йыялар.

Беҙ ҙә кәрәҙҙәребеҙҙе тултырҙыҡ.

Башҡортостаныбыҙҙың ниндәй мөғжизәләре менән таныштыҡ?

Һанап китәйек.
Башҡортостан мөғжизәләргә бай. Уларҙы һаҡларға кәрәк.
Нисек?
Сүпләмәҫкә
Ағастар ултыртырға
Сәскәләр үҫтерергә.

***Әлибаева Ә.Н.,***
*тәрбиәсе, 3-сө һанлы балалар баҡсаһы,*
*Аҡъяр ауылы, Хәйбулла районы*

## ТАНЫП БЕЛЕҮ ӨЛКӘҺЕ БУЙЫНСА УРТАНСЫЛАР ТӨРКӨМӨНДӘ “ҠЫШҠЫ УРМАН ҠУНАҒЫ” ТЕМАҺЫНА ОЙОШТОРОЛҒАН БЕЛЕМ БИРЕҮ ЭШМӘКӘРЛЕГЕ

**Бурыстар:**

***Белем биреүсе:*** 5 һанына тиклем һанарға өйрәтеүҙе дауам итеү (күргәҙмәлелек нигеҙендә), аҙаҡҡы һаналған һанды бөтә һаналған предметтарға тап килтереү, мәҫәлән: “Бер, ике, өс – бөтәһе өс ҡайын ”, балаларҙың телмәренә ғәмәлдәрҙе индереү: “Бында ағастар күп, былары – шыршылар, ә ҡалғандары – ҡайындар; шыршыларға ҡарағанда ҡайындар күберәк, ә ҡайындарға ҡарағанда шыршылар әҙерәк” йәки “шыршылар һәм ҡайындар бер тигеҙ.”

Тыуған яҡ урмандарының төрҙәре тураһында балаларҙың күҙаллауҙарын киңәйтеү: ҡышҡы урман, уларҙың төрҙәре (ылыҫлы, япраҡлы, ҡатнаш) тураһында мәғлүмәт биреү.

***Үҫтереүсе:*** күҙәтеүсәнлекте, танып белеүгә ҡыҙыҡһыныуҙы, образлы күҙаллауҙы, ҡабул итеү һәм ҡулдарҙың ваҡ моторикаһын үҫтереү.

***Тәрбиәләүсе:*** балаларҙа тәбиғәткә гуманлы ҡараш, уны һаҡлау теләге, ярҙамсыллыҡ тәрбиәләү.

**Көтөлгән һөҙөмтә:** 5-кә тиклем һанай, телмәрендә күберәк, әҙерәк, бер тигеҙ тигән төшөнсәләрҙе әүҙем ҡуллана, сағыштыра белә. Ағастарҙың ҡышҡы торошо тураһында мәғлүмәтле була. Композиция төҙөүҙә элементар оҫталыҡҡа эйә, төркөм эшендә үҙенең бурысын яҡшы аңлай һәм әүҙем ҡатнаша.

**Йыһазландырыу:** ҡышҡы урман тураһында видеоматериал, шыршының технология картаһы, Лего конструкторы, ағастарҙың предметлы һүрәттәре, ағас япраҡтары, шыршы энәләре, тейен персонажы, сәтләүек, тубырсыҡ һәм бәшмәктәр һалынған кәрзиндәр, фланелеграф

**Үткәреү алгоритмы**

**Коммуникатив эшмәкәрлек**

– Хәйерле көн, балалар! Минең исемем Әминә Надировна. Мин һеҙгә “Шатлыҡ” балалар баҡсаһынан килдем. Әйҙәгеҙ ҡунаҡтар менән дә һаулыҡ һорашып алайыҡ.

**Тәрбиәсе:** -Ҡыҙҙар, малайҙар!

-Һеҙ урманға барғанығыҙ бармы?

-Кем менән барҙығыҙ?

-Урманда нимәләр күрҙегеҙ? (балаларзың яуаптарынан сыгып һығымта яһау).

-Бөгөн мин һеҙҙе ҡышҡы урманға виртуаль сәйәхәткә саҡырам. Экранға иғтибар итәйек әле.

**Танып-белеү эшмәкәрлеге.**

**Видео ҡарау.**

**(**Сәләм, ҡыҙҙар, малайҙар! Беҙ һеҙҙең менән Хәйбулла районының ҡышҡы урманында сәйәхәттәбеҙ!

Күреүегеҙсә был урманда төрлө-төрлө ағастар үҫә Бында япраҡлы һәм ылыҫлы ағастар ҙа бар.

Һеҙҙең алдығыҙҙа урман ҡупшыҡайы-ҡарағас ағасы.

Күрәһегеҙме, балалар, ылыҫлы ағастарҙың энәләре һәр саҡ йәм йәщел, тәмле ылыҫ еҫе аңҡый. Ылыҫлы ағастарҙың тубырсыҡтары ла була.

Ҡарарғыҙ әле, балалар! Ана, тейен ҡышҡылыҡҡа тип әҙерләп ҡуйған аҙығын ашарға сыҡҡан.

Ул көҙҙән үк үҙе белгән урынға бәшмәк, сәтләүек, тубырсыҡтарҙы күмеп ҡуя. Ә ҡышын уларҙы эҙләп ашай.

Беҙҙең урмандарҙа япраҡлы ағастарҙан аҡ ҡайын, имәндәр, сағандар, уҫаҡтар, йүкәләр үҫә. Улар ҡышҡылыҡҡа япраҡтарын ҡойоп, тәмле йоҡоға талған.

Ә ылыҫлы ағастарҙан шыршы, ҡарағай, ҡарағас үҫә.

Ҡышҡы урман торғаны бер мөғжизә иле. Бөтә урманда тынлыҡ. Был урмандарҙа булыу, шифалы һауаһын һулау беһһең һаулыҡ өсөн бик тә файҙалы)

**Тәрбиәсе:**

-Балалар, һеҙгә ҡышҡы урман оҡшанымы?

– Иғтибар иттегеҙме, урманда ниндәй ағастар үҫә? (ҡайын, ҡарағай, шыршы, ҡарағас).

-Ә улар нисәү? (күп).

– Һәм улар төрлө – төрлө. Уларҙы һеҙ яҡшы таныһын һәм дөрөҫ итеп әйтә белһен өсөн мин һеҙгә уйын уйнап алырға тәҡдим итәм.

**Уйын эшмәкәрлеге**

*Балалар уҡыу мөйөшөндә торған фланелеграф эргәһенә киләләр. Уға 5 агас: ҡайын, шыршы, ҡарағас, уҫаҡ, имән ағастары һүрәттәре беркетелгән. Тәрбиәсе фланелеграфта һәр ағасты төртөп күрһәтә бара, балалар ҡабатлай.*

**Тәрбиәсе:** – Малайҙар һәм ҡыҙҙар, иғтибар итегеҙ әле, нисә ағас булды?

-Әйҙәгеҙ, бергәләп һанайыҡ. (бөтәһе бергә һанай). (Тәрбиәсе фланелеграфҡа тағы ла ағастар өҫтәй.)

-Балалар, иғтибарлап ҡарағыҙ,нисә ҡайын булды?

-Кем һанап күрһәтә? (Индивидуаль эш. “Бер ҡайын, ике ҡайын, өс ҡайын. Барлығы 3 ҡайын).

-Ҡарағай ағасын кем һанап күрһәтәм тей?(”Бер ҡарағас, ике ҡарағас, өс ҡарағас, дүрт ҡарағас-бөтәһе дүрт ҡарағас ағасы”)

-(Бер имән, ике имән, өс имән, дүрт имән, биш имән ағасы. Бөтәһе биш имән ағасы”)

**Сюприз момент. Тейен инә.**

**Тәрбиәсе:**

– Балалар, мин урманға барғанда миңә эйәреп тейен дә килде ҡунаҡҡа. Ул да һеҙҙең менән танышырға теләй.

**Тейен:**

-Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар, малайҙар!

**Тәрбиәсе:**

-Ә һеҙ беләһегеҙме, тейен нимә ярата? (балаларҙың яуаптары)

-Быны белер өсөн,әйҙәгеҙ мин әҙерләгән һыйҙы ҡарайыҡ.Мин тейенде һыйлар өсөн ҙур кәрзин алып килдем, уның эсендә тейен яраткан аҙыҡтар! (Бергәләп ҡарайзар кәрзинде. Унда тубырсыҡ, сәтләүек, бәшмәк. Һәр береһе 5-ҙән балалар һанына иҫәпләнгән).

-Әйе, балалар тейен тубырсыҡ,сәтләүек, бәшмәк ярата. Тағыла төрлө орлоҡтар, еләк–емеш менән дә туҡлана. Уларҙы ул көҙҙән ағас өңөндәйәкитөбөнә япраҡ – улән араһына соҡоп йәшереп әзерләп ҡуя. Ҡыш етһә, шулар менән туҡлана.

-Балалар, әкәрзиндәгеһыйҙарҙыңҡайһынының ағаста үҫә икән? (сәтләүек, тубырсыҡ).

– Ә ниндәй ағаста? (ҡарағас, имән).

-Әйҙәгеҙ, һәр берегеҙ үҙенең кәрзиненә 5 тубырсыҡ, 5 сәтләүек һалып алһын. (*өҫтәл дөйөм берәү, 8 бала һәм тәрбиәсе һыйырлыҡ итеп урынлаштырылған)*

-Хәҙер өҫтәл артына ултырып тубырсыҡтарҙы һәм сәтләүектәрҙе ике рәткә теҙеп һалайыҡ. Өҫкө рәткә тубырсыҡтарҙы теҙәбеҙ, аҫҡы рәткә сәтләүектәрҙе. Һанап ҡарағыҙ әле,

нисә сәтләүек алғанһығыҙ? Хәҙер тубырсыҡтарҙы һанайыҡ. Сәтләүектәр ҙә– 5, тубырсыҡтарҙа– 5. Тимәк, бер тигеҙ.

-Ә хәҙер тейенде берәр сәтләүек менән һыйлайыҡ. (тәрбиәсе тейенденң кәрзиненә берәр сәтләүекте ала).

– Ҡарағыҙ әле, нимә үҙгәрҙе? (Сәтләүектәр тубырсыҡтарға ҡарағанда әҙерәк, ә тубырсыҡтар киреһенсә, сәтләүектәрҙән берәүгә куберәк.)

– Ә хәҙер тейенгә икешәр тубырсыҡ бирәйек, ҡыш оҙон, уға кәрәге тейер. (Кәрзингә һәр бала 2 тубырсыҡ һала)

– Балалар, ә хәҙер нимэ үҙгәрҙе? Тубырсыҡтар 3-әр ҡалды, ә сәтләүектәр 4-әр – Сәтләүек тубырсыҡҡа ҡарағанда берәүгә куберәк.

– Афарин, балалар!

**Хәрәкәт әүҙемлеге**

**Тәрбиәсе:**

– Балалар, ә хәҙер мин һеҙгә уйын уйнап алырға тәкдим итәм. Уйындың тәртибе былай: беҙ ике командаға бүленәбеҙ. Бер команда “Тубырсыҡтар”, ә икенсе команда “Сәтләүектәр” командаһы була. Һеҙҙең алдығыҙҙа ике кәрзин тора. “Тубырсыҡтар” командаһы тубырсыҡтарҙы, ә “Сәтләүек” командаһы сәтләүектәрҙе шул кәрзингә берәмләп ташый. Ҡайһы команда дөрөҫ һәм тиҙ генә ташып бөтә шулар еңеүсе була!

Уйынды башлар өсөн беҙ бергәләп 1,2,3, 4, 5 тип әйтергә тейешбеҙ. Әҙерләндек, 1,2,3,4,5!

(Уйынды ике тапҡыр үткәрәбеҙ)



**Интерактив уйын**

-Балалар, мин урманда аҙашып йөрөнөм әле. Ә тейен миңә юл күрһәтте. Беләһегеҙме нисек итеп? Иң беренсе ул миңә оҙон, тар һуҡмаҡты табырға ҡушты. (1-се слайд-оҙон һәм ҡыҫҡа һуҡмаҡтар)

-Һуҡмаҡты тапҡандан һуң, ҡайын эргәһенән уң яҡ юлдан китергә кәрәк тине тейенкәй. (2-се слайд– ҡайын ағасы эргәһенән ике яҡҡа юл үтә).

-Артабан юлда 3 ағас осрар, шул ағастарҙың иң бейеге эргәһенән дөрөҫ юл үтер тине.

(3-сө слайдта бейек, уртаса, тәпәш ағастар)

Шулай итеп беҙ Аҡъярға килеп тә еттек.

**Тәрбиәсе:**

– Балалар, был тейен һеҙҙә ҡалырға теләк белдерҙе. Урманда һыуыҡ, ә һеҙҙә йылы һәм күңелле ти. Тик ҡайҙа йәшәр икән?(Яуаптар)

**Тәрбиәсе:**

-Мин тейенде тәбиғәт мөйөшөнә урынлаштырырға тәкдим итәм. Әйҙәгеҙ, күрһәтәм урынын (Тәбиғәт мөйөшөндә ағасһыҙ конструкция)

**Тейен:**

-Юҡ балалар, мин ағаста ғына йәшәй алам.

**Тәрбиәсе:**

-Ҡыҙҙар, малайҙар! Ә тейенгә нисек ярҙам итергә икән?(ағастар эшләргә кәрәк?)

**Тәрбиәсе:**

-Ә нимәнән ағастарҙы эшләргә була?(Балаларҙың яуаптары; ҡағыҙҙан, ағастан...)

**Тәрбиәсе:** – Ә мин һеҙгә лего конструкторынан шыршы эшләргә тәҡдим итәм. Ҡарағыҙ әле, балалар минең ниндәй шыршым бар, хәҙер беҙ һеҙҙең менән бергә ошондай шыршылар эшләйбеҙ. Әгәр ҙә шыршыны эшләй алмаһағыҙ, ошо технологик ҡартаға ҡарап эшләгеҙ(балаларҙың һәр береһенең конструкторы бар, һәр өҫтәлгә бер технологик карта).



Тәрбиәсе үҙе эшләгән әҙер өлгөнө күрһәтә.

**Конструкторлау эшмәкәрлеге**

Балалар үҙҙәре тәрбиәсе аңлатыуы буйынса эшләйҙәр.

**Тәрбиәсе: –** Балалар, беҙ нимәнән шыршылар эшләнек? (лего конструкторҙан)

**Тәрбиәсе:**

-Һеҙҙең менән бик күңелле булды, ә һеҙгә минең менән оҡшанымы? Нимә оҡшаны?

***Әмирғалина Г.Д., Харисова А.Р., Титова С.Т.,***

*277-се балалар баҡсаһы, Өфө ҡалаһы.*

***ТЕЛМӘР ҮҪТЕРЕҮ ДӘРЕСЕ***

**Маҡсат:** әкиәт эшләү процесында башҡорт телендә һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ әйтелешенә ярашлы шарттар булдырыу.

**Белем биреү өлкәләһе:** телмәрҙе үҫтереү.

**Итеграция өлкәһе:** танып белеүҙе үҫтереү, әҙәби -эстетиканы үҫтереү.

**Белем биреү бурыстары:**

Балаларҙың телмәрен яңы башҡортса һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр менән байытыу;

Мультипликация менән бәйле буған профессиялар тураһында белемде арттырыу: мультипликация, художник – мультипликатор, декоратор.

Аппликациялағы һүрәттәрҙе ижади яҡтан ҡуллана белеү һәләтен үҫтереү.

**Үҫтереүсе бурыстар.**

Сюжетлы рәсемдәргә таянып хикәйә һөйләү һәләтен үҫтереү (башҡорт телендә һүҙҙәрҙе ҡулланып)

Бирелгән алгоритмға ярашлы рәүештә үҙ аллы эшләү һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

Коллектив ижад һәләтен үҫтереүҙе дауам итеү.

**Тәрбиәүи бурыстар.**

Башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу һәм ыңғай ынтылыш тәрбиәләү.

Ҡуйылған маҡсатты бергәләп хәл итеү һәләтен тәрбиәләү.

Ижади эште башҡарғанда ваҡытта урын-еренә еткереп башҡарыу һәләтен тәрбиәләү.

**Белем биреү барышы:**

Төркөм зоналарға бүленеп йыһазландырыған:

1 зона – башҡортса сюжетлы әкиәттәр: «Ике ҡомһоҙ айыу балалары», «Йәтим төлкө», «Шаян бесәй», «Нисек эттең үҙенә хужа эҙләүе» «Аҫыл ҡуян», «Ҡуян һәм Арыҫлан».

Тәр.: Бөгөн беҙ һеҙҙең менән мультистудия буйлап мауыҡтырғыс сәйәхәткә сығабыҙ. Мультистудияла нимә менән шөғөлләнәләр тип уйлайһығыҙ? (Йәнһүрәттәр төшөрәләр). Эйе балалар, беҙҙең мультистудияла режиссерҙар башҡорт халыҡ әкиәттәренә таянып башҡорт телендә әкиәт төшөрөү менән шөғөлләнәләр. Әйҙәгеҙ уйын ярҙамында, бирелгән иллюстрацияларға ҡарап ниндәй әкиәт икәнен әйтеп ҡарайыҡ. Мин башлайым һеҙ дауам итегеҙ. «Ике ҡомһоҙ айыу балалары», «Йәтим төлкө», «Шаян бесәй», «Нисек эттең үҙенә

хужа эҙләүе», «Аҫыл ҡуян», «Ҡуян һәм Арыҫлан». Һай афариндар, күпме әкиәттәр беләһегеҙ ( Башҡорт телендә һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итергә. Дөрөҫ булмаһа төҙәтергә).

Икенсе зонаға күсәләр.

2 зона: ике өҫтәл ҡуйылған. 1-се өҫтәл: елем, төҫлө ҡағыҙҙа, шаблондар йыйылмаһы менән. 2-се өҫтәл: башҡорт халыҡ әкиәттәренең геройҙары – ҡурсаҡ театры (ҡуян, төлкө, айыу, арыҫлан, эт, бесәй).

Тәр.: Балалар, Йәнһүрәт нимәһеҙ була алмай?( геройҙарһыҙ). Ә кем ул геройҙарҙы барлыҡҡа килтерә икән, нисек уйлайһығыҙ? (Геройҙарҙы мультипликатор эшләй). Әйҙәгеҙ әле әле мультипликаторҙар ниндәй геройҙар эшләгән икән. ( ҡуян, төлкө, айыу, арыҫлан, эт, бесәй). Башҡорт һәм рус телендә яуап бирәләр, дөрөҫ булмаһа төҙәтергә.

Киләһе зонаға күсәләр.

3-сө зона: декор өсөн биҙәүсе йыйылмаларҙан 2 өҫтәл тора. Унда балалар баҡсаһының диуарҙары, шаблондар, ҡурсаҡтар, уйынсыҡ машналар, ҡағыҙ, салфетка һәм пластилин. Шулай уҡ һүрәткә төшөрөлгән, пластилиндан һәм компьютерлаштырылған декорациялар.

Тәр.: Мультфильм төшөрөргә тағын нимәләр кәрәк икән, нисек уйлайһығыҙ? (....) Эйе, декорациялар кәрәк, беҙҙең әкиәтебеҙ ошонда барасаҡ.

Тәр.: Балалар, был декорацияны нисек эшләргә була икән? (төшөрөргә, йәбештерп эшләргә, йыйып ҡуйырға). Эйе, уның эшләнеүе буласаҡ әкиәттең төрөнән тора. Әгәр беҙҙең әкиәтебеҙ төшөрөлгән һүрәттәрҙән тора икән, тимәк уның декорацияһы ла төшөрөлгән буласаҡ. Геройҙар пластилиндан булһа, декорация нисек була? Дөрөҫ, пластилиндан.( пластилин һәм төшөрөлгән декорация күрһәтелә). Хәҙерге заман мультфильмдары компьютер ярҙамында эшләнелә. Унда геройҙары һәм декорацияһы барлыҡҡа килтерелә.

4-се зона –ҡолаҡсын, микрофон, магнитофон һәм колонкалар менән өҫтәл тәҡдим ителә.

Тәр.: Балалар, был зонала нимәләр башҡарыла икән, нисек уйлайһығыҙ? Йәнһүрәтте тауышландыралар. Ә ниңә һеҙ ундай һығымталарға килдегеҙ? Эйе, дөрөҫ дуҫтарым, әкиәт төшөрөлгәндән һуң, тауышландырылырға тейеш.

Киләһе зонаға күсәбеҙ.

5-се зона кинозал.

Ултырғыстар, проектор, магнитлы таҡта һәм өҫтәл.

Тәр.: Хәҙер студия хеҙмәткәрҙәре һеҙгә үҙҙәренең премьераһын күрһәтеп китергә теләйҙәр. Улар башҡорт телендә әҙерләнгән «Төлкө һәм ҡуян балалар баҡсаһында» әкиәтен ҡалалағы бөтә балалар баҡсаһына тәҡдим итәләр. Был әкиәтте «Туған тел көнө» байрамына арнап төшөргәндәр. Иғтибар экранға.( сәйнәлгән яҙма, йәнһүрәт күрһәтелмәй)

Тәр.: Ой, балалар, беҙҙең йәнһүрәтебеҙ менән нимәлер булды. Нимә эшләргә? Бөтөн балалар көтөп ултыралар, беҙҙең ярҙамыбыҙ кәрәме икән? (Йәнһүрәт төшөрөргә).

Тәр.: Эйе,әйҙәгеҙ ярҙам итәйек. Үҙебеҙ йәнһүрәт төшөрәбеҙ. Бына бында сценарий. Тик бөтөн сценалары буталып бөткән һәм бер нисә артыҡ кадрҙар бар. Нисек уйлайһығыҙ, нимә эшләргә мөмкин? (Тарҡатырға). Эйе, дөрөҫ. Бер-бер артлы урынлаштырып, һалып сығырға кәрәк. Һәм беҙ һеҙҙең менән буласаҡ йәнһүрәттең сюжетын йыйып ҡуясаҡбыҙ.( бер–бер артлы һалырға) (4тәҙрәле пленка эшләнелә магнит таҡтаһында. Балалар сценарий буйынса рәсемдәрҙе урынлаштыралар).

Тәр. Афарин, дуҫтарым. Беҙ һеҙҙең менән сценарийҙы эшләнек. Әйҙәгеҙ әле әкиәтебеҙҙең исемен иҫкә төшөрөп алайыҡ. ( Башҡорт һәм рус телендә әйтәләр). Төп геройҙарыбыҙҙы кем тип атайбыҙ? Төлкө һәм ҡуян (башҡортса һәм русса әйтәләр). Балалар, ә төлкө ниндәй булырға мөмкин? (хәйләкәр, ерән, һаран). Ә ҡуян ниндәй?( һоро, ҡурҡаҡ, изге күңелле)

Тәр. Тағын ниндәй геройҙар бар ?(башҡортса һәм русса әйтәләр). Ә тәрбиәсе ниндәй? Аҡыллы тәрбиәсе, изге күңелле тәрбиәсе. (Бер нисә баланан башҡорт телендә бөтә һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе һорап сығырға).

Ҡайҙа килеп эләккәндәр төлкө менән ҡуян? (Балалар баҡсаһына) (башҡортса һәм русса яуап бирәләр) Улар унда нимә күргәндәр ?(бик күп уйынсыҡтар) . Әйҙәгеҙ уларҙы атап

үтәйек.(Ҡурсаҡ, туп, ҡуян). (Башҡортса һәм русса яуап бирәләр). Төлкө менән ҡуян ниндәй уйынсыҡты оҡшатҡандар? (туп, шулай уҡ башҡортса һәм русса яуап бирәләр) Нисек уйлайһығыҙ, беҙҙең геройҙарға нимә тип әйткән? Үҙебеҙсә һөйләп ҡарайыҡ әле. Башҡортса һүҙҙәрҙе ҡыҫтырып русса һөйләргә. Йә, кем һөйләп ҡарай? (2 кешенән һорарға. Ҡалғандары башын, уртаһын һәм аҙағын).

Бер ваҡыт төлкө һәм ҡуян балалар баҡсаһына килеп эләккәндәр. Балалар баҡсаһында уларҙы тәрбиәсе ҡаршы алған һәм төркөмгә саҡырған.Килеп инеү менән бик күп уйынсыҡтар күреп ҡалғандар: ҡурсаҡ, туп, машина. Иң нығырағы уларға туп оҡшаған. Туп янына йүгереп килеп, уны бүлешә башлағандар. Улар янына тәрбиәсе килә һәм икеһенә ике туп бирә.  ( Беренсе тапҡыр рус телендә, икенсегә башҡорт телендә)

Таҡталағы ҡуян менән физкультминутка.

Тәр. Беҙ һеҙҙең менән буласаҡ йәнһүрәттең сюжеты тураһында һөйләшеп бөттөк. Артабан нимә эшләйбеҙ? Кем һәм нимәһеҙ беҙҙең йәнһүрәтебеҙ килеп сыҡмаясаҡ? (Геройҙар һәм декорацияһыҙ). Әйҙәгеҙ 2 төркөмгә бүленәбеҙ. Кемдәр геройҙар эшләргә теләй бында үтегеҙ, ә кемдәр инде декорация менән булышырға теләй был яҡҡа. Декорация сюжетҡа тура килергә тейеш.



Продуктив эшмәкәрлек. Таяҡсаларға ҡуйылған картон шаблондар (силуэттар). Геройҙарҙың тән өлөшөнөң шаблондарын йәбештерер өсөн. Төлкө – танауы, кәүҙәһе һәм башҡаһы. Декораторҙар: балалар баҡсаһы диуарҙары, мебель, кукла һәм машина һүрәтенә силуэттар, ҡағыҙҙан 2 туп эшләргә.

Балалар, беҙҙә ҡурсаҡ һәм машина бар. Ә тупты нисек эшләргә? (өҫтәлдә салфетка, пластилин, ҡағыҙ).

Геройҙарыбыҙҙы торорлоҡ итеп нисек беркетергә була, әйҙәгеҙ уйлап ҡарайыҡ әле.

Тәр. Балалар, ипле генә итеп эшләйбеҙ. Эшләп бөткәндән һуң бөтә әйберҙәрҙе үҙ урындарына ҡуябыҙ һәм йыйыштырабыҙ.

Тәр. Беҙҙең декорациябыҙ, геройҙарыбыҙ әҙер. Нимә ҡалды эшләргә? Йәнһүрәтте төшөрөп, уны тауышландырырға. Дөрөҫ. Ролдәрҙе һайлап алыр өсөн бында беҙҙең карточкаларыбыҙ бар (төлкө, ҡуян, тәрбиәсе, микрофон һәм төлкө, микрофон һәм ҡуян, микрофон һәм тәрбиәсе)

Тәрбиәсе башҡорт телендә һөйләй.

Тәр. Бер ваҡыт төлкө һәм ҡуян балалар баҡсаһына килеп эләккәндәр. ( фигуралар балалар баҡсаһына табан )

Тәр. Тәрбиәсе килеп сыға (Тәрбиәсе фигураһы ҡыбырлап килеп сыға). Тәрбиәсе иҫәнләшә. ( Бала – һаумыһығыҙ тәрбиәсе)

Тәр. Төлкө һәм ҡуянда иҫәнләшәләр. (балалар – төлкө һәм ҡуян – һаумыһығыҙ)

Тәр. Тәрбиәсе әйтә: Мин тәрбиәсе, ә һин кем ? (Бала – тәрбиәсе , мин тәрбиәсе, ә һин кем ?

Тәр. Ҡуян һәм төлкө яуап бирәләр. Балалар– мин ҡуян, мин төлкө.

Тәр. Әйҙәгеҙ, төркөмгә уҙығыҙ.

Тәр. Хайуандар төркөмгә уҙыу менән бик күп уйынсыҡтар күрәләр. Ниндәй уйынсыҡтар күрәләр? Балалар яуап бирәләр. (ҡурсаҡ, машина, туп)

Тәр. Иң нығырағы уларға туп оҡшай. Туп янына йүгереп киләләр һәм бәхәсләшә башлайҙар. Минең туп, минең туп тип (башҡорт телендә ҡабатлайҙар). Уларҙың янына тәрбиәсе килә һәм икеһенә ике туп бирә. Бәхәсләшмәгеҙ, төлкө, ҡуян. Бында туптар барыһына ла етә, дуҫ уйнағыҙ. (бала һәм тәрбиәсе был фразаны ҡабатлай.



Тәр. Афариндар. Беҙҙең йәнһүрәт килеп сыҡтымы? Эйе. Ә инде әҙер йәнһүрәтте беҙ һеҙҙең менән шөғөлдән һуң күрербеҙ. Һәм Өфө ҡалаһының башҡа балалар баҡсаһына ебәрергә мөмкинһегеҙ.

Тәр. Әйҙәгеҙ әле иҫкә төшөрөп алайыҡ, ниндәй башҡортса һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр беҙ һеҙҙең менән ҡулландыҡ. (хайуандар аталышы, әкиәт, мин ҡуян, мин төлкө,ерән төлкө, һоро ҡуян, изге күңелле тәрбиәсе).

Тәр. Ә хәҙер белдегеҙме инде кем йәнһүрәттәр төшөрә ( режиссер, мультипликатор). Үҙегеҙгә йәнһүрәт төшөрөүе оҡшанымы. Иң ҡыҙыҡлыһы нимә булды һеҙҙең өсөн? Эйе хәҙер үҙегеҙ йәнһүрәт төшөрә beләһегеҙ. Өйҙә ата– әсәләрегеҙ менән бергә төп геройҙары төлкө һәм ҡуян булған йәнһүрәт төшөрә алырһығыҙмы? Эйе, әлбиттә төшөрә алаһығыҙ. Әҙер йәнһүрәттәрегеҙҙе беҙҙең мультстудиға алып килерһегеҙ һәм беҙ уларҙы күмәкләшеп ҡарарбыҙ.

## ЙӨКМӘТКЕ

Арыҫланова Р.Х. “«Ниндәй гүзәл башҡорт теле!»”14 декабрь – башҡорт теле көнөнә арналған шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе сценарийы (мәктәпкәсә әҙерлек төркөмө) 3
Баймырҙина Ә.Ф. Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә“Боронғонан киләсәккә – минең Башҡортостаным”темаһына ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге 7
Байымова Г.А. Өлкәндәр төркөмөндә интеграцияланған дәрес «Айыуҡай»ҙа ҡунаҡта». 13
Басырова З.С. Конспект организованной образовательной деятельности на тему “Зимующие птицы” 16
Буранбаева Ә.Р. «Күс айырыу байрамы». Өлкән төркөм балалары өсөн 19
Буранбаева Ә.Р. Телмәр үҫтереү төркөмөндә тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһын ҡулланып “Икмәк иленә сәйәхәт” темаһына таныш-белем биреү буйынса эшмәкәрлек конспекты 22
Гусманова Ф.М. – Сценарий праздника “Шежере-байрамы! День семьи!” 24
Ғәлимова Л. Әкиәттәр буйынса сәйәхәт 26
Ибраҡова З.Р. «Бәрәңге киптереү» (тылдағы хеҙмәткәрҙәргә арнала) 29
Ибраҡова З.Р. «Шәл бәйләү» өмәһе (башҡорт йолаларына арнала) 32
Исәнғолова В.А. “Ҡояш” (беренсе кескәйҙәр төркөмө) 34
Ишкилдина Н.Ш. “Урал батыр” эпосын яттан һөйләүселәр бәйгеһе 36
Йәнбирҙина А.Ф. “Илеш районына – 85 йыл” (өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә күңел асыу иртәлеге) 39
Йәнбирҙина А.Ф. «Самолетта сәйәхәт» 44
Йәнбирҙина А.Ф. “Юл ҡағиҙәләре” 46
Күҙәшева Р.М. Уртансы башҡорт төркөмө балалары өсөн “Наҙлыҡайҙың тыуған көнө” интеграцияланған дәрес конспекты. 48
Ҡунаҡбаева З.Н. “Ҡурай сере” 52
Ҡәйепҡолова З.Ғ. “Ҡыш башланды” 54
Ҡәйепҡолова З.Ғ. Таныш белеү эшмәкәрлеге «Сибайымдың аҫылташы – йәшмә» (Өлкәндәр төркөмө) 56
Маннапова С.Р. “Ҡар бөртөктәре” 61
Мусина Ә.М., Шәғәлина Ә.И. Балалар баҡсаһында “Төлкө менән торна” әкиәтен сәхнәләштереү өсөн сценарий (уртансылар төркөмө өсөн) 62
Рамаҙанова Г.Р. “Минең ҡурсағым” 64
Ризванова А.Р. Квест “В поисках сюрприза” 65
Салахутдинова Ф.Ф. Конспект организованной образовательной деятельности по познавательному развитию в старшей группе на тему: «Башкирский народный музыкальный инструмент курай» 70
Сахаува Р.Ф. – Сценарий развлечения, посвященного празднику «Навруз» в старшей группе 72
Сахаува Р.Ф. Конспект занятия по обучению детей старшего дошкольного возраста по башкирскому языку на тему: “Дикие животные нашего леса” (для русскоязычной группы) 75
Сынғыҙова Л.Ф. «Селлә бабайҙың бейәләйе». Геоэкшен ысулын ҡулланып уртансылар төркөмөндә экология буйынса дәрес. 79
Сынғыҙова Л.Ф. .“ЗӨҺРӘ ҡыҙға – күлдәк” (өлкән төркөмдә таныш белем биреү өлкәһендә дөрес) 82
Таһирова В. Ғ. Оҫталыҡ дәресе «Туҡыусылыҡ – балалар баҡсаһында» 84
Таһирова В. Ғ. «Ете мөғжизәнең береһе – башҡорт балы» 89
Тимербулатова Ғ.З. “Күсмә ҡоштар” 92
Ультракова С.А. Конспект ООД для полилингвальной подготовительной группы

«Наше путешествие с Акбузатом» 94
Усманова С.Р. “Янсыҡ байрамы” 98
Усманова С.Р. “Бишек– ҙур донъяға ишек” 100
Фәтҡуллина Ю.И. Интегрированное занятие «Путешествие в Волшебный мир» 103
Фәттәхова Р.Ш. Квест-уйын «Башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте» 108
Хакова Э.Р. “Бал байрамы” 110
Хакова Э.Р. “Моң байрамы” 116
Хакова Э.Р. “Тылсымлы урманға сәйәхәт” 119
Хужина Н.А. Маркеры игрового пространства – как один из компонентов развивающей среды для дошкольников 123
Хәкимова З.И. Башҡортостан музейына виртувль экскурсия 126
Хәкимова З.И. “Йөн һәм уның үҙенсәлектәре” 128
Хәкимова З.И. “Көлмәҫбикә ҡунаҡта” 132
Хәкимова З.И. Бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе. “Әсә рәхмәте” (төрлө йәштәге балалар төркөмө өсөн) 135
Хәкимова З.И. “Өләсәйҙә ҡунаҡта” 137
Шағәлина Ә.И. “Хайуандар донъяһына ҡышҡы сәйәхәт” 140
Шәрипова З.М. «Айыуҡай Тедди эҙҙәре буйлап сәйәхәт» (полилингваль уҡытыу буйынса дәрес өлгөһө) 143
Әбүбәкерова Ә.Р. “Башҡортостандың ҡырағай хайуандары” 146
Әлбәкова Г.Ш. “Башҡортостандың ете мөғжизәһе” 151
Әлибаева Ә.Н. “Ҡышҡы урман ҡунағы” 154
Әмирғалина Г.Д., Харисова А.Р., Титова С.Т. Телмәр үҫтереү дәресе 157